# Ағиҙел

Өфө,
февраль
2013

2(1078)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИҠБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева *(корректор)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.02. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 253 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0012.13.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2013 (2,1078)**

## БЫЛ ҺАНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Зифа Ҡадирова.** Һағынырһың – мин булмам.
Повесть. *Башы.* ........................................................................5
**Хәлил Һөйөндөков.** Ҡыҙғансыҡ. Хикәйә. ....................63

ШИҒРИӘТ

**Риф Әхмәҙиев.** Урал алды ҡайындары.
Шиғырҙар. .............................................................................82
**Нәжибә Әминева.** Онотторалар. Шиғырҙар. .............88
**Рауил Шаммас.** «Көнөм нурһыҙ, йырһыҙ булмаҫ...»
Шиғырҙар. .............................................................................95

КӨНДӘЛЕКТӘР

**Рауил Бикбаев.** Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер...
*Дауамы.* ..........................................................................102

*"Агиҙел"гә – 90*

Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
Талант талаптан ҡурҡамы?
*(Әмир Әминев һәм Зәки Әлибаев менән әңгәмә.)* ................138

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Фәниә Гәрәева.** Йылмайыуы мәңге күңелдә...
*(Әмир Гәрәевтың тыуыуына – 85 йыл).* ...............................152
**Әмир Әминев.** Дуҫымды юҡһыныу
*(Юрий Андриановтың тыуыуына – 60 йыл).* .......................161

ТЕРЕ ХӘТЕР

**Дамир Күскилдин.** Икеләтә «ышаныс һыҙ» батша
армияһы офицеры һәм большевик. ................................168

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Фидаил Сафин.** Аҡ һынлы алыптар нисек
балыҡсы булып киткән? ......................................................173

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫ

**Таңһылыу Ғәйнуллина.** Бармағыңа аң килһә,
һөнәреңә дан килер. ............................................................180

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Булат Иҙрисов.** Атамаларға тарих һыйынған. ..............183

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**З. Кадирова.** Затоскуешь по мне... *Повесть. Начало.*
**Х. Суюндюков.** Ревность. *Рассказ.*

ПОЭЗИЯ

**Р. Ахмадиев, Н. Аминева, Равиль Шаммас.** *Стихи.*

ДНЕВНИКИ

**Р. Бикбаев.** Жизнь проходит, а память остаётся. *Продолжение.*

*«Агидель» — 90*

*Художественная литература: мечта, реальность, требование жизни.*
**Ф. Кузбеков.** О требованиях к таланту
*(интервью с А. Аминевым и З. Алибаевым).*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Ф. Гареева.** Его незабываемая улыбка...
*(85 лет со дня рождения А. Гареева).*
**А. Аминев.** Тоска наша светла
*(60 лет со дня рождения Ю. Андрианова).*

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Д. Кускильдин.** «Ненадежный» офицер царской армии и большевик.

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**Ф. Сафин.** Как альпы превратились в балыкчинцев?

ВУЗЫ РЕСПУБЛИКИ

**Т. Гайнуллина**. Мастерство будет вознаграждено.

ПРЕМУДРОСТИ ЯЗЫКА

**Б. Идрисов.** В названиях сокрыта история.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Зифа**
**ҠАДИРОВА**

# ҺАҒЫНЫРҺЫҢ – МИН БУЛМАМ

**ПОВЕСТЬ**

## БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Нindәй һөйөнөс: Сөмбөлдөң өләсәһе ҡунаҡҡа килгән! Ул күрше ауылда кесе улы менән киленендә йәшәй, йәй көндәре Сөмбөлдәргә лә килгеләй. Ҡыҙыҡай унең менән эс серҙәрен һөйләшергә ярата, сөнки өләсәһе ҡыҙыҡһынып тыңлай белә, етмәһә, бер ҡасан да асыуланмай. Сөмбөлдөң һөйләр һүҙҙәре күп йыйылғайны. Ул өләсәһен ҡосаҡлап алды ла:

– Өләсәй, өләсәйем, мин шундай сибәр егет менән таныштым. Өләсәй, һин уны күрһәң ине: оҙон буйлы, күк күҙле, ҡуңыр сәсле. Шундай сибәр, бер ҙә беҙҙең ауыл егеттәренә оҡшамаған, – тип бармаҡтарын бөкләп һанап китте. – Ә йылмайһа, йылмайһамы – баштарым әйләнеп китә!

– Әллә урыҫмы?

– Юҡ, Ахун егете.

– Эй, балам, юҡҡа ҡыуанаһың. Белеүемсә, ахундыҡылар элек-электән ситтән ҡыҙ алмаған, ситкә ҡыҙ бирмәгән.

– Өләсәй, һин ҡайһы заманды һөйләйһең?

– Ғүмер буйы шулай булған. Улар бит үҙҙәренә бер төрлө халыҡ. Элек-электән бай булғандар, үҙ ауылдары эсендә генә алыш-биреш иткәндәр. Туйҙарҙы ла бик ҙурлап үткәрәләр, үҙ йолалары бар. Элек шулай ине инде.

– Эй, өләсәй, хәҙер бит етмешенсе йылдар аҙағы, кем кемде ярата, шуны ала.

– Беҙ бәләкәй саҡта Ахунға баҙарға бара инек. Ул ауылда ҙур мәсеттәр, бер нисә тирмән бар ине. Бөтә тирә-яҡ ауылдар шунда бойҙай тарттырырға йөрөгән. Ахунда атайыбыҙҙың дуҫы йәшәне, атайым ҡыш көнө беҙҙе, балаларҙы, санаға ултыртып ҡунаҡҡа алып бара торғайны. Ул ауыл егеттәренең таҙа кәүҙәле,

---

*Зифа Әбделвәли ҡыҙы Ҡадирова (1958) Учалы районы Ахун ауылында тыуып үҫкән. 1978 йылдан бирле Татарстандың Яр Саллы ҡалаһында йәшәй, төҙөлөштә эшләй. Прозаға тотоноуына ни бары дүрт кенә йыл тулыуға ҡарамаҫтан, үҙнәшер ысулы менән сығарылған бер нисә популяр китап һәм ваҡытлы матбуғатта донъя күргән әҫәрҙәр авторы. Яҡташыбыҙ «Ағиҙел» журналында тәүләп сығыш яһай.*

күк күҙле, төҫкә-башҡа матур; ҡыҙҙарының да һылыу, оҙон буйлы, аҡ йөҙлө, бик сибәр булыуҙары иҫтә ҡалған. Улар ҡунаҡсыл халыҡ, тирә-яғында йәшәүсе башҡорт, ҡаҙаҡ халҡы менән йөрөшәләр, тик ауылдарынан ситкә ҡыҙ бирмәйҙәр, ҡыҙ алмайҙар. Былар – атайымдан ишеткән һүҙҙәр, балам. Беҙ – башҡорттар, ә улар – типтәрҙәр. Атайым ахундарҙы, көслө, ғорур халыҡ, ти торғайны, Ахунда ғына ҡыҙҙарға, бирнәгә тип, иң матур келәмдәр һуғалар, ә ҡыҙҙары сабата йә резина калуш булһынмы – һәр ваҡыт ап-аҡ йөн ойоҡбаш кейә ине, беҙ шуларҙы хайран булып күҙәтә торғайныҡ. Әсәләре иҫ китмәле итеп икмәк бешерә, буҙа яһай. Э-эй, балам, үткән ғүмер... Әле бабаңдың да Ахунда Солтан тигән дуҫы йәшәй ине. Бик сибәр кеше булды; сабыр, аҙ һүҙле, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып, ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ һүҙҙәр ысҡындыра торғайны. Үҙе балта оҫтаһы, ә беҙ кейеҙ итек баҫтырырға йөрөнөк. Тирә-яҡта унан да оҫта итек баҫыусы булманы.

– Ул хәлдәр бит революцияға тиклем булған, инде һинең дә йәшең һикһәндән уҙып бара бит, өләсәй.

– Булһа һуң, ул нисә быуаттар шулай дауам иткән. Юҡҡа башыңды ауырттырма, үҙебеҙҙең Байрамғолда ла бына тигән башҡорт егеттәре бөтмәгән.

Ҡыҙының өләсәһе менән һөйләшеүен тыңлап торған әсәһе лә һүҙгә ҡушылды:

– Сөмбөл, ғишыҡ-мышыҡ уйнап башыңды әйләндермә, уҡырға инәһең бар. Шундай яҡшы аттестат менән уҡымайынса, кейәүгә сығып, һөнәрһеҙ ҡалырғамы? Егеттәр бөтмәҫ ул, итәк-сабыуыңды йыйып йөрө, киләһе йылға уҡырға инергә әҙерлән.

Тик Сөмбөл Ахун егете Булаттан башҡа бер ни хаҡында ла уйлай алмай ине инде...

Улар бер дөйөм ятаҡта тора. Был йорт Учалының иң матур урынында, урман янындағы тау битенә урынлашҡан. Сөмбөл менән Булат ошо дөйөм ятаҡта, ҡыҙыл мөйөштә киске тансыла таныштылар.

...Бер ситтә баҫып тороусы оҙон буйлы егетте күреп, Сөмбөл өнһөҙ ҡалды. Кисәне алып барыусы:

– Ә хәҙер аҡ танец, ҡыҙҙар егеттәрҙе саҡыра, – тигәс, Сөмбөл, был сибәр егетте берәйһе алып киткәнсе тип, уның ҡаршыһына йүгереп килеп тә баҫты. Уның янында үҙенең бөтөнләй ҡыҫҡа буйлы булыуын аңлап, бер аҙға аптырап ҡалды. Егеттең күҙҙәренә ҡарағас, аяҡтары йөрөмәҫ булды: быҙдай матур зәңгәр күҙҙәрҙе уның бер ҡасан да күргәне юҡ ине. Ә тегеһе, ҡыҙға ҡарап, ап-аҡ тештәрен ялтыратып йылмайҙы ла, саҡырыуҙы ҡабул итеп:

– Бигерәк бәләкәйһең, бында нишләп йөрөйһөң? – тине.

Сөмбөл, күҙҙәрен айыра алмайынса:

– Мин бында торам, балалар баҡсаһында эшләйем, – тип яуап бирҙе.

– Һинең үҙеңә няня кәрәк, бигерәк кескәйһең бит.

Көй бөткәс, егет уны урынына оҙатып ҡуйҙы, ә икенсе музыка башланыуға, үҙе бейеүгә саҡырҙы.

Сөмбөлдөң ауылдаш егете:

– Сөмбөл, унан да оҙоно юҡ инеме, кендегенә танауың менән төртөлөп йөрөйһөң бит, – тип көлдө.

Сөмбөл оялыуҙан ни әйтергә лә белмәне, яуап эҙләгәнсе, оҙаҡ уйламай, бейек үксәһе менән уның аяғына килтереп баҫты. Тегеһе ауыртыуҙан ҡысҡырып уҡ ҡуйҙы. Оҙон буйлы егет:

– Бына шулай, дуҫым, бәләкәйҙәрҙе рәнйетергә ярамай, – тип көлдө лә Сөмбөлдө ситкәрәк тартты.

– Маладис, үҙеңде ҡыйырһыттырмайһың. Улайһа, һин Сөмбөл булаһың, ә мин – Булат ағайың.

Сөмбөл күтәрелеп уның күҙҙәренә ҡараны. Улар шундай матур итеп йылмая ине, тик был юлы, нишләптер, Сөмбөлдөң асыуын килтерҙеләр.

– Ҡыйырһытһаң, һинекенә лә баҫырмын. Миңә ун туғыҙ тула инде.

– Улайһа, икмәк әҙ ашағанһың, үҫмәй ҡалғанһың.

– Икмәк түгел, әпәй. Унан, ҡыҙҙар шулай бәләкәй булырға тейеш. Кеше егерме биш йәшенә тиклем үҫә, тиҙәр, шулай булғас, әле мин дә үҫермен.

Бына шул көндән башлап улар айырылышманы. Булат кеүек егет ҡуйынында йылы, рәхәт ине Сөмбөлгә...

Учалы – район үҙәге, үҙенә күрә уртаса ҙурлыҡтағы ҡала, бында тирә-яҡтағы ауылдарҙан йәштәр бик күп. Сөмбөл дә шул йәштәр араһында ҡайнап йәшәй. Ял көндәрендә кис менән тансалар, уйындар була, тик ҡыҙ был көндәрҙе яратмай. Йома кис һөйгәне менән айырылышып, икеһе ике яҡҡа үҙ ауылдарына ҡайтып китәләр. Ял көндәрен көс-хәл менән үткәреп, һағынышып, ашҡынып яңынан ҡалаға киләләр. Һуңғы ваҡытта әллә ни булды Сөмбөлгә. Гел башы ауырта, күңеле болғана; үткән аҙнала автобуста көс-хәл менән килеп етте. Бына бөгөн дә, эштән ҡайтып барғанда, аяҡ аҫтында ер убылғандай булды, ҡоймаға саҡ һөйәлеп өлгөрҙө. «Йә, Хоҙай, был ни инде, тиҙерәк ҡайтып етергә кәрәк, һуңғы рейсҡа өлгөрмәйем бит», – тип Сөмбөл ҡыҙыу-ҡыҙыу атлай башланы. Ул дөйөм ятаҡҡа ҡайтып еткәндә, йәштәр инде вокзалға ашыға ине. Үҙ бүлмәһенә инеү менән, уның артынан Булаты ла килеп етте.

– Әйҙә, тиҙ бул, бөтә кеше китеп бөттө бит, ни эшләп һуңланың? – тине.

– Булат, миңә әллә нимә булды, сирләйем, буғай, бер хәлем юҡ. Гел башым әйләнә, күңелем болғана, көскә ҡайтып еттем, автобусҡа яҡын барырға ла ҡурҡам, килгәндә лә ҡоҫоп оятҡа ҡалдым. Нисек ҡайтып етермен?

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Булат, тын ҡалып, уның ап-аҡ йөҙөнә ҡараны. Кисә лә: «Нишләп кәйефе юҡ икән?» – тип уйлап ҡуйғайны, гел көләс йөҙлө Сөмбөл һуңғы араларҙа шым ғына йөрөй башланы шул. Булат сәғәтенә ҡараны ла:

– Һуңға ҡалабыҙ, әйҙә, тиҙерәк йыйын, юлда һөйләшербеҙ, – тине.

Улар йүгерә-атлай килеп еткәндә, автобус шығырым тулғайны. Булат Сөмбөлдө этеп-төртөп тигәндәй индерҙе лә, автобус ишеге ябылыуға, үҙ ауылы автобусына һуңғы кеше булып инеп баҫты. Ҡыҫылып ҡайта-ҡайта, ҡабат ҡыҙҙы иҫенә төшөрҙө: «Бында, ир кеше булып, иҙеп-ҡыҫып бөтөрҙөләр, ә бәләкәй генә Сөмбөлдө, меҫкенемде, бөтөнләй ҡамыр итерҙәр. Туҡта, ни эшләп, ҡоҫам, сирләйем, тине һуң әле? Юҡ, юҡ, булмаҫ», – тине ул үҙ алдына. Өс ай элек, ҡыҙыуланып китеп, яҡынлыҡ ҡылғандар ине. Сөмбөл: «Башҡа улай итмәйек, яҡшы түгел, беҙ бит әле өйләнешмәгән», – тигәс, ул уға бүтән ҡағылманы.

Уларҙың йәш араһы дүрт йыл ғына булһа ла, Булат Сөмбөлдән олораҡ күренә. Сөнки Сөмбөлдөң бәләкәй генә буйы, нескә биле, ҡыҫҡа сәсе, һәр ваҡыт кәүҙәһенә килешеп торған ҡыҫҡа итәге ун алты йәшлек уҡыусы бала кеүек күрһәтә. Ҡыҙҙа әллә ниндәй йәшерен һөйкөмлөлөк бар, ҡыйғасланып киткән ҡалын ҡара ҡашлы шаян күҙҙәр һәр ваҡыт йылмайып тора кеүек: ул көлгәндә, уның күҙҙәре лә көлә.

«Ул әле бала ғына бит, Алла һаҡлаһын». Башына килгән уйҙан Булат үҙе лә ҡурҡып ҡуйҙы, шул уйҙарына сумып, ҡайтып еткәнен дә һиҙмәй ҡалды.

– Инде ҡурсағы менән бергә тороп ҡалды, ахыры, тигәйнем, ҡайтҡанһың икән. Иҫәнме, ағай.

Был – уның энеһе Байрас. Аралары ике йәш булһа ла, кәүҙәгә бер иш һәм бик оҡшаш улар. Икеһе лә оҙон буйлы, киң елкәле, ҡуйы сәсле, һөрмәле зәңгәр күҙле. Улар ауылдың беренсе егеттәре иҫәбендә йөрөй, йәшерен ғашиҡ булыусылар ҙа күп ине үҙҙәренә.

– Ә, һинме ни, сәләм, – тине ул энеһенә.

– Нимә уйға сумдың? Клубҡа концерт килгән, ти, сығабыҙмы? Автобуста Сәриә менән сибәр генә ҡунаҡ ҡыҙҙары ла ҡайтҡан, сығып, берәйһен тотоп ҡалырға кәрәк, – тип көлдө энеһе.

– Тоторһоң-тоторһоң, һиңә тоторға ғына булһын, – тине Булат, һаман үҙ уйҙарынан арына алмайынса, – ҡайтҡан һәр бер ҡунаҡ ҡыҙын оҙатаһың, береһе менән йөрөмәйһең, бөтә ауыл ҡыҙын оҙатып сыҡтың бит инде.

– Һуң, ағай, һинеке кеүек ҡурсаҡ осраһа, бәлки, мин дә туҡтар инем, юҡ бит. Һин үҙең дә ике кәмәнең ҡойроғон бергә тоторға тырышаһың. Бөгөн тағы тегендә китәһеңме?

– Белмәйем, бәлки, китермен дә.

Улар ҡайтып ингәндә, әсәләре киске аш өлгөртөп йөрөй ине. Өйҙә уларҙың туғыҙ йәшлек энеләре Әлфис бар, ул бөтә өйҙөң хужаһы ла, күҙ өҫтөндәге ҡашы ла. Унан яҡшыраҡ йәшәгән кеше юҡ: барыһы ла ярата, иркәләй, ғөмүмән, был өйҙө Әлфистән башҡа күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Ағалары ҡайтыу – уның өсөн оло байрам. Улар уны «Әлфис-Әлфис, әфлисун» тип үртәй, үҙҙәре һәр саҡ берәй тәмле әйбер алып ҡайталар. Энеләре аптырап ҡалмай:

– Көлөгөҙ, көл, мин үҫкәс көрәшсе булам, батыр булам, күрһәтермен әле мин һеҙгә әфлисунды, – ти. Ысынлап та, был – көрәшсе, батырҙар ғаиләһе. Аталары Шәфҡәт абзый ҙа элек көрәшсе булған, йәш саҡта бер кемгә лә бил бирмәгән, хәҙер бына Байрас улы көрәш майҙанының күрке булып бара. Булаттың ғына иҫе китмәй. Бер генә сығып ҡараны, ҡыҙығын тапманы. Ә бына Байрас тәмен белә: башта майҙан уртаһында киң елкәләрен һелкетеп, бөтә мускулдарын уйнатып ала. Уға көрәш уйын ғына, көрәшкәнсе бөтә ҡатын-ҡыҙ халҡын үҙенә бороп ҡуя, ул көрәшкәндә тамашасыларҙың күбеһе ҡатын-ҡыҙ була.

Бәләкәй Әлфистең дә хыялы көрәшсе булыу ине.

Аталары малдарҙы ҡарап ингәс, улар, әҙмәүерҙәй өс ир һәм Әлфис, йыйылышып, өҫтәл янына киске ашҡа ултырҙылар. Әсәләре Гөлфиә апай балаларына һоҡланып ҡараны. Хоҙайым яҡшы килен бирһен, улдары бик аҡыллы. Насип булһа, бәлки, быйыл Булаты өйләнеп тә ҡуйыр әле. Өйләнәм тиһә, бөгөндән туй яһарлыҡ мал-мөлкәт бар. Аталары эсмәй-тартмай, бар тапҡанын өйгә алып ҡайта, шуға һәр ваҡыт мул йәшәйҙәр.

Ашап туйғас, улдары әсәләренә рәхмәт әйтеп, үҙ йомоштары менән таралды. Булат арлы-бирле йөрөнө лә:

– Атай, матайҙың бензины етерлекме, барып ҡайтаһы ер бар ине, – тип һораны.

– Етерлектер, мин бит ат менән йөрөйөм.

– Улайһа, мин әйләнеп ҡайтайым әле, – тип сығып китте өлкән ул.

Байрас ағаһының тағы теге ауылға китеүен аңланы. Булаттың унда кемеһелер бар, тик әле уның күргәне юҡ. Байрасҡа Сөмбөл бик тә оҡшай ине, ул йылмайһа, донъялар яҡтырып китә, көлһә, ҡыңғырау шылтырағандай тойола, әллә ҡайһы яғы менән ҡыҙ үҙенә йәлеп итә. Ағаһы янына дөйөм ятаҡҡа барып, уны күрмәй китһә, юҡҡа ғына килгән төҫлө тойола. Эйе, ағаһы унан алда өлгөргән. Ҡарарбыҙ инде, ҡайһыһына өйләнер. Бәлки, быныһына өйләнер ҙә, Сөмбөл миңә ҡалыр, тип үҙен-үҙе өмөтләндереп, ниҙер көйләй-көйләй клубҡа сығырға йыйынғанда, янына әсәһе инде. Һис көтмәгәндә:

– Улым, һинән сер итеп кенә бер нәмә һорайым әле. Ағайың ҡайтҡан һайын теге ауылға саба, әллә өйләнергә иҫәбе бармы? Ары-бире уйлаһа, итәк-салғыйҙы йыйыштыра торайыҡ, тим. Һинең ул ҡыҙҙы күргәнең бармы һуң? – тип һүҙ башланы.

– Белмәйем шул, әсәй. Ағайымдың йөрөгән ҡыҙҙары икәү, ҡайһыһын һайларға ла белмәй. Ҡасан һайлар, шул саҡ өйләнер.

– Нисек инде икәү?

– Шулай, икәү: береһе тегендә, береһе бында; береһе – көндәлек, икенсеһе – ял менән байрамда.

– Улым, улай ярамаҫ, килешмәгәнде, кеше балаһын харап итә күрмәгеҙ. Теге көндәлек тигәнең нисегерәк һуң, йәмһеҙме әллә, аламамы, бәлки, елбәҙәктер?

– Әсәй, беләһеңме, ул, – тип Байрас бер аҙ уйланып торҙо, – ул ай янында балҡып торған бәләкәй генә йондоҙға оҡшаған. Үҙе бәләкәй генә, үҙе гел йылмайып тора.

– Һуң, шулай булғас, ағайың ниңә тағы быныһының башын әйләндерә?

– Әсәй, йыраҡтағы ҡояш нығыраҡ йылыта. Ярай, мин китәм, ҡунаҡ ҡыҙҙарын бүлешеп бөтөрҙәр юғиһә.

– Улым, тәртипле генә йөрө, ҡунаҡ ҡыҙҙары тип, үҙебеҙҙең ауыл ҡыҙҙары ла насар түгел, күҙеңде асып ҡара.

Булат өйҙән сығып киткәндә – киске туғыҙ, Фәриҙәләргә килеп еткәндә төнгө ун бер тулған ине инде. Утын ҡабыҙып, өс тапҡыр сигнал бирҙе. Күпмелер торғас, ҡапҡанан берәү сыҡты, яҡыныраҡ килеп еткәс кенә таныны Булат: Был Фәриҙәнең һеңлеһе ине.

– Апайым ҡайтманы, Булат ағай. Киләһе аҙнаға, минең тыуған көнгә ҡайта. Шәмбе көндө кил, йәштәр йыйылышып ултырабыҙ, һине лә саҡырам.

Булаттың ҡырҡ саҡрым ел ҡыуып килеүе юҡҡа ғына булды. Фәриҙәне инде ике аҙна күргәне юҡ. Уныһы Златоуст ҡалаһында эшләй. Элек Булат та шунда эшләне. Булат ҡайтты, ә ҡыҙ «өйләнешкәс ҡайтырмын» тип ҡалды, бына хәҙер ике арала ел ҡыуып йөрөргә тура килә. Фәриҙәне бик ярата шул. Зифа буйлы, төҙ кәүҙәле, оҙон ҡуйы сәсле, бик сибәр һәм бик ғорур. Уның алдында артыҡ һүҙ ысҡындырырға ла ҡурҡа. Уның өсөн Фәриҙә – күктәге буй етмәҫ йондоҙ. Сөмбөл менән сағыштырһаң, ер менән күк араһы. Сөмбөл һәр ваҡыт көлөүе-шаярыуы менән һауала осҡан күбәләк кеүек булһа, Фәриҙә аҙ һүҙле, һәр әйткән һүҙен уйлап һөйләшә, үпкәләһә, айҙар буйы һөйләшмәй торған ғәҙәте бар. Шуға ла Булат уны үпкәләтеүҙән ҡурҡа, һүҙен самалап, ярарға тырышып һөйләй. Шундай аҡыллы, сибәр ҡыҙҙың уға ҡарауына ышанып та бөтә алмай, ул уны һайлауына бик ғорурлана. Фәриҙәгә өйләнһә, егеттәрҙең танауына сиртәсәк – ундай ғорур һылыуҙар һәр кемгә лә эләкмәй бит.

Булат төн уртаһында ғына ҡайтып ятты, әнеһе әле ҡайтмағайны. Ятыуға йоҡлап та китте. Төнө буйы Сөмбөл менән һаташып сыҡты: ул яр башына баҫҡан да аҫҡа ҡарап тора, ҡулында аҡ төргәк, төргәктә йәш бала, шул бала үҙәк өҙгөс итеп илай, ә Сөмбөл упҡынға һикерергә йыйына. Булат, уны туҡтатырға теләп, ярға ҡаршы йүгерә, бөтә көсөнә «туҡта-туҡта» тип ҡысҡыра, тик ниңәлер тауышы сыҡмай. Шул саҡ әнеһе һелкеткәнгә уянып китте.

– Һаташаһың, боролоп ят, Сөмбөлдө саҡыраһың, – тип кире урынына барып ятты.

Булат шыбыр тиргә батты, ҡурҡыу ҡатыш әллә ниндәй хистәр кисерҙе. Әгәр ҙә уның шиге дөрөҫ булһа, Алла һаҡлаһын, уйларға ла ҡурҡыныс: бер ҡылған гонаһ өсөн ғүмер буйы ғазап сигергә тура килһә, нишләрһең? Йә, Хоҙай, үҙең һаҡла...

Был ике көн үтмәйенсә йәнгә тейҙе, әллә ни тиклем эш эшләнеләр, тик көндәр генә бик аҡрын уҙҙы. Шәмбе үтеп, йәкшәмбе еткәс, китер ваҡытты һанап сәғәт үтте, уның тиҙерәк Сөмбөлдө күреп, шиктәренә асыҡлыҡ индерәһе килде. Ул әле бала ғына, бер ни аңламай, ахырыһы, әгәр ҡыҙҙың әсәһе белһә, бөттө баш: йә өйләндереп, йә ултыртып ҡуйыр...

Булат дөйөм ятаҡҡа килеп етеү менән Сөмбөлдөң бүлмәһенә инеп сыҡты, тик ҡыҙ килмәгән икән. Сөмбөлдөң ауылдашы Мансур осрап:

– Сәләм, килдең дәме? Ҡара әле, һинең бәләкәй ҡурсағың вокзалда ултырып ҡалды. Әллә сирләй инде? Йөҙө ап-аҡ, килгәндә лә ишек төбөндә генә баҫып килде. Элек бер туҡтауһыҙ сыйырсыҡ кеүек һайрап-көлөп тора ине, ә хәҙер өндәшмәй. Сирләй, ахырыһы, – тип үтеп китте.

Булат, Мансурҙы тыңлап та бөтөрмәйенсә, вокзалға йүгерҙе. Вокзал дөйөм ятаҡтан йыраҡ түгел, уны ҡайындар ғына ҡаплап тора. Ҡайынды ҡосаҡлап торған Сөмбөлдө ул йыраҡтан уҡ күреп алды.

– Сөмбөл, ни булды? Хәлең нисек?

– Әллә ни булды, ҡоҫаһым ғына килә, башым әйләнә, көс-хәлгә килеп еттем. Әллә ниндәй сир эләкте, үлмәһәм ярар ине.

– Сөмбөл, ҡасан башланды һуң был сирең?

– Әллә, бер айлап бар инде. Әсәйем иртәгә больницаға ашҡаҙанды тикшерергә барырға ҡушты, бик ябыҡҡанһың, ти.

Тимәк, Булаттың шиге дөрөҫ булды: «Да, иштең ишәк сумарын, хәҙер нисек аңлатырға инде был балаға… Их, бөттө баштарыбыҙ».

– Әйҙә, ултырайыҡ әле.

Улар бер эскәмйәгә барып ултырҙы.

– Мин һинең сиреңдең сәбәбен беләм, буғай… Әйтһәм, ҡурҡырһың инде, хәйер, мин үҙем дә ҡурҡам… Һин бит ҡатын-ҡыҙ, үҙең дә аңларға тейешһең.

Сөмбөл, аптырап, уға ҡарап ултыра бирҙе. Ә Булат, нисек һүҙ башларға белмәйенсә, тирләп-беште, ике ҡулына урын таба алманы.

– Ни булды? Битеңә тир бәреп сыҡты, миндә берәй йоғошло сир бармы әллә? Һин ҡайҙан беләһең миндә ниндәй сир икәнен?

– Эй, бигерәк балаһың шул әле һин. Юҡ, үлмәйһең. Һин ауырға уҙғанһың. Был сир түгел, унан үлмәйҙәр – йә бала табалар, йә ваҡытынан алда алдырып ҡотолалар.

Ғәжәпләнеүҙән Сөмбөлдөң күҙҙәре түңәрәкләнде:

– Нисек? Ҡайҙан? Һин бит, бер ни булмай, тинең…

Ул тороп баҫты, унан кинәт ҡамыр кеүек бөгөлөп төштө. Булат уны тотоп өлгөрҙө, ипләп кенә алдына ултыртты.

– Ҡурҡма, берәй нәмә уйлап табырбыҙ.

Сөмбөл ни шатланырға, ни ҡайғырырға белмәне:

– Булат, йәнем, мин сирләйем тип ҡурҡҡайным. Балаға уҙыу – үҙе бер бәхет бит ул. Беҙгә беленә башлағансы өйләнешергә кәрәк. Туҡта, ҡасан булды һуң, һин хәтерләйһеңме? Йә, Хоҙай, башым да эшләмәй, балаға шулай тиҙ уҙалармы икән ни? Ә ул ҡасан тыуасаҡ? Булат, тим, Булат, ниңә өндәшмәйһең?

– Тыңла әле, Сөмбөл, мин былай булыуын теләмәгәйнем, аңлайһыңмы? Беләм, мин ғәйепле һинең алда, тик һин дә мине аңларға тырыш, мин һиңә өйләнә алмайым. Мин башҡаны яратам… Минең йәрәшкән, яратҡан кешем бар. Аңлайһыңмы, мин һиңә өйләнә алмайым. Булдыра алһаң, ғәфү ит. Кәрәкмәй миңә ул бала. Беҙ яңылыштыҡ, икебеҙ ҙә яңылыштыҡ. Әле һуң түгел, тыңла мине…

Ул, Сөмбөлдөң таш кеүек ҡатып ҡалған ап-аҡ йөҙөн күреп, башлаған һүҙен әйтмәйенсә туҡтап ҡалды. Ҡыҙҙың ҡыҫҡа сәстәрен көҙгө ел туҙғытты, ләкин битендә бер үҙгәреш һиҙелмәне, арттан бысаҡ тығып йәнен алғандай, һелкенмәйенсә ултыра бирҙе. Булат, нишләргә белмәйенсә, арҡаһы менән боролдо ла битен ҡулы менән ҡаплап илап ебәрҙе…

Ул, Сөмбөлдөң дә илап ебәреүенән ҡурҡыпмы, үҙе лә аңламайынса, ике ҡулы менән ҡолағын ҡапланы, ҡыҙҙы нисек йыуатырға ла белмәне. Ә үҙенең күҙҙәренән ҡайнар йәштәр аҡты ла аҡты… Шул халәттә күпме ултырғандыр, өшөй башланы:

– Йә, ярай, әйҙә, ҡайтайыҡ.

Ул боролғанда, янында бер кем дә юҡ, бары Сөмбөлдөң сумкаһы ғына ултырып ҡалғайны. Егет яҡ-яғына ҡаранды, һис кем күренмәне.

Булат дөйөм ятаҡҡа ҡайтып, өҫ кейемдәрен алыштырҙы ла Сөмбөлдөң сумкаһын бирергә бишенсе ҡатҡа менеп китте, тик ишек асыусы булманы: «Кәрәк булһа, үҙе инеп алыр», – тип бүлмәһенә төшөп, йоҡларға ятты. Иртән торғанда ла сумка урынында тора ине. «Ярар, кис эштән һуң индерермен әле», – тип эшенә китте. Кис йәнә Сөмбөлдәр бүлмәһенә күтәрелде. Ишекте Сөмбөлдөң бүлмәләш ҡыҙҙары асты:

– Ә, еҙнә килгән, апай ғына нишләптер йоманан бирле күренмәй, әллә ауылыңа алып киттеңме?

Булат аптырап ҡалды:

– Нисек юҡ? Ауылдан кисә килде бит ул.

– Беҙ күрмәнек. Кисә лә, бөгөн дә юҡ. Эшендә булдымы икән һуң?

Булат ни әйтергә белмәй торҙо ла:

– Ҡайтһа, беҙгә инһен әле, – тип бошоноп төшөп китте.

Кис буйы Сөмбөлдө көтһә лә, бушҡа булды, ҡыҙ күренмәне. Булат аҙна буйы һәр кис улар бүлмәһенә инеп йөрөнө. Үҙе менән берәй хәл ҡылмаһын тип, ҡурҡыуға ҡалды, теге күргән төшө башынан сыҡманы. Бәлки, барыһын да аңлағандыр, аҡылһыҙ түгел бит, тип үҙен-үҙе йыуатты.

Тағы йома етте. Вокзалға алданыраҡ килде, энеһе лә килеп етте.

– Ағай, ҡурсағың ҡайҙа бөгөн? Әллә индереп ултыртырға ла өлгөрҙөңмө? – тип һораны. Булат өндәшмәне.

Улар Сөмбөлдәр ауылына ҡайтыусы автобусты икәүләшеп күҙәтә башланы, тик ҡыҙ күренмәне. Байрастың күңеле кителде, ул уның йылмайып, ҡул болғап оҙатып ҡалыуын ярата, хатта ағаһынан көнләшә ине. Аҙ ғына һуңға ҡалды, ул йондоҙға ағаһы үрелгән, ә ағаһына арҡыры төшөп булмай; сит кеше булһа, әллә ҡасан төбө-тамыры менән йолҡоп алған булыр ине. Юҡ шул, ярамай, ағай бит...

Сөмбөл Булат янынан нисек ҡуҙғалып киткәнен, ҡайҙа табан барғанын да аңламаны. Бер нисә минут, бер нисә һүҙ йөрәген телгеләп, усына тотторҙо. Уның бөтә булмышы таш булып ҡатты.

Урамда һалҡын көҙ, урыны-урыны менән боҙлауыҡ, һалҡын әсе ел, тик ул уларҙы һиҙмәне, барҙы ла барҙы, ҡала буйлап йөрөнө лә йөрөнө... Бер кистә бөтә донъя үҙгәрҙе, ни тиклем ваҡиға булды, ул йөклө, бала көтә, ә ул бала... Ул бер кемгә лә кәрәкмәй. Бына хәҙер бер кемгә лә кәрәкмәгән ике бәхетһеҙ йән һалҡын көҙҙә буш ҡала урамында аҙашып йөрөй. Әле кисә генә барыһы ла башҡаса ине, ул мөхәббәте менән бик бәхетле, донъя матур, яҡты, бер ниндәй борсоу-ҡайғыһы юҡ. Ауылына ҡайтһа, өйө, әсәһе шатланып ҡаршы ала, бында килһә, эше, һөйөклөһө көтөп тора ине. Ә хәҙер? Ә хәҙер әсәһе ҡайғыһынан үлер, уны өйгә лә индермәҫ. Хурлығы ни тора бит... Ирһеҙ бала тапҡан, тегенең уйнаштан тыуған балаһы, тип бармаҡ төртөп һөйләйәсәктәр...

Ул шулай урам буйлап барҙы ла барҙы. Ҡала ситенә нисек килеп еткәнен дә, тимер юл буйлап барыуын да һиҙмәне. Өҫтөнә ҡайҙандыр яҡты ут яҡынлаша башланы, ул уға ҡаршы китте, ник ҡаршы барғанын үҙе аңламаны. Ут туҡтаны, тик һүнмәне, ҡаршыһында ҙур бер ағай пәйҙә булды:

– Нишләйһең бында? Ошо йәшеңдән йәшәүҙән туйҙыңмы? Бар, өйөңә ҡайт, – тип ороша-ороша, Сөмбөлдө ситкә сығарып баҫтырҙы. – Ана, ҡалаға ҡайта торған юл, ә был юл комбинатҡа бара. Бәхетең, пассажирҙар йөрөтөүсе булһа, тапап та киткән булыр ине. Һин бит бала ғына, һин үлһәң, ата-әсәйең ҡайғынан үләсәк, ә мине кеше тапаған өсөн төрмәгә ултыртасаҡтар ине. Бар, өшөп бөткәнһең. Әллә телһеҙ инде, меҫкен, – тине лә боролоп китеп барҙы.

Сөмбөл ҡайҙа барырға белмәйенсә туҡтап ҡалды, ҡалаға ҡайтайым тип атлай торғас, үҙе эшләгән балалар баҡсаһына килеп төртөлдө. Ишек шаҡығанда, уның инде теше-тешкә теймәй ине. Ҡарауылда тороусы ҡарсыҡ, уны күргәс:

– Сөмбөл, нимә булды? Нишләп йөрөйһөң? Нишләттеләр һине? – тип ҡосаҡлап алды. – Хәҙер сәй эсерәм, кил бында, һал кейемдәреңде, – тип уны тартып-йолҡоп сисендерҙе лә йылы одеялға төрөп ултыртты.

Сөмбөл ошо балалар баҡсаһында няня булып эшләй, балаларҙы ла, эшен дә бик ярата. Унынсы синыфты бөтөргәс, уҡырға инмәне, бында эшкә урынлашты. Был әбейҙе баба Вера тип йөрөтәләр, ул төнгө ҡарауылда тора. Әле йүгерә-атлай эҫе сәй килтерҙе.

– Мә, ҡояшым, эс. Ни булды һиңә, кем рәнйетте, йөҙөңдә ҡан әҫәре ҡалмаған бит? Һин ила, оялма, ҡарт булһам да, мин барыһын аңлайым. Былай ҡатырға ярамай, йөрәгең күтәрмәҫ. Һин һалҡын тейҙергәнһең, ахыры, ят әле, – тип һөйләнә-һөйләнә, Сөмбөлдө әллә нисә одеял менән төрҙө. – Мин аңлайым, дело молодое, бар нәмәгә мөхәббәт ғәйепле, бер һин генә түгел, бөтә кеше кисерә уны. Һин эсеңде бушат, һөйлә, ила, былай ярамай, ҡояшым. Мин күпте күрҙем, мин һуғышты үттем, һуғышта әллә ниҙәргә осрарға тура килде. Кеше еңә алмаған ҡайғы-хәсрәт юҡ, ҡояшым, Хоҙай кешегә күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы бирмәй. Ике иңбашыңда ике фәрештәң ултыра, улар һиңә бар ауырлыҡты күтәрешә, бары ваҡыт, бары сабырлыҡ кәрәк. Һуғыш менән аслыҡтан ҡала, барыһына ла түҙергә кәрәк. Йәшәргә кәрәк, ҡояшым, йәшәргә кәрәк. – Вера әбей бик оҙаҡ Сөмбөлдөң башынан һыйпап ултырҙы.

Был төндө ҡыҙҙың маңлайына беренсе оҙон һыр һыҙылып ятты.

Вера әбей иртән ҡыҙҙың температураһын үлсәгәс, ҡырҡҡа яҡын икәнен күреп, «Ашығыс ярҙам» саҡыртты. Сөмбөлдө шунда уҡ алып киттеләр – ул аңында түгел ине инде.

Сөмбөл өс көндән һуң ғына аңына килеп, кеше танырлыҡ булды. Йәшәү менән үлем араһында тартышыу уның барлыҡ көсөн, йөҙөндәге нурын алды. Ул аңына килгәндә, янында һаман шул Вера әбей ултыра ине.

– Ҡояшым, көн-төн Хоҙайҙан һинең терелеүеңде һораным. Былай булғас, барыһы ла артта ҡалды, йәшәрһең, Алла бойорһа. Һин бит өс көн аңһыҙ ятаһың, – тип үҙе һөйләнде, үҙе уның ҡара янып ярылып бөткән ирендәрен сылатты.

Табиптар инде. Оло йәштәгеһе, бар яҡлап тыңлап ҡарағас:

– Үҫкәнем, һеҙ бик ныҡ һалҡын тейҙергәнһегеҙ. Үҙегеҙҙең йөклө икәнегеҙҙе беләинегеҙме? Һеҙгә бик оҙаҡ дауаланырға тура киләсәк. Бөтә ышаныс үҙегеҙҙә. Беҙ һеҙгә булышырбыҙ. Тыуасаҡ сабыйығыҙ тураһында ла онотмағыҙ. Барлыҡ дарыуҙарҙы эсергә, яҡшылап ашарға, мөмкин тиклем тиҙерәк депрессиянан сығырға кәрәк. Әбейең, һине һаҡлап, өс көн ашамай-эсмәй бында ултыра, – тип капельница ҡуйҙы.

Баба Вера, таҙа кейемдәр ҙә алып килермен, тип ҡайтып китте.

Сөмбөлдө айырым палатала тағы бер аҙна ятҡырҙылар ҙа дөйөм палатаға күсерҙеләр. Вера әбейе ашарға килтереп, уның хәлен белеп торҙо.

– Баба Вера, әсәйем белһә, мине өйгә индермәйәсәк. Мин дә, бала ла бер кемгә лә кәрәкмәй. Минең барыр урыным да юҡ, – тине Сөмбөл.

– Һин башта терел, унан һөйләшербеҙ. Мин бит бер яңғыҙым йәшәйем, миңә ҡайтырһың, икәү күңеллерәк тә булыр. Ҡайғырма, ҡояшым. Һин миңә Верочка тип өндәш, улай мин үҙемде яҡшыраҡ хис итәм.

– Ярай. Верочка, һиңә бер үтенесем бар. Беҙҙең ауылға барып килмәҫһеңме икән? Әсәйҙәр мине юғалтҡандыр инде, мин бит аҙна һайын ҡайта торғайным. Бала тураһында бер ни ҙә әйтмә, кәрәкмәй, үтенеп һорайым.

– Ярай, ҡояшым, ярай.

Әсәһе икенсе көндө үк килеп етте, ҡыҙын шундай хәлдә күреп, телһеҙ ҡалды. Верочка уны тынысландырырға тырышты:

– Һеҙ борсолмағыҙ, уның үпкәһенә һалҡын тейгән. Тиҙҙән терелер, йәш организм үҙе көрәшә ул, ти врачтар. Барыһы ла яҡшы булыр. Мин хәҙер киләм, – тип сығып китте.

Үҙе тиҙ генә докторҙар йыйыла торған бүлмәгә инеп, Сөмбөлдө дауалаусы табип Власовты тапты.

– Ғәфү итегеҙ, доктор. Сөмбөлдөң әсәһе килде. Бик илай, ҡыҙын шундай хәлдә күреп, бик ҡурҡты. Һеҙ, берүк, уның ауырлы икәнен әйтә күрмәгеҙ инде.

– Яҡшы, әйтмәм.

– Рәхмәт, доктор, рәхмәт.

Доктор ҙа Сөмбөлдөң әсәһен иплəп кенә тынысландырып ҡайтарып ебәрҙе.

Сөмбөлдөң хәле шәптән түгел, ул төшөнкөлөккә бирелеп, ҡатмарлы депрессия кисерә. Ә донъянан ваз кискән кешене дауалау – иләк менән һыу ташыу менән бер. Уны был хәлдән сығарыу өсөн ныҡлы таяныс булырлыҡ яҡын кеше, мөхәббәт, яҡлау, аңлау кәрәк...

Ике аҙна үтте. Сөмбөл бер нөктәгә ҡарап ятыуын белде, бер кем менән һөйләшмәне. Мәрйә әбеһе уның янында бөтөрөлдө лә бөтөрөлдө. Етмәһә, ҡыҙҙа көслө токсикоз башланды. Ул хәҙер бик ябыҡты, хәлһеҙләнде.

Токсикоздың көслө булыуы, бер яҡтан, докторҙы ҡыуандыра, сөнки ул – ҡарындағы баланың үҫергә, йәшәргә тырышыуын күрһәтеүсе билдә. Хоҙай шулай яҙғандыр, улар ошо ауыр хәлде еңеп сыға алһалар, бер-береһенә һөйөнөп туймаясаҡтар әле. Әсә булғас, ул барыһын да онотасаҡ, бәлки, үҙен ошо ғазапҡа һалған кешеһен дә кисерер. Доктор ҡыҙға бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Әллә бик ябығыуҙан, әллә эстән яндырған хәсрәттән Сөмбөлдөң ирен ситендә ике бәләкәй генә һыр барлыҡҡа килгәйне.

Тағы йома етте, тағы йәштәр, шау-гөр килеп, вокзалда йыйылды. Октябрь байрамы яҡынлашҡан саҡ. Байрас, алдан килеп, ағаһы менән икеһенә билет алды. Бер яҡшылыҡ эшләйем әле тип, ағаһының ҡурсағына ла билет алырға уйланы. Сөмбөлдө ул теге аҙнала күрмәне, уның көләс күҙҙәрен, нисек шатланасағын күҙ алдына килтереп, үҙ алдына йылмая-йылмая, көс-хәл менән сиратты йырып сыҡты ла ағаһын эҙләй башланы. Ағаһының тимер юл кассаһы янында тороуын күргәс, аптырап, янына килде:

– Нишләп тораһың бында? Мин һиңә лә, ҡурсағыңа ла билет алдым. Үҙе ҡайҙа һуң?

– Байрас, мин ауылға ҡайтмайым, Златоусҡа китәм. Әсәйҙәргә әйтерһең, юғалтмаһындар.

– Ә Сөмбөл?

– Белмәйем, минең инде уны ике аҙна күргәнем юҡ, бүлмәһенә ҡайтмай, ҡайҙа йөрөйҙөр. Дөрөҫөн әйткәндә, мин уның менән араны өҙҙөм. Ярай, бар, һуңға ҡалаһың, осратһаң, билетыңды бир.

Байрас урамға сыҡты, Учалы – Байрамғол автобусы янына килеп, Сөмбөлдө эҙләй башланы, тик ул халыҡ араһында күренмәне.

– Бәрәкалла, әллә һин дә беҙҙең ауылға ҡайтаһыңмы? Билетҡа яҡын барырлыҡ түгел, ҡырмыҫҡа ояһы ҡуҙғалған тиерһең. Туҡта, Байрас, нишләп тораһың бында, кемде эҙләйһең? Әллә һин дә беҙҙең ауыл ҡыҙын эләктерҙеңме?

– Мансур, мин Сөмбөлгә билет алғайным, ни эшләптер күренмәй. Белмәйһеңме, ҡайтамы икән?

– Слушай, брат, ике аҙна инде юҡҡа сыҡҡанына. Бүлмәләш ҡыҙҙары ла бер ни

белмәй. Ағайыңдан һора. Асыуым да килмәгәйе, ни үҙенә, ни кешегә... Мин бит уға ҡайҙан хат килгәнен, ҡайҙа сапҡанын беләм, ә был йүләр сабый уға ышана. Белмәйем, теге аҙнала ҡайтманы шикелле, клубҡа сыҡманы.

Байрас өндәшмәй генә билетын Мансурға һуҙҙы:

– Мә, улайһа. Һин белеш әле, бер-бер хәл булмаһын тағы.

– Ярай, клубҡа сыҡһа, һорашырмын. Билет өсөн рәхмәт.

Байрас өйгә ҡайтып инеүгә, атаһы ҡаршы сыҡты.

– Ә ағайың ҡайҙа?

– Китте.

– Ҡайҙа китте?

– Златоусҡа. Байрамға ҡайтмайым, еңгәң янына барам, тине.

– Ярай, улайһа, өйләнә башлаһағыҙ ҙа ярай. Оҙаҡламай һуғым һуябыҙ, берелен һатырбыҙ, береһенә туй яһарға булыр.

– Яһарһығыҙ, яһарһығыҙ, – тиһә лә: «Бына еңгәнең береһе ҡайҙа юғалды икән? Әллә берәй хәл булдымы?» – тигән уйҙар Байрастың башынан сыҡманы.

Улар киске ашҡа ултырыуға, Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе – Әлфис ҡайтып инде. Биттәре ҡыҙарған, танау аҫты ялтырап тора, күҙҙәре ут сәсә. Урамда ҡар яуа, ахырыһы, беренсе ҡар.

– Был ваҡытҡа тиклем ни эшләп йөрөйһөң, маңҡа ҡапсығы? Төн бит, әллә ҡыҙҙар оҙата башланың инде? – тип ағаһы үртәй башлағайны, Әлфис ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Ағай, ағай, Рәмилдәргә теге һин оҙатҡан ҡунаҡ ҡыҙы тағы ҡайтҡан. – Әлфис, өҫтөн һала-һала, үҙенекен һөйләй башланы. – Рәмил әйтә, теге аҙнала һинең Байрас ағайың беҙгә ҡайтҡан ҡунаҡ ҡыҙын оҙатҡан булған, төндә апайым менән шырыҡ-шырыҡ һөйләштеләр, тыңлап яттым, ти. Теге апай әйтә, ти, Байрас ҡапҡаға килтереп терәне, үләм тип торам, ул шундай шәп үбешә, миңә оҡшаны, киләһе аҙнаға тағы ҡайтам, тип әйтте, ти. Ана, ҡайтып та еткән, һине көтөп йөрөй.

Байрас бер генә һикерҙе, тағы әллә ниҙәр ысҡындырмаһын тип, энеһен күҙ асып йомғансы эләктереп, оло яҡҡа кереп юғалды.

– Һин ни һөйләйһең әсәйҙәр алдында, бытбылдыҡ? Иманыңды уҡытам бит.

– Рәмил бит шулай ти.

– Тиһә һуң, һин бит егет кеше. Ундай һүҙҙәрҙе әсәй менән атай алдында һөйләмәйҙәр инде. Алып ҡайтырмын мин һиңә икенсе юлы һағыҙ. Һин дә үҫеп етерһең әле, мин дә һине шулай әсәйҙәр алдында хур итермен.

– Йөрөнөм, ти, кеше ҡапҡаһы төбөндә ҡыҙҙар ауыҙы ялап, – тине лә ағаһы эләктергәнсе Әлфис сығып та йүгерҙе.

– Ну, малай, эләктерһәмме?!

Байрас әсәләре янына башҡа сығып торманы, тиҙ-тиҙ генә кейенде лә клубҡа сығып тайҙы. Юл буйы «сыбыҡһыҙ радио» тип энеһенә асыуланып барҙы.

Әсәһе менән атаһы тауышһыҙ ғына, күҙ йәштәре сыҡҡансы көлдөләр. Атаһы төпсөк улына иплә кенә:

– Улым, улай ярамай, ундай әйберҙәрҙе ҡолаҡҡа ғына әйтәләр, һин бит ир кеше, башҡа улай итмә, йәме, – тип аңлатты.

– Ярар, әйтмәм, былай ҙа муйынды һындыра яҙҙы, – тип Әлфис тағы көлөргә тотондо, уға атаһы менән әсәһе лә ҡушылды.

– Нимәнән көләһең, улым?

– Иртәгә Рәмил тағы һөйләр әле, классно, – тине лә, һүҙен әйтеп бөтөрмәй, ауыҙын япты. – Башҡа бер ни әйтмәйем, ашайым да ятам, иртәгә ҡар күп итеп яуһа, тау шыуырға барабыҙ.

Атаһы төпсөгөнә ҡарап йылмайҙы, бына кемгә рәхәт ул донъяла: Әлфис менән Мыраубикәгә.

Байрас клубҡа килеп ингәндә, йәштәр йыйылған, клуб шығырым тулы ине. «Бөгөн дә ҡыҙҙар оҙата барһам, иртәгә тағы ниндәй һүҙҙәр ишетермен икән», – тип башҡа егеттәр янына мөйөшкә баҫып, ҡунаҡ ҡыҙҙарын күҙләй башланы. Егеттәр менән күрешкән арала янына класташы Римма килеп баҫты. Ул йыраҡ ҡына туған да.

– Һаумы, Байрас, ҡунаҡ ҡыҙҙарын күҙләйһеңме?

– Миңә кем дә ярай, күңелем киң, – тип көлдө Байрас.

Римма уға һоҡланып ҡараны, был аҫыл егет күптәрҙең башын әйләндерә, нишләптер яратып йөрөгән кешеһе генә юҡ.

– Ағайың нишләптер бер ҙә күренмәй, уның менән ныҡлап һөйләшәһе һүҙем бар. Клубҡа ла сыҡмай, әллә ҡайтмаймы?

– Өйләнергә йыйына, бик кәрәкле һүҙ булһа, үҙемә генә һөйлә.

– Кемгә өйләнә, теге Байрамғол ҡыҙынамы? Ул бит шуның менән йөрөй.

– Юҡ, ул түгел. Златоуста уның ҡыҙы. Әле лә уның янына китте.

Был яуапты ишеткәс, Римма ғәжәпләнеп Байрасҡа ҡараны.

– Ниңә миңә улай ҡарайһың? Ҡурҡма, мин өйләнмәйем әле.

– Ә Сөмбөл нисек?

– Белмәйем, уныһы әллә ҡайҙа китеп юғалған, ти, ағайым үҙе лә белмәй.

Римма бер аҙ уйланып торҙо ла:

– Әйҙә, урамға сығайыҡ әле, бында кеше күп, һөйләшеп булмаҫ, – тип Байрасты урамға тартты. – Беләһеңме, Байрас, мин бөгөн клубҡа ағайың менән һөйләшер өсөн генә сыҡтым, эштәр былай булғас, һиңә һөйләйем инде. Һин бит минең ҡайҙа эшләгәнде беләһең, өҫтәүенә, реанимация бүлегендә лә эшләйем; унан, беҙ бит, йыраҡ булһа ла, туғандар. Булат ағай үҙ кеше тигәндәй... Ҡыҫҡаһы шул: ағайыңа әйт, Сөмбөл беҙҙә ике аҙна инде ауыр хәлдә ята, тәүге өс көндә бөтөнләй аңһыҙ булды. Команан сыға алмаҫ, үлер, тигән инек, команан сыҡты, ләкин бер кем менән һөйләшмәй, бер нөктәгә ҡарап тик ята. Ике аҙна бер яҡҡа ла үҙгәреш юҡ.

– Туҡта, ни һөйләйһең һин, ни булған уға? Бер ни ҙә аңламайым. Ҡайҙа? Нишләгән?

– Белмәйем, беҙгә уны аңһыҙ, температураһы ҡырҡ килеш килтерҙеләр. Әллә урамда бик оҙаҡ йөрөгән, әллә йығылып ятҡан, уныһын белмәйем, бик ҡаты һалҡын тейгән. Врачтар, нимәнәндер бик ҡаты тетрәнеү кисергән, организмы көрәшә алмай, ти. Хәҙер ул төшөнкөлөккә бирелгән.

Римма, башҡаһын әйтергәме-юҡмы, тип бер аҙ уйланып торҙо, ни булһа шул булыр, үҙ ҡылғандары өсөн үҙҙәре яуап бирһендәр тигәндәй, һүҙен дауам итте:

– Иң насары шул: ул ауырлы, әгәр үлә ҡалһа, бер юлы ике ғүмер киҫеләсәк. Ағайың өйләнгәнсе уйлаһын. Был гонаһ менән нисек йәшәр, ул бит уны бер йыл ҡурсаҡ урынына етәкләп йөрөнө, ана хәҙер барып ҡараһын, танырмы икән?.. Өйләнә икән, өйләнһен, ер йотар үҙен, ҡәбәхәт йән. Бына шул... – Римма ҡырт ҡына боролдо ла, клубҡа инеп тормайынса, ҡайтып китте.

Байрастың башына күҫәк менән һуҡҡандай булды, ишеткәндәрен рәткә һалып аңларға тырышты. Башҡа һыймаҫ хәл был: ағаһы Сөмбөлдө харап иткән! Ул, үҙ уйҙарына сумып, урам уртаһында бер аҙ баҫып торғас, әкрен генә ҡайтыу яғына атланы.

Урамда ҡар яуа, ҡыш етә. Ҡар бөртөктәре йәш егеттең битенә ҡуна ла иреп ағып төшә, әллә ҡар, әллә күҙ йәштәре... Һыҡрап-һыҡрап йөрәге ауыртты. Уның әле быға тиклем ҡыҙҙар өсөн йөрәге әрнегәне юҡ ине: үпте, ҡосто – елгә осто. Бына хәҙер әллә ни булды.

Өйҙәренә ҡайтты. Әкрен генә инеп ятты, күҙҙәренә йоҡо инмәне. Таң алдынан ғына серем итеп алды. Ул уянғанда, яҡты ине инде. Байрам көн булғас, айырым эш тә юҡ. Ул, тороп сәй эскәс, ауылдың икенсе осона, Риммаларға, китте. Римманы урамға саҡырып сығарҙы:

– Сөмбөл янына нисек инергә була? Мин уның фамилияһын да белмәйем. Уға нимәләр алып барырға мөмкин?

Римма уға ғәжәпләнеп ҡарап торҙо.

– Ә һинең ни ҡатнашың бар? Ағайың килһен, уның йөрөгән ҡыҙы бит.

– Ағайым бер нәмә лә белмәй. Уның ҡасан ҡайтаһы ла билдәһеҙ. Мин бөгөн китәм, янына кереп сығырмын.

– Унда сит кешеләрҙе индермәйҙәр. Мин бөгөн ун икеләге автобус менән китәм, теләһәң, бергә инербеҙ.

– Ярай, улайһа. Нимәләр алайым, нимә ашай?

– Ул бер нәмә лә ашамай, үҙең ҡара.

Байрас ашығып өйҙәренә ҡайтты ла:

– Әсәй, ҡаймаҡ, бал, ҡайын еләге вареньеһы әҙерлә әле. Мин ун икеләге автобус менән китәм, – тине.

– Бәй, балам, иртәгә ял бит.

– Эштәрем бар, бәлки, кис әйләнеп ҡайтырмын да.

...Римма Байрасҡа халат, башмаҡ кейҙереп, уны үҙе менән больницаға алып инде, постҡа еткәс, дежур шәфҡәт туташына өндәште:

– Һаумыһығыҙ, Валя апай?  Хәлдәрегеҙ нисек? Беҙ туғыҙынсы палатаға инеп сыҡмаҡсы инек.

– Ә, теге ҡыҙ янынамы? – тине шәфҡәт туташы, Байрасты баштан аяҡ күҙҙән кисереп. – Инегеҙ, бәлки, әле йоҡламайҙыр.

Улар ингән палатала ниндәйҙер ҡурҡыныс бер тынлыҡ хөкөм һөрә, бер генә карауатта кеше ята ине.

– Ана, – тине Римма, ымлап.

Байрас әкрен генә ауырыу ятҡан койка янындағы ултырғысҡа ултырҙы. Ишетеү – бер, үҙ күҙҙәрең менән күреү – икенсе...

Сөмбөл әле йоҡламаған, тын ғына ҡарап ята. Уның ҡараштары бер ни аңлатмай, элек ут сәсеп торған күҙҙәрендә бушлыҡ, гүйә, улар – һүнгән ике ҡара күмер. Ирендәре сатнап ярылған, йөҙө көл төҫөнә ингән, үҙе иҫ киткес ябыҡ, ҡулдары уколдан тишелеп, күгәреп бөткән. Байрастың күҙҙәренә йәш тулды, әйтер һүҙ тапманы, телһеҙ ҡалды.

– Сөмбөл, Сөмбөл, ни булды һиңә? Ни эшләп был хәлгә ҡалдың? Әй, Хоҙайым, үҙең ҡотҡар, уның ни ғәйебе бар? – Байрастың йөрәге әрнене, тик ҡысҡырып бер һүҙ әйтә алманы.

Сөмбөл әкрен генә күҙҙәрен йомдо, бер һүҙ өндәшмәне. Үҙенең моңһоу күҙҙәрен оҙон ҡара керпектәре аҫтына йәшерҙе. Ҡара ҡыйғас ҡаштары һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә тибрәлеп ҡуйҙы. Ике аҙнаға беренсе тапҡыр бер тамсы күҙ йәше бәреп сыҡты.

Байрас күпме ултырһа ла, ҡыҙ күҙен башҡа асманы. Дарыу үҙенекен итте – ул йоҡоға китте. Римма, эйелеп, уның иренәнә ниндәйҙер дарыуҙы һөрттө, күҙендәге йәш тамсыһын күреп:

– Һине таныған бит, ә, бәлки, Булат тип уйлағандыр, ана, беренсе тапҡыр күҙ йәше сыҡты. Әгәр илаһа, йөрәге бушар, был хәләтенән сығыр ине. Илай алмай, йөрәге ҡатҡан, ә уға иларға, эсен бушатырға кәрәк, шунһыҙ еңеллек килмәйәсәк, – тине.

Байрас ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына Сөмбөлдөң ҡулын һыйпаны:

– Мин иртәгә тағы киләм. Беҙ һөйләшербеҙ. Һин терелерһең, теләһәң, мин һәр ваҡыт яныңда булырмын, тик терел генә. Римма, мин иртәгә иртән килһәм яраймы?

– Кил, иртәгә мин дежурҙа.

Байрас үҙ бүлмәһенә ҡайтып ятты. Бөгөн күргән хәлдәр уны тетрәндерҙе. Армия сафында хеҙмәт итеп ҡайтһа ла, егеттәр менән һуғышҡаны булһа ла, ул йән тетрәткес ысынбарлыҡ менән беренсе тапҡыр осрашты. Тормоштоң бындай мәрхәмәтһеҙ яҡтары ла бар икән шул.

Икенсе көндө Байрас сәғәт унда больницала ине инде. Римма уны ҡаршы сығып алды.

– Әйҙә, унда Сөмбөлдө ҡараусы әбей ҙә килде. Һин уның менән таныш, ул Сөмбөлдө, терелеп сыҡһа, үҙенә алып ҡайтмаҡсы.

Егет, палатаға ингәс, бер мәлгә юғалып ҡалды. Унан, үҙен ҡулға алып:

– Һаумыһығыҙ, мин Байрас – Сөмбөлдөң дуҫы, – тине.

– Бик яҡшы, мин бик шатмын. Уҙығыҙ, бына бында ултырығыҙ. Минең сығып инәһем бар, – тип юкты бар итеп, Вера коридорға сығып китте. Кисә Римма Байрастың килеүен һөйләгәс, ҡарсыҡ быға бик һөйөнгәйне.

– Сөмбөл, – тине Байрас, ҡыҙ янына сүгәләп. Йомшаҡ ҡына итеп ябыҡ бармаҡтарына ҡағылды. – Урамда матур итеп ҡар яуа, күргең киләме? Әйҙә, күтәреп тәҙрә янына алып барам. Капельницалағы дарыу тамып бөтһөн дә, мин һиңә урамды күрһәтермен. Һин асыуланма, Сөмбөл, беҙ бит һинең больницала икәнеңде белмәнек. «Үпкәләп сығып китте, бүлмәһенә лә ҡайтмай», – ти һине ағайым. Һинең бында икәнеңде ул белмәй. Бөгөн үк һинең янға килеп етер. Һин терел генә, һин терелгәс, барыһын да хәл итербеҙ, баш бөтөрлөк бер нәмә лә юҡ.

Сөмбөлдөң күҙҙәренә йәш тулды, ҡуйы ике ҡаш бергә килеп ҡушылды, оҙон керпектәр йәш тамсыларын күтәреп тора алманы, йәштәре йылға булып аға башланы.

Байрас Сөмбөлдөң һалҡын ҡулдарын устарына алып ҡыҫты:

– Ила, ила, эсең бушағансы ила, үҙеңә еңел булып ҡалыр, – тине, шунан Сөмбөлдө одеялы менән төрөп күтәреп, тәҙрә янына алып килде. – Ана, ҡара, тышта ҡар яуа, оҙаҡламай ҡыш етер, унан һуң – Яңы йыл.

Сөмбөл, йәш балалай үкһей-үкһей, тәҙрәгә ҡараны, тышта күҙ яуын алырлыҡ аҡлыҡ. Ул бик оҙаҡ иланы. Байрас уны туҡтатманы, уның битенән, сәстәренән үпте, ирендәре менән уның күҙ йәштәрен сүпләне. Ул ҡыҙҙы әкрен генә урынына килтереп һалды.

– Барыһы ла яҡшы буласаҡ, ышан миңә.

Сөмбөл үкһей-үкһей йоҡоға китте.

Байрас, больницанан сыҡҡас та, инде килгәндер тип, туп-тура ағаһы торған дөйөм ятаҡҡа китте. Улар ишектән икеһе бер ваҡытта килеп инде.

– О, Байрас, сәләм! Байрам менән! Һин ни эшләп иртә килдең әле, әллә ҡунаҡ ҡыҙҙары ҡайтманымы?

Ағаһының кәйефе бик шәп күренә, ҡыҙғаныс, боҙорға тура киләсәк.

– Нисек унда, еңгә урынындамы? Эштәр бештеме?

– Барыһы ла шәп. Ағайыңды ҡотлай алаһың. Яңы йылға өйләнәм, шулай һөйләштек, ул риза. Ҡайтып, атайҙар менән һөйләшергә лә киләһе аҙнаға яусы ебәрергә иҫәп.

– Ашыҡма әле, ағай. Аңлайым, һин бөгөн бик бәхетле, тик мин һине ҡотлай алмайым. Миңә шуны аңлат: һин Сөмбөлдөң ауырлы икәнен белдеңме?

– Һуң, белдеңме, тип, беләм, шул турала һөйләшкәс сығып юғалды бит инде.

– Ә һин уға нимә тинең?

– Нимә тим, башҡаны яратам, ул бала миңә кәрәкмәй, мин һиңә өйләнмәйем, тинем. Аңлағандыр.

– Эйе, аңлаған, һин уға бик яҡшы аңлатҡанһың. Сөмбөл ике аҙна реанимацияла үлем хәлендә ята, ә һин өйләнергә йөрөйһөң... Һин бит, ағай, һәр ваҡыт аҡыл менән уйлай инең, шундай проблемаларың була тороп, уның ҡайҙа юғалғанын да белмәйенсә, нисек өйләнергә йыйындың? Һин уның менән аҙна буйы айырылмай инең, бер кемде яҡын ебәрмәнең, ҡоҙғон кеүек, янынан китмәнең. Йәнәшәңдә шундай матур ҡурсаҡ кеүек ҡыҙ булғанға бик ғорурлана инең. Ана хәҙер барып ҡара: тыуасаҡ балаң менән икәүләп үлем хәлендә ята. Кәрәкмәгәс, яратмағас, ниңә ҡағылдың уға? Ул бит үҙе лә сабый ғына.

Байрас, барыһын әйтеп бөтөрҙөм, тигәндәй, башын тотоп урындыҡҡа килеп ултырҙы. Ағаһы, йәшен һуҡҡан кеүек, ҡатып тик торҙо, аҙаҡтан, көскә телгә килеп:

– Ни булған уға, кешесә аңлат, мин бер ни аңламайым, – тип ҡыҙғаныс тауыш менән һорап ҡуйҙы.

– Аңларһың, ана, больницаға барып ҡара, унан уға ни булғанын мин һинән һорармын. Римма янына  бар, бөгөн дежурҙа ул, һиңә барыһын аңлатыр.

...Булат, уңайһыҙланып ҡына, нимәләр яҙып ултырған Римма янына килеп баҫты.

– Һаумы, Римма. Байрас мине һинең янына ебәрҙе...

Римма, таныш тауыш ишетеп, башын күтәрҙе. Уның ҡаршыһында ҡаушаған, аптыраған ҡиәфәттә Булат баҫып тора ине.

– Һаумы, Булат ағай. Байрас ебәрмәһә, килмәҫ инеңме? Һине бит, өйләнергә киткән, тинеләр.

– Эйе, Яңы йыл тирәһенә тигән инек тә, – тине Булат, тотлоға яҙып. – Ҡайҙа ята ул, уны күрергә буламы?

– Әйҙә, алып инәм, тик уята күрмә, йоҡлаһын.

Булат карауат янына килеп баҫты. Ул Сөмбөлдө былай хәлдә күрермен тип уйына ла килтермәгәйне. Римма уның хәлен аңланы, ахырыһы, янына ултырғыс ҡуйҙы:

– Ултыр, йығылып китмә тағы, – тине әкрен генә. – Бигерәк ебегән инде был ир заты. Күр, таныйһыңмы? Ә бит улар икәү, икеһе лә шундай хәлдә.

Сөмбөл былай һыныр тип кем уйлаған? Булат уны ҡара ҡарлуғаска тиңләй ине. Сөнки Сөмбөл һәр ваҡыт сыр-сыр килеп, юҡтан да ҡыҙыҡ табып көлөргә тора. Ул һәр ерҙә үҙенең сая, йор теле менән юҡ-бар һөйләп, кешеләрҙең кәйефен күтәрә, ваҡиғаларҙың үҙәгендә ҡайнай, уның янында һәр кемгә рәхәт, күңелле. Уның кеүек шылтыратып көлә белгән кеше осратҡаны булманы, ул бөтә кешене үҙ ауыҙына ҡаратып тота ине. Булат ҡайһы саҡта иҫе китеп, онотолоп уны күҙәтә: Сөмбөл үҙенең баҡса балаларынан әллә ни айырылмай ҙа кеүек. Ләкин ни өсөн тап уның янына йөрөүен Булат үҙе лә аңлата алмаҫ ине. Эштән ҡайтыуға, аяҡтары үҙенән-үҙе ҡыҙ торған бүлмәгә илтте. Кистәрен уны бишенсе ҡатҡа тиклем күтәреп алып менә лә, баҫҡыста таңға тиклем донъяларын онотоп үбешәләр. Ҡыҙҙың ирендәре шундай татлы, уларҙан айырылғыһы килмәй. Иртәнге яҡта ғына ҡыҙҙы бүлмәһенә оҙатып төшөп китә. Былар барыһы ла ваҡытлыса, ваҡыт уҙҙырыр өсөн, тип үҙ-үҙен тынысландырырға тырыша. Уның Фәриҙәһе бар, уға шундай ҡатын ғына кәрәк. Бына, исмаһам, ул тиң дә, пар ҙа... Быға тиклем шулай уйланы, былай булыр тип башына ла килтермәне.

Сөмбөлдөң алһыу йөҙө, ҡара ҡаштары, оҙон керпектәре, ул яратҡан сейә ирендәр хәҙер башҡа... Көл төҫөнә ингән йөҙ, моңһоу күҙҙәре, ирендәре әҙ генә ҡыймылдаһа, ярғыланған яраларҙан ҡан һарҡыр кеүек. Күмәс кеүек йомшаҡ

ҡулдар тире менән һөйәккә ҡалған, энә ҡаҙаған ерҙәр күгәргән. Булаттың башы әйләнә, күңеле болғана башланы. Ул әкрен генә тороп коридорға сыҡты, һалҡын диуарға һөйәлде. Йөҙө ағарҙы, ҡулдары ҡалтыранды, боғаҙынаниҙер ултырҙы, һауа етмәй башланы, күлдәк иҙеүен ысҡындырҙы. Уның хәлен күреп, Римма урынынан һикереп торҙо:

– Булат ағай, ни булды һиңә? Кил, ултыр бында, – тип уны кушеткаға ултыртты.

– Һауа етмәй, әллә ни булды, – тине Булат, ике ҡулы менән башын ҡыҫып тотоп.

Римма стакан менән һыу һондо.

– Мә, эс, тынyслан. Ҡан баҫымың күтәрелгәндер, хәҙер дарыу бирәм.

– Римма, әйт әле, ул тереләсәкме? Ул үлмәйәсәк бит, дөрөҫөн әйт, – тип егет ялбарыулы күҙҙәре менән Риммаға текәлде.

– Белмәйем, ике аҙна инде бер ниндәй үҙгәреш юҡ. Үҙең күрәһең, хәле шәптән түгел, ул һинең ярҙамыңа мохтаж. Яңғыҙы ғына еңә алмаясаҡ, һин өйләнергә ашыҡмаһаң ине...

Улар өндәшмәй оҙаҡ ултырҙы.

– Бар, ҡайт инде, Булат ағай. Иртәгә килерһең, уянғас, һөйләшеп ҡарарһың, йыуатырһың. Уның бер кем менән һөйләшкәне юҡ, телһеҙ кеше кеүек, бер нөктәгә ҡарап тик ята, бәлки, һиңә берәй һүҙ әйтер. Һин уны хәҙер ташлама инде, был мәрхәмәтһеҙлек бит.

Икенсе көндө эшкә икенсе сменаға булғанға, Булат иртәнге яҡта, бар көсөн ус төбөнә ҡыҫып, Сөмбөл янына килде. Ҡыҙ тыныс ҡына бер нөктәгә ҡарап ята ине.

– Һаумы, Сөмбөл, хәлең нисек? – тине. Тауышы ҡалтырап, әллә нисек килеп сыҡты. – Мин кисә лә килгәйнем, һин йоҡлай инең, бөгөн бына, эшкә икенсе сменаға булғас, иртән килдем. Һиңә нимә алып киләйем? Нимә ашағың килә? Әйт, ситенһенмә. Сөмбөл, мин бит бер ни ҙә белмәнем, белһәм, әллә ҡасан килер инем. Һин миңә үпкәләмә, йәме. Һин терелгәс, һәйбәтләп ултырып һөйләшербеҙ, һин бит аҡыллы ҡыҙ, барыһын да аңлашырбыҙ, тиҙерәк терел генә.

Сөмбөл, бер ни өндәшмәй, бер нөктәгә текәлеп ятыуын белде. Йәнһеҙ бер кешегә оҡшаһа ла, ул үҙ уйҙары, үҙ донъяһы эсендә ҡайнаны. «Ниңә килгән, уның йәмһеҙ, теткеләнгән күлдәк кеүек таушалған йөҙөн, йәнен күрергәме? Һау, сибәр сағында ла яратмағанды, хәҙер бөтөнләй яратмайҙыр. Ике йөҙлө, яратмайым, башҡаны яратам, тине. Ә үҙе уны кистәр буйы иркәләй, наҙлай торғайны. Ҡарлуғасым, ирендәрең бигерәк татлы, тип һурып үбә-үбә, аҡылдан шаштыраһың һин мине, айырылып булмай һинән, тиер ине. Булат, етер инде, ирендәрем шешеп, бәлештәй ҡабарҙы, иртәгә эшкә нисек барырмын, тигәс кенә туҡтай. Ул бит уны бар егеттәрҙән өҫтөн ҡуйҙы: эсмәй, тартмай, аҡыллы, уның бер генә етешмәгән яғы ла юҡ кеүек. Үҙ атаһы эскенән үлгәнлектән, Сөмбөл эсмәгән кешеләрҙе Алла урынына күрә ине. Ул Булатҡа иң ышаныслы, иң яҡын кешеһенә ҡарағандай ҡараны, ул уға шул тиклем ышанды, яратты. Ул ҡағылыуға, тәндәре семерҙәп китә, баштары әйләнә башлай. Шундай егеттең уның менән йөрөүенә ғорурланды. Уның янында үҙен бәләкәй бала кеүек хис итә, күбәләктәй оса, бәхетенән башы әйләнә, гел көлгөһө, йырлағыһы килә ине. Ошо бәхет бер кистә селпәрәмә килде лә ҡуйҙы. Сөмбөлдөң:

– Кит, башҡа килмә, ҡарама миңә. Һинең өсөн мин юҡ инде. Һин башҡаныҡы, яҡын килмә! – тип ҡысҡырғыһы килде. Ирендәре, шытырҙап, бер-береһенә йәбеште, күңеле өҙгөләнде, йәне әрнене, тик тауышы ғына сыҡманы. Атаһының иҫән саҡта яратып йырлай торған йыры бар ине: «Әжәлдәрең етһә, әйт үҙемә, тапай-тапай үҙем күмермен». Шул йыр ҡолағында яңғыраны ла яңғыраны. Сөмбөл

күҙҙәрен йомдо. Әллә йоҡоға китеүе булды, әллә ауыр уйҙар уйлап аҡылдан яҙмаһын тип, уны был ғазаптарҙан ҡотҡарғыһы килеп, Хоҙай ярҙамға килде: әллә ниндәй өйөрмә уны үҙе менән өйрөлтөп алып китте. Ҡыҙ күңелендә ниндәйҙер еңеллек тойҙо, болотҡа ултырып, тирбәлә-тирбәлә ҡайҙалыр осто ла осто. Әллә ниндәй көстәр уны матур яланға, шишмә буйына алып килде. Сылтырап аҡҡан шишмәнән ҡомһоҙланып һыу эсте. Шишмә һыуы уның янған йөрәген, йән әрнеүен баҫты. Һыуҙың икенсе ярынан, уға ҡарап, ап-аҡтан кейенгән аҡ һаҡаллы бер бабай йылмая ине. Ул йыраҡтан килгән тауыш менән Сөмбөлгә өндәште:

– Эс, ҡыҙым, эс. Һин оҙаҡламай терелерһең. Һинең бәхетең алда әле. Оҙаҡламай улың тыуыр, мөхәббәтең янында. Һин бирешмә, сабыр бул. Ә хәҙер бар, өйөңә ҡайт, һине унда көтәләр.

Сөмбөл уянғанда, бөтә ер ҡараңғылыҡҡа сумған, янында бер кем дә юҡ ине. Ул үҙендә ниндәйҙер көс барлыҡҡа килеүен тойҙо, ҡуҙғалып ҡараны. Кинәт уның бик ныҡ ашағыһы килде. Күргән төшөн иҫенә төшөрҙө. Ниндәй матур ялан, ниндәй тәмле һыу... Ә бабай, бабай нимә тине? Йә, Хоҙай, ул бит, улың тыуасаҡ, тине. Сөмбөл әкрен генә эсен һыйпап ҡараны. Эсе бер аҙ беленә башлаған. Уның ашағыһы киләлер, эйе, беҙ асыҡтыҡ, ахыры, улым.

Сөмбөлдөң күҙенә йоҡо инмәне, төнө буйы керпек тә ҡаҡманы. Иртән иртүк Верочка килеп етте. Ғәҙәттәгесә, кер-керешләй йылмайып:

– Ҡояшым, хәлең нисек, нисек йоҡланың? – тип һораны. – Тышта һалҡын, тиҙҙән ҡыш килә, һин сығыуға, ысын ҡыш буласаҡ.

– Верочка, минең бик ашағым килә, икмәк булһа ла бир әле.

Ике аҙна буйы телһеҙ ятҡан Сөмбөлдөң телгә килеүе, ашарға һорауы Верочканы һиҫкәндереп ебәрҙе.

– Мөғжизә, мөғжизә бит: үҙе һөйләшә, үҙе ашарға һорай! – тип бот сапты. – Хәҙер, ҡояшым, хәҙер, – тип ишеккә йүгерҙе, унан ҡырт боролоп кире килде. – Һөйөнөстән башым эшләмәй. Мин бит һиңә һурпа алып килдем, әйҙә, икмәкләп аша.

Верочка уны мендәргә һөйәп ултыртып, һурпа бирҙе. Сөмбөл, тырыша-тырыша, бер телем икмәк менән бер кәсә һурпа эсте.

Иртәнге сәғәт унда палатаға Булат килеп инде, улар бөгөн күҙгә-күҙ осрашты. Верочка, ҡамасауларға теләмәйенсә, коридорға сығып китте. Сөмбөл бөгөн күҙҙәрен ҡуйы керпектәре аҫтына йәшермәне. Булаттың «Һаумы» тигәненә керпек ҡаҡты.

– Хәлең нисек? Мин һиңә алмалар алып килдем, тағы нимә алып киләйем, һин әйт кенә.

Сөмбөл, бөтә көсөн йыйып, үҙенең ҡарарын әйтергә уйланы. Ул үҙе өсөн һөҙөмтә сығарғайны.

– Булат, башҡа минең яныма килеп йөрөмә, кәрәкмәй. Йәлләмә мине. Нисек тә үҙем йырып сығырмын. Бар кит, минең барлығымды онот.

Булат ҡыҙҙан быңдай һүҙҙәр көтмәгәйне, ни әйтергә лә белмәне. Сөмбөл илар, асыуланыр, үпкәләр, шулай нисек тә яйланыр әле, тип уйлағайны. Ә ул битәрләмәне, әрләһә, Булатҡа еңелерәк тә булыр ине. Сөмбөлдөң көйҙөргөс ҡарашы күҙ алдынан китмәне. Ҡыҙ, кинәт балалығын юғалтып, олоғайғайны.

Булат һалҡын урамға сыҡты, әкрен генә дөйөм ятаҡҡа табан атланы, ҡайҙалыр йыраҡта йыр яңғыраны:

*Саналар ҡуҙғалып киттеләр,*
*Йөрәкте өҙҙөрөп үттеләр.*
*Тағы бер текәлеп ҡарайымсы,*
*Рәсемеңде күңелемә һалайымсы.*

* * *

Сөмбөл әкренләп булһа ла терелә башланы. Әсәһе килеп йөрөнө, Верочка көн дә янында булды. Аҙна башында, сумка күтәреп, Байрас килеп инде. Үҙен шаян, көр күңелле итеп тоторға тырышты. Ул, Сөмбөл янына ағайым йөрөйҙөр, икәүләп йөрөһәк, килешмәҫ, тип быға тиклем килмәгәйне. Был ялда, ауылға ҡайтҡас, ағаһы менән һөйләште. Ағаһының больницаға башҡа барып йөрөмәүен ишеткәс:

– Улайһа, Сөмбөл янына үҙем барам, миңә ярайҙыр бит? Минең уның алдында бер ғәйебем дә юҡ, – тине.

Сөмбөл сабыр ғына йылмая, Байрас менән һөйләшә башланы. Булат тураһында бер һүҙ ҙә ҡуҙғатманылар. Байрас Верочка менән дә уртаҡ тел тапты, кис менән икеһе бергә ҡайтып киттеләр.

– Әйҙә, сәй эсеп сығырһың, һин эштән ҡайтып ашамағанһыңдыр, – тип бер көндө Верочка Байрасты өйөнә саҡырҙы.

Верочка бер бүлмәле бәләкәй генә фатирҙа йәшәй икән. Бүлмәһе бик бөхтә йыйыштырылған, һәр әйбер зауыҡ менән эшләнгән, һәр нәмә үҙ урынында. Хужабикә егетте бик тәмле аш, сәй менән һыйланы. Көтмәгәндә һорап ҡуйҙы:

– Әйт әле, үҫкәнем, ағайың менән Сөмбөл тураһында һин ни уйлайһың?

– Ни әйтергә лә белмәйем, үҙем дә аптырайым. Ағай Яңы йылда өйләнергә йыйына ине. Сөмбөлгә түгел, башҡаға. Хәҙер ул да нишләргә белмәй. Сөмбөл бит уға килеп йөрөмәҫкә ҡушҡан.

– Эйе шул, мин ғәрип түгел, миңә уның йәлләүе кәрәкмәй, ти. Беләһеңме, ул бит әсәһенән ҡурҡа, бала тураһында ла белһә, өйҙән ҡыуып сығарыр, бала менән ҡайҙа барырмын, тип бик ҡайғыра. Больницанан сыҡҡас, балаһын алдырмағайы, уға хәҙер аборт яһатырға ла һуң. Әсәһе, берәй әбейгә алып барып, берәй нәмә яһатһа, унан башҡа балаһы булмаһа? Бына шуларҙы уйлайым да ҡурҡам. Минең дә балам булманы, берҙе юғалттым, башҡаны Хоҙай насип итмәне. Хәҙер, бына, япа-яңғыҙмын. Бала тапмай торған ҡатын бер иргә лә кәрәкмәй. Мин Сөмбөл өсөн бик ҡайғырам, әле уның ауыр көндәре алда, ауылда бит ирһеҙ бала тапҡан ҡатынға бөтөнләй икенсе ҡараш.

Былар тураһында Байрас үҙе лә уйлай. Ағаһы ла уйлайҙыр, уға ла хәҙер бик ауырҙыр. Был аҙнала Фәриҙәгә яусы ебәрергә тейеш ине, ул хаҡта һүҙ ҙә ҡуҙғатманы, яусы ла ебәрмәне.

Сөмбөлдөң больницаға ингәненә бер ай булды. Ял көндө әсәһе килгәс:

– Әсәй, өйгә ҡайтҡым, мунса ингем килә. Һин мине алып сыҡ бынан, – тип үтенде.

Әсәһе лә:

– Ярай, балам, табип сығарһа, иртәгә күрше ағайың менән һөйләшәм дә, машина менән килеп алырбыҙ. Бик оҙаҡ яттың шул, балам, бәлки, өйҙә тиҙерәк терелерһең. Битеңдә ҡан әҫәре юҡ, өйҙә яҡшыраҡ булыр, – тип шатланып, ҡыҙы менән ризалашты. Бер аҙҙан табип менән һөйләшеп тә килде:

– Сығарам, ләкин бер аҙнанан ҡабат күренергә килергә тейеш, тине табибың. Ярай, ҡыҙым, һин әҙерләнә тор, иртәгә килеп алам, – тип әсәһе ҡайтып китте.

Киске яҡҡа Вера әбей килде.

– Верочка, иртәгә мин өйгә ҡайтам, әсәйем килеп ала. Шундай туйҙым бында ятыуҙан! Верочка, әйҙә, һин дә беҙгә ҡайт, мунса инеп, ҡунаҡ булып китерһең. Һин хәҙер миңә апайым кеүек яҡын. Һин бит мине ташламаҫһың, эйеме, – тип Сөмбөл уны ҡосаҡлап үпте. – Мин һиңә шул тиклем күнектем, һинән башҡа нишләрмен инде?

Верочка ла Сөмбөлгә бик эйәләште, уны үҙ балаһылай яратты. Уның бит башҡа бер кеме юҡ. Ҡыҙҙың алдағы яҙмышы билдәһеҙ шул, әсәһе, туғандары бала тураһында белһә, ни тиерҙәр?

– Юҡ, ҡояшым, мин һине үлгәнсе ташламайым. Терелгәс, эшкә сығаһың бар. Бына һиңә адресымды бирәм, тура үҙемә кил. Бала тураһында әсәйеңә әйттеңме әллә?

– Юҡ. Әгәр әсәйем белһә, мине үлтерәсәк. Верочка, был хаҡта әйтеү түгел, уйларға ла ҡурҡам.

– Ҡара әле, ҡояшым, ни генә булмаһын, балаға тейә күрмә, харап итмә. Уны һиңә Хоҙай насип иткән, Хоҙайға ҡаршы барһаң, башҡа бирмәҫ. Яңылыш бер була, икенсе яңылыш яһай күрмә. Ни булһа ла, үҙемә кил. Мин һиңә һәр ваҡыт ярҙам итермен.

Икенсе көндө әсәһе Сөмбөлдө күрше ағай менән килеп алды. Өйгә ҡайтыу шатлығынан ҡыҙҙың күңеле тулды. Тыуған ауылын, өйөн шундай һағынған! Сөмбөл үҙенең яратҡан урыны – тәҙрә төбөнә килеп ултырҙы. Тышта матур итеп, һалмаҡ ҡына ҡар яуа. Бер ай ваҡыт эсендә бөтә донъя үҙгәрҙе. Элекке Сөмбөл булһа, уйнап-һикереп, урамға сығып йүгерер, аҡ ҡарға әллә ниндәй эҙҙәр төшөрөп, эсе ҡатып көлөр ине. Ә бөгөн ул яуған ҡарҙа ла бары ниндәйҙер һағыш, моңһоулоҡ күрә.

Ашағас, тиҙерәк урамға сығырға ашыҡты, күңеле болғаныуҙан, әсәһенең ниҙә булһа һиҙенеүенән ҡурҡты. Үҙҙәренең һарай артындағы әрәмәлеккә табан китте. Бәләкәй генә йылғаны боҙ, ҡырпаҡ ҡар ҡаплаған. Ниндәй аҡлыҡ, ниндәй таҙалыҡ, ниндәй моңһоу тынлыҡ...

*Үткән ҡышта һин бала инең,*
*Томоролоп алъа саба инең.*
*Ә был ҡышта, ә был ҡышта*
*Ник башыңды аҫҡа эйҙең?*
*Ҡар бөртөктәрен күтәрә*
*Алмаймы әллә иңең?*

...Йома көн етте. Һәр ваҡыттағыса, йәштәр бөгөн дә вокзалда йыйылды, һәр ваҡыттағыса, автобусҡа шыплап халыҡ тулды. Ауылға ҡайтып еткәнсе, халыҡ йылына, ҡыҙарына-бүртенә, унан-бынан шаян һүҙҙәр сыға башлай, егеттәр ҡыҙҙарҙы үртәй, тегеләре лә яуапһыҙ ҡалмай.

Автобус ҡайтып етеп, ишектәрен асыу менән, бөркөлөп пар сыға, ҡыҙарып-бешкән халыҡ урамға ағыла, ултырып түгел, автобус артынан йүгереп ҡайтҡандар тиерһең.

Булат менән Байрас, һөйләшә-һөйләшә, өйҙәренә юл алды. Ни тиклем генә елбәҙәк күренһә лә, һуңғы ваҡытта Байрас уйсанланып, етдиләнеп китте, ә Булат бөтөнләй иләҫ-миләҫ йөрөй.

– Ағай, әйҙә, өйгә ингәнсе, ныҡлап һөйләшәйек әле. Һин ни уйлап йөрөйһөң? Сөмбөл бит һәр ваҡыт больницала ятмаҫ, ҡайтҡас, әсәһе, туғандары беләсәк, тауыш сығасаҡ. Бала менән ҡайҙа барыр ул? Өйлән, тип бында килһәләр, һин, өйләнмәйем, тиһәң, ул ваҡытта уға аҫылынырға ғына ҡала...

– Өйлән, тиеүе еңел. Мине инде ике аҙна Фәриҙә көтә. Яусы ебәрәм тигән инем бит. Унан, ул елбәҙәк Сөмбөлдән ниндәй ҡатын сыҡһын, нисек уның менән донъя көтөргә кәрәк. Көн уйлайым, төн уйлайым, ни уйлап табырға ғына белмәйем. Минең бөтә хыялым – Фәриҙә, мин уға ғына өйләнергә теләйем. Аңлайым: Сөмбөл ҡыҙғаныс. Теге көндө больницала күргәс, бөтә йәнем тетрәнде, мин уны улай уҡ һыныр тип уйламағайным. Ул бит мине үҙе кире ҡаҡты,

һөйләшергә тип барғас, әйләнеп ятты, боролоп та ҡараманы. Бик йәлләһәң, үҙең өйлән, кешегә кәңәш биреү еңел ул. Үҙ башыңа төшһә, нишләр инең икән?!

– Минме, ағай, минән генә торһа, ул риза булһа, бөгөн үк өйләнер инем. Эйе, әгәр һинеке түгел, башҡа кешенеке булһа ла, өйләнер инем. Кем балаһы икәнен эт тә белмәç ине әле. Һин ашыҡтың, ә мин һуңға ҡалдым. Бөтә бәлә шунда, ағай, мин – уны, ул һине ярата, ә һин – Фәриҙәне. Тыуасаҡ гонаһһыҙ сабыйҙы кем яратыр? Ул бит беҙҙең ҡан, ул бит беҙгә оҡшаясаҡ. Эй, ағай, ағай...

Булаттың башына күçәк менән килтереп һуҡҡандай булды. Ул энеһенән былдай һүҙҙәр ишетермен тип уйламағайны. Елғыуар энеһе кемде лә булһа ярата алыр, тип башына ла килтермәгәйне. Тимәк, Сөмбөлгә генә түгел, энеһенең дә юлына арҡыры төшкән, уның алдына ла ғәйепле булып сыҡты. Ул, бер аҙ өндәшмәй торғас:

– Хәҙер нишләйбеҙ инде? – тине, ауыр һулап.

– Әсәйҙәргә үҙең аңлат, тик минең Сөмбөлдө бала күтәртеп урамда йөрөтәһем килмәй. Мин уны бында алып ҡайтам, бала тыуғансы булһа ла, бында йәшәһен, исмаһам, «ирһеҙ бала тапҡан» исемен күтәрмәç. Ә һин туйыңды бер аҙ һуңыраҡҡа күсерергә тырыш, бала тыуғансы ашыҡма. Атайҙар менән дә һөйләшергә кәрәк, беҙ ҡапсыҡта ятмай ул, барыбер тишеп сыға, белеп торһондар.

Үҙ йомошо менән ишек алдына сыҡҡан Әлфис, кешеләр һөйләшкәнен ишетеп, ҡапҡа төбөнә килеп баçты. Ағалары ҡайтҡан икән, ҡыҙыҡ, бында ҡасып ни һөйләшәләр икән, тип ҡолағын ярыҡҡа ҡуйҙы. Бер аҙ тыңлағас, әһә, былай икән, тип өйгә йүгерҙе.

– Атай, әсәй, бәләкәй ағай балалы ҡатын алып ҡайта.

– Ни һөйләйһең һин, кем әйтте?

– Ағайҙар ҡапҡа төбөндә һөйләшеп ултыра. Байрас ағай оло ағайға: «Һин теләһә нишлә, мин уны өйгә алып ҡайтам», – тине.

– Ә балаһы ҡайҙан сыҡҡан?

– Белмәйем, «урамда йөрөй балаһы менән» тине, ахыры, һалҡын бит, оҙаҡ тыңлап тора алманым.

Әсәһе менән атаһы, бер-береһенә ҡарашып, аптырап ҡалды.

– Суҡынсыҡ малай! Кермәгән тишегең юҡ, сыбыҡһыҙ радио, – тип атаһы асыуланып алды.

Әсәһе:

– Балалы ҡатын алмаһа, ҡыҙҙар бөткәнме, йөрөй торғас, килеп ҡапҡан икән... – тип һуҡранды.

– Бар, улым, һин инеп ят, – тине атаһы Әлфискә. – Иртәгә иртәрәк тороrһоң, һуғым һуябыҙ, үгеҙ йығырға кеше кәрәк, һин ҡойроғон бороп торорһоң.

– Иртә бит әле, ағайҙар ҙа инмәгән.

– Улайһа, китер сумкаңды, көндәлегеңде тикшерәйек, ниҙәр тейәп ҡайттың икән?

Әлфис шым ғына үҙ бүлмәһенә инеп китте. Хәҙер инде улының сыҡмаçын атаһы яҡшы белә. Кесе улының ене һөймәгән шөғөлө – уҡыу. Дәрес әҙерләргә ултырһа, бөтә уҡытыусыға, дәреслек яҙыусыларға, ғөмүмән, уҡыуҙы уйлап тапҡан кешегә асыулана, ҡулынан килһә, уларҙың бөтәһен бер ҡаҙанға һалып ҡайнатыр ине.

Булат менән Байрас ишектә күренеүгә, ата-әсә һораулы ҡараш менән уларға текәлде.

– Нишләп бик оҙаҡ, аш һыуынып бөттө бит. Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ.

Һиҙелеп тора: ниҙер булған. Аталары, тынслап ашаһындар, бәлки, үҙҙәре һүҙ башлар, тип ашыҡтырмаçҡа уйланы. Тыныс ҡына киске ашты ашанылар,

улдары һүҙ башларға ҡабаланманы. Шәфҡәт ағайҙың сабырлығы бөтөп, асыулы ҡарашын Байрасҡа текәне:

– Шунан, донъяла ниҙәр бар? Бәлки, һөйләрһегеҙ?

– Ниңә миңә ҡарайһың? Донъяға ни булһын, ул үҙ урынында.

– Ә ниндәй ҡатын бала эйәртеп урамда йөрөй?

Байрас менән Булат бер-береһенә ҡараштлы.

– Атай, балалы ҡатындар менән урам тулған, ниндәй ҡатын ҡыҙыҡһындыра һине? Хәҙер кис инде, ерәү ҙә юҡтыр.

Шәфҡәт ағай, ҡыҙа барыуын һиҙеп, үҙен ҡулға алырға тырышты. Иләҫ-миләҫ бала һүҙенә ышанып, ҡаш яһайым тип күҙ сығармаһын тағы.

– Улым, һиҙеп торам, нимәлер булған, икегеҙ ҙә балтағыҙ һыуға төшкән кешеләр кеүек ултыраһығыҙ. Үткән ҡайтыуығыҙҙа ла килде-китте йөрөнөгөҙ. Ситтән ишетелгәнсе, үҙегеҙ һөйләгеҙ. Йә, нимә ҡырҙығыҙ?

Аталары ике һөйләргә яратмай, улдары ла уның бер ҡарашынан ни әйтергә теләүен аңлай. Өйҙә ҡаршы һөйләү юҡ, малайҙар бала саҡтан шулай тәрбиәләнгән. Аталарын хөрмәт итәләр, еткән егет булһалар ҙа, бер аҙ шөрләйҙәр ҙә.

Малайҙар, кем беренсе тигәндәй, бер-береһенә ҡарап ултыра бирҙе. Аталары тағы бер ҡабат тамаҡ ҡырҙы.

– Йә, ҡайһығыҙ башлай?

– Атай, нисек әйтергә, шундай сетерекле хәл килеп сыҡты. Ҡыҫҡаһы, бер ҡыҙ бала көтә, уға өйләнеп тә булмай, ташлап та... Бына шул. Шуға ағай менән баш ватабыҙ, нишләргә лә белмәйбеҙ, – тине Байрас, ҡаушап.

– Һеҙҙең бында ни ҡатнашығыҙ бар?

– Һуң, ул беҙҙеке, дөрөҫөрәге, ағайымдыҡы.

Атаһы Булатҡа ҡараны, ул, сейәләй ҡыҙарып, башын аҫҡа эйҙе. Атаһы:

– Булат, аңлатып бир, – тип ҡырыҫ ҡына әйтеп ҡуйҙы.

– Атай, яңылышлыҡ менән булды, мин теләмәгәйнем. Мин башҡа ҡыҙҙың ҡулын һораным.

Булат атаһы нисек әйтһә, шулай буласағын аңланы.

– Бала кемдеке? – тине атаһы ҡоро ғына.

– Минеке.

– Һинеке булһа, алып ҡайт та өйлән.

– Юҡ, мин икенсе берәүҙе яратам. Беҙ Яңы йылға уның менән туй яһарға һөйләштек.

Һүҙгә әсәһе лә ҡушылды:

– Ул да бит – кеше балаһы, яратмағас, ник харап иттең һуң?

Атаһы, ауыр йоҙроҡтарын өҫтәлгә һалып, уйсан ҡырыҫ тауыш менән:

– Ә хәҙер мине тыңлағыҙ, – тип һүҙен дауам итте. – Иҫән сағымда Арыҫлановтар урамда йәтим, уйнаштан тыуған бала исеме күтәреп йөрөмәйәсәк. Мин һинән, улым, бындайҙы көтмәгәйнем. Ҡылған эшеңә яуап та бирә бел, янына ятҡансы уйларға ине. Өйгә алып ҡайт. Иртәгә һуғым һуябыҙ, Яңы йылға туй яһарбыҙ.

Булат, атаһының әйткән һүҙҙәрен ишеткәс, бөтөнләй юғалып ҡалды, башын аҫҡа эйеп:

– Юҡ, атай, булмай, – тип бышылданы.

– Ярай, өйләнмә, көсләп өйләндерә алмайым. Ләкин ул баланы бында ҡайтарып ҡуй, минең бер түгел, ун тамаҡ туйҙырырлыҡ мөмкинлегем бар.

Шулай итеп, атаһы Булаттың алдағы яҙмышына мөһөр һуҡты.

Булат Фәриҙәгә: «Көтөлмәгән хәлдәр килеп сыҡты, киләһе көҙгә өйләнешербеҙ», – тип ғәфү үтенеп хат яҙҙы. Ул әлегә өмөтөн өҙмәне.

* * *

Беҙ ҡапсыҡта ятмай – Сөмбөлдөң хәлен дөйөм ятаҡта барыһы ла белде. Сөмбөл бүлмәләш ҡыҙҙары эштә саҡта әйберҙәрен йыйып, үҙе эшләгән балалар баҡсаһына килде. Ул дөйөм ятаҡҡа ҡайтырға, унда күренергә теләмәне. Эштән һуң бында ҡунып ҡала торған булды.

– Ҡояшым, иртәгә үк миңә кәс, мин һине һағынып бөттөм. Тағы бер яңылыҡ: һине бит Байрас эҙләй, больницаға барған – һин юҡ. Миңә килде, күп итеп күстәнәс алып килгән, һиңә ашатырға ҡушты. – Верочканың хәбәре күп йыйылған, һөйләне лә һөйләне. Икенсе көндө Сөмбөлдө үҙенә алып ҡайтып китте.

Сөмбөл үҙенең ауырлы булыуын ни тиклем генә йәшермәһен, Яңы йыл алдынан ҡайтҡас, әсәһе туранан-тура һораны:

– Ярай, ҡайттың әле, төн сыҡҡансы үләм тип торам. Кисә Хәҙисә апайың килгәйне. Һине, больницаға бала төшөрөргә ингән, шунда саҡ үлемдән ҡалған, тип ишеткән. Ниңә кисә ҡайтманың, һин бит элек йома ҡайта инең? Утһыҙ төтөн булмай, әллә бер-бер хәл бармы?

Сөмбөлдөң йөҙө ағарып китте, ҡурҡыуҙан теле әйләнмәне, күҙ алды ҡараңғыланды, өй эсе әйләнә башланы…

Әсәһенең:

– Ҡайҙа, яның менән борол әле. Әстәғәфирулла, был ни? – тигән һүҙҙәре йыраҡтан ишетелгән кеүек тойолдо.

Сөмбөлдөң ҡурҡыуы шул тиклем көслө булды – аңын юғалтып йығылды. Әсәһе, уны яңаҡлай-яңаҡлай, аңына килтерергә тырышты. Үҙе илай, үҙе кемделер һүгә.

– Нишләнең һин, йүнһеҙ бала? Әҙәм көлкөһөнә ҡалдырҙың бит, шул йәшеңдән этлектә йөрөмәһәң! Атаһыҙ бала үҫтереүе еңел тип белдеңме әллә?

Әсәһе Сөмбөлдө күтәреп торғоҙмаҡсы булды, ләкин ҡыҙҙың кәүҙәһе ҡамыр кеүек йомшарғайны. Ул күҙҙәрен асырға тырышты, торорға теләне, ләкин кәүҙәһе тыңламаны, иҫерек кеше кеүек, иҙәндә ятырға мәжбүр булды. Йөҙө аҡ ҡағыҙ төҫөнө инде, һис ҡан әҫәре ҡалманы. Шул ваҡыт ишек шаҡыған тауыш ишетелде. Әсәһе, күрше ҡыҙы инә тип:

– Ҡыҙым, тиҙерәк ишекте ас, һауа инһен, үлә бит, үлә, – тип илай-илай ҡысҡырҙы.

Ишектән ике ир менән бер ҡатын-ҡыҙ килеп инде. Ул уларҙың кемдәр булыуҙары менән дә ҡыҙыҡһынманы. «Ҡотҡарығыҙ, ҡыҙым үлә», – тип илай бирҙе. Ирҙәрҙең береһе Сөмбөлдө күтәреп, урынына һалды, тиҙ-тиҙ генә яңаҡтарын, ҡолаҡтарын ыуа башланы, ҡатын да ҡыҙыу-ҡыҙыу аяҡтарын ышҡырға тотондо.

– Сөмбөл, ас күҙеңде, был мин – Байрас. Аңыңа кил, – тип ҡаты һелкетә, яңаҡлай торғас, Сөмбөл ауырлыҡ менән күҙен асты. Был тиклем халыҡты күреп, ҡайҙа эләктем мин, тип аптырап ҡалды. Һәр кешене күҙ йүгертеп ҡарап сыҡты, аяҡ осонда баҫып тороусы Булатты күреп, күҙҙәрен ҙур асып текәлеп ҡалды. Байрас ситкәрәк китеп баҫты, уның янына таныш булмаған ҡатын килеп ултырҙы:

– Һаумы, ҡыҙым. Мин Булаттың әсәһе булам. Бына һине алырға килдек. Һин ҡурҡма, борсолма, барыһы ла яҡшы булыр. Бына хәҙер әсәйең менән һөйләшербеҙ ҙә беҙгә китербеҙ.

Сөмбөлдөң күҙенән йәш бәреп сыҡты, ҡатындың йомшаҡ тауышы борсоулы йөрәккә көс бирә ине.

Әсәһе ашыға-ашыға өҫтәл әҙерләне, бергә ултырып сәй эстеләр. Ике әсә ниҙер һөйләште, кәңәшләште. Унан Сөмбөлдө кейендереп, машинаға сығарып ултырттылар ҙа үҙҙәренә алып киттеләр. Әллә өн, әллә төш булды…

* * *

Сөмбөлдөң Ахун ауылына беренсе тапҡыр аяҡ баҫыуы. Матур оло клуб, бейек манаралы мәсет янынан машина елдереп кенә үтте.

Еңел машина матур биҙәп эшләнгән ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны. Булаттың әсәһе:

– Әйҙә, ҡыҙым, бына ошонда йәшәйбеҙ инде, – тип алдан атланы.

– Ҡурҡма, ин, әйҙә, ин, – тине Байрас та.

Булат ҡына, ғәйепле кеше һымаҡ, бер ни өндәшмәй торҙо, дөрөҫөрәге, ни әйтергә белмәне. Сөмбөлдө әкрен генә алға этте: «Әйҙә».

Ҡапҡанан инеүгә, өйҙән өҫтөнә лә кеймәгән, ҙур кәүҙәле, төҫө-бите менән Булатҡа оҡшаған уҙаман сыҡты.

– Әйҙә, килен, төклө аяғың менән. Мин һинең ҡайның булам инде. Әйҙә, түргә уҙ, – тине ул.

Сөмбөл ҡаушауынан ҡаҡҡан ҡаҙау кеүек тик торҙо, унан, йығылып китмәйем тигәндәй, кемдеңдер беләгенә йәбеште.

Атаһы Булатҡа өндәште:

– Әйҙә, улым, йәш киленде өйгә алып ин. Ә һин, ҡыҙым, ҡурҡма, ҡыйыуыраҡ бул.

Тауыш ишетеп, өйҙән атылып сыҡҡан Әлфис, Сөмбөлдөң шундай бәләкәй генә булыуын күреп, шаҡ ҡатты. Булат ағаһы Сөмбөлдө етәкләп тигәндәй өйгә алып инеп киткәс, Әлфис түҙмәне, Байрастың еңенән тартты:

– Ағай, шундай бәләкәй ҡатын буламы ни?

– Һиңә уйнарға иптәш булыр, – тине ағаһы, көлә-көлә.

Өйгә ингәс, ҡәйнәһе:

– Бына был һеҙҙең йоҡо бүлмәһе булыр, әйберҙәреңде шунда урынлаштырырһың, хәҙер ял ит. Мин аш әҙерләйем, – тип уны яңғыҙын ҡалдырып сығып китте. Сөмбөл өйҙөң эсен күҙҙән кисерҙе: ҙур, иркен, бөтә ерҙә тәртип, һәр нәмә үҙ урынында; бик зауыҡ менән йыйыштырылған, бөтә ергә, әбеһе һөйләгәнсә, ҡулдан һуғылған матур-матур келәмдәр йәйелгән. Икегә бүлеп эшләнгән был бүлмәгә матур шаршау эленгән, стенаға келәм ҡағылған, киң һике яһалған, уның өҫтөнә матур итеп сигеүле мендәрҙәр өйөлгән. Улар яғына бер тәҙрә лә әләккән, унан баҡса, алмағастар күренә. Сөмбөл был мөйөштө бик оҡшатты, кеше күҙенән ҡереп ҡасыр өсөн урын булды, тип шатланды.

Был кисте улар Булат менән, бер-береһенә яңылыш ҡына ҡағылып китеүҙән ҙә ҡурҡып, икеһе ике яҡҡа ҡарап, бер һүҙ өндәшмәйенсә уҙҙырҙылар. Зәңгәр нурҙарын һирпеп, тәҙрәнән ай ҡараны. Ике аралағы бер кешелек бушлыҡты ул да тултыра алманы. Башҡалар араһында бәхет, мөхәббәт, шатлыҡ, ҡайнар һулыш, тағы әллә ниҙәр күреп ай ҙа оялыр ине, ә бөгөн ул, урталағы бушлыҡты, ауыр тынлыҡты, икеһе ике яҡҡа ҡарап ятҡан бәхетһеҙ йәндәрҙе күрмәүең яҡшыраҡ, тип күрше тәҙрәгә күсте. Сөмбөл, йәш булһа ла, был матур мөйөштөң уның өсөн түгел, башҡа ҡыҙ өсөн әҙерләнгәнен, үҙенең был ояға яңылыш килеп ҡунған ҡош икәнен яҡшы аңланы. Яҙын килгән ҡоштар көҙөн балаларын эйәртеп кире китә, ул да, балам тыуғас, бынан китермен, тигән уй менән таң алдынан ғына йоҡоға талды.

Бына шулай яңы тормош башланды. Ялда улар ауылға хәҙер өсәү ҡайталар. Ауыл халҡы, егеттәрҙең ҡайһыһы туйһыҙ ғына ҡатын алған икән, тип баш ватты.

Әсәләре, кеше алдында яҡшы түгел, туй яһайыҡ, тигәс, Сөмбөл:

– Бер ниндәй ҙә туй кәрәкмәй, туйҙа бындай йәмһеҙ кәләш булмай, – тип ҡаршы төштө.

– Ярай улайһа, мулла саҡырып, никах уҡытайыҡ. Никахһыҙ тыуған баланы «елдән тыуған» тиҙәр, – тип, бер аҙнала никах уҡыттылар.

Хәҙер улар, теләһә-теләмәһәләр ҙә, Хоҙай алдында ирле-ҡатынлы булды. Был идара ҡағыҙы түгел, йыртып ташлау мөмкин түгел, Сөмбөл мәңгегә Булаттың беренсе ҡатыны булып ҡаласаҡ. Унан һуң әллә кемдәр килһә лә, «Булаттың беренсе ҡатыны Сөмбөл» тип күктәрҙә яҙып ҡуйылды.

Декретҡа сыҡҡас, ҡыҙҙың әйберҙәрен Байрас йөк машинаһы менән ҡайтарҙы. Йәлләй ине ул Сөмбөлдө. Ҡатыны булһа ла, Булат уның менән һөйләшмәй. Нисек бер бүлмәлә йоҡлайҙарҙыр? Байрас Сөмбөлдө нисек кенә йәлләмәһен, уны нисек кенә яратмаһын, хәҙер бер ни ҙә үҙгәртә алмай шул.

Сөмбөлгә Әлфис шатланып бөтә алманы. Ул еңгәһен бик яратты. Сөмбөл апаһы уға әкиәттәр уҡый, ҡыҙыҡлы ваҡиғалар һөйләй. Мөмкин булһа, Әлфис, көнө буйы, мәктәпкә бармайынса, уның янында ултырыр ине.

Сөмбөл хәленән килгәнсә Гөлфиә апайға булышты, уның нисек эшләгәнен ҡарап тороп, тап уныңса, һәр эште еренә еткереп башҡарырға тырышты. Эйәләшә төшкәс, әкренләп аш-һыу тирәһендә лә ҡайнаша башланы. Гөлфиә апай һиҙҙермәйенсә генә киленен күҙәтте. Булат улы: «Ул донъя көтөрлөк ҡыҙ түгел, бер эш белмәй, елбәҙәк», – тиһә лә, Сөмбөл бер ҙә улай күренмәне. Ул бик һирәк йылмая, ҡулдары эшкә ятып тора, һәр эше килешле килеп сыға, тик һәр ваҡыт уйсан.

– Ҡыҙым, өй эштәрен мин үҙем дә ҡарармын, һин, ана, Әлфискә уҡырға ярҙамлаш. Бигерәк уҡырға яратмай, аҙғын быҙау менән бер, уйнарға сығыу яғын ғына ҡарай. Сумкаһын да уйнаған ерендә ташлап ҡайта. Был малай береһенә лә оҡшамаған, ағалары «бишле»гә уҡымаһалар ҙа, мәктәпкә бармайынса ҡасып йөрөмәйҙәр ине. Бала түгел, бәлә был, бәлә. Һине ярата бит, бәлки, тыңлар.

– Ярай, тик өйҙә китаптар юҡ, ауыл китапханаһында барҙыр инде. Мин урамға сығырға оялам, пальтомдың төймәһе эләкмәй.

Гөлфиә апай Сөмбөлгә ҡарап йылмайҙы:

– Аталары эре булғас, балалары ла ҙур тыуа шул. Һиңә күлдәк тә алаһы бар, быныһына һыймайһың. Әйҙә, кибеткә сығып әйләнәйек булмаһа, кәрәкле әйберҙәреңде алырһың, балаға ла кейемдәр ала башларға кәрәк.

– Юҡ-юҡ, әсәй, үҙең генә барып ҡайт. Минең урамға сыҡҡым килмәй. Үҙең беләһең бит ни кәрәген, миңә ниндәй ҙә ярай.

Икенсе көндө Гөлфиә апай килененә матур халаттар, эске кейемдәр алып ҡайтты:

– Мә, кейеп ҡара әле. Иркенләп эсеңде кереп йөрө, оялып, ҡыҫып йөрөмә, балаға зыян килер.

Сөмбөлгә бигерәк тә сәскәле, аҡ яғалы халат оҡшаны. Мин быны ялда ғына кейермен, тип ситкә алып ҡуйҙы. Булат ҡайтыуға элеккесә матур күренгеһе килә ине.

Шәфҡәт ағай китапхананан бер ҡосаҡ балалар китаптары күтәреп ҡайтты.

– Мә, уҡығыҙ. Шайтан алғыры малайҙың уҡытыусыһы күргән һайын зарлана. Хурлыҡ бит, ике метрлы кәүҙәң менән урам уртаһында ғәйепле бер малай кеүек баҫып тор инде. Әлфис, сумкаң ҡайҙа?

Әлфис, яҡ-яғына ҡаранып, сумкаһын эҙләргә тотондо.

– Эҙләмә, санала сумкаң, сығып ал. Иртәнсәк ҡапҡа төбөндәге эскәмйә аҫтынан табып алдым. Ҡар күмеп китә яҙған, шайтан малай, – тип асыуланды атаһы. – Бирҙе бит Хоҙай ҡартлыҡ көнөндә яфа.

Бына шундай инде уларҙың төпсөктәре – ҡартайғанда Хоҙай биргән татлы емештәре.

Сөмбөл, уны яратып, китап уҡырға өйрәтергә булды. Ҡыҙыҡлы мажаралар, һуғыш тураһындағы хикәйәләрҙе ҡысҡырып уҡый, унан ҡыҙыҡлы ерендә туҡтай.

– Бөгөнгә етәр, күҙем талды, башым ауырта, – тип йә ҡәйнәһе янына аш бүлмәһенә сыға, йә, дәрестәреңде әҙерләгәс уҡырбыҙ, тип, китапты йәшереп ҡуя. Әлфис түҙмәй, китапты табып, ҡайһы сағында үҙе уҡый. Сөмбөл шулай итеп унда уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятты, иркә Әлфисте әкренләп тәртипкә һалды. Малай менән мауығып, үҙе лә ауыр уйҙарынан ҡотолоп тора. Әлфис үҙе лә уҡый башланы, шулай ҙа апаһы уҡығанды ярата, ул уҡығанда, хыялдарға бирелеп, ваҡиғаларҙың эсендә ҡайнай. Шулай тыңлап ята торғас, йоҡлап та китә.

Бер көндө улар күп ҡатынлы солтан тураһында әкиәт уҡыны.

– Улайһа, минең Булат ағай ҙа солтан була, эйеме? Һин – беренсе ҡатыны, ә теге – икенсе ҡатыны.

– Кем әйтте?

– Әй, теге ваҡытта атайым ағайымды, солтан булғас, ике ҡатын алырһың, йәшә береһе менән, ике арала сапма, тип асыуланды.

– Ә ниңә асыуланды?

– Ул бит һаман күрше ауылға, теге апай янына барып йөрөй, ахырыһы.

– Ниндәй апай?

– Белмәйем, ағайым: «Мин шул ҡыҙға өйләнәм, мин уны ғына яратам», – тигәйне, атайым рөхсәт итмәне. Шунан һине алып ҡайттылар. Һине мин дә, Байрас ағайым да, атайым менән әсәйем дә бик яратабыҙ, – тип апаһын муйынынан ҡыҫып ҡосаҡланы.

Бала булған ерҙә сер ятмай, ти, бына нисек икән эштәр... Сөмбөлдөң күҙҙәренән ҡайнар йәш аҡты, тимәк, үҙенең бында булыуына ул Булаттың ата-әсәһенә бурыслы. Улар улдарын өйләндерергә күндерә алмаһалар ҙа, ҡыҙҙың даны илгә сыҡмаһын, тип алып ҡайтҡандар. Теге ваҡытта улар килеп инмәһә, Сөмбөл хәҙер ҡайҙа ятыр ине икән? Булаттың бер көнгә һуңыраҡ ҡайтыуынан, ял көндө ҡайҙалыр китеп юғалыуынан ниҙер һиҙенһә лә, унан бер ни һорашманы, дөрөҫөрәге, бөтөнләй һөйләшмәне. Ул үҙен Булаттың муйынына аҫҡан таш кеүек хис итте. Ер ярылһа, ике лә уйламайынса шунда төшөп юғалыр ине.

Булат 8 Март байрамына ҡайтманы. Уның ҡарауы, Байрас әсәһе менән Сөмбөлгә бүләктәр, күстәнәстәр алып ҡайтҡан.

Булаттың бүлмәләше, вокзалда Байрасты күреп: «Байрамға ағайыңдың икенсе ҡатыны килде, ҡайта алмаҫ», – тигәйне.

Байрас, Сөмбөлдө борсомаҫ өсөн, комбинатта авария булған, ағайҙы эшенә саҡырттылар, тип ялғанларға мәжбүр булды. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, атаһы аҡайып бер генә ҡараны, уның ҡарашында барыһын да аңлауы сағылды.

Байрам өҫтәле әҙерләп, күстәнәстәр менән бергәләп сәй эскәс, Әлфис менән Сөмбөл үҙ мөйөштәренә кереп китте. Атаһы менән әсәһе телевизор ҡарарға ултырҙы. Байрас бөгөн ниңәлер клубҡа ашыҡманы.

Теге мөйөштән Әлфистең ҡысҡырып көлгән тауышы ишетелде. Сөмбөл менән икәүһе нимәлер һөйләшәләр ҙә, малай ҡысҡырып көлә. Уларҙың көлөүен ишетеп, Шәфҡәт ағай менән Гөлфиә апай ҙа бер-береһенә ҡарашып йылмайып ҡуйҙы. Байрас та түҙмәне, серле шаршау янына килде.

– Туҡ-туҡ, мине лә индерегеҙ әле, һеҙҙә бик күңелле, буғай.

– Ин, ин, – тине Әлфис, көлөүенән туҡтай алмайынса.

– Нимәгә эсең ҡата? Үҙең генә көлмә, миңә лә әйт, мин дә көләйем.

– Апаның эсенән ҡосаҡлаған инем, бераү тибеп ебәрмәһенме? Ана, һин дә ҡолағыңды ҡуй, хәҙер һине лә тибеп осора.

Сөмбөл, оялып:

– Сеү, Солтанай, улай ярамай, улай ҡаты ҡысҡырма, – тип көлә-көлә, үҙе лә ауыҙын ҡапланы.

– Ярар, хәҙер тышҡа ғына сығып керәм дә, солтанай уйнайбыҙ, йәме, – тип Әлфис сығып сапты.

Улар үҙҙәренә оҡшаған әкиәттәрҙе театрҙағы кеүек уйнай ине. Апаһы Әлфискә сәллә лә яһап бирҙе. Атаһының ҙур сатин трусигына резинка үткәргәс, шаровар булды. Ошо кейемдәрҙе кейеп, Әлфис солтан булып ҡыланырға ярата. Әле инеү менән ул:

– Апай, ҡайҙа минең кейемдәрем, мин хәҙер һеҙгә театр күрһәтәм, – тип һикегә менеп баҫты, ҡулына әллә ниндәй ялтырауыҡ таяҡ тотто, апаһы һарыҡ йөнөнән яһап биргән һаҡалды ла таҡты. Байрасҡа бармаҡ төртөп, ҡалын тауыш менән ҡысҡырып ебәрмәһенме:

– Нишләп ултыраһың минең тотҡонлоғомда, нишләп һаман клубҡа сыҡмайһың? – тип, башлаған һүҙен онотоп, тотлоғоп ҡалды. – Апай, апай, теге һүҙҙе әйт әле, онотам шуны.

– Әмер бирәм.

– Ә, эйе, – тип Әлфис тағы тауышын ҡалынайтып, ҡысҡырып һөйләргә тотондо. – Мин, солтан, әмер бирәм: Байрас, бар, клубҡа сыҡ, миңә иң матур ҡыҙҙы алып ҡайт, ҡунаҡ ҡыҙы булһын!

Сөмбөлдөң шишмәләй сылтырап көлөүе бөтә өйгә таралды. Байрас, ҡысҡырып көлмәҫ өсөн, ауыҙын ҡапланы.

– Солтаным, һиңә нисә ҡатын кәрәк һуң?

– Миңә өс йөҙ ҡатын положено.

Уның был һүҙҙәренән бөтә өй гөрләне.

– Улым, бер үҙеңә күп булмаймы һуң ул өс йөҙ ҡатын? Бында бит ике генә бүлмә.

– Һарайҙа урын етерлек – һыйырҙар әле.

– Эй, улым, ҡайҙа күргәнең бар ҡатындарҙы һарайҙа тотҡанды? – тине атаһы, күҙ йәшен һөртә-һөртә.

– Ниңә, китапта бит «солтандың өс йөҙ ҡатыны булған, барыһы ла хан һарайында йәшәгән» тип яҙылған.

– Һуң, улым, улар бит хан һарайында йәшәгән, мал һарайында түгел.

– Һарай – һарай инде.

Сөмбөл тағы сылтыратып көлөп ебәрҙе.

Байрасҡа был мөйөштә шундай рәхәт ине. Ләкин барыбер ниндәйҙер ситһенеү һиҙелә, нимәлер етмәй, һәр кем үҙен ғәйепле тоя. Ярай әле, Әлфис бар. Ул булмаһа, был ауырлыҡты нисек еңерҙәр ине. Байрас үҙе көлдө, үҙе ҡаш аҫтынан Сөмбөлдө күҙәтте. Ул түңәрәкләнгән, бәләкәй генә кәүҙәһе менән был ҡорһағын нисек күтәреп йөрөйҙөр. Ә үҙе һаман да һөйкөмлө, күркәм, сәстәре үҫеп, тулҡынланып иңенә төшкән, йөҙөндә ауырлы ҡатындарға ғына хас гүзәллек сағыла.

«Ҡайһы яғы менән үҙенә тарта һуң ул мине? Күпме ҡыҙҙар оҙаттым, күпме ҡыҙҙы ҡостом, үптем, ләкин береһе лә мине үҙенә ҡарата алманы. Ә ул нимә менән әсир итте һуң? Ҡарап тороуға башҡа ҡыҙҙарҙан артыҡ бер ере юҡ. Был өсмөйөштөң төйөнөн кем сисер?»

Байрастың үҙенә онотолоп ҡарап ултырыуын һиҙгәс, Сөмбөл янында ятҡан мендәр менән үҙенең эсен ҡапланы. Ике күҙ ҡарашы бергә осрашып, эләгеп ҡалды. Үрелһәң, ҡул етерлек ара. Ҡосағыңа һурып ал да башыңды ошо тулҡынланып торған ҡуйы сәстәр араһына һал. Суҡынып китһен донъяһы ла, выжданы ла, ағаһы ла.

Байрас, үҙенең уйҙарынан, хистәренән ҡурҡып, кинәт һикереп торҙо ла, унан-бынан тиҙ генә кейенеп, урамға сығып китте. Уның бер ҡайҙа ла барғыһы килмәне, сыҡты ла ҡапҡа төбөндәге эскәмйәгә ултырҙы.

– Йә Хоҙайым, ниндәй гонаһтарым өсөн бындай ғазаптарға һалдың, күпме дауам итер был?

* * *

Бер аҙна уҙып китте, тағы йома етте. Сөмбөл, был аҙнала ла Булат ҡайтмаҫмы икән, әллә Әлфис һөйләгән күрше ауылға китерме икән, тип борсола башланы. Йөрәген көнсөллөк уты яндырҙы, ниндәйҙер кәмһенеү хисе баш ҡалҡытты. Төндәрен йүнләп йоҡламай, аяғөҫтө үткәрә ине. Бала ҙур булғанлыҡтан, эсе һыҙлай, ни ултырып, ни баҫып тора алмай. Төн буйы тәҙрәнән күҙен алмай, тәбиғәткә яҙ килеүен күҙәтә, баҡсала ҡар ҙа әкренләп ирей бара. Яҙҙың һәр көнөндә күпме ғашиҡтар табыша, ә көҙөн улар йә ҡауыша, йә улар кеүек айырылыша ла, өмөтләнеп, киләһе яҙҙы көтә башлай. Яҙҙар йыл һайын килә, тик һәр кешенең тормошонда бер ҡабатланмаҫ яҙы була. Ул шул яҙҙы ғүмере буйы һағынып, хәтер мөйөшөндә ҡәҙерләп һаҡлай...

Сөмбөл, кейенеп, тышҡа сыҡты, ишек алды буйлап арлы-бирле йөрөнө. Быйыл өйҙән сыҡмағас, гөрләүектәр ағыуын да күрмәне. Яҙын сылтырап аҡҡан гөрләүектән дә сихри нәмә бармы икән? Әллә ҡайҙа ятҡан ҡарҙар иреп, ашыға-ашыға, үҙҙәренә юл асып ағып килә. Уларға тауҙарҙан төшкән гөрләүектәр эйәрә, этешә-төртөшә оло юлға сығалар, үҙ-ара ниҙер серләшәләр. Шул гөрләүектәргә ҡушылып ағып китһә ине уның да һағыштары! Ул да ҡасан ғына бала ине, гөрләүектәр йыра-йыра шаяра ине, уның тиҙерәк үҫкеһе, үҫеп етеп, матур егет осратып, бәхетле булғыһы килә ине. Яҙҙарҙа саф мөхәббәт килеренә ышанып, барлыҡ йәш ҡыҙҙар кеүек, хыял донъяһына сумып йәшәне. Кинәт килде уның яҙы, килде лә гөрләүектәй бөтөрөп алып китте оло тормошҡа, артта ҡалған бала сағына ҡул болғарға ла өлгөрмәне.

Әсәһе: «Үҫергә ашыҡма әле, балам, гөрләүектәр киткәндә һаҡ бул», – тип ни эшләп киҫәтмәне икән, әллә әйтеп тә ишетмәнеме икән?

– Ҡыҙым, әллә ауырыйһыңмы? Нишләп бында баҫып тораһың, иртә бит әле, – тине Шәфҡәт ағай. Ул уны күптән күҙәтә ине. Килененә ауыр булғанын бик яҡшы аңлай, уға ярҙам итә алмауына ҡайғыра. Йөрәге әрнейҙер был баланың, Булаты ла һирәк ҡайта. Бына бөгөн ҡайтһын ғына, еткән буйына ҡарап тормаҫ. Сөмбөл бер ваҡыт китеп барһа, үкенер әле улы, кемде юғалтҡанын аңлар, ләкин һуң булыр.

Сөмбөл йома көндө иртәнән үк тулҡынланып кисте көтә башланы.

– Бөгөн киске ашты үҙем әҙерләйем, ҡәйнәм, ҡаланан эшселәр ҙә ҡайта.

Булат менән Байрас ҡайтҡанда, Сөмбөл сәскәле, аҡ яғалы халатын кейеп, башына яулыҡ бәйләп туҡмас киҫә ине.

– О-о, һағындым, еңгәм, туҡмасыңды! Һаумыһығыҙ, бына беҙ ҙә ҡайтып еттек. Сөмбөл, күлдәгең бигерәк матур булған, – тине Байрас, күңелле генә һуҙып. Ул булған ерҙә һәр ваҡыт шулай инде, бар нәмә хәрәкәткә килә, һәр нәмәгә йән керә.

– Эйе, ҡәйнәм алып бирҙе. Йә, әйҙәгеҙ, йыуынығыҙ ҙа ашарға ултырығыҙ, – Үҙе Булатҡа күтәрелеп ҡарамаҫҡа тырышты.

Ағайҙарының тауышын ишетеп, Әлфис йүгереп сыҡты.

– Ҡайҙа, миңә нимә алып ҡайттығыҙ?

Ағалары яратҡан эneләренә кеҫәләренән кәнфит-һағыҙ сығарып бирҙе. Әлфис күстәнәстәренең яртыһын кеҫәһенә һалды, ҡалғанын Сөмбөл апаһына бирҙе.

– Быныһы һиңә, – тип хәйләкәр йылмайҙы.
– Эй, солтаным, рәхмәт инде. Һин бигерәк йомартһың.
– Һин миңә туҡмасты күберәк һалырһың, йәме, мин туҡмас яратам.
Сөмбөл беренсе тәрилкәне ҡайныһы алдына килтереп ҡуйҙы, унан – ҡәйнәһенә, унан – ҡалғандарға, иң һуңғы итеп үҙенә һалып алды.
– Әсәм һәр ваҡыт ашты иң беренсе миңә бирә, ә һин һуңғы итеп һалдың, ярай әле, туҡмасы ҡалды.
– Был өйҙә кем иң олоһо?
– Атай менән әсәй.
– Шулай булғас, оло кешеләрҙе хөрмәт итергә кәрәк. Бына һин дә үҫеп, атай булғас, ашты иң беренсе һиңә бирерҙәр.
Ҡайныһы был һүҙҙәрҙән уңайһыҙланып та, ғорурланып та ҡуйҙы: «Йәп-йәш башы менән ҡайҙан белә был бала, атаһы ла юҡ».
– Килен, ашың бигерәк тәмле булған, туҡмастары бигерәк нәҙек, кем өйрәтте һине былай аш-һыу әҙерләргә?
– Минең бит өләсәйем, әсәйем бар, улар мине бөтә нәмәгә өйрәтте, – тине Сөмбөл оялып ҡына.
Киске ашты ашағас, ҡәйнәһе менән Сөмбөл өҫтәл йыйыштырып ҡалды. Байрас клубҡа йыйынды. Әлфис, тиктормаҫ:
– Ағай, бөгөн ҡунаҡ ҡыҙҙары күп ҡайттымы? – тип һорап ҡуйҙы.
– Ҡайттылар, ҡайттылар, ләкин һинең батшалыҡтың да хужаһы ҡайтты бит. Бөгөн үҙең ҡайҙа йоҡларһың инде, Солтанай?
– Ҡайҙа булһын, апайым янында.
– Ә ағай ҡайҙа?
– Беҙ уны күптән батшалыҡтан диванға сығарып аттыҡ инде.
– Ниңә? – тип һүҙгә аталары ла ҡушылды.
– Оҙаҡ ҡайтмағанға. Ана, күрше ауыл батшалығына барһын.
– Ах, телеңә телсә сыҡҡыры, бөгөн үҙ урыныңа ятырһың, – тине Шәфҡәт ағай төпсөк улына, асыуланып. Булатҡа ла ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡарап: – Һин дә! – тине.
Сөмбөл улар һөйләшкәндә ишетмәне, был ваҡытта аш бүлмәһендә ҡәйнәһе менән ниҙер эшләй ине. Эш бөткәс, Сөмбөл, ғәҙәттәгесә, үҙ мөйөшөнә, Әлфис батшалығына инмәксе итте. Һикелә баш эйеп ултырған Булатты күреп, кинәт ситенһенеп туҡтап ҡалды. Ни алға, ни артҡа барырға белмәне, Сөмбөл артҡа боролоп китмәксе ине, телевизор ҡарап ултырыусы ҡайныһын күреп, һикегә ултырырға мәжбүр булды. Сөмбөл Булаттың күҙ ҡарашынан да ситһенә, Булат уны күрә алмайҙыр кеүек тойола.
Булат бер аҙҙан Сөмбөлгә табан боролдо ла текәлеп ҡарап ултыра башланы. Сөмбөлдөң йөрәге табан аҫтына төштө: «Күҙ ҡарашы менән яндырып үлтерәйем, ти, ахырыһы». Булат, үрелеп, Сөмбөлдөң сәсенә ҡағылды. Сөмбөл һиҫкәнеп китте.
– Сәстәрең бөҙрә икән, бик матур булып үҫеп килә, – тине ул әкрен генә тауыш менән.
– Эйе, үҫтеләр шул, бала тыуғансы киҫергә ярамай, тиҙәр. Ҡотолғас, киҫтерермен әле.
– Юҡ, киҫтермә, һиңә былай нығыраҡ килешә. Асыуланмаһаң, тотоп ҡарайым әле, – тип Булат ҡулын әкрен генә уның эсенә ҡуйҙы.
Сөмбөл ни әйтергә лә белмәйенсә, эҫеле-һыуыҡлы булып, һелкенергә лә ҡурҡып ултырҙы. Әлфистең шаршауҙы кинәт асып ебәреүенән икеһе лә, хыянатта тотолған кешеләрҙәй, һиҫкәнеп ҡуйҙы.

– Нимә, тибенәме? Уны бына былай итеп тыңларға кәрәк, – тине лә ҡолағын еңгәһенең эсенә ҡуйҙы. – Ай, бына-бына, ай, ҡолаҡҡа типте. Һин дә бына шунда ҡолағыңды ҡуй. Ул, беләһеңме, ниндәй көслө, кил, ҡуй ҡолағыңды.

Булат нишләһен, иҙәнгә шыуып төштө, теҙләнеп, ҡолағын Сөмбөлдөң эсенә ҡуйҙы. Ысынлап та, бала бер нисә тапҡыр ҡаты ғына һелкенеп алды. Булат, үҙе лә һиҙмәҫтән, Сөмбөлдө ҡулдары менән ҡосаҡлап алды, үҙендә ниндәйҙер рәхәт хистәр уяныуын тойҙо. Әкрен генә башын күтәреп, Сөмбөлдөң йөҙөнә ҡараны. Сөмбөл, уның күҙ ҡарашын күтәрә алмайынса, башын ситкә борҙо, ә йөрәге ситлеккә эләккән ҡош кеүек, тибеше хатта ҡолағы төбөндә яңғырағандай булды.

– Ишеттеңме? Нисек ҡаты тибә, ә? Мин көн дә апайымды ҡосаҡлап ятам. Ул унда көнмө-төнмө икәнен күрмәй, әй тулай, әй тулай, апайымды йоҡлатмай ҙа. Үҫеүен үҫә, тик бына нисек сығаһын ғына аңламайым.

– Әлфис, урыныңа инеп ят! – тип ҡысҡырҙы атаһы.

– Атайым бында инмәҫкә ҡушты, ағай, бөгөн һин солтан, – тип бышылданы Әлфис сығып барышлай.

Булат йылмайҙы ла:

– Беҙ ҙә ятайыҡ инде, – тип сисенеп менеп ятты.

Сөмбөл һике ситендә ятҡан мендәргә башын терәне, Булаттың ҡарашы уның арҡаһын көйҙөрҙө.

– Сөмбөл, Сөмбөл, аңла, мин үҙем менән бер ни эшләй алмайым. Беләм: һиңә лә ауыр, миңә лә ҡыйын. Нишләргә һуң беҙгә?

– Ҡайғырма, күп ҡалманы. Бала тыуғас, әгәр иҫән ҡалһам, мин бында ҡайтмам. Әгәр минең менән берәй хәл булһа, баланы ташлама, ҡәйнәм менән ҡайным үҙҙәре иҫән саҡта йәтим итмәҫ. Мин һинең муйыныңа ғүмерлеккә аҫылынған таш түгел, ҡурҡма, – тип бышылданы Сөмбөл.

Булат был һүҙҙәрҙән һуң бер ара тын ятты, унан әкрен генә ҡосаҡлап, Сөмбөлдө үҙенә тартты.

– Ни һөйләйһең һин? Йәш бала менән ҡайҙа бармаҡсы булаһың? Мин бит һине ҡыумайым.

– Мин ҡыуғаныңды көтөргә теләмәйем. Әсәйем янына ҡайтырмын, аңлар әле. Әсәйем индермәһә, Вера апайға барырмын, ул һәр ваҡыт мине үҙенә саҡыра.

– Ә бала?

– Әгәр иҫән-һау ҡотолһам, мин ҡайҙа, ул шунда буласаҡ.

Булат, ауыр һулап, күҙҙәрен уның ҡуйы сәстәре араһына йәшерҙе, ҡыҫыбыраҡ ҡосаҡланы. Күҙ йәштәре сәс араһына тулды. Йөрәк түренән ҡайнар хистәр ташып сыҡты, йәлләп тә, һөйөп тә сәстәренән шашып-шашып үпте. Үҙ-үҙе менән көрәшеп арыған Сөмбөл ҡаршы килмәне, уның ял иткеһе, бер аҙға ғына булһа ла онотолғоһо килде. Булатты шундай ярата, уны шундай һағынды, ул ҡағылған һәр ере ут булып янды. Булаттың уны яратып түгел, бәлки, йәлләп кенә ҡосаҡлауын да, башҡа кеше менән сағыштырыуын да, барыһын, барыһын ситкә ҡуйып, тағы бер минутҡа, тағы әҙ генә үҙен һауала осҡан ҡаҙ ҡауырылай хис итте. Улар күҙ йәштәре кипкәнсе үбеште, унан ҡосаҡлашып йоҡлап киттеләр.

Булат таң алдынан кинәт уянды. Янындағы буш мендәрҙе күреп, кисәге хәл төш кенә булдымы икән ни, тип аптырап ҡалды. Нисек шулай килеп сыҡты һуң? Ниңә үҙен тыя алманы? Сөмбөл ни тиер, ул бит уға тағы киләсәккә өмөт бирҙе. Хәйер, һәр ваҡыт шулай булды, әҙ генә яҡын килдеме, Сөмбөл тыны менән үҙенә тартып ала. Булат бик оҙаҡ уйланып ятты, ләкин Сөмбөл күренмәне. Тороп, аш бүлмәһенә сыҡты, тәҙрәгә күҙе төштө. Сөмбөлдөң баҡсала ҡарт алмағаҫҡа

арҡаһы менән һөйәлеп баҫып тороуын күрҙе, тын ғына уны тәҙрәнән күҙәтте. Унан, тиҙ генә кейенеп, алма баҡсаһына сыҡты. Улар, өндәшмәй генә, бер-береһенә бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Беренсе булып Сөмбөл телгә килде.

– Йәлләмә мине, үткән төн өсөн үҙеңде ғәйепле һанама. Беҙ икебеҙ ҙә ғәйепле. Ҡурҡма, барыһы ла, төш булып, үткән төндә ҡалды. Ваҡыт уҙыр, беҙ ҙә ошо алмағас кеүек ҡартайырбыҙ. Күрәһеңме, күпме ботаҡтарын киҫкәндәр, шулай ҙа йәшәй бит. Һәр беребеҙ үҙ баҡсаһында йәшәр әле, – тине лә Сөмбөл, боролоп, әкрен генә өйгә инеп китте.

Беренсе май етте. Был көндө бөтә ауыл йәштәре әрәмәгә сыға. Яҙҙың иң татлы, иң матур ваҡыты: йәш-елкенсәктең күңеле елкенә, үҙҙәрен осар ҡоштай хис итәләр. Ауылға төтөн еҫе тарала, баҡса эштәре башлана. Кис етеүгә, йәштәр, тыр-тыр килеп, матайҙа елдерә.

Иртәгә – Беренсе май. Ҡала халҡы бөгөн кис ауылға ағыла башлай. Булат менән Байрас та ҡайтты. Улар өйгә килеп ингәндә, Сөмбөл, ғәҙәттәгесә, аҡ яғалы халаттан, башына бәләкәй генә яулығын бәйләгән, аш бүлмәһендә ҡайнай ине. Иҫәнләшкәс, һәр ваҡыттағыса йылмайып, уларҙы өҫтәл янына саҡырҙы. Сөмбөл, өйҙәгеләрҙең күңеленә яҡшы булып ҡалайым тип, гел йылмайып йөрөргә, күҙ йәштәрен күрһәтмәҫкә тырыша ине. Уға был йортта йәшәргә күп ҡалманы, бала тыуғас, ул инде бында башҡа ҡайтмаясаҡ.

Ашағанда аталары улдарына:

– Иртәгә айырым эшегеҙ булмаһа, баҡса ҡаҙырбыҙ, тиҙәк сығарырбыҙ, ваҡытығыҙҙы самалағыҙ, – тип  фекерен белдереп ҡуйҙы.

Икенсе көндө бөтәһе баҡсала эшләне. Көслө өс ир, ых та итмәй, бөтә ерҙе таҙартып, ҡаҙып сыҡтылар, матур түтәлдәр яһанылар. Сөмбөл уларҙың эшләгәнен һоҡланып ҡарап торҙо.

– Кил, ултыр, килен, ял ит, һин бит гел аяғөҫтө, – тине ҡайныһы. – Мин дә ултырам, арыным.

– Беҙ үҙебеҙҙә әсәйем менән аҙналар буйы ҡаҙынабыҙ, ә һеҙ бер көндә бөтөрҙөгөҙ. Әсәйем хәҙер бер яңғыҙы нишләйҙер инде, үҙе көн буйы эштә, мин дә юҡ.

– Туҡта, килен, улайһа, иртәгә үк был икәүҙе ҡоҙағыйға булышырға ебәрәм.

Сөмбөл, һөйөнөп, ҡайныһына ҡараны.

– Барырҙармы һуң? Мин дә улар менән ҡайтып килер инем.

– Юҡ, килен, һин өйҙә генә ултыр. Һиңә юлға сығырға ярамаҫ. Улар, ана, матай менән генә барып ҡайтырҙар.

– Бик яҡшы булыр ине, эй, әсәйем һөйөнөр инде. Беҙгә бер ҡасан да бер кемдең ярҙамлашҡаны булманы, утынға ла, бесәнгә лә гелән икебеҙ йөрөнөк.

– Борсолма, барыһы яҡшы булыр, килен, булышырбыҙ... Һин бер аҙ сабыр ит, бала тыуғас, үҙгәрер ул. Һин түҙ инде, килен, түҙ. – Шәфҡәт ағай әллә үҙен, әллә киленен йыуатты.

Сөмбөл, һүҙҙе икенсегә бороп:

– Ҡайным, бына ошо үләнлектә йәйге кухня яһап бир әле беҙгә, – тине.

– Уныһы нисек була?

– Ҙур өҫтәл, эскәмйәләр, бына бында мейес, һауыт-һаба ҡуйыр өсөн бәләкәй генә өҫтәл. Самауыр ҡуйып сәй эсербеҙ, – тине Сөмбөл. Әҙерәк уйланып торғас, моңһоуланып: – Әсәйемдең баҡсаһында шулай, – тип  өҫтәне. – Оҙаҡламай алмағастар сәскә ата, бында иҫ китмәле матур буласаҡ.

– Ярай, килен, уйлармын.

Кис етеүгә ҡарамаҫтан, ҡайныһы баҡсаға таҡталар индереп тултырҙы. Икенсе көндө эштән ҡайтыу менән, Сөмбөл һораған ожмах ояһын яһай ҙа башланы, Әлфис тә булышты.

– Атай, шәп була был!

Әсәләре, улар эшләгәндe ҡарап:

– Атаһы, ни була был? Баҡсаға һарай яһарға уйланыңмы әллә? – тип аптыраны.

– Солтан менән Солтанбикәгә ожмах ояһы яһайым. Әсәһе, киленгә күп ҡалдымы әле?

– Май уртаһы инде.

– Бәлки, ул яңылышҡандыр, мин әйтәм, дөрөҫ һанамағандыр.

– Бер генә тапҡыр булғандар, – тине Гөлфиә апай, бышылдап, – Булаттың башҡа ҡағылғаны юҡ, ти. Шул көндән һанаған.

– Ҡалған көндәрҙә нишләп йөрөгән?

– Унының инде малайыңдан һора. Ҡайҙа һуң әле үҙҙәре?

– Ҡоҙағыйға булышырға ебәрҙем.

Сөмбөлдөң әсәһе Сания апайға егеттәр бик иртә килеп инделәр.

– Һаумыһығыҙ, бына, ярҙамға килдек. Ниндәй эштәрең бар, барыһын да күрһәт, өлгөргән тиклем эшләрбеҙ.

Сөмбөлдөң әсәһе һөйөнөсөнән нимәгә тотонорға белмәне. Уға әле, былай ярҙам ҡулы һуҙып, бер кемдең дә килгәне юҡ ине.

– Белмәйем инде, балалар, эш күп ул, ҡайһыһын ҡушайым икән һуң?..

Иртәнге сәйҙе эстеләр ҙә эшкә керештеләр. Кис еткәндә баҡса ҡаҙылған, ҡоймалар турайған, утындар ярып өйөлгән, һарайҙар тап-таҙа йыйыштырылған ине. Сания апай уларҙы маҡтап туя алманы. Егеттәр, һуң ғына киске ашты ашап, ҡайтырға ҡуҙғалды.

– Сөмбөл бәпесләһә, бер үк хәбәр итегеҙ. Кейәү, килеп һөйөнөсөн алып китерһең.

Булатҡа «кейәү» һүҙе ҡыҙыҡ булып тойолдо, ул үҙен бер ҙә кейәү итеп һанамай ине.

Үҙ ауылдарына ҡайтып еткәс, матайын ауыл башында туҡтатты:

– Байрас, һин өйҙә күренмәй тор, клубҡа бар, берәй ҡыҙҙы оҙат, өйҙә һинең ҡайтҡаныңды белмәһендәр. Минең бараһы ерем бар. Төнгө икенән дә һуңға ҡалмам, ҡапҡа төбөндә көт.

Энеһе ауыҙын асҡансы, Булаттан елдәр иҫте. Байрас, туҙанлы килеш ҡайҙа барырға белмәйенсә, аптырап ҡалды. Ярай инде, йылғаға төшөп бит йыуырға, өҫтө ҡағырға ла клубҡа инеп сығырға булыр. Арыҡҡан. Ҡайтып йоҡлайһы ғына ла бит, өйҙәгеләргә, ағай күрше ауылға еңгә янына китте, тиһенме? Сөмбөл уның ҡатыны булһа, шулай бала көтһә, ул хәҙер ҡәйнәһендә рәхәтләнеп ҡунаҡ булып, иртәгә генә ҡайтыр ине. Сөмбөл йылмайып уны ҡаршылар, ул уны ҡосаҡлап үбер ине. Уның ирендәре үҙҙәре үк «үп мине, үп мине» тип саҡырып тора. Байрас, татлы хыялдарға бирелеп, йылмайып ҡуйҙы. Эх, ағай, ни үҙеңә, ни башҡаға... Байрас сылтырап аҡҡан һай ғына Ҡыйҙаш йылғаһына төшөп, битҡулын йыуҙы. Салбарын теҙгә тиклем һыҙғанып, йылға уртаһынан ашыҡмай ғына ҡараңғылыҡҡа атланы. Йылға өҫтөндә тулған ай йөҙә. Байрас бер аҙ уға ҡарап торҙо ла ауыр һулап ҡуйҙы. Нимә эшләргә? Клубҡа ла барғыһы килмәй... Сөмбөлдө алып ҡайтҡандан бирле уның өйҙән бер ҡайҙа ла сыҡҡыһы килмәй. Уның янында һөйләшеп кенә ултырырға ла риза...

Ағаһы ҡайтҡансы ваҡытты этеп-төртөп үткәрҙе Байрас. Булат менән иртәнге сәғәт өстә ҡапҡа төбөндә осраштылар, шыпырт ҡына матайҙы этеп индерҙеләр ҙә үҙ урындарына инеп ауҙылар.

Сөмбөл төндә уларҙың ҡайтыуҙарын ишетеп ятты. Иртән диван янынан үткәндә, иҙелеп йоҡлап ятыусы Булатҡа һоҡланып ҡарап торҙо.

Сөмбөл ишек алдында бер аҙ уйланып торғандан һуң, ятыраҡан алма баҡсаһына сыҡты. Ҡайныһы Сөмбөл ҡушҡанды эшләп тә ҡуйған, мейес кенә сығараһы ҡалған. Баҡса ҡунаҡ көткән өйгә оҡшағайны. Ул өҫтәлде, эскәмйәләрҙе һыйпап сыҡты. Нисек һәйбәт булған. Әйләнеп тирә-яҡҡа күҙ һалды. Баҡсаға сәскәләр ултыртырға кәрәк, уның өсөн ҡалаға барып орлоҡтар алырға булыр, Верочка янына ла инеп сығыр.

– Ҡыҙым, ниңә йоҡламайһың? – тине һыйыр һауырға сыҡҡан ҡәйнәһе, киленен йәлләп.

– Ҡәйнәм, мин бөгөн ҡалаға барып ҡайтырмын тигәйнем. Иртәнге автобус нисәлә икән?

– Һигеҙҙә. Ә ниңә бараһың?

– Минең, әсәй, бында сәскәләр ултыртҡым килә. Күҙ көнө шундай матур буласаҡ: тирә-яҡта төрлө-төрлө сәскәләр, алмалар, өҫтәлдә – самауыр.

– Ярай, ҡыҙым, ләкин үҙең генә барма. Ана, Булат менән икәү барығыҙ.

– Юҡ, әсәй, ул бик арыған. Улар иртәнге өстә генә ҡайттылар, йоҡлаһын. Үҙем менән Әлфисте эйәртермен.

Эшкә барырға тороп сыҡҡан Шәфҡәт ағай, киленен баҡсала күреп:

– Йә, нисек, килен, оҡшаймы? – тип һорайһы итте.

– Эй, ҡайным, шундай матур, шыма сыҡҡан, ҡулдарың алтын икән. Бына, ҡайным, күҙ алдыңа килтер: тиҙҙән алмағастар сәскә атасаҡ, көҙөн ҡыҙарып алма өлгөрәсәк.

Шәфҡәт ағай Сөмбөлдөң яҡты йөҙөн, көләс күҙҙәрен, бит остарын соҡорайтып, май ҡояшылай йылмайыуын күрҙе. Әйтерһең, уға бәхет өсөн ошо баҡса мөйөшө генә етмәгән. Йә, Хоҙай, ниндәй һөйкөмлө икән бит уларҙың килендәре. Был бала әле бөрө генә, сәскә атыр көндәре алда, ҡатын-ҡыҙ баланан һуң тағы ла асылып, матурайып китә. Быны Шәфҡәт ағай бик яҡшы белә, өс бала атаһы бит.

Сөмбөл Әлфис менән ҡалаға китте. Тәүҙә үҙе элек эшләгән балалар баҡсаһына барҙылар. Улар бәхетенә, бөгөн дежурҙа Верочка икән.

– Ҡояшым, ҡайҙан килеп сыҡтың?

Сөмбөл менән ҡосаҡлашып күрештеләр, гөр-гөр килеп һөйләштеләр.

– Верочка, икенсе килгәндә барыһын да һөйләрмен, ә хәҙер һин беҙгә баҡсаға ултыртырға күп йыллыҡ сәскә һуғандары бир әле.

Верочка сәскәләрҙе нисек ултыртырға икәнлеген дә аңлатты.

– Ҡояшым, күрәм: ныҡлап урынлаштың. Һеҙ бергә, тимәк, барыһы ла яҡшы.

– Юҡ, Верочка, беҙ бер ҡасан бергә була алмабыҙ. Ул башҡаны ярата.

– Улайһа, былар нимәгә кәрәк?

– Минән иҫтәлек булып ҡалһын. Уның ата-әсәһе мине бик ярата, был сәскәләр уларға рәхмәтем булһын...

Ҡаланан урап ҡайтҡас, кис менән Сөмбөл егеттәрҙән соҡор ҡаҙытты, тиреҫ ташытты. Барыһы әҙер булғас, теҙләнеп үрмәләй-үрмәләй, сәскәләр ултыртты. Әлфискә:

– Быныһы пион, быныһы ҡәнәфер, былары дәлиәләр, былары көҙ сәскәләре – ҡашҡарыйҙар. Бына быныһының картуфын көҙ ҡаҙып алып, баҙға һалырға кәрәк. Ә ҡалғандары шулай ултырһын. Һин уларға, мин булмағанда, һыу һибергә онотма, – тип ентекләп аңлатты. – Әлфис, әгәр мин китһәм, һағынырһыңмы?

– Ҡайҙа китһәң, мин һине бер ҡайҙа ла ебәрмәйем!

Улар, теҙләнгән килеш, бер-береһенә ҡарап йылмайышты.

– Ҡайҙа, бер әп итеп алайым әле үҙеңде. – Сөмбөл, балсыҡлы ҡулдары менән Әлфистең яңаҡтарын тотоп, танау осонан үбеп алды.

– Мин дә һине, – тип ул да апаһының битенән тотоп, танауын үпте.

Ике бысраҡ бит, бер-береһенә ҡарап, көлөшөргә тотондо. Йортта йөрөгән Булат менән Байрас ситтән генә уларҙы күҙәтте. Уларға ла ҡыҙыҡ булып китте, бар эштәрен ташлап, ошо икәүҙең үҙ-ара шаярыуын ҡарап тора башланылар. Сөмбөл торорға маташты, тора алмағас, Әлфис арттан уны күтәреп торғоҙмаҡсы булды, көсө етмәгәс, ҡулынан тарта башланы. Былар ҙы күҙәтеү – үҙе бер ҡыҙыҡ ине...

Өсөнсө май бигерәк йылы, матур көн булды. Сөмбөл иртән тороп, баҡсаға Шәфҡәт ағай һалған мейестә ашарға әҙерләргә булды. Оло ҡаҙанға аш һалып ебәрҙе.

Байрас ут үткәреп, магнитофон тоташтырҙы. Баҡсаға байрам төҫө керҙе. Күңелдәрҙе елкендереп, донъя буйлап моң ағылды.

– Еңгә, һиңә шулай оҡшаймы?

– Ә һинең үҙеңә?

– Оҡшай. Һинең менән бейеге килә, – тине Байрас, йылмайып.

– Бейер инек тә, ара йырағыраҡ, – тип эсен тотто Сөмбөл.

– Мин Әлфистән көнләшәм. Ул һәр көндө һине ҡосаҡлап йоҡлай, битеңдән үбә. Һин униҡы ғына.

Сөмбөл бөтә баҡсаны яңғыратып көлөп ебәрҙе:

– Ул бит әле бәләкәй.

– Шулай ҙа ул бит – ир заты. Хәҙер, ана, солтан да булып алды.

Байрас, хискә бирелеп, Сөмбөлдөң ирененә, күҙҙәренә текәлде, теле бәйләнде, ике ҡулы менән эскәмйә ситенә тотондо. Уның йөҙөнән күҙен ала алманы, ҡасан да булһа тыйылып ҡала алмам, ошо еләк кеүек һыуһыл ирендәрҙән айырыла алмам, тип ҡурҡты. Йөрәге дөп-дөп типте, ҡулдары эскәмйә таҡтаһын нығыраҡ ҡыҫты.

Сөмбөл генә бер ни аңламаны.

– Байрас, ә һинең яратҡан кешең бармы? Байрас, тим, ни уйлайһың, уян. Яратҡан кешең бармы, тим?

– Бар, ләкин ул мине яратмай шул.

Сөмбөл, сәйерһенеп, Байрасҡа ҡараны.

– Ни һөйләйһең, һинең кеүек егетте яратмау мөмкин түгел.

Сөмбөл ҡарашы менән Байрасты наҙланы, үрелеп сәсенән һыйпаны:

– Һин бит ир аҫылы, яратыр өсөн яратылған.

– Сөмбөл, ә һин мине ярата алыр инеңме?

– Алыр инем, ағайыңа тиклем осраған булһаң... Ләкин һин миңә ҡарамаҫ инең. Минең эше йүләрҙәр һеҙгә бер кискә генә кәрәк. Мөхәббәттең күҙе һуҡыр, тиҙәр, ысынлап та, дөрөҫ икән. Ерҙән йыраҡ китмәгән минең ише ҡыҙҙар һиндәй егеттәргә тиң түгел.

– Сөмбөл, бик тә тиң, һин иҫ киткес ҡыҙ. Һин ғорур, үҙеңә ауыр икәнлеген бер кемгә лә һиҙҙермәҫкә тырышаһың. Ә мин бер ни эшләй алмайым...

– Һин үҙеңде көсһөҙ тиһәң, миңә ни ҡала? Күңелемдә бер төйөр ултыра: мине яратмайҙар, минең кеүектәрҙе яратып булмайҙыр шул. Был төйөр ғүмерем буйы таралмаһа, нишләрмен?

Улар янына Булат килеп ултырҙы:

– Ауыҙға-ауыҙ ҡуйып, нимә серләшәһегеҙ? – Асыулы ғына энеһенә ҡараны.

Сөмбөл, аш әҙерләр өсөн, мейес янына барып баҫты.

– Бер нәмә лә түгел, – тип йылмайҙы Байрас, – рәхәт бит уның менән һөйләшеү.

– Күренә, ана, күҙҙәрең нисек яна, ҡыҙҙар етмәйме әллә һиңә?

– Ул бит барыбер һиңә кәрәкмәй, бында ла уны мин алып ҡайттым. Һин яҙылышмағас, ул әлегә бер кемдеке лә түгел. Шулай булғас, ағай, йә өйләнеп йәшә, йә юлымда торма.

– Ә бала?

– Күрмәйһеңме ни, мин уны ошо килеш тә яратам.

Улар, Сөмбөл ишетмәһен тип, әкрен генә һөйләштеләр. Ике туған араһында йәшен үткәндәй булды.

Төшкө аш ваҡыты етте. Сөмбөл өйҙән һауыт-һаба алып сығып, өҫтәл әҙерләне. Әсәһе менән атаһы ла эштән ҡайтып етте.

– Әйҙәгеҙ, баҡсаға сығайыҡ. Бөгөн көн матур, йылы, – тине Сөмбөл, йылмайып. Ғәҙәттәгесә, олонан кесегә аш бүлеп ҡуйҙы.

– Әлфис ҡайҙа йөрөй инде?

– Ҡайғырма, әсәй, әлегә күршеләрҙә. Ҡоймаҡ еҫе сыҡҡанын көтә.

– Аҙындырып бөтөрҙөң үҙен, килен, көн дә ҡоймаҡ менән һыйлап.

– Хәҙер һеҙҙе лә һыйлайым.

Сөмбөл ҙур табала ҡоймаҡ бешерә башланы, бөтә урамға тәмле еҫ таралды. Әлфис тә сабып ҡайтып етте.

Байрамдар үткәс, гөрләп торған өҫтәл яны бушап ҡалды. Булат менән Байрас та китергә йыйынды.

– Сөмбөл менән хушлаштыңмы? – тине Байрас ағаһына.

Булат өндәшмәй генә баҡсаға инде, ни әйтергә белмәй, туҡтап ҡалды:

– Беҙ киттек, тағы бер аҙнаға түҙерһең бит әле, – тине ул.

– Мин түҙермен... Ул түҙерме?

Уларға икәүҙән-икәү ҡалып аралашыу уңайһыҙ, берҙе уйланылар, икенсене һөйләнеләр.

Сөмбөл баҡсала бер яңғыҙы ҡалды.

Көндәр әкренләп үтә торҙо. Еңеү байрамы алдынан ул ауырый башланы. Иртәнән үк кәйефе юҡ ине, шулай ҙа бер аҙна ваҡыт бар, үтер, тип уйланы. Ҡайныһы төшкө ашҡа ҡайтып китте. Сөмбөл уға үҙенең ауырыуын әйтергә оялды, нисек тә ҡәйнәһе ҡайтҡансы түҙергә булды. Үс иткәндәй, Әлфис тә ҡайҙалыр китеп юғалды. Бала шул, берәй уйынға йәбешһә, донъяһын онота. Иртән башланған ауыртыу көсәйгәндән-көсәйҙе. Ҡайҙа барырға, нишләргә белмәйенсә, Сөмбөл арлы-бирле йөрөнө, күршеләр ҡоймаһына барҙы – һис кем күренмәне. Инде атларлыҡ хәле ҡалманы, хәҙер ҡәйнәһе ҡайтып етер тип, тынысланырға тырышты. Көсһөҙлөгөнән әкрен генә илап ебәрҙе. Күңелен ҡурҡыу биләп алды, ҡыҫып-ҡыҫып башы ауыртты. Эстән нимәлер этә, ауыртыуға түҙә алмай, ҡысҡырғыһы килде. Ирендәрен тешләп ыңғырашты, аҙым атларға ҡурҡып, ишек яңағын ҡосаҡлап әкрен генә иланы.

Шул ваҡыт ҡапҡа төбөнә, туҙандар туҙҙырып, йөк машинаһы килеп туҡтаны, ҡапҡанан Байрас килеп инде. Сөмбөлдө күреп, башта һиҫкәнеп китте.

– Сөмбөл, нишләп тораһың бында? Әллә илайһың инде?

– Байрас, үләм бит...

– Әллә сирләйһеңме?

– Иртәнән бирле.

– Өйҙә кеше юҡмы ни? – Үҙе, ни эшләргә лә белмәй, Сөмбөл тирәһендә бөтөрөлдө.– Әйҙә, ятып тор, хәҙер мин берәй еңел машина табам. Бер аҙ түҙ инде, – тип Байрас сығып йүгерҙе.

Бер аҙҙан ике йорт аша ғына йәшәүсе күршеләренең машинаһын алып та сыҡты. Сөмбөлдө күтәреп, йайлап ҡына артҡа ятҡырҙы.

Байрас үҙе машина ҡыуҙы, шул уҡ ваҡытта артҡа ҡараштырғыларға ла өлгөрҙө. Сөмбөл күҙен йомған, ирендәрен тешләгән, үҙе ыңғыраша.

Элек Ахундың үҙендә бала тыуҙырыу йорто бар ине лә бит, хәҙер бына Учалыға, ҡалаға, күсерҙеләр. Егерме биш саҡрым ара, бер ҡараһаң, күп түгел, ләкин бындай ваҡытта...

– Сөмбөл, түҙ, күп ҡалманы, анау тау артында ғына...

– Миңә оят, ауыр саҡта гел һиңә тура киләм, һәр ваҡыт янымда һин булаһың. Булатҡа ғына мин дә, бала ла кәрәкмәй.

Сөмбөлдөң күҙенән йәштәре тәгәрәне, ауыртыуға түҙә алмайынса ыңғыраш-ты, ҡысҡырмаҫ өсөн ауыҙын ҡапланы. Байрас, күҙгәнән күреп, үрелеп уның ҡулын ауыҙынан тартып алды.

– Ҡысҡыр, ила, оялма. Мин һинең янында. Ҡурҡма, һәр ваҡыт һинең менән булырмын. Хоҙай яңылышты, ағай урынында мин булырға тейеш инем.

– Һин мине йәлләйһең генә, Булат та йәлләй. Этте эйәртмә, эйәрткәс типмә, тиҙәр. Мин шул эт кеүек. Аңлаһаң ине хәлемде...

– Мин һине яратам да, йәлләйем дә, ләкин һиҙмәйһең генә...

– Иҫән ҡалһам, яҡшылыҡтарыңды мәңге онотмам. Улыма ла исемде һин ҡушырһың.

– Бәлки, ҡыҙ булыр, былай ҙа өй тулы ир-ат.

– Юҡ, малай була. Мин төшөмдә... теге ваҡытта больницала төш күрҙем...

Больницаға килеп еткәндә, Сөмбөлдөң һөйләшерлек хәле ҡалмағайны, йөҙө лә көл төҫөнә ингәйне. Байрас, уны күтәреп инешләй, ишекте тибеп асты ла:

– Тиҙерәк, үлә! – тип ҡысҡырҙы.

Ҡабул итеү бүлмәһендә ултырған шәфҡәт туташы һикереп торҙо.

– Бына бында һалығыҙ, – тип үҙе табип артынан йүгерҙе.

Байрас үҙе лә ҡурҡыуҙан ап-аҡ булып ағарҙы, Сөмбөлдә иһә бөтөнләй йәшәү рәүеше һиҙелмәй ине. Улар алып инеп киткәс, табип:

– Ҡатынығыҙҙың фамилияһы нисек, ҡасан сирләй башланы? – тип һораны.

– Арыҫланова. Иртәнән сирләйем, тине.

– Нишләп һуң алып килдегеҙ, хәле бик насар, – тип табип Байрасҡа асыуланып алды. – Хәҙер кейемдәрен сығаралар, көтөп тороғоҙ, – тип инеп китте.

Ни эшләптер шунда уҡ кире йүгереп сыҡты, телефондан шылтыратып, әллә ниндәй табиптарҙы саҡыртты, ҡайҙалыр шылтыратып, ҡан һоратты ла йүгереп кире инеп китте. 15 минут үтеүгә, Сөмбөл ятҡан бүлмәгә йүгерә-атлай ике ир кеше инеп китте. Һөйләшеүҙәренән уларҙың да табип икәнен аңлап алды Байрас. Сөмбөлдөң кейемдәрен тотоп, шәфҡәт туташы сыҡты, уның ни әйтергә белмәй аптырауы йөҙөнән күренә ине.

– Һуң килтерҙегеҙ шул, хәле бик ауыр.

– Уны ҡотҡарырҙармы? – тине Байрас, хәле бөтөп.

– Улар мөмкин булғанын эшләйҙәр, – тип шәфҡәт туташы Сөмбөлдөң кейемдәрен Байрасҡа һуҙҙы.

– Йә, Хоҙайым, үҙең ярҙамыңдан ташлама. Беҙ бит барыбыҙ ҙа уны бик яратабыҙ, – тип Хоҙайға ялбарҙы. Билдәһеҙлек уның йәнен телгеләне, бер аҙ шулай ултырғас, ағаһына хәбәр итергә кәрәклеге иҫенә төштө. Машинаны юғары тиҙлектә дөйөм ятаҡҡа ҡыуҙы. Ағаһының бүлмәһенә инә-инешләй:

– Әйҙә, кейен, Сөмбөл больницала! – тип ҡысҡырҙы.

Машинаға сығып ултырғас, Булат аптырап һорап ҡуйҙы:

– Кем әйтте?

– Үҙем ауылдан алып килдем.

– Һиңә тау арҡыры ҡысҡырҙымы?

– Ҡысҡырманы шул, ҡысҡырһа, былай килеп сыҡмаҫ ине. Ул иртәнән сирләй

башлаған, ә өйҙә кеше булмаған. Үтеп барышлай ғына ауылға һуғылғайным. Бында килгәнгә ике сәғәт булды, бер төркөм табип бер нәмә лә эшләй алмайҙар.

Больницаға ингәс, өмөт менән шәфҡәт туташына баҡтылар, ләкин ул баш ҡына һелкене. Ул арала тағы бер ауырлы ҡатынды килтерҙеләр. Ярты сәғәттән шәфҡәт туташы сығып, бәхетле ирҙе: «Улығыҙ бар!» – тип шатландырҙы. Ата кешенең ауыҙы ҡолағына етте, рәхмәттәр әйтә-әйтә, һөйөнсө алырға, бәпәй тәпәйе йыуырға сығып йүгерҙе. Байрас, түҙмәйенсә, тороп уҡ баҫты.

– Инде ике сәғәт, ни булһа ла әйтә алмаҫһығыҙмы?

Шәфҡәт туташы һүҙһеҙ генә тороп, теге бүлмәгә инеп китте, бер аҙҙан сығып:

– Хәҙергә бер ни ҙә әйтә алмайым, операция бара, – тине.

– Ниндәй операция? Ул бит бәпәйләргә тейеш.

– Ҡатынығыҙҙы ваҡытында килтерһәгеҙ, былай булмаҫ ине, тинем бит. Ул үҙе бәпәйләй алманы.

– Ә бала?

– Белмәйем. Операциянан һуң табип үҙе сығып әйтер.

Байрастың башына күҫәк менән һуҡҡандай булды, Булат янына барып ултырҙы.

– Ишеттеңме, ағай?

– Ишеттем, тик мин, былай уҡ булыр, тип башыма ла килтермәгәйнем.

Байрастың асыуы йөҙөнә сыҡты.

– Әйттем мин һиңә, ял ал да ауылға ҡайт, тип. Үлһә, һин нисек йәшәрһең, мин нисек йәшәрмен? Һиңә кәрәкмәһә, миңә кәрәк Сөмбөл, – тине ул, йөҙөн ике ҡулы менән ҡаплап.

Тағы бер сәғәт ваҡыт үтеп китте. Ҡабул итеү бүлмәһенән оло йәштәге табип сыҡты. Уны күргәс, Байрас үҙенең һикереп тороуын һиҙмәй ҙә ҡалды. Булат та тороп баҫты. Улар ялбарыулы ҡараштарын табипҡа текәне. Табип, Байрасҡа ҡарап, тыныс тауыш менән:

– Улығыҙ бар. Шундай бәләкәй генә ҡатын өсөн бала бик ҙур. Баһадир. Ҡатынығыҙҙың хәле бик ауыр, операция яһарға тура килде. Операция ваҡытында йөрәге туҡтап ҡурҡытты. Мин уны икенсе тапҡыр ҡотҡарам бит, ниңә шул тиклем интектерәһегеҙ? Ул иҫ киткес ҡатын.

– Ул тереләсәкме?

– Беҙ ҡулыбыҙҙан килгәнде эшләнек. Тағы ике көн көтөргә кәрәк, кризистан сыға алһа, тереләсәк. Бер йылда ике тапҡыр үлемде еңеү һинең кеүек таҙа ирҙәргә лә ҡыйын. Ул сабый ғына, ә инде йөрәге яраланып бөткән. Көтөргә кәрәк. Ҡайтығыҙ, иртәгә тиклем йоҡлаясаҡ. Тағы бер нәмә: бәлки, ул башҡа бала таба алмаҫ, талап итмәгеҙ.

Булат менән Байрас бер-береһенә ҡараштты.

Сөмбөл бик ауырлыҡ менән терелде. Аҙна аҙағында уның янына, һис көтмәгәндә, аҡ халат кейгән Римма менән Байрас килеп инде. Байрас әкрен генә уның янына ултырҙы. Сөмбөлдөң күҙҙәрендә йәш тамсылары ялтыраны, унан йылмайып ебәрҙе.

«Әлдә һин бар донъяла» – тип әйтәһе ине, тамағына төйөр тығылды.

– Илама, улайһа мин дә илайым, – тине Байрас, эйелеп. – Мин малайҙы ҡарап сыҡтым. Ул һиңә оҡшаған: шундай матур. Әсәйемдәр һиңә сәләм әйтергә ҡуштылар, атайым бишек әҙерләй. Һинең яныңа ағай нисек инергә белмәй йөрөй, хәленән килһә, себен булып тәҙрәнән осоп керер ине. Ә мин барыбер беренсе булып күрҙем, – тип йылмайҙы.

– Байрас, рәхмәт һиңә: улым өсөн дә, үҙем өсөн дә. Һине Хоҙай улдар, ҡыҙҙар менән һөйөндөрһөн. Һин бик яҡшы атай булырһың, – тип Сөмбөл әкрен генә

унының ҡулын ҡыҫты. Байрас ул ҡулдан күҙен алманы. Был минутта уға шундай рәхәт ине.

Булат та, Римма менән һөйләшеп, Сөмбөл янына инде. Ул килгәндә, киске имеҙеү ваҡыты ине.

– Туҡта, инмәй тор, ҡатындар бала имеҙәләр. Ана һинеке, шунан ғына ҡарап тор, һуңыраҡ инерһең. Байрас күптән килеп күреп китте, ә һин яңы киләһең. Белмәйем, ҡайһығыҙ күберәк яраталыр Сөмбөлдө, – тип йылмайып, Римма китеп барҙы.

Булат ишек тәҙрәһе аша күҙәтә башланы. Сөмбөл йылмая-йылмая баланың башынан һыйпай, еҫкәп тә ала, күҙҙәре менән иркәләй, ә бәпәй имә лә имә. Булаттың да баланы еҫкәп-үбеп ҡарайһы килде. Сөмбөлдө быңдай халәттә беренсе тапҡыр күреүе. Күберәк белгән һайын, Сөмбөлдөң әллә ниндәй сифаттары асыла бара. Ул, элек уйлағанса, буш та, елбәҙәк тә, елғыуар ҙа түгел. Нисек ҡарай балаға, күҙҙәрендә күпме наҙ, иркәләү сағыла. Әле күптән түгел генә үҙе лә, бала кеүек, уның ҡуйынында иркәләнә ине, ә хәҙер ниндәй етди. Булаттың улар янына ингеһе, улын ҡулына алып һөйгөһө килде, йөрәге дөп-дөп типте, үҙе һиҙмәҫтән йылмайып ҡуйҙы.

– Бәпесегеҙҙе кереп күрегеҙ, хәҙер алып киләм, – тине аҡ халатлы шәфҡәт туташы. Палата ишеген асып: – Ҡайһығыҙҙың ире тилмереп тора? Инһенме? – тип һораны.

Палатала ятыусылар бөтәһе ишеккә ҡараны, ләкин Сөмбөл генә үҙ уйҙарына сумып ултыра бирҙе. Ул шәфҡәт туташының һорауын ишетмәне лә. Янына Булат инеп ултырғас, һиҫкәнеп ҡуйҙы, тиҙерәк күкрәген ҡапланы.

– Һаумы, Сөмбөл, хәлең нисек?

– Ярайһы. Күрәһең, иҫән ҡалдыҡ.

– Ҡайҙа, мин дә ҡарайым әле, кемгә оҡшаған?

– Миңә, – тине Сөмбөл, тик баланы күрһәтергә ашыҡманы, бала һаман имә ине. Балаларҙы алырға ингән шәфҡәт туташы улар янына иң һуңғы булып килде.

– Туйҙығыҙмы? Беҙҙең баһадир тәмләп, оҙаҡлап ашарға ярата шул. Атаһы күрҙеме әле, малайығыҙ бик сибәр булыр, хәҙерҙән үк үҙ баһаһын белә: башҡалар кеүек, тик торғанда илап ятмай, тыныс. Атаһына оҡшаһа, бөтә ҡыҙ унығы булаһаҡ, – тип шәфҡәт туташы баланы алып сығып китте.

Сөмбөл менән Булат та әкрен генә коридорға сыҡты.

– Һин ауылдан әйберҙәремде алып килерһең инде, бер нәмә лә ҡалмаһын, – тине Сөмбөл.

– Нисек бөтә әйберҙәрҙе? Бала кейемдәрен генә түгелме ни?

– Бала тапҡас, ул йортҡа ҡайтмайым, тип һиңә һүҙ бирҙем. Һиңә бар юлдар асыҡ. Атай менән әсәй миңә рәнйемәһен, барыһы өсөн рәхмәт уларға. Әйберҙәремде Байрас Верочкаға илтеп ҡуйһын, мине ул ҡаршы алыр.

– Сөмбөл, ни һөйләйһең һин?! Былай ярамай бит, атайым мине өйгә индермәйәсәк.

– Ә һин баланың да, минең дә кәрәкмәүемде аңлатырһың. Ир кеше бит, аңлар.

– Ә бала? Мин бит уны тотоп та ҡараманым.

– Баламы? Бала минеке, яратҡан кешеңдән үҙ балаларың булыр. Был баланы күрмәүең хәйерлерәк, һин уны барыбер мин яратҡан тиклем ярата алмаясаҡһың. Ул һиңә һәр ваҡыт әлеге бәхетһеҙ көндәреңде хәтерләтеп торасаҡ, шуға күрә башҡа килмә, икебеҙгә лә шулай еңелерәк булыр.

– Туҡта әле, Сөмбөл, яҡшылап һөйләшәйек.

Булат кәрәкле һүҙҙәрҙе онотто. Сөмбөл үҙенең һалҡын, ҡоро һөйләшеүе менән бысаҡһыҙ киҫә – исмаһам, илаһын, битәрләһен ине. Булат, нишләргә белмәй, уны ҡосаҡлап алды, ябыҡ, бәләкәй генә Сөмбөл уның ҡосағына кереп сумды. Ул юғалып ҡалды, ләкин күҙ йәше сығарманы. Булат уның сәстәренән һыйпап үпте.

– Сөмбөл, кисер мине, ләкин кинәт киҫмә әле. Мин һине лә, баланы ла күреп торорға теләйем. Һеҙҙе ташламам, ярҙам итермен.

Сөмбөл әкрен генә ситкә тартылды.

– Йәлләмә, мин бит хәҙер әсәй кеше, бер кемдән дә ҡурҡмайым, бер кемдән дә оялмайым. Һин дә минән бер меҫкен ташландыҡ Сөмбөл яһама, беҙ улым менән кемдеңдер, шулай уҡ һинең дә, йәлләүеңә мохтаж түгел. Ҡурҡма, мин юғалмам, мине башҡа ялған һөйөү менән алдай алмаҫтар. Элекке бер ҡатлы Сөмбөл юҡ хәҙер. Һау бул.

Ул, артына ла боролоп ҡарамайынса, палатаға инеп китте. Был минутта Булат үҙен Сөмбөлдән дә бәләкәй тип хис итте. Хәҙер ни эшләргә? Аталарына, Фәриҙәгә нимә тиергә? Ул уны, ата-әсәһе менән таныштырыр өсөн, һабантуйға саҡырғайны. Сөмбөл ҡайтмаһа, атаһы Булатты мәңге кисермәйәсәк.

...Йома етте. Был юлы Булат ауылға үҙе генә ҡайтты, Байрас ни эшләптер күренмәне. Һуңғы аҙнала өйҙә кемдер етмәй кеүек тойолдо. Өйҙәгеләрҙең һөйләшеүе лә гел Сөмбөлгә барып тоташа. Ҡайтыуына атаһы ике бишек йүнләп ҡуйған, береһе – өйҙә, икенсеһе баҡсалағы ҡарт алмағас ботағына эленгән. Быларҙы күргәс, Булат бөтөнләй юғалып ҡалды, бишекте һелкетеп ҡараны, Сөмбөл ҡулындағы баланы күҙ алдына килтерҙе.

– Нимә, улым, һин дә көтәһеңме? – тине әсәһе, улының бишек янында уйланып тороуын күреп. – Яндарына керҙеңме, ҡасан сығаралар?

– Әсәй, Сөмбөл, бында башҡа ҡайтмайым, тине.

Булат үҙ тауышын үҙе таныманы, ниндәйҙер юғалып, аптырап ҡалған кеше тауышы ине был. Уның һүҙҙәрен атаһы ла ишеткән икән:

– Нисек ҡайтмай? Ҡайҙа бара?

– Белмәйем, бындағы барлыҡ әйберҙәрен алып килергә ҡушты.

– Үҙен күрҙеңме һуң? – тине әсәһе, аптырап.

– Уны ла, баланы ла күрҙем. Бала тыныс, бушҡа илап ятмай, ти шәфҡәт туташы.

– Ниңә бында ҡайтмай?

– Беләһең бит инде, атай, теге ваҡытта, миңә бала кәрәкмәй, тигән инем. Сөмбөл: «Бала тыуғас та китермен, теләгән кешеңә өйләнерһең», – тине. Бына хәҙер ул китә.

– Юҡ, улым, һин теләһәң нәмә эшлә, ләкин мин беренсе ейәнемде күрмәйенсә, ҡулыма алмайынса, үлемдән ҡалған йәш ҡатынды аяҡҡа баҫтырмайынса бер ҡайҙа ла ебәрергә йыйынмайым. Үҙем барып алып ҡайтам, – тип һөйләнә-һөйләнә, Шәфҡәт ағай сығып та китте.

Булат баҡсаға сыҡты, уға бик ауыр ине. Алмағастар шау сәскәлә, Сөмбөл ултыртҡан бар ләлә лә сәскә атҡан. Был сәскәләрҙе Сөмбөл, йыл да сәскә атып, үҙемде онотторомайым, һәр ваҡыт күҙ ғәйебеңде тойоп йәшә, тигән маҡсат менән ултыртҡандыр.

Төндә Байрас ҡайтты, ул бик бойоҡ күренде.

Икенсе көндө иртән атаһы сәй янында һүҙ башланы:

– Әсәйегеҙ менән былай кәңәшләштек: «Беҙ төшөп ҡалғандарҙан түгел, Аллаға шөкөр, өс ир-ат эшләп йөрөйбөҙ, йыйған аҡсабыҙ ҙа бар. Машина алайыҡ, ейәнемде өр-яңы машинабыҙға ултыртып алып ҡайтҡым килә. Етәр инде ауыл буйлап кешегә ялынып йөрөргә. Йә, ҡайҙа барып, ниндәй машина алабыҙ?

Булат менән Байрас бер-береһенә ҡарашып ҡуйҙы. Улар ни ҙә булһа әйтергә йыйынғансы, Әлфис үҙ фекерен әйтеп һалды:

– Атай, «Жигули» алайыҡ!

– Ундай машина бик ҡиммәттер бит, улым, – тине әсәһе.

– Булһын, аҡса етәрлек. Байрас улым, һин шофер кеше, машинаның ҡайһыһы һәйбәт икәнен беләһеңдер. Мин һеҙгә аҡса бирәм, ә һеҙ ейәнемде ҡаршы алырға ҡапҡа төбөнә машина ҡайтарып ҡуйығыҙ. Киленде сығараһы көндө лә белегеҙ. Һаҡларға иртәнән үҙем барып ултырам, ейәнемде бер ҡайҙа ла ебәрмәйем.

Аталарының әмере үтәлде: ҡапҡа төбөнә ялтырап торған өр-яңы «Жигули» ҡайтып ултырҙы. Бер ай тигәндә Сөмбөлдө больницанан сығарҙылар, иртән кейемдәрен килтерҙеләр. Уға беренсе ҡатҡа төшөргә ҡуштылар, баланы шунда биләп бирәбеҙ, күтәрһегеҙ, тинеләр. Сөмбөл, ҡаршыларға Верочка килгәндер тип, әкрен генә атлап аҫҡа төштө. Яралары төҙәлеп бөтмәгәнгә, башы әйләнә, йөҙө ап-аҡ, хәле лә юҡ. Йығылмаһам ярай ине тип, ҡурҡа-ҡурҡа ҡаршылау бүлмәһенә инде, инде лә бүлмә уртаһында баҫып торған ҙур кәүҙәле Шәфҡәт ағайҙы күреп аптырап ҡалды. Сөмбөл уға ҡурҡып ҡараны, үҙе итәк остарын бөтәрләне. Ни эшләптер Верочка күренмәне. Шәфҡәт ағай, ап-аҡ йөҙлө,ябыҡ кәүҙәле киленен күргәс, йәлләп ҡуйҙы.

– Кил әле, ҡыҙым, бына бында ултырып торайыҡ, – тип Сөмбөлдө ҡосаҡлап, үҙе янындағы ултырғысҡа ултыртты.

Сөмбөл былай булырын көтмәгәйне, ҡаушауҙан телһеҙ ҡалды. Өндәшмәй генә башын аҫҡа эйҙе, ҡайныһынан оялып, итәген тартҡыланы.

– Һин, ҡыҙым, насар уйлама: һиңә хәҙер ныҡлап терелергә кәрәк, баланы ла ҡарарға кәрәк. Һин бит беҙҙең ҡыҙыбыҙ кеүек. Нисек һин беҙгә әйтмәйенсә китергә булдың? Ҡайғырып һарғайһындар тинеңме? Беҙ, ҡыҙым, өйгә ҡайтайыҡ, ҡайтҡас барыһын да һөйләшербеҙ.

Сөмбөл, «Юҡ!» тигәнен аңлатып, баш сайҡаны, үҙенең күҙ йәштәре тамды.

– Юҡ, атай, ул мине яратмай, ҡайтмайым, – тип бышылданы.

– Һин уға түгел, беҙгә ҡайтаһың.

Шул ваҡыт ишектән бала күтәргән аҡ халатлы шәфҡәт туташы сыҡты.

– Арыҫлановты кем ҡаршы ала?

– Мин, – тип һикереп торҙо Шәфҡәт ағай. – Ҡайҙа әле, беренсе булып ейәнемде үҙем алайым. Бисмиллаһир-рахманир-рәхим, ай-ай, ейәнем үҙемә оҡшаған икән. Әйҙә, улым, өйгә ҡайтайыҡ. Бына, ҡыҙым, ейәнемде ҡараған өсөн һеҙгә күстәнәс, – тип шәфҡәт туташына торт менән шарап бирҙе.

Шәфҡәт ағай бер ҡулына бала күтәреп, икенсе ҡулы менән киленен етәкләп ишек алдына сыҡты. Уларҙы Булат, Байрас, Әлфис көтөп тора ине. Иң беренсе булып Әлфис апаһын ҡосаҡлап алды.

– Апай, беҙ һине ҡаршылар өсөн машина һатып алдыҡ. Әйҙә, ҡайтайыҡ, әсәйем һеҙҙе көтә.

Сөмбөл уны ҡосаҡланы ла, тыйыла алмайынса, илап ебәрҙе...

Байрас, ҡайтҡанда, алғы көҙгөнән Сөмбөлгә күҙ төшөргөләп алды. Шәфҡәт ағай иһә ейәненә ҡарап һөйләнеүендә булды. Селтәрҙе асып йылмайҙы, ейәненә һоҡланып туя алманы, эйелеп еҫкәп тә алғыланы.

– Ҡайтҡас, улымды мунса индерербеҙ. Ҡыҙым, ниндәй исем ҡушабыҙ был батырға?

– Атай, исемде Байрас ҡушһын. Беҙҙе ҡотҡарыусы ул бит, – тине Сөмбөл, Булатҡа ҡарамайынса ғына.

Байрас менән Сөмбөлдөң күҙ ҡараштары көҙгөлә осрашты. Был ҡарашты Сөмбөлдөң беренсе күреүе түгел, шулай ҙа уның мәғәнәһен аңлап бөтөрмәне. Ул оҙаҡ илауҙан шешенгән күҙҙәрен аҫҡа төшөрҙө.

Байрастың йөҙө етди. «Минең улым булһа, Азамат тип ҡушыр инем. Азамат Байрасович – матур яңғырай, килешә лә», – тип уйланы, саҡ ҡына ҡысҡырып әйтмәне.

– Был маҡтаулы эште, атай, мин һиңә тапшырам. Әйҙә, үҙең ҡуш исемде ейәнеңә, тик революцияға тиклемге булмаһын.

– Ә шулай ҙа, улым, һин ниндәй исем ҡушыр инең?

– Азамат.

– Ниңә, бик матур исем, Азамат икән – Азамат булһын. Булат, ниңә өндәшмәйһең, оҡшаймы улыңдың исеме?

– Оҡшай, атай, оҡшай, – тип йылмайҙы Булат.

– Улайһа, Азамат Булатович булды улыбыҙ. Бына, күр, улым, был – һинең тыуған ауылың Ахун, күр, урамдары ниндәй киң, мәсетен, манараһын ҡара, хатта персональный айы ла бар. Тирә-яҡҡа берәү генә ул, бер ауылда ла юҡ бындай байлыҡ. Был, улым, – «Ҡыҙыл партизан» колхозының ғорурлығы!

Ҡапҡа төбөнә ҡайтып туҡтағас, машина ҡысҡыртып алды.

Өйҙән, йүгерә-атлай, байрамса кейенгән Гөлфиә апай сыҡты. Ул иң башта Сөмбөл ултырған яҡҡа килде. Сөмбөл әле лә: «Ниңә бында ҡайттым инде? Мин уға ҡайтмайым тип һүҙ бирҙем. Хәҙер бына уның муйынына беҙҙе берәүҙән икәү итеп аҫтылар. Мине бөтөнләй күрә алмаҫлыҡ дәрәжәгә еткән, больницанан сыҡҡаны бирле күтәрелеп тә ҡараманы», – тип уйҙарына сумып ултыра бирҙе. Уның машинанан төшөрлөк хәле лә, теләге лә юҡ. Башын аҫҡа эйеп, битенә төшкән сәстәре артына йәшеренмәксе булды.

Булат, сығып, ишекте асты.

– Сөмбөл, әйҙә төш, инәбеҙ.

– Һаумы, ҡыҙым, иҫән-һау ҡотолоп ҡайтыуың менән. Әйҙә, инәйек, ҡыҙым, – тип илай-илай, Гөлфиә апай Сөмбөлдөң ҡулынан етәкләп, өйгә алып инде. – Һөйләшербеҙ, аңлашырбыҙ. Әле бит, балам, тормошоң башлана ғына. Һиңә терелергә, аяҡҡа баҫырға кәрәк, баланы үҙем ҡарармын. Һиңә хәҙер ял итергә, нығытып ашарға кәрәк. Буҙа өлгөргән, ҡымыҙ алып ҡайтты атайың, һарыҡ һуйҙыҡ. Аша-эс, аяҡҡа баҫ. Ҡайҙа, ейәнемде мин дә күрәйем, бирегеҙ әле үҙемә...

Сөмбөл аҙна-ун көн буйы үҙ мөйөшөнән сыҡманы. Гөлфиә апай килене янында йүгереп кенә йөрөнө. Ауыл йолаһы буйынса, килененә көн дә һары май менән әсе ҡорот һурпаһы эсерҙе.

– Эс, килен, эс, баланан һуң эсте һәйбәт йыя. Бына, буҙа ла эс, ул тынысландырып йоҡлата, ашҡаҙанды яҡшыраҡ эшләтә, ә балаға бейә һөтө лә эсерештерербеҙ. Мин малайҙарҙың барыһына ла эсерҙем. Аллаға шөкөр, ниндәй таҙалар. Ҡымыҙға ҡытлыҡ юҡ. Беҙҙең ауыл үҙенең яҡшы ҡымыҙы менән данлыҡлы. Ахун ял йортона әллә ҡайҙарҙан дауаланырға киләләр. Атайың хәҙер бейәләр көтә, эй-эй, һин күрһәң, тауҙарҙа ҡара болот булып йылҡы көтөүе йөрөй. Калхуздың байлығы ла, ғорурлығы ла...

Шулай итеп, Сөмбөл тағы ошо йортта ҡалды. Күпкәме-аҙғамы – әлегә үҙе лә белмәй.

Сөмбөл яратҡан ҡарт алмағасы янына сыҡты, уныһы инде сәскәләрен ҡойған. Уның янына Байрас килеп ултырҙы, улар бер-береһенә ҡарамаҫҡа тырыштылар. Сөмбөлдөң ғазапланыуҙарын күреп, Байрастың йөрәге әрнене, хәленән килһә, барлыҡ ауырлыҡтарҙы үҙе күтәрер ине.

– Сөмбөл, ниңә һин былай өҙгөләнәһең, миңә булһа ла эсеңде бушат, һиңә беҙҙә йәшәү шул тиклем ауырмы? Нимә борсой һине, нимәнән ҡурҡаһың? Сөмбөл, күҙҙәремә ҡарап әйт әле, нимә теләйһең һин? Беҙ бөтәбеҙ ғәйепле кеше төҫлө йөрөйбөҙ, өй өҫтөндә ҡара болот аҫылынып торған кеүек. Атай менән

әсәйҙең ни ғәйебе бар, улар һиңә яҡшылыҡ ҡына теләйҙәр бит. – Ул әкрен генә Сөмбөлдөң ҡулын ҡыҫты. – Мин, үҙең beләһең, һәр ваҡыт ярҙамға әҙермен, әйт кенә, эсеңә йыйма. Һин бит хәҙер әсә кеше, һиңә көслө булырға, аяҡта ныҡ торорға кәрәк. Ҡасан терелеп аяҡҡа баҫаһың, теләһәң... – Ул, һүҙен әйтеп бөтөрә алмайынса, туҡтап ҡалды, унан ауыр һулап: – ...шул ваҡытта китерһең, – тине лә башын ситкә борҙо.

– Хәҙер мине барығыҙ ҙа йәлләйһегеҙ, бала үҫеп, әҙерәк ҡулға тоторлоҡ булғас, мин һеҙҙе йәлләрмен. Бының сиге ҡайҙа, Байрас? Һине күрә алмаған кеше менән бер түбә аҫтында нисек йәшәргә кәрәк? Мин ағайыңа, китермен, юлыңа кәртә булмам, тип һүҙ бирҙем. Атай менән әсәйҙе мин бик яратам, улар алдында оят миңә. Улар, бала булғас, барыһы ла үҙгәрер, тип уйлағандарҙыр, ләкин беҙҙе бала бәйләй алмай. Баланы күрмәһәгеҙ, еңелерәк булыр ине. Иртәме-һуңмы, миңә барыбер китергә тура киләсәк. Байрас, исмаһам, һин аңларға тырыш мине.

– Сөмбөл, һин дә аңла: минең һине бер ҡайҙа ла ебәргем килмәй. Минең хаҡҡа, әсәйҙәр хаҡына, зинһар, ашыҡма, – тип Байрас уның ҡулын ҡыҫты. Матур зәңгәр күҙҙәрҙә йәш ялтыраны, ул күҙҙәрҙә әллә ниндәй саҡҡылар уйнаны, тағы ниҙер әйтергә теләгән ине, күҙ йәштәрен күрһәтеүҙән оялып, һикереп торҙо ла баҡсанан сығып китте.

«Бәлки, Байрас хаҡлылыр, әсәй менән атайҙың ни ғәйебе бар? Улар мине үҙ балалары кеүек яҡын күрә. Терелергә кәрәк, бала әҙерәк үҫһен, унан күҙ күрер».

Больницанан ҡайтҡанына бер ай булды. Гөлфиә апай, бар эшен ташлап, уларҙы ҡарай, ә ул илап йөрөй. Тиҙҙән бесән дә башланасаҡ. «Үҙемде ҡулға алырға тейешмен, ашҡа таш менән атмайҙар, йәшәргә кәрәк. Етәр сырхау быҙау кеүек йөрөргә», – тигән уйҙар менән Сөмбөл, үҙ-үҙенә ышанып, тороп баҫты. Сәй эсергә саҡырырға ингән Әлфисте ҡосаҡлап үпте, йылмайҙы. Ул кинәт йоҡоһонан уянған кешегә оҡшап ҡалды. Ең һыҙғанып донъя көтөргә, өйҙә булышырға тотондо, ләкин Булат менән бер бүлмәлә яңғыҙы ҡалмаҫҡа, уның менән осрашмаҫҡа тырышты. Азамат күҙгә күренеп үҫте, йылмайып алдаштыра башланы, өйҙәгеләр уны ҡулдарынан да төшөрмәне. Сөмбөл ашарға бешерҙе, өй йыйыштырҙы. Гөлфиә апай килененең үҙгәреүенә һөйөнөп туя алманы.

Еләк ваҡыты ла етте. Шәфҡәт ағай көн дә көләпешенә әҙләп еләк йыйып ҡайта. Сөмбөл дә, ҡыҙығып:

– Әсәй, мин дә Әлфис менән еләккә барайым әле? – тигәс, Гөлфиә апай:

– Тик оҙаҡ йөрөмәгеҙ, бала имеҙәһең бар бит, – тип ҡаршы килмәне.

Улар башта бер ни тапмай оҙаҡ йөрөнөләр, йөрөй торғас, бер соҡорға – еләклектең уртаһына килеп сыҡтылар. Икеһенең дә һөйөнөсө эстәренә һыйманы, донъяларын онотоп еләк йыйҙылар. Улар силәктәрен тултырып, шатлана-шатлана ҡайтырға сыҡҡанда, көн кискә ауышҡайны. Былар ҙа ауыр силәк бара-бара тағы ла ауырайҙы. Шәфҡәт ағай, уларҙы күреп: «Эй, балалар, кем йәш бала ҡалдырып, шулай оҙаҡ йөрөй инде?» – тип асыуланмаҡсы ине, килене ҡулындағы тулы силәкте күргәс:– Килен, нишләүең был? Һиңә ауыр күтәрергә ярамай, ҡайҙан йыйып бөтөрҙөгөҙ былдай эре еләктәрҙе? – тип йылмайҙы.

– Ауыҙ итеп ҡара әле, атай, шундай тәмле.

– Иртәгә еләк бөккәне бешерербеҙ, эйеме, апай? – тине Әлфис.

– Бешерербеҙ, солтаным.

– Ә мин иң эре еләкте Азаматҡа ҡаптырам.

– Әсәй асыуланамы, бала иланымы икән? Атай, иртәгә беҙҙе бала менән еләклеккә алып бара алмаҫһыңмы? Беҙ еләк йыйғанда, Азамат коляскаһында ятыр ине, – тине Сөмбөл.

Шәфҡәт ағай килененә ҡарап һоҡланды. Сөмбөл рәтләнә башланы, тәненә әҙерәк ит тә ҡунды, бит остары ла алһыуланды. «Ҡымыҙ эсерергә кәрәк, иртәгә ҡымыҙханаға барып ҡайтырмын», – тип күңеленә һалып ҡуйҙы.

– Эйе, килен, Ахундың яландары еләк-емешкә бай, еләккә Ослотау, Аҡбейек тауҙарына барырға кәрәк, ә бына сейә Майор яландарында мул була. Ҡыҙыл көртмәле менән ҡара көртмәле Аҫсалы тауында йә Урыҫ урманында шәп уңа. Алла бирһә, алып барырмын. Көҙөн бәшмәк тә йыйырбыҙ.

Улар ҡайтып ингәндә, Булат ишек алдында малайын күтәреп йөрөй ине. Ул:

– Бала илатып, был ваҡытҡа тиклем ҡайҙа йөрөйһөң? – тип Сөмбөлгә асыуланып ҡараны.

– Ярай, ярай, бала илай-илай үҫә ул, – тине ҡайныһы, киленен яҡлап. – Хәҙер тәмләп ашар, ана, Әлфис, еләк ашатам, ти.

Сөмбөл ҡулдарын йыуып килде лә күтәрелеп ҡарамайынса ғына Булат ҡулынан баланы алды.

– Улым, иланыңмы, ашайһың килдеме?

– Әйҙә, апай, теге ҙур еләкте ҡаптырайыҡ.

– Кит, теләһә нәмә ашатма, бәләкәй бит әле ул, – тип Булат Әлфискә асыуланды.

Бала, әсәһенең тауышын таныпмы, тағы илай башланы. Һыйыр һауып сыҡҡан Гөлфиә апай:

– Эй, балам, ниңә оҙаҡланығыҙ? Һин киткәс, бик ҡаты иланы, тамағы ла асыҡҡандыр, тиҙерәк имеҙ инде, – тине.

Сөмбөл, кеше күҙенән йыраҡыраҡ булайым тип, бала имеҙергә баҡсаға инеп ултырҙы. Бала имсәкте эләктереп алды ла ҡомһоҙланып һура башланы. Был донъяла кемгәлер кәрәк булыуыңды аңлау күңелгә рәхәтлек бирә. Бына бит ул ысын тормош!

– Асҡа үлә яҙғанмы? – тине Булат.

Үҙ уйҙарына батып ултырғанға, Сөмбөл Булаттың үҙ янына килеп баҫыуын һиҙмәй ҙә ҡалған.

– Кит, ҡарап торма, – тине ул, күкрәген ҡулы менән ҡапларға тырышып.

– Сөмбөл, ниңә һин минән ҡасаһың? Минең дә уның ашағанын, имсәк имгәнен күргем килә бит. Ә һин мине күреүгә ҡасырға ғына тораһың.

Ашап туймаған бала имсәкте эҙләп ҡысҡырып илап ебәрҙе.

– Сөмбөл, имеҙ, туйманы бит, ниңә йәшерҙең инде?

– Һин киткәс имеҙермен, – тип яуап бирҙе Сөмбөл ҡоро ғына.

Сөмбөл киреләнгән, кире ҡаҡҡан һайын, Булат, үҙе лә һиҙмәҫтән, уға ынығыраҡ тартылды, улын һағынып, аҙна һайын ҡайтты. Ике ай буйы Фәриҙә менән күрешкәне юҡ, бары хат аша ғына хәбәрләшәләр. Һуңғы ваҡытта йыш ҡына Байрастың күҙ ҡарашы Сөмбөлгә төбәлгәнен һиҙҙе. Әнеһенең әллә теге ваҡытта әйткән һүҙҙәре хаҡ булдымы икән? Булмаҫ, уға ҡыҙҙар бөткәнме, тип тағы үҙен тынысландырырға тырышты.

Бер көндө атаһы:

– Ҡатының мунсаға китте. Йөрөмә бында мүкләк һыйыр кеүек, ҡатының янына бар, әҙерәк ир була бел, – тип асыуланды.

– Керетмәй ул, – тине Булат, атаһынан оялып,

– Ә һин икенсе юлы биген алып ат! Эй, улым, бигерәк бешмәгәнһең. Байрас булһа, бүрәнәһен һүтеп инеп ултырған булыр ине.

Икенсе аҙнала Булат, ысынлап та, ҡайтыу менән мунсаның биген алып атты. Сөмбөл, ғәҙәттә, мунсаға иң һуңынан, өйҙәге эштәр бөткәс кенә, бара. Булат ул кисте түҙемһеҙлек менән көттө, киткәнен күрмәй ҡалмайым тип, мунса ишеген

күҙәтте. Ул Сөмбөлдөң еңел генә янына индермәүен яҡшы аңлай, ни әйтәһен дә белә, ләкин ниндәйҙер көс аҡылын томаланы, күңеле Сөмбөлгә тартылды. Ни булһа шул булыр тип, Сөмбөл китеп бер аҙ ваҡыт уҙғас, ҡараҡ кеше һымаҡ яҡ-яғына ҡарана-ҡарана, мунсаға инеп китте.

– Ай, кем бар? Бында мин, – тип ҡысҡырҙы Сөмбөл. Үҙе арты менән боролоп баҫты, тәнен ни менән ҡапларға белмәйенсә, күҙенә беренсе күренгән ҙур таҫтамалды эләктереп алды.

– Ҡурҡма, мин был.

– Нишләйһең бында, сығып кит!

Булат Сөмбөлдөң һүҙҙәрен ишетмәне. Ҡаршыһында баҫып торған һылыу кәүҙә, иңдәренә таралған ҡуйы ҡара сәстәр, нескә бил уның зиһенен томаланы. Ул, һуҡыр кеше кеүек, ҡулдарын алға һуҙҙы, Сөмбөлдөң иңенә ҡағылыуға, кинәт һиҫкәнеп ҡуйҙы. Уның ҡатынын инәнән тыума килеш беренсе тапҡыр күреүе. Үҙенә көсләп ҡатын итеп тағылған Сөмбөл ут яҡтыһында шундай гүзәл ине. Ул уны аҡрын ғына күкрәгенә ҡыҫты, үҙен-үҙе белештермәйенсә, шашып-шашып үбә башланы. Сөмбөлдө әкренләп үҙенә табан борҙо, ул таҫтамалын ҡыҫып тотҡан, күҙҙәрен йомған килеш:

– Булат, кәрәкмәй, ҡалдыр мине, – тип бышылданы, ләкин үҙе ҡыуманы, этмәне.

– Сөмбөл, беҙ бит никахлы. Сөмбөл, нисек һағынғанмын мин һине, зинһар, ҡыума, китә алмайым, – тип бышылданы Булат. Ул инде үҙ-үҙенә хужа түгел ине, онотолоп Сөмбөл тәненең һәр нөктәһен ҡайнар ирендәре менән шашып үбә башланы. Сөмбөл үҙендә уға ҡаршы торорлоҡ көс тапманы, бары дер-дер ҡалтыранды, тәненең Булат ҡағылған һәр ере әйтеп бөтөргөһөҙ рәхәтлек уятты. Уның ҙур ҡулдары аҫтында йәш ҡатындың тәне ҡамырға әйләнде. Булат, уның йомшаҡ күкрәктәрен иркәләй-һыйпай, иҙәнгә теҙләнде, Сөмбөл ҡыҫып тотҡан таҫтамалды ла тартып төшөрҙө. Сөмбөл аһ итте, ҡулдары менән ҡайһы ерен ҡапларға белмәйенсә аптыраны. Булат бер мәл күҙен асып, уның кәүҙәһенә, күкрәктәренә һоҡланып ҡарап торҙо. Күҙҙәре әкренләп өҫтән аҫҡа төштө. Шул саҡ кендектән аҫҡа саҡлы һуҙылған ҡыҙыл шәмәхә яра уны һиҫкәндереп, айнытып ебәргәндәй булды, яраны бармаҡтары менән әкрен генә һыйпаны ла аяғына тороп баҫты.

– Кисер мине, Сөмбөл, – тип уның күҙҙәренә ҡараны. – Ҡурҡма, мин һиңә ҡағылмайым. – Ирендәре менән шәмәхә яраға йомшаҡ ҡына тейеп алды ла, иҫерек кеше кеүек сайҡала-сайҡала, мунсанан сығып китте.

Сөмбөл баҫҡан урынынан да ҡуҙғала алманы, ҡайнар күҙ йәштәре күкрәктәренә тамды. Уның йәнен әллә оялыу, әллә ғәрләнеү биләп алды. Ул уны элеккесә иркәләй, үбә, башын юғалта, ләкин «яратам» тимәй. Нисек аңларға һуң быны? Мәңге онотмаһын, ғазапланып йәшәһен, тиме икән? Сөмбөл мунсала яңғыҙы бик оҙаҡ иланы.

Булат, мунсанан сыҡҡас, ҡарт алмағас төбөнә барып ултырҙы, уның был мәлдә айыу булып үкергеһе, олоғоһо килде, йөрәге күкрәгенә һыйманы. «Нишләнем мин?» – тип үҙ-үҙенә асыуланды. Әллә, яҙмышҡа буйһоноп, Сөмбөл, барыһын да онот, әйҙә, ир менән ҡатын булып бергә йәшәйек, тиергәме? Юҡ, Сөмбөл бер ҡасан онотмаясаҡ та, кисермәйәсәк тә. Уның яралары ҙур, тәрән, Булат һалған яралар... Кирегә юл юҡтыр шул. Ә уның хыялы, мөхәббәте, һыу һөлөгө кеүек һылыу Фәриҙәһе кемдәргә ҡалыр? Фәриҙәне кемдеңдер ҡатыны итеп күҙ алдына килтереү ҙә ҡот осҡос тойолдо. Юҡ, ул Фәриҙәһен бер кемгә бирмәйәсәк! Оҙон буйлы һылыуы менән ҡултыҡлашып, башҡаларҙы көнләштереп урамда йөрөүҙәр тураһында күпме төндәр хыялланды. Эйе, уның сибәр ҡатынына

күпме күҙҙәр көнләшеп ҡараясаҡ. Фәриҙәнең бер ҡарашы етә, ул уның ҡолона әйләнә лә ҡуя. Сөмбөл менән, улы менән нишләргә һуң? Сөмбөлгә бер аҙ ғына яҡынлашһа ла, үҙ-үҙенә хужа булыуҙан туҡтай, башы менән упҡынға сума. Бына хәҙер ҙә тыныслана алмай ултыра, илағыһы килә.

Меҫкен ҡарт алмағас, нисә ай инде уның ҡалын ботаҡтары аҫтында ике йәш йөрәк ҡайнар күҙ йәштәре түгә. Әгәр теле булһа, Булатҡа кәңәш биреп: «Бәхетеңде йыраҡтан эҙләмә, бәхетең янында. Өйөңә ин дә ҡатының менән балаңды ҡосаҡлап ят. Беренсе ҡатын – Хоҙайҙан, икенсеһе...» – тиер ине. Юҡ шул уның теле...

Сөмбөл бүлмәһендә ут янды, асыҡ тәҙрәнән бала илаған тауыш ишетелде. Булат өйгә инмәне, тәҙрә янына килеп, ситтән генә Сөмбөлдөң көйләй-көйләй бала имеҙгәнен күҙәтте.

* * *

Бесән ваҡыты етте. Бөтә кеше эштә, Булат та ял алып ҡайтты. Сөмбөл менән Әлфис өйҙә ҡалды. Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй торған йорт мәшәҡәте Сөмбөлгә өйөлдө, ул һәр эште еренә еткереп эшләргә тырышты. Байрастың ай буйы ҡайтҡаны юҡ, уны ҡайҙалыр ауылға көҙгө урып-йыйыуға ебәргәндәр, ахыры. Ҡыяр-помидор, алмалар өлгөрә башланы. Сөмбөл көнө буйы баҡсала мәш килә, улы шунда бишектә ята. Ҡайныһының баҡсаға бишек элеүе лә яҡшы булды. Музыка аҫтында Сөмбөл ашын да бешерә, керен дә йыуа. Баҡса Сөмбөлгә уның өсөн генә яһалған ожмах мөйөшө кеүек тойолдо. Ул ултырҡан сәскәләр, ҡойма буйындағы дәлийәләр эре-эре сәскәләр атты. Бесәнселәргә киске ашты баҡсала әҙерләй, күңелдәрен күрә, кис менән гөрләшеп сәй эсәләр. Уның баҡсаһына күршеләр ҙә инеп сәй эсергә ярата. Гөлфиә апай килене булыуға һөйөнөп бөтә алманы: бесәндән арып ҡайтыуға аш бешкән, мунса яғылған, һыйыр һауылған – барыһы ла тәртиптә. Ашап-эсәләр, туйғансы ейәндәрен һөйәләр ҙә ятып йоҡлайҙар. Гөлфиә апайҙың үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр шулай рәхәтләнеп бесән эшләүе ине. Бәләкәй генә Сөмбөл барыһына ла нисек өлгөрәлер. Барыһы яҡшы кеүек, шулай ҙа уларҙы билдәһеҙлек борсоғаны һиҙелә. Булат менән Сөмбөл һөйләшмәйҙәр, бергә йоҡламайҙар. Иртән йоҡонан торғас, Гөлфиә апай, өмөтләнеп, Сөмбөл янындағы урынға ҡараны. Юҡ шул, Булат урынында – Әлфис, Әлфис урынында Булат ята. Ниңә йәштәр үҙ-ара уртаҡ тел таба алмайҙар?

– Әллә яңылыштыҡмы икән, атаһы? Көсләп яраттырып булмай бит, бәлки, Сөмбөлдө алып ҡайтаһы ла ҡалмағандыр, – тип аптырап һорап ҡуйҙы бер көндө Гөлфиә апай иренән.

– Нимә, кире илтеп ҡуйырға ҡушаһыңмы?

– Юҡ инде, аптырағандан ғына әйтәм.

– Нимә юғалтҡаныңды аңлар өсөн юғалтып ҡарарға кәрәк, ти, шуныһынан ҡурҡам. Сөмбөл кеүек бар яҡтан килгән ҡатын яңғыҙ ҡалмаҫ. Бына, әйткәйне тиерһең, киләсәктә бик сибәр ҡатын буласаҡ ул. Булат ҡына һуңлап аңламағайы. Беләһеңме, әсәһе, минең бер нәмәгә шигем бар, күптән әйтмәксе инем дә, тик һеҙ ҡатын-ҡыҙҙың икенсе төрлө аңлауығыҙ бар.

– Әйт, һуҙма.

– Миңә ҡалһа, беҙҙең Байрас Сөмбөлгә ғашиҡ, мин быны күптән һиҙеп йөрөйөм. Ҡайтһа, ул Сөмбөлдөң һәр аҙымын күҙәтә, берәй хәл булһа, һәр ваҡыт уның янында. Һиҙгән булһаң, Байрас бик үҙгәрҙе, элекке елбәҙәк түгел инде, етдиләнеп китте. Бына шуларҙы уйлайым да һис осона сыға алмайым.

– Кит инде, атаһы, ағаһына көндәш була алмаҫ бит.

– Ярай уныһы, ашыҡмайыҡ әле, бер яйы сығыр. Әгәр Байрас Сөмбөлдө алам

тиһә, мин аптырамам, ҡаршы түгелмен. Һин дә яҡшылап уйла, минең ейәнемде сит кеше балаһы итеп күргем килмәй.

Тыштан тыныс күренһәләр ҙә, бына шундай борсоу-өмөттәр эсендә йәшәй улар.

Август урталарында бесәнде бөтөрҙөләр. Бер көндө Шәфҡәт ағай киске аш ваҡытында:

– Иртәгә кәбән ҡуябыҙ, Әлфисте лә үҙебеҙ менән алабыҙ. Ат менән сүмәлә тарттырыр. Сөмбөл бер көн генә солтанһыҙ тороп торор инде, – тине.

Иртән барыһы ла бесән өйөргә китте, Сөмбөл бала менән өйҙә үҙе генә ҡалды. Иртәнге яҡта кәбән ҡояһы урынға күбә тарттырҙылар. Гөлфиә апай:

– Бесән өйә башлағансы, әйҙәгеҙ, ашап алайыҡ, – тип ҡыр табыны әҙерләне.

Әлфис, атта ғына йөрөһә лә, ныҡ арыған ине – әсәһенең һүҙен ишетеүгә, табын янына һуҙылып ятты. Уның янына Булат килеп ултырҙы:

– Арыныңмы әллә? Шулай ул, әле һиңә эләккәне юҡ, беҙҙе һинең кеүек саҡта көн дә иртә таңдан уятып, бесәнгә алып баралар ине. Ә һин йоҡоң туйғансы еңгәң ҡуйынында йоҡлайһың.

– Йоҡлаһа һуң, мин бит бала ҡарайым.

– Әлфис улым, етер апайың менән йоҡларға, мин һиңә, унда йоҡларға инмә, тип нисә әйттем инде. Бына өйләнгәс, үҙ ҡатының менән йоҡларһың. Оят кәрәк, бер йыл буйы, кейәү егете кеүек, ул бүлмәнән сыҡмайһың. Ағайың урыны икәнен беләһең бит, – тине атаһы.

– Апай бит үҙе, минең янға ят, ти. Беҙ хәҙер Азаматты ла уртаға һалып йоҡлатабыҙ!

– Улым, һин ҙур бит инде. Бына мин әсәйең менән ятам, ағайың да Азаматтың әсәһе менән ятырға тейеш. Ул бит уның ҡатыны. – Шәфҡәт ағай төпсөгөнә аңлатырға тырышты.

– Ул уның ҡатыны түгел, – тине Әлфис, киреләнеп.

Әсәһе улының һүҙҙәренән аптырап ҡалды.

– Ни һөйләйһең, улым? Кем әйтте?

– Апайым әйтте, бер апайға, – тине малай, танауын тартып.

– Ниндәй апайға?

– Апайым һөйләргә ҡушманы.

Атаһы ла, тәрилкәнән башын күтәреп, ҡырыҫ тауыш менән:

– Әлфис, ниндәй апай? – тип ҡыҙыҡһынды.

– Апай әйтергә ҡушманы.

– Апайыңа бер ни ҙә әйтмәбеҙ, һөйлә!

Барыһы ла, аштарын онотоп, был сыбыҡһыҙ радионан тағы ни ишетербеҙ икән, тип, Әлфискә төбәлде. Атаһы:

– Йә? – тине, баҫым яһап.

– Өсөнсө көн беҙгә, Булат ағайҙы һорап, бер апай килде: Сөмбөл апай: «Ул бесәндә», – тине. Теге апай: «Булат минең апайымдың ҡыҙына өйләнәм тип йөрөй икән. Бында килһәм, уны, өйләнгән, балаһы бар, тиҙәр. Әгәр алдап йөрөтһә, беҙҙән яҡшылыҡ көтмәһен», – тине.

Улының һүҙҙәрен ишеткәс, атаһы тороп уҡ ултырҙы:

– Улай... килеп еттек. Апайың нимә тине?

– «Юҡ, һеҙгә дөрөҫ әйтмәгәндәр, яңылышҡандар, энеһе өйләнде. Мин энеһенең ҡатыны булам»,– тине апайым.

– Тағы ни булды? – тине атаһы, ҡыҙарып.

– Теге апай китеп барҙы, ә апайым бик ныҡ иланы, Азамат та ҡушылып иланы. Атай, апай һөйләргә ҡушмаған ине, белһә, миңә асыуланасаҡ.

Булат ашаманы, ҡайҙалыр ағастар араһына инеп китте. Табын янындағыларҙың да тамағына барманы. Эштең рәте китте, көндөң йәме бөттө. Бер-береһенә ҡарамай-өндәшмәй кәбән өйҙөләр. Ололарҙың башында бер генә уй: «Улар ҡайтҡансы, Сөмбөл бала менән сығып юғалмағайы». Тик ул хаҡта бер-береһенә ҡысҡырып әйтергә ҡурҡтылар.

Ҡапҡа төбөнә йөк машинаһы килеп туҡтағанда, Сөмбөл киске аш өлгөртөп йөрөй ине. Машина тауышын ишетеп, ихата уртаһына йүгереп сыҡты.

– Байрас, ай буйына юғалып, ҡайҙа йөрөнөң?

– Һаумы, Сөмбөл! – Байрас уға яҡын уҡ килеп баҫты. Үҙе ҡояшта ҡарайған, сәстәре үҫкән. Туҙанға батып бөткән булһа ла, шундай сибәр, һөйкөмлө.

– Әйҙә баҡсаға, бала бер үҙе, – тип Сөмбөл уның ҡулынан тартып баҡсаға алып инде. – Әйҙә, һөйлә, ҡайҙа юғалдың? Кил бына бында ултыр, хәҙер аш өлгөртәм. Атайҙар ҙа ҡайтып етер, улар бөгөн кәбән ҡоялар, – тип һөйләнә-һөйләнә, күбәләк кеүек осоп-ҡунып ҡына йөрөнө.

– Мин бит һеҙҙең ауылда эшләйем, һеҙҙә торам, әсәйең һиңә күп итеп сәләм әйтергә ҡушты. Беҙ уның менән бесән эшләйбеҙ, төндә бесән алып ҡайтабыҙ, шуға оҙаҡ ҡайта алманым.

– Һинме, беҙҙәме? Әсәйемә булыштыңмы? Байрас, йәнем, ниндәй һәйбәт кеше һин! Һөйлә, ауылда ниҙәр бар? Әсәйем ни хәлдә? Һөйлә инде.

– Арыу ғына. Әсәйеңдең бер үҙенә генә бик ауыр. Быйыл бөтә ларын бойҙай менән тултырҙым, бесәнде лә етәрлек ташыныҡ, әле тағы алып ҡайтаһы бар.

Сөмбөл уның һәр һөйләгән һүҙен йотоп барҙы, шатлығы эсенә һыйманы.

Байрас әҫәрләнеп уны күҙәтте, уның оҙаҡ ҡайтмауының төп сәбәбе – Сөмбөлдө нисек тә онотторға тырышыу ине. Ә бына хәҙер күрҙе лә уны нисек һағыныуын аңланы. Эй, бер генә ҡосаҡлап үбәһе ине, унан һуң атаһы ник диуарға терәп атмаһын шунда, бер генә тапҡыр... Сөмбөлдөң шат йөҙө, балаларса самими һөйөнөүе уның күңеленә ниндәйҙер татлы рәхәтлек бирә ине.

– Әйҙә, һал майкаңды, йыуып эләм. Бына бында ҡояшта йылынған һыу бар, йыуын. Мунса өлгөрмәне шул әле.

– Һин һалып торһаң, йыуынам, – тине Байрас, йылмайып.

– Һалып торам, Байрас, бына бында үләнгә эйел.

Ул күнәк менән йылы һыу алып килеп, Байрасты йыуындырҙы.

– Сәстәрең шундай үҫкән, был эҫелә нисек йөрөйһөң? – тип Сөмбөл уның ҡуйы сәс араһына бармаҡтарын батырып, һыу менән сайҡаны.

– Ҡыҙҙарға шулай оҡшай, – тине тегеһе, көлөп.

– Э-эй, һин пеләш килеш тә матурһыңдыр. Беҙҙең ауыл ҡыҙҙарын ғына түгел, әбейҙәрен дә үҙеңә ғашиҡ итеп бөтөргәнһеңдер. Мин уларҙы йәлләйем, һин берәү, ә улар күп. – Сөмбөл матур итеп сылтыратып көлдө. Байрастың елкәһенә ҙур таҫтамал килтереп япты. – Һин бит әле Азаматты күрмәнең. Әйҙә, күрһәтәм, ул атайға оҡшай бара, һеҙҙең яҡҡа тартҡан.

Улар алмағасҡа эленгән бишек янына килеп баҫты. Уйынсыҡтары менән уйнап ятҡан бала, әсәһен күреп, йылмайып ебәрҙе, биттәре матур итеп соҡорайҙы. Ул күҙгә күренеп үҫкән, тыпырсынып көлә, ығы-ығы килеп үҙ янына саҡыра.

– Ҡара әле, улым, кем ҡайтҡан? Байрас ағайың ҡайтты бит. Һин, улым, тыныс ҡына ятып тор. Мин ағайыңды ашатайым да унан һине ашатырмын, йәме.

Сөмбөл өҫтәлгә яңы бешеп сыҡҡан туҡмаслы аш, һөт өҫтө килтереп ҡуйҙы.

– Аша, һин бит эш кешеһе, – тип Байрас ҡаршыһына килеп ултырҙы.

– Сөмбөл, һеҙҙең хәлдәр нисек һуң, ағай менән борсаҡ бешәме?

– Юҡ, Байрас, беҙ уның менән сит кешеләр. Мин һиңә бер ваҡиға һөйләйем, атайҙарға әйтмә, – тип өсөнсө көн булған хәлде еткерҙе. – Һинең ҡатының, тигәнгә асыуланма инде, телемә беренсе ни килде – шуны әйттем. Мин Булатҡа ҡаршы килә алмайым, өйләнһен, ул ҡыҙ минең ише йүләр түгелдер, аҡыллылыр. Бала тип, бөтөнөбөҙ бәхетһеҙ була алмайбыҙ бит инде. – Сөмбөл үҙенең уйҙары менән ҡайҙалыр йыраҡҡа китте. Унан һүҙен дауам итте: – Өйләнһен, бәхетле булһын. Ул яҡшы кеше, мине яратмаған өсөн генә насар тип әйтә алмайым. Нишләйһең бит, бөтә кеше лә үҙ тиңен таба алмай, ысын мөхәббәт ул меңгә бер генә була, тиҙәр. Мин, күрәһең, шул меңдәр араһына инмәйемдер.

Байрас Сөмбөлдән күҙҙәрен ала алманы. Хистәремде әйтергәме, тип уйлаған ине, иртәрәктер, тип уйҙарынан кире ҡайтты.

– Байрас, бәлки, һин беҙҙе алып ҡайтып китерһең, әсәйгә үҙем аңлатырмын. Аңлар әле, кешелә була торған хәл. Көҙ етә бит, Булат та үҙенә урын тапмай. Беҙ бында кәртә генә булып торабыҙ.

– Сөмбөл, мин һеҙҙе хәҙер алып китә алмайым. Йөк машинаһында бала ҡурҡыр. Һуңыраҡ, эш бөткәс, еңел машина менән илтеп ҡуйырмын, әҙерәк түҙ инде, – тип уға моңһоу бер ҡараш менән текәлде лә, ауыр һулап: – Эх, Сөмбөл, һин киткәс, был баҡсала бик күңелһеҙ булыр бит, – тине.

– Ҡурҡма, башҡалар уны тағы ла нығыраҡ йәмләр. Ишеттеңме был йырҙы:

*Сәскәләрҙең ниңә кәрәге бар,*
*Өҙөп бирер кешең булмаһа...*

– Ә һин уларҙы миңә бир, Сөмбөл.

– Миңә улай итеп ҡарама. Байрас, һин һуңға ҡалдың, ә мин ашыҡтым, минең сәскәләр һулыны. Һулыған сәскәләр кемгә кәрәк?

Ул арала:

– Апай, беҙ ҡайттыҡ, – тип Әлфистең ҡысҡырған тауышы ишетелде. Йүгереп килеп, ағаһын ҡосаҡлап алды.

– Машинаңды ал, атты индерергә кәрәк. Былай оҙаҡлап ҡайҙа йөрөнөң? Ағай, Азаматты күрҙеңме әле, матур бит, үҫкәнме? – тип, ағаһына ауыҙ асырға ла ирек бирмәйенсә, бер-бер артлы һорауҙар яуҙырҙы. Эшселәр ҡайтты, тимәк, баҡса тағы гөрләйәсәк. Сөмбөл, ашығып, самауырын яңыртты, йәшелсәләр тураны, бешергән икмәген өҫтәлгә ҡуйҙы. Барыһы ла, шау-гөр килеп, баҡсаға кереп тулды, Сөмбөлдөң өйҙә икәнен күргәс, йәндәренә йылы инде.

– Әйҙәгеҙ, ҡулдарығыҙҙы йыуығыҙ, аш һыуына, – тип йылмайҙы Сөмбөл.

– Нисек торҙоғоҙ, ҡыҙым? Һиңә лә бында эш күп булды инде. Ҡайҙа әле минең тәтәйем? – тип Шәфҡәт ағай бишеккә килде.

Әгәр бөгөн улар ҡайтыуға был бишек буш булһа, баҡсала Сөмбөл йылмайып тормаһа, уның йөрәге түҙә алған булыр инеме икән? Ул, шатланып, баланы ҡулына алды, Гөлфиә апай ҙа ейәне янына килде, серле итеп иренә ҡарап ҡуйҙы. Был ҡараш «Хоҙайҙың рәхмәте, китмәгәндәр бит» тигәнде аңлата ине. Сөмбөлдөң беренсе тапҡыр бешергән икмәген тәмләп, маҡтай-маҡтай ашанылар.

– Аллаға шөкөр, бесәнде бөтөрҙөк, хәҙер әсәйең өйҙә булыр, ә һеҙҙе Әлфис менән Зәйнулла шишмәһе янындағы сейәлеккә алып барырмын, – тип Шәфҡәт ағай Сөмбөлгә ҡараны.

– Атай, Байрас, һеҙҙең ауылда эшләйем, ти, мин дә берәй аҙнаға ауылға ҡайтып киләйем әле, – тине Сөмбөл ялбарыулы тауыш менән.

Өҫтәл артында тынлыҡ урынлашты. Аталары серле итеп Булат менән Байрасҡа ҡарап алды.

– Туҡта, ҡыҙым, һин башта ҡалаға барып, өҫ-башыңды ҡарап ҡайт, һин бит хәҙер әсә кеше. Әсәйең аҡса бирер, ни теләһәң, шуны ал, унан матур кейенеп кенә ауылыңа ҡайтырһың. Ана, Әлфискә лә мәктәпкә әйберҙәр алаһы бар, икәү йөрөп ҡайтығыҙ. Азаматтың кейемдәре лә бәләкәйләнгән. Булат, һиңә машинаға права алыу тураһында уйларға кәрәк, берәй ҡайҙа барырға булһа, гел Байрасты көтәбеҙ. Машина тора, ә йөрөтөргә кеше юҡ. Ә һин, улым, ҡайҙа, ни эштәр бөтөрөп йөрөнөң? – тип Байрасҡа бороолдо.

Байрас үҙенең Сөмбөлдәр ауылында эшләүен, ҡоҙағыйҙарҙа тороуын, уға бесән менән ярҙам итеүен ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе. Атаһы:

– Шулай кәрәк, маладис, улым. Әллә бер-ике көнгә беҙ ҙә барып ҡайтабыҙмы, ҡәйнәңә ярҙам итергә кәрәк, – тип Булатҡа ҡараны.

– Барайыҡ һуң, минең өс көн ялым ҡалды әле. Байрас, һин ҡасан китәһең?

– Белмәйем, бөгөн китһәм дә, иртәгә өстә китһәм дә ярай. Мин былай больницаға тип киткән инем. Бына, ҡул шешә, тимерсыбыҡ кергәйне, – тип ҡулын күрһәтте. – Әсәй, берәй нәмә яп әле, һыҙлай, йүнләп йоҡлаған да юҡ.

– Эй, балам, ҙурға киткән бит был, ниңә больницаға барманың?

– Унда барһам, бында ҡайта алмай инем, сәбәпһеҙ ебәрмәйҙәр, ямғырҙар башланғансы тип ҡыуалар.

– Бындай яраларҙы ҡарарға Сөмбөл оҫта, барыбыҙҙы ҙа ул ҡараштырып, бәйләп тора, – тип һүҙгә ҡушылды аталары. – Сөмбөл, кил әле, ҡыҙым, йөрәгең етһә, ҡара әле.

Сөмбөл Байрастың майкаһын йыуып элде лә, ҡулын һөртә-һөртә, улар янына килде.

– Абау, ҡулһыҙ ҡалаһың бит, ниңә былай йөрөйһөң, ниңә әсәйемә күрһәтмәнең?

– Бөгөн генә шулай ныҡ шеште, кисә былай уҡ түгел ине.

Сөмбөл Байрастың ҡулын әйләндереп ҡараны ла:

– Әсәй, араҡы бир әле, – тине.

Өйгә инеп, үҙенең дарыуҙар тартмаһын күтәреп сыҡты. Ярты стакандан артығыраҡ араҡы һалып, Байрасҡа һуҙҙы.

– Мә, эс тә башыңды тегеләйгә бор.

Сөмбөл өҫтәлгә таҙа бәҙ йәйҙе, Байрастың ҡулын араҡы менән йыуҙы. Шеше беләккә тиклем еткән – бармаҡҡа кергән тутыҡ тимерсыбыҡ үҙ эшен эшләгән.

– Ҡурҡма, һин мине ҡотҡарҙың, хәҙер мин һине ҡотҡарырмын, – тип йылмайҙы Сөмбөл.

Байрастың әллә араҡынан, әллә Сөмбөлдөң шулай бик яҡын тороуынан башы әйләнде. Өҫтәл янында ултырыусылар, тын алырға ла ҡурҡып, Байрастың ҡулына текәлде. Шәфҡәт ағай Байрастың Сөмбөлгә төбәлгән күҙ ҡарашын күҙәтте. Эйе, ата кешенең тәжрибәһе етерлек, улының хистәрен тын алышынан уҡ аңланы.

Сөмбөл уның ҡулына килеп ҡағылыуға, Байрас, күҙҙәрен йомоп, башын аҫҡа эйҙе. Юҡ, был ауыртыуҙан да, ҡурҡыуҙан да түгел. Ул, ата-әсәһе, ағаһы уның хистәрен аңлар тип, ҡурҡты. Сәләмәт ҡулы менән үҙе ултырған ултырғысҡа нығытып тотондо. Былар береһе лә атаһы ҡарашынан ситтә ҡалманы.

Сөмбөл, Байрас күрмәһен тип, ҡабырғаһы менән баҫты ла тулышҡан шеште энә менән соҡоп асып ебәрҙе, йыйылған эрен, шуны ғына көткәндәй, ағып китте. Байрас, күҙҙәрен йомған килеш, әкрен генә башын Сөмбөлгә терәне, шундай рәхәт ине уға был мәлдә.

– Ауыртамы? Ауырталыр шул, әсәйгә күрһәткән булһаң, былай уҡ аҙмаған

булыр ине. Ул бындай яраларҙы бик оҫта дауалай, – тип һөйләнә-һөйләнә, Сөмбөл ҡаны сыҡҡансы шеште ҡыҫты. – Бына хәҙер еңеләйеп китерһең, һыҙлауы ла баҫылыр.

– Килен, бына был дарыуҙы яп, ул шеште ныҡ һура.

– Юҡ, әсәй, ни һөйләйһең, шундай сибәр егет нисек инде һаҫыҡ дарыу һөртөп йөрөһөн, ул бит ҡыҙҙар янында эшләй. Бына был алоэ гөлөн ярып ябабыҙ ҙа яҡшылап бәйләйбеҙ.

– Байрас, булды, уян, – тип көлөп, биттәрен услап тотоп, башын күтәрҙе. – Булды, тим, бар, ят, йоҡла, әллә ысынлап иҫереп киттең инде?

Эйе, ул иҫерҙе. Уның яҡынлығы, уның йомшаҡ ҡулдары, уның наҙлы тауышы Байрасты тамам иҫертте.

– Эй, улым, – тине атаһы һуҙып, мин барыһын да аңланым тигәндәй, Байрастың күҙҙәренә ҡараны.

Байрас та атаһының күҙ ҡарашынан һиҫкәнеп ҡуйҙы. Әйтерһең, атаһы уның йыраҡҡа йәшереп һаҡлаған күңел һандығын асты. Атай менән ул мәғәнәле итеп бер-береһенә ҡарашып ҡуйҙы. Ошо таҙа кәүҙәле, оҙон буйлы сибәр улы – бәләкәй генә Сөмбөлдөң ҡоло. Ә Сөмбөл ауылдың беренсе егете булған әҙмәүерҙәй Байрастың кем өсөн йән атып йөрөүен башына ла индермәй.

Байрас урынынан торҙо ла, бер һүҙ өндәшмәй, бер кемгә күтәрелеп ҡарамай, өйгә инеп китте.

Иртән ирҙәр, өсәүләшеп машинаға ултырып, Сөмбөлдәр ауылына китте. Ике көндә бөтә эште бөтөрөп ҡайтып та еттеләр.

Сөмбөлдөң әсәһе, уларҙы күргәс, шатланып туя алманы. Ҡоҙаһы киленен маҡтап бөтөрә алманы.

– Рәхмәт, ҡоҙағый, аҡыллы, уңған ҡыҙ үҫтергәнһең, ҡулынан килмәгән эше юҡ. Әҙерәк эштәр еңеләйһен дә, берәй аҙнаға ҡунаҡҡа килтерербеҙ.

Ҡоҙаһы үҙе шулай тип торғас, Сания апайҙың башы күккә тейҙе.

– Рәхмәт, ҡоҙа, бик һағындым үҙҙәрен, әҙерәк тороп китһәләр, бик һәйбәт булыр ине, – тип ҡыҙын көтөп ҡалды.

Шәфҡәт ағай әйткән һүҙендә торҙо: барыһы бергә тейәлешеп Зәйнулла шишмәһенә сейәгә киттеләр. Сөмбөл КТФ һүҙен күп тапҡыр ишетһә лә, был бәләкәй генә ауылға беренсе тапҡыр аяҡ баҫыуы ине. Ҙур өс тау уртаһында бәләкәй генә күл. Йәнәшәлә – егермеләп өйҙән торған ауыл. Бер яҡ тау битендә – гел йылҡы көтөүе, күлдең икенсе яғындағы тау битендә – һыйыр көтөүе, өсөнсө тауҙа – халыҡ малы: һарыҡ, быҙау көтөүе. Ауылды ҡап уртаға бүлеп, буйынан-буйына әрәмәлек һуҙылған.

– Шундай бәләкәй генә ауылға ни тиклем мал! – тине Сөмбөл, иҫе китеп.

Шәфҡәт ағай атын күлгә һыу эсерергә туҡтатты.

– Бына хәҙер, килен, ҡарап тор, саң һуғасаҡтар.

Ысынлап та, тимер саң ҡағыуға, тау битендәге йылҡы көтөүе ҡара болот булып аҫҡа томоролдо, кардаларға инеп тулды.

– Күрҙеңме инде, ике сәғәт һайын бейәләр һауымға төшә ҡолондарын имеҙергә. Әҙәмдән дә аҡыллы бит улар. Көтөүсе лә кәрәкмәй, бөтә көтөүҙе бер нәҫел айғыры көтә!

Сөмбөл, хайран ҡалып, туплауҙан күҙен ала алманы.

Улар бик күңелле итеп сейә йыйҙы. Тау битендә сылтырап Зәйнулла шишмәһе ағып ята, шул һалҡын һыуға мана-мана, бик тәмләп икмәк ашанылар. Ҡыҙыу көндә шишмә һыуы менән икмәктең үҙ тәме, үҙ рәхәте. Шул һыуҙы эсеп, битте генә йыуһаң да, бөтә арыуың бөтөп, йәнең сихәтләнеп китә...

– Килен, матурмы беҙҙең яҡтар? – тине Шәфҡәт ағай. Унан үҙ һорауына үҙе үк

яуап бирҙе: – Матур! Ҡара, күпме игенлек, күпме мал! Аллаға шөкөр, байлыҡта-муллыҡта йәшәйбеҙ. Юҡҡа ғына «Ҡыҙыл партизан»ды миллионер колхоз тимәйҙәр. Хәҙер ҡымыҙханаға ла инербеҙ, улыма йылы бейә һөтө алырбыҙ. Беҙҙең апайҙар ҡымыҙҙы бик шәп бешә.

Ҡайтышлай күмәкләшеп ҡымыҙхана янында туҡтанылар ҙа туйғансы ҡымыҙ эстеләр. Унан, тирә-яҡтың матурлығына тағы бер ҡат һоҡлана-һоҡлана, ҡайтыр юлға ҡуҙғалдылар.

* * *

Сөмбөл менән Әлфис ҡалаға барып кейенеп ҡайттылар. Сөмбөл үҙенә бик матур, оҙон итәкле, сейә төҫөндәге бер костюм, өйҙә кейергә килешле генә күлдәк алды. Әлфискә лә күлдәк менән салбар, ботинка алдылар, бөҙрәханаға инеп, матур итеп сәсен киҫтерҙеләр.

Өйгә ҡайтҡас, Байрас үҙҙәрен:

– Сөмбөл, ҡоҙағый иртәгә кискә һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Унда кисә бик йыраҡтан ҡунаҡтар ҡайтты, улар янына ҡунаҡ йыя, – тип шатландырҙы.

– Байрас, әйҙә, мин һиңә аш бүлеп бирәм, – тип Сөмбөл аш йылытырға баҡсаға сығып китте. – Ниндәй ҡунаҡтар ҡайтты, һөйлә әле. Һин ашығаһыңмы? Ҡулың төҙәләме?

Байрас, ашауын онотоп, Сөмбөлдө күҙәтте. Уның шулай балаларса һөйөнөүен, һандуғас кеүек һайрауын ярата ине ул.

– Нисек төҙәлмәһен, һин ҡағылған ерҙә гөлдәр үҫә бит.

– Әллә тағы бер бармаҡ үҫтеме? – тип шаяртты Сөмбөл. – Шулай ҙа, ҡайҙа, ҡарайым әле, – тип уның ҡулына үрелде. – Ярай, ысынлап та, төҙәлеп килә, тик әҙ генә асыҡ ере бар, ялҡынһынып та тора. Иртәрәк һалғанһың бәйләүесеңде, яраңа бысраҡ ингән, тағы шешәсәк бит. Хәҙер таҙартып бәйләйем,– тип өйгә инеп китте.

Дарыулы тартмаһын күтәреп сыҡты, яраны таҙартып, яңынан таҙа бинт менән бәйләп ҡуйҙы.

– Һиңә шәфҡәт туташына уҡырға кәрәк, Сөмбөл. Һиңә был эш бик килешер ине.

– Уҡырға инермен тигән инем дә, бына бит нисек килеп сыҡты. Хәҙер инде бала менән бер ҡайҙа ла уҡый алмаясаҡмын. Барыһы ла хыялда ғына ҡалды. Уҡыу ҙа, аҡ туй күлдәге лә, аҡ атҡа атланған принц егет тә... Булатты күрҙем дә барыһын оноттом... Йә, ярай, булған – бөткән, уйлағым килмәй, уйлаһам, йәшәгем килмәй.

– Сөмбөл, юҡҡа ҡайғырма әле, бер яйы сығыр. Мин китәйем, иртәгә әсәйеңдә осрашырбыҙ.

Сөмбөл дә, осрашырбыҙ, тип йылмайып оҙатып ҡалды.

Икенсе көндө, кейенеп-яһанып, күстәнәстәр алып, Сөмбөлдәр ауылына – Байрамғолға ҡунаҡҡа киттеләр. Улар килгәндә, ҡунаҡтар йыйылышҡан, өй эсе шаугөр килеп тора ине.

Сания апай, уларҙың килгәнен күреп, йүгерә-атлай ҡаршы алырға сыҡты.

– Эй, ҡыҙым, эй, ейәнем, – тип ҡайһыһын беренсе ҡосаҡларға белмәне. Өйҙәге ҡунаҡтар ҙа уларҙы ҡаршы алырға сыҡты. Араларында бик сибәр, сәсенә аҡ ҡырау төшкән, шулай ҙа егеттәр кеүек төп-төҙ кәүҙәле, мөләйем йөҙлө, Сөмбөлгә таныш түгел бер ир күренде. Ул, башын ҡырын һалып, яңы килгән ҡунаҡтарҙы күҙәтә ине.

Әсәһе:

– Ҡыҙым, таныш бул, был – Әнүәр ағайың, беҙ унның менән ике туған булабыҙ. Бик йыраҡтан ҡайтты, – тип әсәһе Сөмбөлдө таныштырҙы.

– Һаумы, Сөмбөл һеңлем. Ҡайҙа үҫкән бындай сибәр ҡара ҡарлуғас?

– Һаумыһығыҙ, – тине Сөмбөл оялып ҡына, – ошонда үҫтем.

– Һин беҙҙең яҡ, Урта Азия ҡыҙҙарына оҡшағанһың.

– Әйҙә, ҡыҙым, әбейеңдең ағаһы – Ибраһим бабайың да ҡайтҡан, инеп күреш, – тип әсәһе өйгә алып инеп китте.

Барыһы йыйылышып, табын артына ултырҙылар, таныштылар. Өҫтәл яны гөр килеп торҙо, бер аҙ ҡыҙып алғас, ағаһы һыҙҙырып гармун уйнап ебәрҙе. Сөмбөл уға ҡушылып йырланы:

*Һағынһанда аҡ болотҡа ҡара,*
*Аҡ болоттар булып мин ағам.*
*Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа, тимә,*
*Күҙ йәштәре булып мин тамам...*

Эштән яңы ғына ҡайтып ингән Байрас, кем шулай матур йырлай икән тип, түр яҡҡа үрелеп ҡараны. Ҡара сәстәрен матур итеп өйөп ҡуйған, сейә төҫөндәге матур костюмын кейгән Сөмбөлдөң йырлағанын күргәс, таң ҡалды. Йәш ҡатындың тауышы йөрәккә үтеп инә, күңелдәрҙе айҡап сыға ине. Уны ҡабат-ҡабат йырлаттылар. Шәфҡәт ағай менән Гөлфиә апай Сөмбөлдөң йырлауын беренсе тапҡыр ишетә. Бына ниндәй һандуғас йәшәй икән уларҙың өйөндә!

Ә Сөмбөл йырланы ла йырланы. Байтаҡ йырлағас, ярай, етер, тип, аш өйөнә сығышлай, Байрасҡа килеп төртөлдө.

– Бәй, ни эшләп тораһың? Ин, ултыр, аша-эс, ҡунаҡ бул, – тип йылмайҙы.

– Йырлауыңды тыңланым, – тине Байрас, уның күҙҙәренә ҡараны. – Иҫ киткес!

...Ҡунаҡтар таң алдында ғына таралышты. Шәфҡәт ағайҙар ҙа ҡайтырға йыйынды.

– Килен, һинән, ейәнемдән башҡа өйҙөң йәме булмаҫ, һин бик оҙаҡламаҫһың инде. Берәй аҙнанан үҙем килеп алырмын.

Сөмбөлгә бында эш күп, шулай ҙа әсәһе янында иркен һуланы. Әнүәр ағаһы менән бик тиҙ уртаҡ тел таптылар, кистәрен һыу буйына төшөп ултырғыланылар, йәш айырмалары байтаҡ булыуға ҡарамаҫтан, һөйләшер һүҙҙәре лә табылды.

Инде аҙна үтеп бара, Сөмбөл әле һаман үҙ хәлен бер яҡҡа ла яйлай алмай йөрөй. Аптырағас, ҡунаҡ ағаһы менән һөйләшеп ҡарарға уйланы. Китергә ике көн ҡалғас, Сөмбөл, бер үтенесем бар, тип, Әнүәр ағаһын һыу буйына саҡырҙы. Баланы алып, һыу буйына төшөп ултырҙылар.

– Әнүәр ағай, мин бик сетерекле хәлдә ҡалдым бит, һеҙҙән башҡа бер кемгә һөйләй алмайым, бәлки, аңларһығыҙ. Миңә һеҙҙең кәңәшегеҙ, ярҙамығыҙ кәрәк. Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин бөтөнләйгә ҡайттым, ләкин әлегә был хаҡта берәү ҙә: әсәйем дә, ҡайнымдар ҙа белмәй.

– Сөмбөл, үҫкәнем, бик һәйбәт йәшәйҙәр, бик яҡшы ғаиләгә тура килде, тигәйне бит әсәйең.

– Булаттың ата-әсәһе лә, туғандары ла бик яҡшы кешеләр, мин уларҙы бик хөрмәт итәм. Әнүәр ағай, мин һиңә дөрөҫөн һөйләйем. – Сөмбөл башынан уҙғандарҙы теҙеп бирҙе. – Мин китмәйенсә, Булат үҙенең яратҡан ҡыҙына өйләнә алмай, ә мин уның юлында кәртә булырға теләмәйем. Беҙҙе бала ла бәйләй алманы. Үҙ-ара һөйләшмәйбеҙ, бергә йоҡламайбыҙ. Миңә бик ауыр, мин үҙемде

уның муйынына көсләп тағылған таш кеүек хис итәм, уның да минән тиҙерәк ҡотолғоһо килә шикелле. Яратмаған кеше менән бер түбә аҫтында ғына түгел, бер ҡалала йәшәү ҙә ҡыйын, тиҙәр. Бына шундай хәлдәр, ағай... Әгәр мөмкин булһа, улым менән мине бынан алып кит. Айырылып ҡайтһам, мине әсәйем аңламаясаҡ...

– Бына нисек икән. Һин балаңдың атаһынан башҡа йәшәй алырһыңмы һуң? Үҙ-үҙеңдән ҡасып булмай бит, әллә ҡайҙарға китһәң дә, хистәрҙе ҡалдырып булмай, – тип Әнүәр ағай Сөмбөлдө ҡосаҡлап алды.

– Ағай, нишләргә һуң миңә, ғүмер буйы шулай йәшәргәме?

– Юҡ, улай тимәйем. Мин риза, теләһәң, беҙҙең менән китә алаһың, ләкин ҡасып түгел, барыһы менән аңлашып, хушлашып китергә кәрәк.

– «Бала бәләкәй» тигән һылтау менән ҡайным ебәрмәҫ тип ҡурҡам. Ағай, ҡатының ҡаршы килмәҫме, беҙҙе ҡабул итерме?

– Беҙ еңгәң менән икәү генә йәшәйбеҙ, балаларыбыҙ булманы. Икебеҙ ҙә хирург булып эшләйбеҙ. Һеҙҙе генә ҡарарға мөмкинлегебеҙ бар. Улайһа, йыйын, әсәйеңә үҙең аңлат. Кәрәк урында үҙем булышырмын. Ҡайғырма, Сөмбөл үҫкәнем, һине бына тигән кешегә кейәүгә бирермен. Әйҙә, үкенһендәр һине һөймәгәндәр, – тип йылмайҙы ағаһы. – Документтарыңды әҙерлә. Беҙ йылы яҡта йәшәйбеҙ, күп әйбер алырға түгел. Беҙгә килгәс, кәрәк әйберҙәреңде алырбыҙ. Ике көндән китәбеҙ, әҙер булып тор.

– Рәхмәт, ағай, һин мине был ғазаптан ҡотҡараһың. Мин ғүмергә һинең алда бурыслы.

– Рәхмәт әйтергә ашыҡма, һағынып иламаһаң әле.

– Нисек тә түҙермен. Эшләрмен, мин бер эштән дә ҡурҡмайым.

– Һөнәрең бармы һуң һинең?

– Юҡ шул, ағай. Медицина училищеһына инергә уйлағайным, тормош былайға әйләнгәс, оноторға тура килде.

– Ҡайғырма, уҡытырбыҙ.

Сөмбөлдөң күҙҙәре ялтыраны, һөйөнөсө эсенә һыйманы: «Бөгөн кис әсәйемә барыһын аңлатам, унан Байрас менән һөйләшермен».

Киске яҡта, көтмәгәндә, бик борсоулы йөҙ менән ҡайныһы килеп инде.

– Килен, һине алырға килдем, ҡәйнәң, йығылып, аяғын һындырҙы, өйҙә кеше юҡ. Асыуланма инде, ҡыҙым, ул һауыҡҡас, тағы килтереп ҡуйырмын.

Сөмбөлдөң башына күҫәк менән һуҡҡандай булды. Әсәһе лә:

– Йыйын, балам, ҡоҙағыйым харап булған бит. Бар, ҡыҙым, йыйын, – тип ашыҡтырҙы.

Иларҙай булып, Сөмбөл ағаһына ҡараны. Ағаһы, уның юғалып ҡалғанын күреп:

– Әйҙә, әйберҙәреңде йыйырға булышам, – тип Сөмбөлдө үҙе менән икенсе бүлмәгә алып инде. – Һеңлем, мин һиңә адресымды ҡалдырам. Ҡасан киләһеңде әйтеп хат яҙырһың. Оло кешеләрҙе ауыр саҡта ташлап китеү килешмәй, берәй айҙан шәбәйер, килерһең. Мин һиңә беҙгә нисек килергә икәнде яҙып ҡалдырырмын. Сәмәрҡәндкә ҡайтҡас, хат яҙырмын, аҡса һалырмын.

– Ағай, хатыңды бында яҙма. Әсәйем белһә, ебәрмәйәсәк. Бына ошо адресҡа яҙырһың, – тип Сөмбөл тиҙ генә Верочканың адресын бирҙе.

Тағы китә алманы ул. Яҙмыш уны, нишләптер, Арыҫлановтар ғаиләһенән сығарып ебәрергә ашыҡманы. Инде өсөнсө ҡат яҙмыш уны яңынан был ғаиләгә ҡайтарҙы. Был юлы Сөмбөл иламаны, бәргеләнмәне, ул үҙен бында ярҙамға

килгән итеп кенә тойҙо. Ҡәйнәһен ауыр хәлендә ташлап китеү намыҫһыҙлыҡ булыр ине, улар бит үҙҙәре Сөмбөлдө ауыр саҡта ташламанылар.

Көҙ ҙә етте, ә көҙҙөң – үҙ мәшәҡәттәре. Бер ай үтһә лә, Гөлфиә апай әле ҡултыҡ таяҡтары менән генә йөрөй. Был хәлдә ауыл ерендә бер ниндәй эш эшләп булмай.

Булат менән Байрас ҡайтып, картуфты ҡаҙып алды, баҙға төшөрҙө. Сөмбөл менән Әлфис көҙгө сәскәләрҙең һуғандарын киптереп, картуф янына урынлаштырҙы. «Яҙға быларҙы кире ултыртырһың»,– тип Сөмбөл Әлфискә яҡшылап аңлатты. Көҙгө алмаларҙы, Әлфис күрмәгәндә ҡағыҙға төрөп, баҙға төшөрөп ҡуйҙы. Сөмбөл киткәс, уға күстәнәс булыр. Алма тултырған оло бер тартманы айырым бер мөйөшкә йәшерҙе. Алма өҫтөнә бик матур күлдәк ҡуйҙы. Ул уны ҡалаға һуңғы барыуында Әлфискә тип алғайны. «Был йылы күлдәк, солтаным, һине мин киткәс йылытыр. Һин беҙҙе бик юҡһынырһың инде», – тип уйланы. Әлфистең Яңы йыл байрамынан һуң тыуған көнө, тартма өҫтөнә ҡотлау ҡағыҙы ҡуйҙы.

Ул һәр көнөн был йорт менән хушлашыуға бағышланы, һәр әйбер матур, иҫкә алырлыҡ булһын, тип тырышты. Ҡәйнәһен ололап-хөрмәтләп ҡараны, өҫкейемен һәр ваҡыт алыштырып, йыуып торҙо, мунса индерҙе. Әлфисте дәрес әҙерләргә, яуаплылыҡҡа өйрәтте.

– Бына Азамат мәктәпкә барғас, һинең ағайың «икеле» ҡапсығы, тип көлөрҙәр. Ул ҡайтып, миңә булыш әле, тиһә, «белмәйем» тиерһеңме? Үҙеңә лә оят булыр. Тырышып, «бишле»гә генә уҡы! Ҡыҙҙар күп белеүсе егеттәрҙе ярата, – тип өгөтләне.

Һүҙҙәренең файҙаһы теймәй ҡалманы. Әлфис, мәктәптән ҡайтҡас, Азаматҡа ҡысҡырып китап уҡыны. Азамат үҫте, ул инде ултыра башланы. Әлфистең күлдәген тартҡылай, ҡысҡырып көлә. Ялға ҡайтҡан сағында Булат Азаматты ҡулынан да төшөрмәне. Бала уны үҙ итеп, биттәрен, танауын тешләп, еүешләп бөтөрә.

Сөмбөл һуңғы ваҡытта барыһы менән уйнап-көлөп һөйләште. Булат менән үҙен тыныс тотто, нимә булһа ла һораһа, күҙенә ҡарап асыҡтан-асыҡ яуап бирҙе.

Байрас уны аҫтан ғына күҙәтте. Сөмбөлдөң кинәт үҙгәреүен нисек аңларға: ул үҙ хәле менән ризалашты, тиер ине, ағаһы менән аралары шул килеш ҡалды. Байрас Сөмбөлдөң ниҙер уйлап йөрөүен һиҙҙе, ләкин аңлап ҡына бөтөрә алманы.

«Ҡалаға барып ҡайтайым әле»,– тип Сөмбөл бер көндө үҙе генә ҡалаға китте.

Верочка өйөндә уны ағаһынан хат көтә ине. Сөмбөл һөйөнөсөнән әбейҙе ҡосаҡлап үпте. Верочка аптырап ҡалды.

– Ниндәй шатлығың бар? Кемдән хат килде?

– Верочка йәнем, мин йыраҡҡа китәм. Һиңә хат яҙып торормон, тик, адресыңды бер кемгә бирмәйем, ҡайҙалығыңды берәүгә лә әйтмәйем, тип һүҙ бир.

– Ярай, ҡояшым, ярай. Ләкин һин хат яҙ, яңғыҙ ҡарт әбейеңде онотма. Минең бит бер яҡын кешем дә юҡ!

Сөмбөл баҙарҙан улына комбинезон, салбар, күлдәктәр алды. Шатлығын эсенә йотоп, ауылға ҡайтты. Бөгөн ул өйҙәгеләрҙе тәмле алма бәлеше менән һыйларға уйланы. Ауыҙ эсенән көйләй-көйләй, аш-һыу әҙерләне. Өҫтәл уртаһындағы астраларҙы ла ситкә алманы, шуның тирә-яғына барыһына ла ҙур-ҙур бәлеш киҫәктәре ҡуйҙы. Табын шундай мул, матур, күңелле һәм барыһы ла бәхетле кеүек ине.

Ҡәйнәһе тиҙерәк терелһен тип, хәленән килгәндең барыһын да эшләне: кисен

дарыуҙар менән уның аяҡтарын ыуҙы, йылы һыуҙа тотто. Был өйҙән нисек тә көҙгө һыуыҡтар башланғансы китергә ашыҡты.

Гөлфиә апай ике ай тигәндә ныҡлап йөрөп китте. Сөмбөлдөң дә был йортҡа аяҡ баҫыуына бер йыл тулды, ауыр булһа ла, көндәр, йылдар уҙа икән.

– Әсәй, ноябрь байрамына Азамат менән әсәйем янына ҡайтып киләйем әле?

– Ярар, ҡыҙым, баҡса эштәре бөттө, инде өй эштәрен үҙем дә ҡарармын. Ҡунаҡ булып кил, Байрас илтеп ҡуйыр, – тип ҡәйнәһе ҡаршы килмәне.

Байрамға Байрас ҡайтты, Булат ҡайтманы. Сөмбөл, тағы Фәриҙәһе янына киткәндер. Һуңғы тапҡыр күрә лә алманым үҙен, тип кәйефһеҙләнһә лә, һис кемгә белгертмәне.

Сөмбөл барлыҡ әйберҙәрен алдан йыйып әҙерләгәйне. Өйҙәгеләргә һиҙҙермәй генә, кеше күрмәҫ элек тип, машинаға бер сумка әйберен сығарып ҡуйҙы. Бер ни булмағандай, барыһы менән хушлашып, күҙ йәштәрен күрһәтмәҫкә тырышып, Азамат менән машинаға инеп ултырҙы.

– Бер аҙнанан да оҙағыраҡ тормағыҙ, ҡыҙым. Һеҙһеҙ өйҙә күңелһеҙ, ейәнемдең тауышынан башҡа өй буш. Ярай, иҫән-һау барып етегеҙ, ҡоҙағыйға күп итеп сәләм әйтегеҙ, – тип ҡайныһы менән ҡәйнәһе ҡул болғап оҙатып ҡалды.

Сөмбөл йәшереп кенә күҙ йәштәрен һөрттө, Байрас көҙгөнән күрмәһен тип, улын алдына баҫтырып, битен уның артына йәшерҙе.

Байрас ашыҡманы, елдермәне,  ошо мәлдән рәхәт табып, Сөмбөлдө үҙ ҡатыны, Азаматты үҙ балаһы итеп күҙ алдына килтереп, йылмайып ҡуйҙы. Әгәр шулай булһа, улар, аҙна һайын тейәлешеп, ҡәйнәһенә ҡунаҡҡа барырҙар ине... Уға ошо бәләкәй генә Сөмбөл кәрәк. Уның наҙлы ҡарашы, шылтыратып көлөүе, һурып үбер өсөн яратылған матур ирендәре кәрәк, ул шуларҙың барыһын аҙна буйы һағынып йәшәй, аҙна аҙағында һөйөнә-һөйөнә ауылына ҡайта...

– Шундай матур башҡайыңды ниндәй уйҙар баҫты, Сөмбөл? – тип йылмайҙы Байрас.

– Ул баш ҡасан да булһа бер уйлар өсөн бирелгән бит инде, – тине Сөмбөл, йылмайып. – Һин бөгөн бик матур күлдәк кейгәнһең, үҙең дә бик сибәр. Һин барыһынан да сибәр. Ҡара әле, һин киткәс, беҙҙең ауыл ҡыҙҙары нисек йәшәрҙәр инде, меҫкенкәйҙәр.

– Улай мине бик сибәргә һанағас, ни эшләп һин ғашиҡ түгел миңә? – тине Байрас һаҡ ҡына.

– Алла һаҡлаһын, Байрас, мин бер янып үлгәндән ҡалдым, икенсеһен күтәрә алмам. Минең башҡа бер ҡасан да ғашиҡ булғым килмәй, ул йән әрнеүҙәремде һис онота алмам, мин быны дошманыма ла теләмәйем. Мин бына был бәләкәй егетте генә яратырмын, уны бер кем менән бүлешәһем юҡ, ул минеке генә, ә мин уныҡы.

«Яраһына ҡағылмайым, тағы бер аҙ көтәйем. Хәҙер һүҙ башлаһам, ҡурҡытырмын ғына. Был юлы ағай менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә кәрәк», – тип уйланы Байрас.

Уларҙы күреп, Сөмбөлдөң әсәһе һөйөнөп туя алманы:

– Кейәү ни эшләп килмәне? – тип былай ҙа яралы йөрәккә тоҙ һалды.

Байрас кис һуңлап ҡына ҡайтырға йыйынды, Сөмбөл уны оҙата сыҡты.

– Ҡасан килеп алайым, Сөмбөл?

– Кәрәкмәй, килмә, ваҡыты еткәс, мин үҙем ҡайтырмын. Барыһы өсөн рәхмәт, әлдә һин бар беҙҙе ҡайғыртырға. – Сөмбөл моңһоу ғына йылмайҙы.

Байрас, машинаһына инеп ултырғас, кире ишеген асты. Сөмбөл уны күреп:

– Нимә булды, Байрас? – тип һораны.

– Һиңә бер һүҙ әйткем килгән ине, – тине егет, матур күҙҙәре менән тултырып ҡарап.

Булат тураһында берәй нәмә әйтергә теләйҙер, тип Сөмбөл ҡурҡып ҡалды.

– Кәрәкмәй, әйтмә, мин бер нәмә лә белергә теләмәйем.

Ул, Байрастың күҙҙәренә ҡарап, эстән генә һаубуллашты, эйелеп, ирене менән әкрен генә уның битенә ҡағылды.

– Һау бул, Байрас, иҫән-һау ҡайтып ет, – тип бышылданы ла ишекте япты, унан, артына ла боролоп ҡарамайынса, өйгә инеп китте.

Байрас байтаҡ ваҡыт ҡуҙғалып китә алмайынса ултырҙы. Сөмбөл ирене менән ҡағылған битен һыйпаны, уның йөҙөн күҙ алдына килтерҙе.

– Их, Сөмбөл, нимә эшләгәнеңде үҙең дә белмәйһең! Ағай ҡаршы килмәһә, мин һине бер кемгә лә бирмәйәсәкмен.

Байрамдар үткәс, Булат менән Байрас бергә ҡайтты. Ғүмере булмағанды, үҙара һөйләшер һүҙ тапманылар. Байрас бер нисә тапҡыр Сөмбөл тураһында һүҙ башларға талпынһа ла, ҡыйыулығы етмәне. Уның ағаһына ҡаршы сыҡҡаны, уның менән телләшкәне булманы.

Улар өйгә ҡайтып ингәндә, атаһы менән әсәһе, Әлфис өсәүләп кино ҡарайҙар ине. Өйҙәге тынлыҡ сәйер тойолдо. Байрас әсәһенә һораулы ҡараш ташланы:

– Әсәй, Сөмбөл ҡайтманымы әллә? Ул бит, үҙем ҡайтырмын, килеп йөрөмә, тине.

– Ире килеп алғанды көтәләр, – тине атаһы, Булатҡа ҡарамайынса ғына.

– Мин уның әсәһенә киткәнен белмәнем бит, – тип ағаһы Байрасҡа ҡараны.

– Киләһе аҙнала ҡайтыр, ҡайтмаһа, барып алырһығыҙ. Бала менән был һыуыҡта юлда йөрөмәҫ, ҡоҙағый ҙа ебәрмәгәндер, килеп алырҙар, тигәндер. Әҙерәк ял итһен, мин аяҡһыҙ ултырғанда, эш бик күп булды. Йәш кенә булһа ла, бөтә эштең яйын белә, еренә еткереп эшләй. Һин, улым, ул бер эш рәте белмәй, тигәс, ҡурҡып ҡалған инем, белә, улым, барыһын да белә. Һин уны яратмағанға ғына юҡтан ғәйеп эҙләйһең, ул бик уңған, бик сабыр бала. Һинең һирәк ҡайтыуыңдың сәбәбен дә һиҙенә, ахыры. Башҡа берәү булһа, тауыш ҡуптарыр, илар ине, ә ул бер күҙ йәше күрһәтмәне. Уға ҡарап минең илағым килә, ирле килеш ирһеҙ бит ул.

– Сөмбөл өйҙә юҡта әйтеп ҡалайым, – тип Шәфҡәт ағай ҙа һүҙгә ҡушылды. – Һин, улым, баланы йәтим итеп, шул йәш ҡатынды илатып, үҙең бәхетле йәшәрмен тимә, кеше бәхетһеҙлегендә бәхет төҙөмәйҙәр. Юҡ артынан сапмайһыңмы икән, ай-һай, үкенерһең, һуң булыр.

Булат өндәшмәй генә, башын аҫҡа эйеп тик ултырҙы.

– Улым, ҡайһы ерен яратмайһың һуң? Нишләргә уйлайһың? Аңлатып бир әле, Сөмбөл өҫтөнә икенсе килен алып ҡайта алмайһың, нисек итеп беҙ һиңә туй яһайыҡ, ти?!

– Белмәйем. Мин Фәриҙәне яратам. Беҙ инде икенсе тапҡыр, Яңы йылға, тип һөйләшәбеҙ, тағы күпме кисектергә була? Мин уның ата-әсәһе менән таныштым, Яңы йылға өйләнешәбеҙ, тип Фәриҙәгә һүҙ бирҙем.

– Шуны онотма, улым: Азамат – минең беренсе ейәнем. Һеҙҙең тағы әллә нисә балағыҙ тыуһа ла, ул һәр ваҡыт минең баш ейәнем булып ҡаласаҡ.

– Мин Яңы йылға өйләнәм, – тине Булат ҡабат, атаһының һүҙен бүлеп. – Киләһе ҡайтыуында Сөмбөл менән һөйләшермен, әсәләренә ҡайтып торор, балаға ярҙам итермен, ташламам.

Икенсе аҙна уртаһы ла етте, Сөмбөл ҡайтманы. Гөлфиә апай, ҡайтыуҙарын күрмәй ҡалмайым тип, тәҙрә янынан китмәне. Шәфҡәт ағай, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, ҡапҡа төбөндәге эскәмйәгә сығып ултырғылай башланы, мәсет янынан да ураштырҙы, оло урамды күҙәтте. Ни тиклем көтһәләр ҙә, Сөмбөл менән ейәне күренмәне. Бер көндө эскәмйәлә ултырған Шәфҡәт ағайға почтальон хат тоттороп китте. «Беҙгә хат яҙыр кеше лә юҡ бит, бар туғандар ҙа бында йәшәй, кемдән булыр икән?» – тип аптырап, өйгә инде.

– Әсәһе, ҡара әле, кемдәндер хат килгән, кире адресы юҡ.

– Малайҙарғалыр инде, беҙгә кем яҙһын?

– Миңә тиелгән бит бына.

– Асып уҡы, улайһа. Әле Байрасҡа ғына ҡыҙҙар яҙа ине, хәҙер һиңә лә яҙа башлағандармы? – тип шаяртты Гөлфиә апай.

Шәфҡәт ағайҙың, ниҙер тойоп, йөрәге жыу итте, ҡурҡып Гөлфиәһенә ҡараны, ул да тынһыҙ ҡалған ине.

*«Хөрмәтле атай-әсәй!*

*Һеҙ был хатты алғанда, мин инде бик йыраҡта булырмын. Һуңғы китеүемдә мин һеҙҙе ысын күңелемдән ҡосаҡлап үптем һәм һаубуллаштым. Китәм, тиһәм, ебәрмәҫ инегеҙ. Әйтмәй киткән өсөн рәнйемәгеҙ, башҡа һеҙҙә ҡалыуҙың мәғәнәһе юҡ, тип уйланым. Атай, «көт!» тинең, көттөм, тағы алты ай көттөм, күреүегеҙсә, беҙҙе бала ла бәйләй алманы. Булат өйләнһен, мин уға бәхет кенә теләйем, киләсәктә үкенмәҫ, тип ышанғы килә.*

*Байрас, һиңә рәхмәтем бик ҙур. Һин һәр ваҡыт ауыр саҡта ярҙам ҡулы һуҙҙың, нисә тапҡыр үлемдән ҡотҡарҙың. Мин һиңә тормошоңда мөхәббәттең олоһон, юлдаштың иң яҡшыһын теләйем.*

*Әлфис, солтаным минең, һинһеҙ нисек йәшәгән булыр инем, белмәйем. Һиңә бер үтенесем бар: беҙҙең серле мөйөштө бер кемгә лә бирмә, ул һәр ваҡыт беҙҙеке булып ҡалһын. Минең киткәнемде белгәс, иларһың, үпкәләрһең. Үҫеп еткәс, барыһын да аңларһың. Бәлки, һиңә беҙҙең батшалыҡта үҙ бәхетеңде ҡорорға насип булыр.*

*Атай, үҙемдең ҡасан ҡайтырымды әлегә белмәйем. Күпме йылдар үтһә лә, тыуған яҡтарға ҡайтҡас, һеҙгә һис шикһеҙ килермен. Минең өсөн борсолмағыҙ, мин юғалмам, ейәнегеҙҙе лә юғалтмам. Ул үҙенең Арыҫлановтар нәҫеленән икәнен белеп үҫер.*

*Әсәй, хөрмәтем ҙур һиңә. Әгәр тормош былай булмаһа, түремдән дә төшөрмәҫ инем. Килендәрең һине минән дә нығыраҡ яратһын, хөрмәт күрһәтһен. Ултыртҡан сәскәләрем һеҙгә минән яҡты иҫтәлек булһын.*

*Атай-әсәй, беҙҙе көтмәгеҙ, эҙләмәгеҙ, беҙ бик йыраҡтарға киттек. Һеҙгә килтергән ғазап-борсоуҙарыбыҙ өсөн кисерегеҙ. Беҙҙе хәйер-фатихағыҙҙан ташламағыҙ. Үтер йылдар, онотолор үпкәләр, төҙәлер яралар, яҡын туғандар кеүек бер осрашырбыҙ. Барлыҡ яҡшылыҡтарығыҙ өсөн рәхмәт Һеҙгә.*

*Сөмбөл.»*

Шәфҡәт ағайҙың ҡулдары ҡалтыраны, тамағына төйөр ултырҙы, һуңғы һүҙҙәрҙе уҡып бөтөрөргә тауышы етмәне. Гөлфиә апай, кинәт башына һуҡҡандай, телһеҙ ҡалды, алъяпҡысы менән ауыҙын ҡаплап, ҡысҡырып илап ебәреүҙән үҙен көскә тыйып ҡалды, күҙ йәштәре үҙҙәренән-үҙҙәре яңаҡ буйлап ағып төштө. Ҡатыны менән төпсөк улы алдында күҙ йәшен күрһәтеүҙән оялып, ир кеше урамға уҡ сығып китте, йөрәген әрнетеп нимәлер ҡыҫты, тыны етмәне, көс-хәл

менән тамағына ултырған төйөрҙө йотто, күҙҙәренән йәш тамды – илле йәшлек ирҙең үҙенең көсһөҙлөгөнән илауы ине. Ул бит ҡасан булһа был көндөң етеүен белде, тик шулай тиҙ килер тип кенә көтмәгәйне.

Тышта һалҡын. Беренсе ҡар яуа. Күңелдә – йән өшөткөс бушлыҡ.

Гөлфиә апай буш бишеккә килеп ҡапланды ла үкһеп илап ебәрҙе, баянан бирле тыйып торған күҙ йәштәренә ирек бирҙе.

– Балаҡайҙарым, күҙ нурҙарым, ҡайҙарға киттегеҙ икән? – тип баланың бәләкәй генә мендәренә башын һалып, бик оҙаҡ иланы.

Ун йәшлек Әлфис, ни булғанын аңларға тырышып, өҫтәлдәге хатты ҡат-ҡат уҡыны. Кем киткән, ҡайҙан киткән? Ниңә әсәһе шулай өҙгөләнеп илай? Апаһы әсәһенә ҡунаҡҡа ғына китте бит. Әлфис хатты ҡабат уҡыны, ундағы һүҙҙәргә ышанғыһы килмәне. Нисек инде апаһы уны ташлап китһен? Азаматты кем ҡарар? Әлфис, аптырап, үҙ бүлмәһенә инде. Апаһының элгестә эленеп торған аҡ яғалы халатын үҙ янына һуҙып һалды. Ҡайтыр апаһы, әсәһендә тағы бер аҙ ҡунаҡ булыр ҙа ҡайтыр, ҡайтмаһа, ялда Байрас ағайым менән барып алырбыҙ, тип уйланы бала. Тынысланып, янындағы халатты ҡосаҡлап йоҡлап китте.

* * *

Сөмбөл әсәһендә ике төн ҡунды ла, илай-илай, ике хат яҙҙы. Хаттың береһе – әсәһенә, икенсеһе Арыҫлановтарға ине:

*«Ҡәҙерле әсәйем!*

*Мин йыраҡ юлға йыйындым. Һиңә әйтер һүҙҙәрем бик күп. Өндәшһәм, хәҙер тороп ултырыр инең, тыңлар инең, ләкин мине аңламаҫһың, тип уйлайым. Мин һинең асыуланыуыңдан, илауыңдан, күҙ йәштәреңдән ҡурҡам. Мин һәр ваҡыт һине ҡайғы-борсоуға һалыуҙан ҡурҡтым, шуға һин күп нәмәне белмәнең, минең ғазаптарымды күрмәнең. Мин яңылыштым, әсәйем. Мөхәббәттең ниндәй ғазаптарға һалыуын белмәнем. Ҡыҙ бала мөхәббәт тураһында хыяллана, үҫеп еткәс, шуны эҙләп китә. Ҡыҙҙар ғүмерен юҡҡа ғына сәскә менән тиңләмәйҙәр. Әгәр мөхәббәттең шундай мәрхәмәтһеҙ, ҡанһыҙ икәнен белгән булһам, уны ситләтеп уҙыр инем. Әсәйем, йәнемде йолҡоп алдылар, ҡанатымды ҡайырып һындырҙылар, яраларым бик ауырта. Һиңә һөйләргә, күҙ йәштәреңде күрергә көсөм ҡалманы, әсәйем. Көндөҙ көләм, төндә илайым, бала хаҡына йәшәргә көс бир, тип Хоҙайға ялбарам.*

*Әсәйем, кисер мине, ышанысыңды аҡлай алманым. Бәлки, әле хаталарҙы төҙәтергә һуң түгелдер, өмөтөңдө генә өҙмә. Һин мине эҙләмә, Булаттарға ла барма, уның ата-әсәһенең бер ғәйебе юҡ. Улар бик яҡшы кешеләр, һин уларға рәнйемә.*

*Мине башҡа берәү ҙә яндыра, рәнйетә, мөхәббәт тип алдай алмаҫ. Мин дөрләп янып бөттөм, йәшлек мөхәббәтемдең көлө генә ҡалды, ахырыһы. Һау бул, әсәйем, зинһар, рәнйеп ҡалма.*

*Ташлама, әсәй, ташлама*
*Мине изге доғаңдан.*
*Ташлаһаң изге доғаңдан,*
*Мин бәхетле була алмам.*

*Һине яратып, ҡыҙың Сөмбөл.»*

Сөмбөл икенсе көндө иртән, ҡалаға барып ҡайтам тип, өйҙән сығып китте. Ул күңеленән әсәһе менән һаубуллашты, илағыһы килһә лә түҙҙе, күҙ йәшен күрһәтмәне. Сумкаһына бала кейемдәрен генә һалды ла йыраҡ юлға ҡуҙғалды.

* * *

Булат менән Байрас аҙна аҙағына ялға ҡайтты. Юлда уны-быны һөйләштеләр. Ҡайтып еткәндә Булат:

– Байрас, мин бөгөн Сөмбөл менән һөйләшәм, әгәр китәм тиһә, әсәһенә илтеп ҡуйырһың инде, – тине, ауыр һулап.

– Ә минең уны ебәргем килмәһә, мин уға өйләнергә теләйем, тиһәм, ни әйтерһең?

– Ҡуй инде, энем, һиңә ҡыҙҙар бөткәнме? Икебеҙгә бер ҡатын булмай бит инде.

– Булмаһа – булыр. Ул бит һинең ҡатының булманы. Сөмбөл әгәр миңә кейәүгә сығырға риза булһа, уны бер ҡайҙа ла ебәрмәйәсәкмен.

– Риза булмаясаҡ, ул мине ярата. Был уйыңды башыңдан алып ташла.

– Ҡарарбыҙ, ағай, унан «белмәйем» тимә, юлыма арҡыры төшмә.

Өйгә улар икеһе лә бик етди ҡиәфәттә ҡайтып инде. Ингәндә үк әллә ниндәй ауыр тынлыҡ һиҙелде. Әсәләре бик борсоулы йөрөй, аталары ҡаршы алырға ла сыҡманы.

– Әсәй, ни булды? Әллә илағанһың инде? – тине Байрас, әсәһен ҡосаҡлап.

Әсәһе, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, илап ебәрҙе.

– Сөмбөл, ейәнем... – тине ул, үкһеп.

– Сөмбөлгә ни булған? Атай, нимә булды, аңлатығыҙ, – тине Булат та, телгә килеп.

– Теләгең ҡабул булды, улым, киткән беҙҙән Сөмбөл.

– Нисек киткән? Бер ни әйтмәйенсәме?

– Әйткән, һине, бәхетле булһын, тигән, – тине лә Шәфҡәт ағай әйләнеп ултырҙы.

Гөлфиә апай алъяпҡыс кеҫәһенән хат сығарҙы, Байрас уны әсәһе ҡулынан йолҡоп тигәндәй алды. Уҡыған һайын, йөҙө ағарҙы. Бер аҙ уйланып торҙо ла:

– Атай, машинаның асҡысын бир әле. Мин барыбер табып алып ҡайтам Сөмбөлдө, – тип сығып китте.

– Туҡта, улым, хат бер аҙна элек яҙылған бит, ҡайҙан табырһың икән,– тип һөйләнә-һөйләнә, Шәфҡәт ағай уның артынан эйәрҙе.

Байрас ҡар бурандары уйнатып ҡуҙғалып китте. Иң элек Верочкаға барып, өйҙөң бөтә мөйөшөн айҡап сыҡты. Сөмбөл бында юҡлыҡҡа ышанғас:

– Верочка, Сөмбөл ҡайҙа? – тип ялбарып һораны.

– Белмәйем, Байрас, уның миңә күптән килгәне юҡ.

Һуңғы өмөт булып Сөмбөлдөң әсәһе ҡалды. Ҡыуып сығарһа сығарһын, тик Сөмбөлдөң адресын ғына әйтһен. Байрас, аҡ-ҡара күрмәй, машинаны ҡыуҙы, боролоштарҙа бер нисә тапҡыр әйләнеп ҡаплана яҙҙы. Сөмбөлдәрҙең ҡапҡа төбөнә килеп туҡтағанда, аш өйөндә генә ут яна ине. Ҡапҡа эстән терәтеп ҡуйылғанға, ҡапҡа башынан һикереп төштө, тәҙрәгә килде. Өҫтәл артында Сөмбөл күренмәне, әсәһе илай-илай хат уҡый ине. Байрас тәҙрә шаҡыны, ул инде өйгә ингәнсе үк бында ла шул уҡ хәл икәнен аңланы.

Сөмбөлдөң әсәһе Байрасҡа асыуланманы ла, уны ҡыуманы ла, хәйер, ул инде илап арыған ине, ахыры.

– Уҙ, ултыр, сәй ҡуям, – тине. – Был буранлы төндә кемде эҙләйһең, энем?

– Миңә Сөмбөл кәрәк ине.

– Ә ниңә һиңә кәрәк? Ул бит ағайыңдың ҡатыны ине. Ниңә ул килмәне? Ҡайҙа минең балам? Ҡайҙан эҙләйем ҡыҙымды? Аслы-туҡлы килеш кемдең ишек төптәрендә йөрөйҙөр?

– Һеҙгә әйткәндер, зинһар, йәшермәгеҙ. Әйтегеҙ генә, мин уларҙы алып ҡайтам, – тине Байрас, өмөтләнеп.

– Бына хаты, үҙең уҡы. Миңә бит, ҡалаға ғына барып ҡайтам, тигән ине, ҡайтмаҫ, тип уйламаным да.

Хаттағы һүҙҙәрҙе уҡыған һайын, Байрастың йөрәге ҡыҫылды, ҡулдары ҡалтыраны. Һуңғы өмөтө лә өҙөлдө.

– Борсолмағыҙ, хат килгәс, мин уларҙы табырмын. Мин уны табырға, көтөргә тейеш.

– Кем ғәйепле? Сөмбөл бер кемде лә ғәйеплләргә ҡушмаған. Шулай алма кеүек балаһынан баш тартҡан икән, ағайың ғүмере буйы бала йөҙө күрмәһен, ташлағанын һағынып йәшәһен, мин уға бик рәнйейем. Быға тиклем ауылдан йыраҡ китмәгән, донъя күрмәгән балам ниндәй кешеләргә юлығыр? Бөтөнләй юғалһа, нисек йәшәрмен һуң мин? Һеҙ күмәк, мин бер яңғыҙым, ҡайғымды уртаҡлашыр кешем дә юҡ.

– Мин һеҙҙе ташламам, рөхсәт итһәгеҙ, килеп йөрөрмөн, – тип Байрас башын эйеп сығып китте.

Машинаға ултырғас, Сөмбөл менән һуңғы тапҡыр хушлашыуы иҫенә төштө. Уның бөтөнләйгә һаубуллашыуын нисек һиҙмәне һуң ул?

«Ҡайҙа һин, Сөмбөл? Ҡайҙарҙан эҙләйем? Һинһеҙ нисек йәшәрмен?»

Байрас ҡапҡа төптәренә ярты төн уҙғас ҡына ҡайтып туҡтаны. Руленә башын һалып, уйға сумды, өйгә ингеһе килмәне.

Атаһы сығып ҡапҡа асты, ул да йоҡламай ине. Улы ҡуҙғалмағас, янына инеп ултырҙы.

– Тапманым, атай. Әсәһе белмәй, уға ла хат ҡына ҡалдырған. Ул да: «Юлға аҡса бирҙегеҙме? Нисек йәшәр? Ҡайҙа китте? Нишләттегеҙ баламды? Ағайың бала йөҙө күрмәһен», – тип илай.

– Ай-һай, улым, әсә ҡарғышы төшһә, ҡаты төшә, ағайың үкенмәгәйе. Ана, бишек янынан китә алмай, улын юҡһына. Бик ҡотолғоһы килгән ине, бына хәҙер кәртәләр юҡ, юлдар асыҡ, ә шулай ҙа күңеле үҙенә урын тапмай.

– Атай, бер нәмә әйтһәм, аңларһыңмы икән мине?

– Әйтмәһәң дә беләм, улым.

– Кем әйтте, ҡайҙан беләһең?

– Мин, улым, атай ғына түгел, әле һинең кеүек ир кеше лә. Мин барыһын күреп-һиҙеп йөрөнөм, һин әйтмәһәң, үҙем әйтәһе инем. Мин риза, улым, тик һуңға ҡалдың, ахырыһы.

– Мин көтөрмөн, ҡасан да булһа бер ҡайтыр ул. Мин уны барыбер үҙемә ҡаратасаҡмын, – тине Байрас, тәҙрәгә ҡарап. – Ҡыш килде, ҡыш китте. Атай, хәтерләйһеңме, теге ваҡытта нисек йырлаған ине:

*Һағынһанда аҡ буранһа ҡара,*
*Аҡ бурандар булып мин яуам.*
*Аҡ бурандар аҙаштыра, тимә,*
*Аҙаштырһан һине мин булам.*

Икебеҙ ике ерҙә аҙаштыҡ.

*(Дауамы бар.)*



Хәлил
ҺӨЙӨНДӨКОВ

# ҠЫҘҒАНСЫҠ

## хикәйә

– Эх, Барый дуҫ, – тине хирург Хәсән Хөрмәтович, – элегерәк алып килгән булһаң, һис шикһеҙ ҡотҡарып ҡалған булыр инем. Хәҙер инде …уколдар ғына яҙып бирә алам.

Өмөтһөҙ сир тураһындағы мәғлүмәтте ауырыуҙың туғандарына хәбәр итеү хирургҡа, ай-һай, еңелдән түгел. Ана, ҡайғылы хәбәрҙе үҙенең балалыҡ дуҫы Барыйға еткерергә мәжбүр бөгөн. Барый – хәҙрәт, Хәсәндең синыфташы, Бохаралағы дини мәҙрәсәлә уҡыны, хәҙер районның имам-мөхтәсибе. Абыстайы ныҡлап сирләп киткәс, уны дауаханаға алып килгәйне.

– Был харам нәмәне ауыҙға алған өсөн ғәфү ит, хәҙрәт, – тине Хәсән бер аҙҙан, өҫтәлдә ятҡан тәмәкеһенең ҡабын аса-аса. – Яман ғәҙәт... Ни өсөндөр, Ғәшүрәнең сирләүендә үҙемде лә ғәйепле тоям...

Барый тамаҡ ҡырып алды ла, ғәҙәте буйынса ҡара һаҡалын һыйпаштырып, әкрен генә һүҙ башланы:

– Хәсән ҡорҙаш, үҙеңде ғәйепләмә. Әйтәм бит, һуң алып килгәнһең, тип миңә лә үпкәләп алдың. Әммә Аллаһы Тәғәлә яҙған яҙмыштан бер ҡасан да уҙып булмай. Тимәк, Ғәшүрәнең шул яҙмышына мин дә, һин дә, хатта сирҙең үҙе лә төп сәбәп булып тормай...

– Нисек инде, сәбәп булып тормай?.. – Хәсән ҡабыҙған сигарет төтөнөнә сәсәне.

– Эйе, тап шулай. Мәҫәлән, һин операция яһап, кемделер үлемдән ҡотҡарып ҡалдың икән, тимәк, ул кешегә Аллаһы Тәғәлә артабан да ғүмер итергә яҙған...

– Ғәфү ит, хәҙрәт, – тине Хәсән. – Мин, реалист булараҡ, бөтөнләйгә башҡа фекерҙәмен. Һәр кешенең тормошонда кемдер... ниндәйҙер роль уйнай, хатта яҙмышын бөтөнләйгә үҙгәртеүе мөмкин. Шул уҡ ваҡытта кеше үҙ яҙмышын үҙе лә хәл итә ала. Мәҫәлән, тырыш, егәрле кеше бәхетле, етеш тормошҡа өлгәшә, ә

*Хәлил Төхфәт улы Һөйөндөков (1957) — төрлө госпиталдәрҙә 25 йыл хеҙмәт иткән отставкалағы хәрби медицина подполковнигы. Йәштән үк хикәйәләр, легендалар яҙа, үҫмерҙәр өсөн ике китап авторы, Сибай яҙыусылар ойошмаһының әүҙем ағзаһы.*

ихтыярһыҙҙар, ялҡауҙар ғүмер буйы ярлы йәшәргә үҙҙәрен үҙҙәре дусар итәләр ҙә баһа. Ә ваҡытында дауалай башлаған сир кире сигенеүсән...

– Уф, – Барый, ултырғысҡа баҫып, кабинеттың тәҙрәһен шар асып ҡуйҙы ла йәнә үҙенең урынына – өҫтәл ҡаршыһына барып ултырҙы. – Ташласәле шул торбаңды.

– Ғәфү ит...

– Әлбиттә, быны аңлатыу бик ябай түгел, Хәсән, әммә тырышып ҡарармын. Әлеге үҙең әйткән бәхетле кешеләрҙе Аллаһ егәрле, тырыш итеп яралтҡан, ә теге бахырҙар ана шулай бахыр итеп яралтылған. Ә һиңә ана шундай абруйлы хирург булырға, ауырыуҙарҙың ғүмерҙәрен ҡотҡарып алып ҡалырға ла Аллаһ үҙе ҡушҡан.

Өҫтәлдәге телефон шылтырауы хәҙрәттең һүҙҙәрен өҙҙө. Хәсән Хөрмәтович трубканы алды.

– Эйе... Ярар, хәҙер төшәм. – Бер аҙ телефонды тыңлағас, хәҙрәткә ҡарап: – Барый ҡорҙаш, әйткән һүҙҙәреңдең мәғәнәһен ҡат-ҡат уйлап, төшөнөргә тырышырмын. Ә хәҙергә, ғәфү ит, ҡабул итеү бүлегенә саҡырталар, – тине.

Хәсән Хөрмәтович ҡабалан ғына хушлашты. Башҡаса кабинетта ҡалыуҙың мәғәнәһен күрмәгән хәҙрәт тә, түбәтәйен йүнәтеп кейеп, әкрен генә сығыу яғына ыңғайланы...

Эш көнө тамамланыр алдынан ғына ауыр хәлдәге пациентты, каталкаға һалып, хирургия бүлегенә лифт менән мендерҙеләр. Бүлек мөдире Хәсән Хөрмәтович ауырыуҙы тағы бер мәртәбә ентекләп ҡараны ла дежурҙағы хирургҡа, постағы һәм операция блогы шәфҡәт туташтарына тейешле күрһәтмәләр бирҙе. Ауырыуҙың хәленә ҡарап, операцияның ҡатмарлылығын тик яҡынса ғына фаразларға мөмкин.

«Бөгөн һуңғараҡ ҡайтырмын, ашығыс операция. Пока», – тине лә телефонын һүндерҙе. Ҡатыны Сәғиҙәнең «Ниндәй опера..?» тигәнен генә ишетә биреп ҡалды. Хирургия бүлегенә өй телефоны аша шылтыратып, дежурҙағы шәфҡәт туташынан төпсөнә-төпсөнә һорашып, үҙенә кәрәк мәғлүмәтте, хатта унан артығын да барыбер белешәсәк Сәғиҙәһе. Ана әле лә ауырыу тарихы яҙып ултырған хирург ординатор бүлмәһенең ярым асыҡ ишегенән шәфҡәт туташының Сәғиҙәгә сираттағы «доклад»ын ишетте: «Аппендицит?.. Эйе... Берәр сәғәт кенә булыр әле ул...»

Хәсән Хөрмәтович тирҙән еүешләнгән операция кейемен һалып, йәһәт кенә душ ҡойоноп сыҡты ла, мөдир бүлмәһенә инеп, телефондан шылтыратып алды. Унан постағы шәфҡәт туташына ниндәйҙер күрһәтмәләр биреп, ординатор бүлмәһенә йүнәлде.

– Хәсән Хөрмәтович, өйөгөҙгә шылтыратығыҙ әле. Һеҙ операцияла саҡта ҡатынығыҙ әллә нисә тапҡыр... – тине йәш медсестра Фәнисә уның артынса.

– Ваҡытым юҡ! Тағы шылтыратһа, операцияла, тиң дә ҡуй!

Кеҫәһендә һәр саҡ йөрөткән телефонын алып, унда килгән мәғлүмәттәрҙе ҡарай һалды ла, ҡатыны йөҙәтмәһен өсөн, ҡабаттан һүндереп ҡуйҙы. Хәҙер барлыҡ «аңлашыуҙар» тик өйгә ҡайтҡас ҡына буласаҡ!.. Полировкалы өҫтәл артындағы ултырғысҡа йәтешләп ултырып алды, ҡулындағы сәғәтенә ҡараны. «Ауырыу тарихы»ның кәрәкле битен асып, операция протоколын яҙа башланы. Күптән түгел иллене аша атлаған тәжрибәле табип документтарын бик ентекләп, ифрат дөрөҫ итеп яҙырға тырыша. Ҡайһы саҡта дауалау протоколдарын министрлыҡҡа, суд, прокуратура органдарына ла ебәрергә тура килә. Һаулыҡ һаҡлау министрының фарманына ярашлы, дауалау учреждениеларында тәмәке

тартыу тыйылғанын яҡшы белә Хәсән Хөрмәтович. Әммә ошо әмерҙе үтәү – хирургтар өсөн иң ауыры...

Күрше өҫтәл артында ултырған йәш хирург Айбулат иһә бүлмә эсендә тартырға яратмай. Бүлек мөдиренең ҡатынына ни әйтергә ҡушҡанын ишетепме, көләмһерәп ҡуйҙы. Әллә шуны күреп, Хәсән Хөрмәтович, бер аҙға яҙыуынан туҡталып, һорай һалды:

– Айбулат Тимерйәнович, ҡасан кәләш алырға уйлайһың әле һин?

– Әлләсе, Хәсән Хөрмәтович, уйлағаным юҡ. – Айбулат мут йылмайып ултырған мөдиргә ҡараны. – Нишләп улай тип һорап ҡуйҙығыҙ әле?

– Һиңә бер кәңәш: кәләште тик хирургтан алырға тырыш.

– Ни өсөн, Хәсән Хөрмәтович? Беренсенән, кәңәшегеҙҙең кәрәклеген бер ҙә аңлап етмәйем, икенсенән, хирург ҡатын-ҡыҙҙы табыуы, ай-һай.

– Аңлатам. Беренсенән, һин үҙең атҡарған һәр операция өсөн хәләл ефетең алдында бер ҡасан да яуап тотмаясаҡһың, сөнки ул, үҙе лә хирург булараҡ, эшеңдең бөтә нескәлектәрен беләсәк. Шуға күрә эш ваҡытынан тыш яһалған һәр операция, төнгө ашығыс саҡырыуҙар өсөн уға отчет бирергә тура килмәйәсәк. – Хәсән Хөрмәтович көллөксәгә тәмәкеһенең осон сиртеп төшөрҙө. – Ә икенсеһе инде – үҙеңдең сослоғоң. Баш ҡалаға сираттағы уҡыуға барғаныңда, бәлки, берәй хирург сибәркәйҙе осратырһың...

– Әллә тағы, – тип кенә ҡуйҙы Айбулат, – минең бәхеткә кем яҙғандыр...

Әлбиттә, йәш егет үҙенән байтаҡҡа олораҡ коллегаһын аңлау хәлендә түгел ине. Юморға бай начальнигының сираттағы шаяртыуы тип кенә аңланы «кәңәш»те.

Ә Хәсән Хөрмәтовичта шаярыу ҡайғыһы юҡ. Тыштан ғына шулай булырға тырыша ул. Үҙ-үҙен тынысландырыу өсөн. Бик тә етди ике мәсьәлә борсой ине уны ошо минутта. Реанимация бүлегендә ятҡан пациентының артабанғы яҙмышы тураһында уйланһа, өйгә ҡайтып инеү менән Сәғиҙәһе унан «допрос» ала башлаясағын да күҙалланы.

...Хәҙрәт кенә түгел, хатта йәш Айбулат та «кем яҙғандыр...» тигән буласы. Их, Хәсән, Хәсән, ҡайҙа һинең ана шул егеттәй алтын йәш сағың... Яҙыуынан бер аҙға туҡталып, ултырғысының арҡаһына һөйкәнә биреп, уйҙарын иреккә ебәрҙе. Тормош, тормош... Яҙмыш, яҙмыш... Ана шул ике төшөнсә мейеһен бырауланы. Әллә, ысынлап та, Барый хәҙрәт әйтмешләй, Аллаһы Тәғәлә яҙған тәҡдир тигәне ысынбарлыҡҡа тап киләме?.. «...Яҙмыштан уҙмыштар табырмын...» тип йәш сағында отоп алған йырҙы ишетелер-ишетелмәҫ кенә мөңгөрләп алды.

– Нишләп тиктомалдан йырлай башланығыҙ әле, Хәсән Хөрмәтович? – тип һорай һалды Айбулат.

– Былай ғына...

Операция протоколын япты ла, ғәҙәтенсә, уның өҫтөнә усы менән шап итеп һуғып ҡуйҙы. Унан, халатын сисә-сисә, Айбулатҡа ауырыуҙы дауалау буйынса бер нисә кәңәшен бирҙе лә хушлашып сығып китте.

– Жить будет? – тигән һорау менән ҡаршы алды уны ҡабул итеү бүлегендә көтөп торған тәпәш буйлы мәрйә, үҙен «пациенттың ҡатыны» тип таныштырғандан һуң.

Быңдай һорауға ла аныҡ ҡына яуап биреүҙәре, ай-һай... Тик кинофильмдарҙағы хирургтар ғына, операциянан сығыу менән, маскаларын сисә килеп, «Жить будет!» тип кенә ебәрәләр. Ә тормошта иһә күпкә ҡатмарлыраҡ шул.

– Ирегеҙҙең хәле ауыр. – Дөрөҫөн әйтергә тартынманы Хәсән Хөрмәтович. – Һеҙҙең тура һорауығыҙға бигүк тура яуап бирә алмайым...

– Ни өсөн?

– Сөнки мин Аллаһ түгел, ә бары хирург ҡына. Ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләнем. Хәҙер инде, башлыса, уның организмының ауырыуға ҡаршы көрәшеү мөмкинлектәренә өмөт итергә ҡала...

Аллаға үҙе лә әллә ни ныҡлап ышанып етмәгән Хәсән ҡайһы бер осраҡтарҙа шулайыраҡ һөйләшергә ғәҙәтләнгән. Бәғзе берәүҙәргә тап ошо һүҙҙәр ыңғай тәьҫир итә...

– Аллаға тип, һеҙ үҙегеҙ ни өсөн?.. Һеҙ бит шуның өсөн көрәп аҡса алаһығыҙ. Ауырыуҙың һауығыуына гарантия ла бирә алмағас, ни өсөн хирург исемен тағып йөрөйһөгөҙ? – Ҡатын һөжүмгә күсте. Үҙенән ике башҡа тиерлек бейек кешегә юғары ҡарап, автомат һымаҡ татылдаған был бисә ерҙән тороп өй ҡыйығы башындағы кемдер менән һөйләшкән кеүек күренде.

Оҙаҡ йылдар эшләп, пациенттарҙың туған-тыумасаларын күреп өйрәнгән хирургтың бындай һөжүмгә ҡаршы «иммунитет»ы бар ине инде.

– Ирегеҙ ҡасан сирләй башлағайны? – тине, был турала үҙе яҡшы белеүенә ҡарамаҫтан.

– Өсөнсө көн... – Ҡатын докторҙың ни әйтергә йыйыныуын аңғармайыраҡ ҡалды, буғай...

– Ирегеҙ өсөнсө көн эсе ауыртып яфалана, ә һеҙ уны әллә ҡайҙа ятҡан ауылдағы шаманға алып барып өшкөртөп йөрөгәнһегеҙ. Тағы берәй көн шулай йөрөһәгеҙ, бәлки, беҙҙең дауаханаға килтереп тә өлгөртмәҫ инегеҙ... Өҫтәүенә, аңын-тоңон белмәй тороп, хәләл ефетегеҙҙең эсенә грелка һалғанһығыҙ. Йылы сирҙе уғата көсәйткән:эсе тулы эрен ине... Ул ғына ла түгел, ирегеҙҙең организмында сепсис башланған. – Хәсән Хөрмәтович, ғәҙәте буйынса, һуҡ бармағы яҙылған уң ҡулын юғары күтәреп, тауышын көсәйтә биреп дауам итте. – Һеҙҙең тел менән әйткәндә, хөрмәтле ханым, заражение крови. Әммә беҙ уны ҡотҡарып алып ҡалыу өсөн бар көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ. Әллә ни бола ҡуптарырға, ашығыс һығымталар яһарға ашыҡмағыҙ. Һау булығыҙ.

Ҡатын бер аҙ айнып, аңына килгәндәй булды. Дәрескә әҙерләнмәй килеп, уҡытыусы алдында баҫып торған уҡыусы һымаҡ, йыуашайып ҡалды. Тәүҙәгегә ҡарағанда күпкә тынысыраҡ итеп:

– Доктор, бәлки, уға аптеканан берәй дарыу-фәлән алып килергәләр? Һурпамаҙар кәрәкмәҫме? – тип һораны.

– Әлегә бер ни ҙә кәрәкмәй. – Доктор быны ишектән сығып барышлай әйтте. – Кәрәкле дарыуҙар етерлек. Ә ашарға уға әле иртә. Хушығыҙ.

***

Хәсән өйөнә ингәндә, Сәғиҙә Ҡәмәриә исемле әхирәте менән зал бүлмәһендә гәп һата ине, кинәт тынып ҡалдылар. Аяҡ кейемен һалып, курткаһын сисеп тә өлгөрмәне, уны бер яҡ ситкә этәреп тигәндәй, бик ҡабалан йыйынып, Ҡәмәриә сығыу яғына ыңғайланы. Хәсән: «Һаумыһығыҙ» тигәнгә лә ишетелер-ишетелмәҫ кенә яуап биргән ҡатын: «Ярай, Сәғиҙәкәйем, ҡайта һалайым, ашығам, өйөмдә эшем күп», – тигән булды сығып барышлай. Сәғиҙәнең: «Ултыра бир әле», – тип өгөтләүенә ҡарамай, ишекте ҡаты ябып сығып китте. Дауахана дерматологы ҡатынын – ошо ябыҡ йөҙлө Ҡәмәриәне бер ҙә өнәп етмәй Хәсән. «Ашығам» тиһә лә, журнал өҫтәлендә өйөлгән көнбағыш ҡабыҡтарына ҡарағанда, моғайын, ике-өс сәғәт буйына сәйнәнеп ултырғандыр әле. Уның асҡаҡ битенә йәбештереп ҡуйылған һымаҡ күренгән, ослайып сығып торған ирендәре, гүйә, тик хәбәр һөйләр өсөн генә яраҡлы кеүек.

Хәсән йыуыныу бүлмәһенә үтте. «Балнис» еҫе сығарып янынан үтеп киткән

хәләл ефетен «күрмәгән» Сәғиҙә, диванға ҡырын ятып, телевизорҙағы һанһыҙ сериалдарҙың берәүһен ҡарай башланы.

Эштә саҡта һиҙелмәһә лә, шаҡтай ғына асыҡтырған. Хәсән аш бүлмәһенә инеп, оло алюмин кәстрүлдең ҡапҡасын аса биреп, еҫкәп ҡараны ла уға башҡаса ҡағылманы. Өс көн элек бешерелеп, инде әллә нисә тапҡыр ҡайнатыу арҡаһында ярым шыйыҡ өйрәгә әйләнеп барған был макарон туҡмасын тағы бер мәртәбә йылытып ашарға күңеле төшмәне. Һуңғы бер нисә көн үҙе кухня тирәһендә әллә ни булашҡаны юҡ шул... Газ плитаһын тоҡандырып, тулы сәйнүкте ултыртты ла картуф таҙартырға тотондо. «...Мин үҙем хатта йомортҡа ла ҡура белмәйем, өйҙә тик ҡатыным ғына бешеренә» тигән бәғзе бер таныштарын йәлләй торғайны элегерәк. Әле уйҙары башҡараҡ юҫыҡҡа йүнәлә... Бәлки, бешерә белмәгән ирҙәр, киреһенсә, уға ҡарағанда күпкә бәхетлерәктер... Былау, һәр төрлө бәлеш, кәтлиттәрҙең әллә нисә төрөн, хатта торт та бешереүгә һәләтле Хәсәндең ошо мәлдә кухня эше менән таныш булмаған ирҙәргә көнсөллөгө килде... Табала картуф ҡурылған арала, әллә һүҙ юҡта һүҙ булһын өсөн, зал бүлмәһенә сығып, креслоға килеп ултырҙы ла һаман уны өйҙә бар тип тә белмәй шымтайып ятҡан ҡатынына өндәште:

– Балалар шылтыратманымы? Май байрамына ҡайтырға уйлашмайҙармы, тим.

Әммә Сәғиҙәһе, ҡаштарын йыйырып, бер ни ҙә ишетмәгәндәй, ята бирҙе. Хатта күҙен дә бороп ҡараманы. Хәсән башҡаса уға өндәшкеләп торманы, ҡабаттан кухняға сыҡты. Низер әйтеүен артабан талап итә башлаһа, өйҙә янъял сығыуын көт тә тор. Унһыҙ ҙа хәләл ефете талаш сығарасағына шикләнмәй Хәсән.

...Өлкән улы Афзал, үҙе кеүек үк, хирург, ғаиләле. Беренсе синыфта уҡыған ҡыҙҙары бар. Ә Арыҫланы, егерме һигеҙенсе йәш менән барыуына ҡарамаҫтан, һаман да буйҙаҡ. Шуның өсөн дә төпсөгөнөң әле лә өйләнмәй йөрөүе күңелдәрен ҡыра ата-әсәнең. Тик бына операцияға инер алдынан ғына Арыҫланы шылтыратып, шатлыҡлы хәбәр әйтте. Әсәһенә ҡапылда әллә ни асылып бармай малайҙар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡыуаныслы яңылыҡ хаҡында ҡатынын һөйөнсөләргә теләгәйне хатта. «Ярай, ята бир, ғәҙәтеңә төкөрәйем», – тип уйланы Хәсән, эҫе картуф менән ауыҙын бешерә-бешерә.

Арыҫланының хәбәрен иҫләгәс, кәйефе бер аҙ күтәрелеп китте...

– Атай, һөйөнсө! – ҡыҫҡырҙы, буғай, кесә телефонына шылтыратҡан улы, иҫәнлек-һаулыҡ та һорашып тормаҫтан.

– Йә, нимә булған? – тине операция бүлмәһенә инеп барған атаһы.

– Ә һин үҙең догадайся. – Арыҫлан бер аҙ урыҫсалап ебәрҙе.

– Белмәйем, – тине атаһы, – операцияға ашығам, үҙең әйтә һал.

– Өйләнәм, атай! – Был хәбәргә атаһының ысынлап та һөйөнөрөн белгәндәй әйтте улы.

– Кемгә? – Шундуҡ һораны атаһы, ҡасандыр булған хәлде иҫләгәндәй, һағайып ҡалды. – Әллә тағы...

– Юҡ-юҡ, атай, һин уны бөтөнләйгә белмәйһең. Башҡа районда ул.

– Ә-ә-ә, улай булһа, ярай. – Хәсән иркен тын алып ҡуйҙы. – Ярай, улым, ҡотлайым. Эш бөткәс, үҙем шылтыратырмын...

Операционныйҙан сыҡҡас та, мөдир бүлмәһенән улына үҙе шылтыратып, тағы һөйләшеп алды. «Байрамға килен менән икәүләп тә ҡайтып төшөрҙәр әле», – тип һөйөндө Хәсән эстән генә. Өлкә гәзитенең хәбәрсеһе булып эшләгән Гөлсинә исемле ҡыҙ менән иртәгә үк ЗАГС-ҡа баралар икән. Һай-һай, йәштәр – өтөктәр – етеҙҙәр шул. Хәйер, Хәсән, һин үҙең дә йәш сағында шулай булдың...

«Ҡотлайым, улым, афарин! Ә әсәйеңә хәбәр иттеңме һуң?» – «Юҡ, атай, әсәйемә никах-фәләндән һуң әйтербеҙ. Ни өсөн икәнен үҙең дә һиҙенәһеңдер...»

Инде ир ҡорона еткән кесе улының һүҙҙәре урынлы ине. Ни өсөн тигәндә, әсәһе менән бер генә мәсьәләне лә тыныс хәл итеп булмаçын белә Арыçлан. Шуға ла әсәһен «факт» алдына ҡуйыуҙы хуп күргәндер. Бәй, был юлы етди аҙымы буйынса хатта атаһына ла кәңәш итеп тормаған. Ваҡытынан алда әсәһенә серҙе асып ҡуйыр, тип шикләнгәндер. Әсәһенең атаһын башҡаларҙан урынһыҙға ҡыҙғана торған ғәҙәтен дә беләләр улы. Айырыуса хирургия бүлегенең өлкән операция сестраһынан һис сәбәпһеҙ ҡыҙғаныуы арҡаһында йыш ҡына өйҙә ҡуба торған ығы-зығыны күреп-ишетеп үçте бит, атаһына әйтелгән ғәҙел булмаған һүҙҙәргә ғәрләнеп, әсәһенә ҡаршы айбарланып та маташа торғайны.

Сәғиҙә иһә шик-шөбһәле уйҙарынан бер аҙым да сигенергә уйламаны. Йылдар буйы ирен, уның менән бергә эшләгән һис бер гонаһһыҙ Зәлифәне ниҙә генә ғәйепләмәне! Һаман да Хәсәндең төнгө дежурҙары, киске операциялары, ашығыс консультациялары оло янъял менән оҙатыла...

Зәлифә – төçкә-һынға күркәм, күптән түгел ҡырҡ бишен тултырған ҡатын. Тыныс холоҡло, мөләйем. Әммә ғаилә тормошонан уңа алманы ул. Ире эскесе булды. Өçтәүенә, ҡатынын һәр саҡ йәберләп, көн күрһәтмәй йәшәтте. Ҡыш көндәренең береһендә Зәлифәнең утыҙ биш йәшен туйлағайнылар. Мәжлестән һуң, ҡунаҡтар таралып бөткәс, бола ҡуптарған ире, уны хәлен бөтөргәнсә туҡмап, өйҙән сығып китте. Әммә шул уҡ төндө ғинуар һыуығында туңып үлеп ҡуйҙы, меçкен. Иçле-иçһеҙ өйҙә ятып ҡалған Зәлифә, әлбиттә, уны төн ҡараңғыһында сығып эҙләй алманы. Өйҙәре янында ғына ятып туңғаны ишетелгәс тә, тәү осорҙары күрше-тирә, таныш-тоноштары араһында төрлө хәбәрҙәр йөрөнө. «Шаҡып-шаҡып та хәләл бисәһенән ишеген астыра алмай ғына харап булды баһадирҙай ир-егет»,– тип һөйләнгеләне иренең туғандары. Был турала ҡәйенһеңлеләре йөҙөнә бәреп әйткәне лә булды... Зәлифә ун өс йәшлек ҡыҙы Сәриә менән ҡалды. Әммә эшһөйәр ҡатын һис тә бирешмәне. Юғары категориялы операция сестраһының һәүетемсә хеҙмәт хаҡы ашауға, кейенеүгә генә түгел, ҡыҙын вузда уҡытыуға ла етте. Һылыу, йәш ҡатынға күҙ атыусылар, хатта асыҡтан-асыҡ бергә тормош ҡорорға тәҡдим итеүселәр ҙә булғыланы. Әммә Зәлифә башҡаса кейәүгә сыҡманы. Әллә ире мәрхүмдең ҡылыҡтарын һаман онотмай, шикләнеп, ир-аттан тайпылды, әллә...

Һары алтын төçөндәге йылҡылдап торған өй халаты кейеп, ҡалҡыу янбаштары бер диван булып сериал ҡарап ятҡан Сәғиҙәнең дә башында төрлө уйҙар буталды. Иң ғазаплыһы – күңеленең ҡайһылыр урынына оялаған, һис аңлатып булмай торған көнсөл хистәр... Йәшерәк сағында улай уҡ булмай торғайны ла баһа. Ни булды уға... Әле генә киткән әхирәтен иçләп, аҙ ғына тыныслана бирҙе. Эй, Ҡәмәриә булмаһа, яңғыҙы нишләр ине?!. Башҡалар һымаҡ, «әллә, үҙең ҡара» тип, һинең проблемаларыңдан ҡасырға йәтешләнеп тормай.

Поликлиникала сестра-хужабикә булып эшләгән Ҡәмәриә – «район һаулыҡ һаҡлау системаһының төп белгесе». Ҡасандыр бер ваҡыт Хәсән уны шулай атап, хәләл ефетен көлдөргәйне. Ысынлап та, дауахананың ҡайһы бүлегендә ҡасан ниндәй сара үткәрелгәненә, баш табиптың кемгә шелтә, кемгә премия биргәненә, кемдең кем ҡатынына шаян һүҙ әйткәненә, хатта ҡайһы хирург нисегерәк операция яһағанына тиклем белә ул. Торғаны менән белешмәләр бюроһы! Хәсәне кухняла булашҡан арала, Сәғиҙәнең осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙары, ҡай саҡ бер-береһенә бәрелешеп, уны икеләнеүгә лә һалғыланы. Бәлки, янына сығып, бер ни ҙә булмағандай, һин дә мин һөйләшеп алып китергәләр? Былайтып

ятып кемгә файҙа? Нисәмә йыл бергә йәшәгән хәләлең менән көн дә тиерлек талашыу ҙа үҙәккә үтә... Әммә тағы әле генә сығып киткән әхирәтенең һүҙҙәрен иҫләне.

– Минең Альбертым әйтә: эпиндисит егерме минут ҡына эшләнә, ти. Тәк шту, өсәр-дүртәр сәғәткә һуҙылған әпрәсиә булмай, – тине бит Ҡәмәриә, күмһеү ирендәрен ослайта биреп. – Бар балнисҡа, Хәсәнеңдең эш урынына тура бар. Моғайын, дауна...

– Әллә нисә мәртәбә хирургияға ызванит итеп белештем. Сестра, һаман эше бөтмәгән, ти бит...

– Беләм инде мин уларҙы, – тине Ҡәмәриә, журнал өҫтәлендә өйөлгән көнбағышын шыртылдатып яра-яра. – Бер ауыҙлы, бер һүҙле улар. Әлбиттә, сестраһын пердупирждайт итеп ҡуйған. Мин үҙем ҡасандыр шул хирургияла ятҡас, беләм бит инде. Кәрәкмәгәндә бик тә татыу ғаилә һымаҡ ул отделение...

...Бынан ун бер-ун ике йыл элгәре Хәсән Ҡәмәриәнең үҙенә лә операция яһағайны. Ҡатмарлы гинекология сире менән ауырып киткән ҡатынын коллегаларына ашығыс рәүештә күрһәтеү урынына, дерматолог Альберт, һәр төрлө уколдар ҡаҙап, өс көндәй өйөндә тотоп, хәләл ефете аңын юғалта башлағас ҡына дауахананан «скорый» саҡыртҡайны. Күп ҡан юғалтыуҙан тыш, балаятҡыһы башҡаса төҙәлмәҫлек булып зарарланған. Ҡатын-ҡыҙ заты өсөн үтә лә мөһим ана шул ағзаһын алып ташларға тура килде. Шунһыҙ уның ғүмерен ҡотҡарып алып ҡалыу мөмкин дә түгел ине... Әллә күпме ҡан ҡойҙолар уға. Өҫтәүенә, ҡаны иң һирәк осрай торған. Бәхетенә күрә, Хәсән Хөрмәтовичтың да ҡаны тап шундай кире резуслы дүртенсе группа булып сыҡты. Операция яһап бөтөү менән, шундуҡ күрше операция бүлмәһендә сисенеп ятты ла иң беренсе булып пациентына үҙе ярты литр ҡанын бирҙе. Башҡа донорҙарҙы тапҡансыға ҡәҙәр уның ҡаны бик тә урынлы булды. Бәлки, Ҡәмәриәнең ғүмерен ҡотҡарып алып ҡалыуға шаҡтай булышлыҡ иткәндер... Ана шул осорҙа дуҫлашып киткәйне Сәғиҙә ошо әхирәте менән. Ҡәмәриә, дауахананан сыҡҡас, оҙаҡламай, Хәсәндәрҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Аш-һыу тирәһендә әллә ни йөрөрлөк булып ныҡынып етмәгән Ҡәмәриәгә күбеһенсә Сәғиҙә ярҙамлашты. Ана шул кухня тирәһендә уранғылаған саҡта татлы телле хужабикә, ауыҙын ослайтып, Сәғиҙәнең Хәсәнен маҡтап бөтөрә алманы. Ә Хәсән менән Альберттың һүҙҙәре әллә ни берекмәне. Мәжлес ваҡытында балконға сығып тәмәке тартҡыланылар. Ғәжәп, әммә үҙенең «дауалауы»нан һуң ҡатынын ҡотҡарып алып ҡалған коллегаһын Альберт та ни өсөндөр яратып етмәне кеүек. Хәсән күңел өсөн бер-ике анекдот та һөйләгән булғайны, әммә коллегаһы юморҙы әллә ни аңламаған кеше, имеш:«һы» тип кенә ҡуйҙы. Шуға күрә:

– Ярай, рәхмәт, беҙгә ҡайтырға ла ваҡыт, – тине ахырҙа Хәсән Хөрмәтович. – Иртәгә иртә менән дежурға бараһы...

Шул көндән алып Ҡәмәриә Сәғиҙәнең өйөнә гелән берәй «ҡыҙыҡлы» яңылыҡ алып килә. «Кемгә баш табип йылы һүҙ әйткән, кем эшкә һуңлап килгән, кем иртәрәк ҡайтып киткән кеүек» хәбәрҙәрҙе түкмәй-сәсмәй еткереп тора. Ҡайһы табип ҡайһы сестраға күҙ һалған, кем бахмурҙан... Баштараҡ әллә нисегерәк тойолһа ла, тора-бара былдай хәбәрҙәрҙе ишетеү Сәғиҙә өсөн танһыҡ тойолдо. «Сәғиҙәкәйем» тип ләпелдәгән әхирәтен яҡын туғаны һымаҡ күрҙе. Бер көн шулай йылмаяҡ сырайлы Ҡәмәриә кухняла сираттағы хәбәрен еткерергә ашыҡты.

– Беләһеңме, Сәғиҙәкәйем, хирургияның өлкән операция сестраһы бөгөн эшкә бер күҙен күгәртеп килгән. – Ул һуҡ бармағын үҙенең һул күҙе тирәләй әйләндерҙе. – Ә, беләһеңме, кем уға синәк ҡуйған?

– Ҡайҙан ғына беләйем инде мин, өйҙә ултырған кеше... – Сәғиҙә әхирәтенең бушаған сынаяғына шөптөрләтеп сәй яһаны. – Ирелер, башҡаса кем булһын...

– Эйе, ире. Ә, беләһеңме, ни өсөн?

– ?..

– Ҡыҙғанып туҡмаған ире Зәлифәне. – Өйҙә башҡа кеше булмауға ҡарамаҫтан, ни өсөндөр шыбырҙауға күсте. – Ә, беләһеңме, кемдән ҡыҙғанған?

– Юҡ... – Сәғиҙә, әлбиттә, әхирәтенең ни әйтерен һиҙенде.

Ҡәмәриә тағы ла, нишләптер, тирә-яғына ҡаранып алды. Ирендәрен ослайтып шыбырланы:

– Мин әйткәнде сер итеп тоторһоңмо?

– Бәй, кемгә һөйләр тиһең?

– Их, Сәғиҙәкәйем, бигерәк тә бер ҡатлыһың шул. Иң яҡын әхирәтем булмаһаң, әйтеп тә тормаҫ инем. – Ҡәмәриәнең йөҙөнә йәлләү билдәләре яғылды. – Һинең Хәсәнеңдән ҡыҙғанып туҡмаған уны Юламан...

– Кит, булмаҫты! – Сәғиҙәнең тауышында рәнйеү һиҙелде.

– Ысын, әхирәткәйем, ысын. Былай боларыуы тәүге мәртәбә түгел, тиҙәр.

– Уның боларыуын әйтмәйем мин... Хәсән менән ундай уҡ хәлгә етмәгәндәрҙер ул? – Сәғиҙә иларға етеште.

– Ышан ирҙәргә... – Бер ни булмағандай, артабан һөйләргә тотондо саҡырылмаған ҡунаҡ. – Анау йылы...

– Анау йылы мине ҡыҙыҡһындырмай! – тине Сәғиҙә, сыйылдаған тауышы менән иламһырап, – мин Хәсәнемде уйлайым! – тип өҫтәне.

– Утһыҙ төтөн сыҡмай, Сәғиҙәкәйем, әммә тыныслан, – тине әхирәте. – Мин һәр саҡ һинең яҡлы. Ирҙәр барыһы ла... Уларҙы бына ошолай шыҡырҙатып уста ғына тоторға кәрәк, – тип бер усын йоҙроҡҡа йомарлап күрһәтте, икенсе ҡулының һырты менән Сәғиҙәнең бите буйлап аҡҡан күҙ йәшен һөрткөләне.

Хәләл ефете янына кухняға сығып, бәлки, «солох» төҙөшөргәләр, тип икеләнә биреп ятҡан Сәғиҙә ике усын да шыҡырҙатып йоҙроҡҡа йомарланы. Юҡ! Хәсәне үҙе теҙләнеп килмәйенсә, башҡа унан йылы һүҙ көтмәһен! Бына иртәгә үк, бер ни булмағандай, һырпаланыр әле. Үҙ шунда Сәғиҙә ҡарап ҡарар: ғәфү итергәме, юҡмы...

Оперсестра Зәлифәнең ире туңып үлгәс, күп тә тормай, Ҡәмәриә Сәғиҙәләргә килеп, бер-ике һүҙ менән генә әхирәтен «зарядлап» киткәйне.

– Хәҙер Юламаны үлгәс, иркенләне теге Зәлифә, – тип Сәғиҙәнең унһыҙ ҙа әсетеп торған яраһына тоҙ һалғандай итте. – Ә һин, Сәғиҙәкәйем, бирешмә, главный, ireңде һаҡла. Ир халҡын беләбеҙ бит. Берәй тол йә ирҙән айырылған ҡатын-ҡыҙ күрһә, бал еҫенә эйәләгән һағыҙаҡ һымаҡ, шул тирәгә тартыла улар.

– Хәсән ана шул Зәлифә менән ысынлап та йөрөй микән? – Һорап ҡуйҙы тағы Сәғиҙә, әхирәтенән аҙ ғына йыуатыу өмөт иткәндәй.

– Мин һиңә әллә ҡасандан уҡ әйтә киләм бит. Главный, ирҙәргә – контроль һәм контроль. Шунһыҙ бер ваҡыт ireңдең ҡойроғон да тотоп ала алмаҫһың. Иң яҡын күргән өсөн генә әйтәм үҙеңә...

Элегерәк тә Хәсәнде әлеге Зәлифәнән ҡыҙғанып, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгән Сәғиҙәгә, әлбиттә, етә ҡалды. Зәлифәнең тол ҡалыуы уны оторо ярһытты. Өлкән операция сестраһы көн дә эштә – Хәсән менән бергә. Операция ваҡытында хирургтың һәр хәрәкәтен алдан күрә-белеп, уға мәлендә кәрәкле инструменттарын ҡулына тоттороп ҡына торорға тейешле шәфҡәт туташы менән ҡай саҡ сәғәттәр буйы йәнәш кенә булалар. Ара-тирә ябайыраҡ операциялар

ғына бүлек мөдире ҡатнашлағынан башҡа үтә. Әлбиттә, Зәлифә хирургия бүлегенең берҙән-бер операция туташы түгел, бүтәндәр ҙә бар. Әммә, дауаханаларҙағы электән килгән ғәҙәт буйынса, мөдир ҡатнашҡан операцияларҙа күпселегендә уға тәжрибәле өлкән медсестра ярҙамлаша. Был хаҡта ла Ҡәмәриә ваҡытында һеңдереп ҡуйҙы. «Хәсәнең әпрәсиәгә Зәлифәне генә ярҙамға ала, тигән хәбәр йөрөй. Башҡаларҙы сәпсим признавайт итмәй, ти...»

Кемдер бындай хәбәргә күҙ йомоп, сираттағы ғәйбәт тип кенә ҡарар ине, тик Сәғиҙә түгел! Һәр саҡ: «Кем бөгөн һинең менән операцияла торҙо?» – тип һорашып, ҡыҙҙырып ала тәүҙә. «Зәлифә Моратовна менән»,– тип, үҙе лә аңғармай, утҡа май һибә Хәсән. «Зәлифәм менән, тиң, дөрөҫөн әйт!»

Сираттағы боланы башлап та ебәрә Сәғиҙә...

***

Уйҙар, уйҙар... Сәғиҙәһе хәҙер ни уйлай икән?.. Арыҫлан күп нәмәне әсәһенән йәшерергә тырыша... Их, улының өйләнеү фактын әсәһенән йәшереүе Зәлифәгә бәйле шул. Дөрөҫөрәге, уның Сәриә исемле ҡыҙына.

Бынан ике йыл элек Арыҫлан, сираттағы ялына ҡайтҡанда, уны-быны уйламай, өйгә килеп инеү менән хәбәр һалғайны.

– Атай, әсәй, һөйөнсө! – тине ул, өйгә инеп хәл-әхүәл һорашҡас та.

– Йә, ни булған? – Урынһыҙға етди төҫ алған әсәһе насар хәбәр ишетергә йыйынғандай һораны.

– Өйләнәм, – тине Арыҫлан.

– Кемгә өйләнәһең? – Сәғиҙәнең тауышында йәнә әсәләргә хас булмаған тимер һалҡынлығы яңғыраны.

– Сәриәгә! – Арыҫлан кәйефе һүрелә биреп яуапланы. – Зәлифә апайҙың медта уҡып йөрөгән ҡыҙына, – тип өҫтәп ҡуйҙы аҙаҡ.

Улының ана шул Зәлифәнең ҡыҙы менән бер-ике йыл осрашып йөрөүен белә ине Сәғиҙә. Әле Арыҫландың хәбәрен ишетеү менән, йөҙө ҡыҙара бөртеп, ирендәре ҡымталып, бер яҡ сикәһе тартыша биреп ҡуйҙы. Дауыл сығырын һиҙенгән Хәсән, бына-быча башланырға торған ғауғаны ишетмәҫ өсөн, ниндәйҙер һылтау тапҡан булып, ванна бүлмәһенә инеп сумды. Әммә, ғәжәпкә, әсәһе улына бер ни ҙә өндәшмәне, шымтайған көйө көнө буйы йөрөнө. Сәриә менән никахына әсәһенең риза булмауын, әлбиттә, шундуҡ аңланы Арыҫлан, ни өсөн икәнен дә...

Бер нисә көндән ғорур ҡыҙ Арыҫландың ЗАГС-ҡа барыу тәҡдимен ҡырҡа кире ҡаҡты һәм башҡаса үҙен бимазалап йөрөмәүен үтенде.

– Әсәйең телефондан шылтыратҡан, – тип илауланы ул. – «Ирем менән гулять итеүең етмәгән, минең төпсөк улымдың башын ашамаҡсы булаһығыҙмы?!.» тип һис ғәйепһеҙ әсәмде яман һүҙҙәр менән битәрләгән!..

Яратҡан әсәһе өсөн ныҡ рәнйегән ҡыҙҙы бер нисек тә йыуата алмаҫ һымаҡ ине егет. Сәскә бәйләме тотоп, һөйгәне йәшәгән дөйөм ятаҡҡа көн дә килде... Сәриәһе менән мөнәсәбәте боҙолоуҙа әсәһенең туранан-тура ғәйепле икәненә эстән генә көйҙө, әммә был хаҡта бер ни ҙә өндәшмәне. Тик, нисек кенә үкенесле булмаһын, донъяла иң яҡын булған ғәзиз кешеһен бынан ары хәл ителәсәк мәсьәләләргә бер ҡасан да ҡатнаштырмаҫҡа ҡарар итте.

Ана шулай төпсөк улы тураһында байтаҡ ҡына уйланып ултырҙы Хәсән, аш бүлмәһендә яңғыҙы сәй һемерә-һемерә. Балконға сығып тартып инде лә бер аҙ һыуына биргән сәйнүк аҫтына йәнә ут төрттө.

Йәштәр, әлбиттә, мәсьәләне был юлы үҙҙәренсә хәл итмәксе. Афариндар! Тик бына... Их, Сәғиҙә, Сәғиҙә... Бер нәмә тураһында ла уның менән ипле һөйләшеп булмай шул. Шуға күрә лә уға, ихтимал, иң һуңынан ғына асырға мәжбүр буласаҡтар был серҙе.

Яҙмышы менән ризалашып, өйҙәге иҫәп-хисапһыҙ янъялдарға ла әллә ҡасан уҡ өйрәнергә тейеш булғандыр Хәсән Хөрмәтович. Әҙәм балаһы һәр нәмәгә лә күнегеүсән... Әммә, күп тапҡырҙар кирбес килеп бәрелеүенә өйрәнә алмаған баш һымаҡ, ыҙғыш-талашҡа барыбер ҙә күнегә алманы. Татыу ата-әсә ҡарамағында үҫкән Хәсән, ғаиләлә һис бер талашмайынса ғына ла йәшәп булалыр, тигән фекерҙә булды. Хатта хәҙер ҙә ундай уйҙан төңөлмәгән. Әммә Сәғиҙәһе менән йәшәгән дәүерҙә быны ла оптимистик уйҙары ярайһы һүрелә төштө: «Татыу йәшәргә булалыр, тик Сәғиҙә менән түгел!»

Сәғиҙәнең ябай, эскерһеҙ, яҡшы күңелле йәш сағын Хәсән бөгөнгөләй хәтерләй. Бәлки, йәшлек менән уға шулай тойолғандыр... Салт аяҙ күк йөҙөн хәтерләткән зәңгәр күҙле, алтындай һары сәсле, мәрйә ҡыҙҙарына оҡшап торған аҡ йөҙлө был һылыу ҡыҙҙы Салауат һәйкәле янында осратты ул. Унынсы синыфты әле генә тамамлап, университетҡа имтихан бирергә килгәйне ҡыҙ. Институттың дүртенсе курсынан һуң практикала йөрөгән Хәсән уны бер күреүҙә үк оҡшатты. Юҡ, юҡ, үлеп ғашиҡ булды ла ҡуйҙы! Һәйкәл янына фотоға төшөргә әхирәте менән килгән ҡыҙҙы тәүҙә мәрйәлер тип уйланы. Яҡыныраҡ килгәс, үҙ-ара тап-таҙа башҡорт телендә һөйләшкәндәрен ишетте. Йәш аралары байтаҡ булыуына ҡарамаҫтан, инде бер аҙ «утты-һыуҙы кискән» студент егет өсөн танышып алыу әллә ни ауыр ҙа булманы.

Сәғиҙә күрше районда булып сыҡты. Йөрәгендә ғишыҡ уты дөрләгән егет көн дә тиерлек абитуриенттар йәшәгән ятаҡҡа килә башланы. Үкенескә ҡаршы, ҡыҙ, рус теленән диктантын «икеле»гә яҙып, университетҡа инә алманы. Инде ауылға нисек ҡайтып күренергә, тип оялып йөрөгән Сәғиҙәгә Хәсән көтмәгәндә өйләнешергә тәҡдим яһаны. Тәүҙә бер аҙ албырғап ҡалған Сәғиҙә бер-ике көн уйланы ла риза булды ла ҡуйҙы. Сөнки зәңгәр күҙле сибәркәй Хәсәнде лә оҡшатты. Уның ауыл малайҙарына әллә ни хас булмаған ҡыйыулығы, оҙон буйы, киң яурындары, айырыуса инде бишенсе курсҡа күскән студент булыуы үҙенә тартты. Шул көндө үк никах йортона барып ғариза бирҙеләр... Ата-әсәләренең ризалығын һорап та торманылар. Уларға тик «Беҙҙе законлы никах менән ҡотлағыҙ...» тигән телеграмма ғына һуҡтылар. Ҡышҡы каникулда икеһенең дә ата-әсәләрен ҡайтып күреп, танышып алдылар. Ана шулай туйһыҙ-ниһеҙ генә өйләнешеп, бергә йәшәп алды ла киттеләр.

Студент йылдары, әлбиттә, шаҡтай ауырлыҡтар менән үтте. Нужа һурпаһын аҙ һемермәне улар. Институттың дөйөм ятағында урын етешмәү сәбәпле, бер әбейҙә фатирҙа йәшәргә тура килде. Студент стипендияһы фатир хаҡын түләргә генә етә ине. Шуға күрә Хәсән, уҡыуҙан тыш, больницаға медбрат булып төнгө дежурға урынлашты, көндөҙҙәрен урам һеперҙе. Йәш кәләш тә тик ятманы. Декрет отпускыһына тиклем шырпы заводына оператор булып ҡыялды. Аһ, аһ, ана шундай етешһеҙ осорҙа уларҙың ғаилә тормошо ал да гөл тиерлек ине. Ни өсөн шулай?.. Татыу ғүмер итеү өсөн кешеләр әллә тик мохтажлыҡта, ярлылыҡта йәшәргә тейешме? Сәйер был донъя, сәйер... Тормоштарының тәүге осоронда үҙ-ара булған ваҡ-төйәк аңлашылмаусанлыҡтарҙы, хатта ҡатынының ҡайсаҡ йәш ҡыҙҙарҙан ҡыҙғаныу осраҡтарын да көлөп кенә, үтә лә еңел үткәреп ебәрә ине Хәсән. Күбеһенсә уйынға һабыштыра йә иһә уның алдында теҙләнеп ғәфү үтенгән кеше була. Йәш кәләш бер-ике сәғәттән һин дә мин яҙылып китә, болот аҫтынан сыҡҡан ҡояштай йылмайып ебәрә. Үҙе лә эштән арып ҡайтҡан Сәғиҙәнең һәр бер ваҡ-төйәкте тикшереп, ирен игәп ултырырға ваҡыты ла, әллә ни теләге лә юҡ ине, ахырыһы. Йәш сағындағы фотоальбомын ҡараған һайын, тик бер күңелһеҙ хәл генә әле булһа иҫенә төшә Хәсәндең. Сөнки альбомындағы класташ һәм курсташ ҡыҙҙарҙың барыһының да фотоһүрәттәрен юҡ иткәйне

Сәғиҙә. Ниндәй сәбәп икәне, әлбиттә, билдәле. Тәүҙәрәк Хәсән, шаяртып ҡына йәшергәндер, тип йөрөгәйне, әммә күпмелер ваҡыттан фотоларҙың ҡайҙалығын һорағас, һин уларҙы башҡаса бер ҡасан да күрмәйәсәкһең, тине Сәғиҙәһе... Студент ғаиләһендә тәүге бала – Афзалдары тыуғас, хәләл ефете бөтөнләй бала ҡарауға мөкиббән китте.

Хайуандарҙы, ҡоштарҙы бигерәк ярата ине Сәғиҙә. Йә урамдан аҙашҡан бесәй балаһын алып ҡайта, йә өйһөҙ йөрөгән эттәргә ашарға сығарып бирә. Бер мәл телевизорҙан «Хайуандар донъяһында» тигән тапшырыу ҡарағандары иҫендә ҡалған. Күптән түгел генә осорға өйрәнгән үҙенең балаларын, ҡанға туҙҙырғансы суҡый-суҡый, ҡанаттары менән һуҡҡылап, ҡаянан этәреп төшөргән инә бөркөттө күрһәттеләр. Балаларына ярҙамға ташланған ата бөркөттө лә, ояһына яҡынлатмай, ҡурҡытып ебәрҙе инәлек. Ҡая аҫтында ун – ун биш метр самаһы ғына осоп, әллә ни ҡалҡына алмай аҙапланған балалары тирәһендә бер ни тиклем осоп әйләнгеләгән ата бөркөт – үҙ ояһына башҡаса яҡынларға ҡурҡтымы – юғарыға күтәрелеп, саңҡылдай-саңҡылдай һауала бер-ике өйөрөлдө лә ҡайҙалыр китеп юҡ булды. Тағы кемдәрҙәндер ояһын ҡурсаларға йыйынған инә бөркөт, дошманына ташланырға әҙерләнгәндәй, ҡанаттарын бер аҙ йәйә биреп, тирә-яҡҡа уҫал ҡараш ташлап, бер талай талпынып ултыра бирҙе. «...Ояһында ят йәнлек еҫен һиҙгән инә бөркөт, балаларын ҡыҙғанып, хатта уларҙы үҙе һәләк итеүе лә мөмкин, – дикторҙың тыныс, ҡалын бас менән талғын ғына һөйләгәне ни өсөндөр шомло тойолдо. – Иғтибар итегеҙ, хөрмәтле телевизор ҡараусылар, нисек итеп билдәһеҙ дошмандан ул үҙ өйөн һаҡлай: хатта ата бөркөттө лә яҡын ебәрмәй...»

– Шуға ғына күҙең йәшкәҙәп ултырмаһаң! – тип көлгәйне Хәсән тапшырыуҙы илай-илай ҡарап ултырған Сәғиҙәнән. – Хайуандарҙың, ҡоштарҙың үҙ психологияһы. Беҙ уларҙы бер ҡасан да аңлай алмаясаҡбыҙ. Сөнки беҙ – кешеләр...

– Балалары йәл бит, – тигәйне Сәғиҙә, ҡулъяулығы менән йәшен һөртә-һөртә.

– Ә атаһы йәл түгелме? – Һаман шаяртты Хәсән.

– Атаһы бирешмәҫ тә ул, – тине Сәғиҙә, – себештәре йәл...

Ваҡыт үтте. Улдары бер-бер артлы үҫте. Инде әллә ҡасан уҡ район үҙәк дауаханаһы табибы булып эшләй башлаған Хәсәнде, өс йыл ординатор вазифаһын башҡарғандан һуң, бүлек мөдире итеп тәғәйенләнеләр. Байтаҡ стажы булғанғалыр, хеҙмәт хаҡы арыу ғына. Ғаиләһен, балаларын кейендереп, туйҙырыуҙан артып ҡалғанын йыйып, өр-яңы өс бүлмәле фатир алыуға иреште. Йәшерәк сағында мәктәптә йыйыштырыусы булып эшләгән Сәғиҙәһе, инде «начальник бисәһе» булараҡ, иҙән йыуыу эшенән әллә ҡасан уҡ баш тартты. Көн дә тиерлек затлынан-затлы кейемдәр алмаштыра башланы. Атлауҙары, хатта үҙенән «түбәндәр»гә ҡарашы ла үҙгәрҙе. Элегерәк уның менән мәктәптә бергә эшләгән таныш ҡатындар осраһа, йыш ҡына уларҙы күрмәй, танау буйына ғына ҡарап, туп-тура үтеп китә. Әйтерһең дә, мәктәп директоры... Йәшерәк ваҡытында үҙе лә шулар һымаҡ уҡ «ҡара эш» башҡарғанын тиҙ онотто. Йүнлерәк урында эшләү өсөн, әлбиттә, урта махсус белем тураһында булһа ла диплом кәрәк шул. Шуға ла ул артабан өйҙә ултырыуҙы хуп күрҙе. «Начальник бисәһе була тороп, иҙән йыуып йә гардеробта кейем элеп йөрөмәм!» – Бына уның сафсатаһы.

Ауылда йәшәгән һәр кешегә таныш: яҡшы ашап торған йылҡы малы, һимерә бара, майына сыҙамай, уйнаҡлай башлай. Хатта эйәһенә тибергә ынтыла, аңғармайыраҡ ҡалһа, муйынын тешләп ала. Кеше лә бит – тәбиғәт балаһы. Сәғиҙә лә «һимергән» һайын уҫаллаша барҙы. Көнө-төнө тигәндәй ғаилә өсөн тир түккән, йәне-тәне менән эшкә сумған ирен үҙенең өйҙәге һанһыҙ затлы әйберҙәренең береһе һымаҡ ҡына итеп күрә башланы... Уның өсөн Хәсән тик аҡса

сығанағы, иң күбендә «эш аты» булып ҡалды. Ә һәр кешелә була торған күңел, хис, уй-тойғо кеүек төшөнсәләр иренә лә хас икәнен әллә онотто, әллә белергә теләмәне.

Бер нисә йыл элек Сәғиҙә иренең хеҙмәт хаҡы менән ҡыҙыҡһына башланы. Ҡыҙыҡһына тиһәң, йомшаҡ әйтелгән дә булыр... Ай һайын дауахананың бухгалтерияһына барып, Хәсәненең күпме аҡса алғанын тикшерергә ғәҙәтләнде. Администрация тирәһенә инер хәле ҡалманы хәҙер Хәсәндең: «Хәсән Хөрмәтович, ҡатынығыҙ бөгөн дә һеҙҙең күпме зарплата алғанығыҙ тураһында белешеп китте». Шул саҡ кешеләрҙән оялышынан мунса төшкәндәге һымаҡ булып тирләй абруйлы хирург. Ҡатмарлы операцияла ла улай уҡ тиргә батмай... Унан кабинетына инеп ултырып, бар асыуын тәмәкеһенә төшөрә. Ә өйгә ҡайтҡас, Сәғиҙәһе «етешмәгән» бер нисә йөҙләктө таптыра башлай, «һөйәркәһе Зәлифә»һен һәр төрлө бүләккә күмеүҙә ғәйепләргә тотона. Үткән йыл, Һигеҙенсе март көнө, хирургия бүлеге ир-егеттәре ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотларға меңәр һум йыйғайнылар (хирургия бүлегендә егерменән ашыу ҡатын-ҡыҙ, ир-ат бишәү генә). Сәғиҙә ана шуның өсөн өйҙә оло ғауға сығарҙы. «Миңә, үҙеңдең хәләл ефетеңә, ҡоро сәскәнән башҡа бер нәмә лә алырға эшкинмәгәнһең, ә хирургияңа меңәр тәңкәләп аҡса ташлауҙы бер тин шайы күрмәйһең. Алып килеп йөрөйһө булма миңә башҡаса был үләнеңде!» – тип вазалағы гонаһһыҙ гөлләмәне йомарлап, ҡый биҙрәһенә ырғытты.

Хәсән унһыҙ ҙа һәр байрамда ҡатынын бүләкһеҙ ҡалдырманы. Ҡиммәтлеләренән, затлыларынан ғына алырға тырышты, тик һуңынан һәр саҡ үкенергә мәжбүр ине. Ни өсөн тигәндә, бүләкте ҡулына алыу менән шундуҡ етди төҫ алған йәнкиҫәге, рәхмәт әйтеү урынына, әйберҙең этикетка ҡағыҙын эҙләй башлай. «Күпмегә алдың?» – иң беренсе һорау. Унан бүләктең матурлығын, сифатын бер талай тәнҡиткә тота. Хәләл ефетенең шул ҡылығын күреп, эстән генә көйөп торған Хәсән уға башҡаса бер ҡасан да бүләк алмаҫҡа үҙ-үҙенә һүҙ бирә. Тик киләһе байрамда әлеге хәл ҡабатлана... Шуның өсөн дә һуңғы осор байрамға сәскә генә бүләк иткәйне шул.

Ҡунаҡ-мунаҡҡа бергә йөрөгән тиң-тоштары, туғандары әкренләп уларҙан ситләшә барҙы. Мәжлестәрҙә матур ғына ултырған мәлдә, йә береһенең, йә икенсеһенең ҡатынынан һис юҡҡа ирен көнләшеп, талаш башлаған Сәғиҙәнең ҡылыҡтарын, әлбиттә, яҡын кешеләре бер ҙә оҡшатманы. Хатта үҙенең бер туған һеңлеһе Сәбилә менән дә һыйыша алманы. Еҙнә тип Хәсәнгә бер-ике шаян һүҙ ҡушҡаны өсөн һис ғәйепһеҙгә апаһынан тиргәлгән Сәбилә уларға башҡаса килмәҫ булды. Тик Ҡәмәриәһе – йәндәй күргән әхирәте генә уны ташламаны. Ауыр минуттарҙа уға үҙенең «үтә лә ҡиммәтле» кәңәштәре менән һәр саҡ «ярҙамға» килде.

Бөтә ғүмерен хирургияға бағышлаған Хәсән, үтә ныҡ көсөргәнеүҙән ҡан баҫымы юғары күтәрелеп, инде тиҫтәләгән түгел, ә йөҙәрләгән тапҡырҙыр, ҡай саҡ ҡыл өҫтөндә генә торған кеше ғүмере хаҡында уйлана-көйә өйөнә ҡайта. Өй шарттарында, ғаилә усағы йылыһында аҙ ғына булһа ла тынысланыу, йәнен ял иттереү өмөтө менән. Ә өйөнә ингәс иһә – талаш сценарийҙары... Быларҙың барыһын да бер йөрәккә һыйҙырып барыуҙары ауыр. Бының берәй сиге булырға тейештер бит?!

«Донъяһына төкөрөп, күтәреп һуғып» өйҙән сығып китергә күпме мәртәбә уҡталғаны булды уның. Тәүҙәрәк малайҙарҙың бәләкәйлеге тотҡарланы. Унан уларҙың әле уҡыу йортон тамамламағанлығын уйланы. Артабан инде, улдарының

өйләнер ваҡыттары еткәс, уларҙы башлы-күҙле итеү өсөн дә ғаиләнең тулы булыуы мөһим тойолдо. Ярай әле, өлкән улы Афзалын өйләндерҙеләр. Улары яҡшы ғына йәшәп ята. Әммә шул Афзалының туйы мәлендә Сәғиҙәһе ҡуптарған «вайна»ны һаман онотмай Хәсән. Әлфиә килененең ата-әсәһе, йәғни ҡоҙалары алдында ошоғаса уңайһыҙлана хәләл ефетенең ҡылығы өсөн.

... Туй мәжлесендә йәнәш ултырған Сәғиҙә тәүҙәрәк осло башлы туфли кейгән аяғы менән өҫтәл аҫтынан уның аяҡтарын бер талай «ҡапшап» ултырҙы: йәнәһе, берәй ҡоҙаса-фәләндең ботона баҫҡылап ултырмаймы Хәсәне... Өҫтәүенә, яҡында ултырған ҡатын-ҡыҙ затына һүҙ ҡушыр әмәле юҡ, аҫтан ғына семетеп ала. Унаһына ла түҙергә мөмкин ине... Бер саҡ туй тамадаһы «дамский вальс» иғлан иткәс, сөм- ҡара күҙле бер сибәр ҡоҙаса шаян йылмайып, уйнаҡлап ҡына Хәсән янына килде. «Разрешите!» тип тансыға саҡырмаһынмы, ауыҙына май туңғыры. Хәләл ефетенең семетә-семетә тороп ҡалғанына, йәнәһе, берәү һыр бирмәй, әлеге матур ҡоҙаса менән бейергә төштө лә китте – суҡынһын донъяһы! Бәлки, башҡа берәй ҡатын-ҡыҙ, бүтәндәрҙән бер аҙ уңайһыҙланыуынан булһа ла, түҙеңкерәп торор ине. Исмаһам, өйгә ҡайтҡансыға ҡәҙәр. Тик Сәғиҙәме! Бер-ике әйләнеп тә өлгөрмәнеләр, асыуынан йөҙө ҡыҙара-бүртенгән бисәһе, ултырғыстарҙы йыға-йыға, өҫтәл артынан етеҙ генә сыҡты ла, шәп-шәп атлап, туп-тура быларҙың янына килде. «Хәсән!» – тигән ярһыулы тауышҡа башҡалар ҙа боролоп ҡараны. Төп ҡоҙағыйҙың тос ҡына усы төп ҡоҙаның яңағына «шап!» итеп ҡалыуына барса ғәм шаһит булды. Килененең, ҡоҙаларының алдында ифрат ныҡ оятҡа ҡалған Хәсән, ер тишегенә инерҙәй булып, үҙен нисек тоторға ла белмәне. Асыуынан йөҙө ҡара көйгән килеш туйҙан китергә уҡталып ҡуйғайны, әммә йәштәрҙең, ҡунаҡтарҙың күңелен уйланы. Байтаҡ йылдар хәмерҙе бар тип тә белмәгән Хәсән асыуынан ярты стакандай араҡыны төп күтәрә эсеп тә ебәрҙе. Был ғауғаны барыһы ла бик тиҙ онотто, мәжлес артабан бер ни булмағандай дауам итте...

Шул болалы туй үтеп киткәнгә лә һигеҙ йыл... Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары Хәсәндәрҙе бер нисә мәртәбә ҡунаҡҡа саҡырғылап ҡайтарҙы, әммә үҙҙәре уларҙың өйөнә ошо көнгәсә аяҡ баҫҡаны юҡ! Ҡоҙаларының, һәр төрлө сәбәп тапҡан булып, уларға килмәүе, бәлки, яҡшығалыр... Ихтимал, яҡшығалыр...

Төпсөк улын – Арыҫланын өйләндергәндән һуң бер көн дә тормай өйҙән сығып китергә ҡарар иткәйне Хәсән сираттағы бер «дауыл» ваҡытында.

Китер... Арыҫланын өйләндергәс... Төпсөк улына туй яһап, уны имен-һау үткәреп ебәреү өсөн тағы ла ғаиләнең тулы булыуы зарур...

Башының уң яртыһы һулҡылдап ауыртырға тотондо. Тағы ла ҡан баҫымы күтәрелә... Шкафтан дарыу алып ҡапты. Сырмалсыҡ уйҙарынан һаман арына алмай яфаланды. Тулы ғаилә... Ғаиләнең ниндәй тулылығы булыу мөмкин был янъялсы Сәғиҙә менән!.. Буласаҡ ҡайныларына Арыҫландың «атайым менән әсәйем бергә йәшәмәй» тип кенә әйтеүе хәйерлерәк булмаҫмы? Ихтимал, берҙән-бер аҡыллы ҡарар – шулдыр... Сәғиҙәнең оҙаҡ йылдар буйы һыналған ҡылығы Арыҫланының туйы ваҡытында тағы берәй бәләгә тарытмаҫ тип уйлама... Юҡ! Һәм тағы бер мәртәбә – юҡ! Бынан ары бер көн дә бергә йәшәмәйәсәк Сәғиҙә менән. Хәсәндең башҡаса түҙер әмәле ҡалманы. «Бөгөн үк!.. Бөгөн үк!..» – тип эстән генә ҡабатланы тиҙҙән хәләл ефете сығарасаҡ янъялды күҙаллаған ир. «Аҙмыштан уҙмыштар табырмын!..» – тип тә эстән генә көйләне. Тик йырлап түгел, ә үтә лә ярһып...

Сәғиҙә, ысынлап та, оҙаҡ көттөрмәне. Ҡул һырттары менән ике янбашына

таянып, был сығып таймаһын тигәндәй, кухня ишеген яҫы осаһы менән бөтөнләйгә тиерлек ҡаплаған «йәнкиҫәк» ғәҙәттәге позаһын алды. Ҡорбанына ташланырға әҙер йыртҡыстай, зәңгәр күҙҙәрен бәзерәйтеп, хәләл ефетенә төбәлде. Асыулы ҡымталған ирененең ситтәре тартыша-тартыша биреп ҡуя. Әле булһа йәш сағындағы һылыулығын юғалтмаған ҡатындың ошолай тороуы уның бар матурлығын юҡҡа сығара. Хәсән был юлы тыныс ҡына сәй һөрпөлдәтеүен дауам итте.

– Аппендицит операцияһын нисә сәғәт яһайҙар? – Тәүҙә инеш һорауын сәпәне Сәғиҙә.

– Стадияһына ҡарап. – Мөмкин тиклем тыныс яуап бирҙе Хәсән. – Нормаһы юҡ. Төрлөсә була.

– Әкиәтеңде башҡа ерҙә һөйлә, йәме, миңә һөйләмә. Аппендицитты иң күбендә лә ярты сәғәт эсендә алып ташлайҙар. Әллә һиңә, медик булмаһаң та, шыр наҙан тип уйлайһыңмы! Әпәт уйнаш Зәлифәң менән бергә булдыңмы?.. Иш-шу телефонын һүндереп ҡуйған...

Инде сәй эсеүен туҡтатҡан Хәсән әкрен генә урынынан торҙо. Кранды асып, ашанған һауыт-һабаһын йыуырға тотондо. Был юлы иренең ҡаршы һүҙ ҙә әйтмәүе ҡатынды үтә ярһытты.

– Нимә, уйнаш ҡатаһы, әйтер һүҙең юҡмы? То-то... Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ шул...

– Мине нахаҡҡа рәнйетеүең етмәгән, һис ғәйепһеҙ Зәлифәгә яла яғып, гонаһтан ҡурҡмайһың, Сәғиҙә. Кемделер зина ҡылыуҙа урынһыҙ ғәйепләһәң, үҙеңә ана шул зина ҙурлығындағы гонаһ яҙыла икәнен мин һиңә әйттем шикелле ҡасандыр...

– Һай-һай, ҡалай мулла берәү! Ә нишләп һин һаман Зәлифәңде яҡлашаһың, бер ҙә һүҙ тейҙергең килмәй?..

Ғәҙәттә сыға торған ғауғаның башы ғына әле был. Әммә хәләл ефете нисек кенә сәрелдәмәһен, ниндәй генә ағыулы һүҙҙәр ташламаһын, Хәсән башҡаса уға яуап бирмәҫкә булды. Шулай өнһөҙ генә йөрөп, оло сумкаға кәрәкле әйберҙәрен йыйырға тотондо. Иң тәүҙә паспорт, диплом, табип сертификаты кеүек мөһим документтарын барланы, шунан костюм, эске кейемдәрен сумкаһына тыҡты. Ҡырынғыс-фәләнен дә онотманы.

Уның ғүмерҙә лә ҡыланмаған был эшен күреп торған Сәғиҙә телен йотто. Дежурға тиһәң, улай уҡ күп әйбер йыймай торғайны, етмәһә бөгөн уның сираты ла түгел, буғай... Бая ғына ҡыҙара-бүртеп торған йөҙө кинәт ағарып ҡалғандай тойолдо.

– Ҡайҙа йыйындың? – тине ул, күпкә һүрелә төшөп.

– Китәм. – Бер һүҙ менән генә яуап бирҙе Хәсән.

– Ҡайҙа китәһең?..– тине Сәғиҙәһе, был юлы иларға етешеп.

– Просто китәм. Ошо көн килерен әллә нисә йыл элек үк һиҙенеп, һығымта яһарға тейеш инең. Был хаҡта һине күпме тапҡырҙар киҫәттем. Әммә, бер ҡайҙа ла китә алмаҫ, тип уйланың. Үҙеңә ғүмерлеккә бирелгән шәхси милегең һымаҡ күрҙең мине. Тик һинең өсөн мин һис тә ҡәҙерле әйбер булманым. Үҙең теләгәнеңсә типкеләп, миңә аяҡ һөртөп йәшәргә тырыштың. Ир булараҡ, минең дә үҙемде хөрмәт итеүгә хоҡуҡлы шәхес икәнемде әллә ҡасан уйыңдан сығарып ташланың, үкенескә ҡаршы.

– Ә балалар?...

– Бирешмәҫтәр. Уға ҡалһа, мин балаларымдан китмәйем... Бәлки, шуларҙың бәхете өсөн китәмдер. – Хәсән төпсөк улының өйләнеүе хаҡындағы ваҡытлыса

серҙе ысҡындырып ебәрә яҙҙы... – Аҙыҡлыҡ аҡсаны почта аша һалып торормон. Бик етмәҫтәй булһа, эшкә төш. Аяҡ-ҡулың имен... Хуш.

Ул ишекте асып сыҡҡанды Сәғиҙә күрмәне, сөнки ике ҡулы менән битен ҡаплап, һыңҡый-һыңҡый илай ине.

***

Эш бүлмәһендә «йәшәй» башлаған Хәсән Хөрмәтович тураһында үҙ-ара һәр төрлө һүҙ йөрөткән персонал бер аҙҙан тыныслана төштө. Уның һәр саҡ эш урынында булыуы дежурҙағы шәфҡәт туташтары өсөн әллә ни ҡулай түгел шул. Кистәрен гәп һата-һата иркенләп сәй эсеп йә иһә берәй телесериал ҡарап булмай... Ә хирургтарға иһә, киреһенсә, бик тә йәтеш: ҡатмарлы осраҡтарҙа консультация бирерлек начальнигың янда... Әйткәндәй, теге саҡта Сәғиҙә менән һуңғы мәртәбә «талаштырған» пациенттың хәле һәүетемсә яҡшыра. Хатта эсенән сығып торған көпшәләрен бөгөп бәйләп ҡуйып, палата эсендә унда-бында йөрөргә лә рөхсәт итте Хөрмәтович. Ғәжәпкә, Сәғиҙә телефон аша башҡаса шылтыратмаҫ булды. Ҡатынының ни уйлап йәшәүе менән Хәсән әллә ни ҡыҙыҡһынманы, сөнки, оҙаҡ йылдар уның менән бергә ғүмер иткән кеше булараҡ, был турала ул яҡынса белә ине. Шулай ҙа, айырым йәшәй башлауҙарына бер аҙна тигәндә, Сәғиҙәһенән тәүге сигнал булды. Тик телефон аша түгел.

– Инергә мөмкинме, Хәсән Хөрмәтович? – тине бүлмәнең ишеген ҡыйыуһыҙ ғына шаҡый-шаҡый асҡан Зәлифә иртә менән. «Үтегеҙ», – тине аҡ халатын да кейеп өлгөрмәгән доктор. Өҫтәлендә торған сәғәтенә ҡарап алды. Эш башларға әле ярты сәғәт самаһы ваҡыт бар.

– Тыңлайым һеҙҙе, Зәлифә Моратовна. Берәй ашығыс һорауығыҙ бармы? – тине ул һәм ҡырынғысының шнурын розетканан һурып алды, өҫтәлендә торған ҡупшы һауытлы одеколонын битенә һиптерҙе. Зәлифәгә бигерәк тә оҡшай шул еҫ! Әммә бөгөн хушбуй ҡайғыһы юҡ унда.

– Ғәфү итегеҙ, Хәсән Хөрмәтович, – тип башланы ул һүҙен. – Кисә кис миңә ҡатынығыҙ килде.

– Сәғиҙәме?.. – Ни әйткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды Хәсән Хөрмәтович. Крахмаллап үтекләнгән халатын кейеп алды ла өҫтәл артындағы ултырғысына барып ултырҙы.

– Минең белеүемсә, Хәсән Хөрмәтович, һеҙҙең бер генә ҡатынығыҙ бар. – Зәлифә аҡ ҡалпағы аҫтынан сыҡҡан бер шәлкем сәсен йүнәтеп, яңынан йәшерҙе. Яҙ мәлендә ташҡан күлдәй, уның асыҡ йәшкелт күҙҙәре дымланды. Алдағы һөйләшеүҙең уғата ла күңелһеҙ буласағын һиҙенгән Хәсән өҫтәле артынан сыҡты ла бүлмәһенең ярым асыҡ ҡалған ишеген барып япты.

– Тыңлайым, Зәлифә Моратовна, – тине ул, бер аҙ тыныслана төшөп. Ҡабаттан урынына ултырҙы. – Һөйләгеҙ.

Зәлифә күҙ йәштәрен ҡулъяулығы менән ҡоротоп алды ла әкрен генә һүҙ башланы.

– Өйөгөҙҙән сығып китеүегеҙҙә мине ғәйепләй ҡатынығыҙ. Йәнәһе, арағыҙға инеп, һеҙҙең татыу ғаиләгеҙҙе боҙғанмын. Мине судҡа бирәү менән янай. Минең... ғәйебем юҡлығын ишетергә лә теләмәй.

– Аңлайым һеҙҙе, Зәлифә Моратовна, бик яҡшы аңлайым. Әммә ни эшләргә белмәйем... – тине Хәсән Хөрмәтович бер аҙҙан, ауыр һулап. – Рөхсәт итегеҙ. – Ул өҫтәлдәге «Винстон» ҡабына үрелде. – Әгәр минең урынымда булһағыҙ, ни эшләр инегеҙ?

– Ҡайтығыҙ өйөгөҙгә, Хәсән Хөрмәтович, – тине Зәлифә бер аҙҙан. – Сөнки мин хәҙер унан ҡурҡа башланым. Барыбер ул миңә тыныс эшләргә бирмәҫ. Бында килеп етер әле... Юғиһә...

– Нимә «юғиһә»?..

– Юғиһә, Хәсән Хөрмәтович, ғариза яҙырға мәжбүр буласаҡмын...

Хәлдең быңдай боролош алырын көтмәгән мөдир бер аҙ ҡаушаны, әммә үҙен тиҙ ҡулға алды.

– Тә-ә-әк, Зәлифә Моратовна. – Мөдир ни әйтерен уйлап алды. – Һеҙҙе бер ҡасан да эштән бушатмаҫтар, – тине, бер аҙ ҡатыраҡ итеп. – Ә бына минең... китеүем ихтимал. Дөрөҫөрәге, башҡа район дауаханаһына күсереүҙәрен һорап министрға ғариза ебәрҙем инде...

– Һаман да минең арҡала булып сығамы, Хәсән Хөрмәтович? – Зәлифә иларға етеште.

– Юҡ, Зәлифә Моратовна, – тип тынысландырырға ашыҡты уны доктор, – бында һеҙҙең тырнаҡ осондай ҙа ғәйебегеҙ юҡ. Бар ғәйеп үҙемдә. Беренсенән, минең өйгә ҡабат ҡайтыуым тураһында уйларға ла кәрәкмәй. Икенсенән... – Хәсән Хөрмәтович тауышын бер аҙ күтәрә төштө. – Зәлифә Моратовна, барығыҙ, башҡаса бер ни тураһында ла уйланмағыҙ, эшегеҙ менән булығыҙ! Все!

Бер ҡасан да шәфҡәт туташтарына екеренергә ғәҙәтләнмәгән Хәсән Хөрмәтович үҙен Зәлифә Моратовнаға тупаҫ һүҙҙәр әйткән, хатта уны бүлмәһенән ҡыуып сығарған һымаҡ тойҙо үҙен. Әсе төтөнөн һура-һура тағы уйланды... Зәлифә... Ҡалай матур исем. Исеме генә түгел, нурлы йәшел күҙҙәре ниндәйҙер ҡиммәтле йөҙөк ҡашын хәтерләткән, гелән алсаҡ йөҙлө Зәлифәгә нисек бығаса иғтибарһыҙ булған. Һәр саҡ тигәндәй маска кейеп йөрөгән был һылыу ҡатында ул фәҡәт тырыш эшсәнде генә күреп йөрөгән дә баһа. Эйе, эйе, ифрат та сәйер! Әйтерһең дә, Сәғиҙәһе уға «янында ғына йөрөгән бер сибәркәйгә иғтибар ит» тип ишараланы... Әстәғфируллаһ, әстәғфируллаһ! Ғаиләһе емерелеүенә ҡайғырып, бөтөрөнөп ултыраһы урынға... башын ҡаңғыртасы... Юҡ! Әлбиттә, Зәлифә – һылыу, аҡыллы ҡатын. Әммә, Сәғиҙәһенең һүҙҙәрен өҫкә сығарып, Зәлифәгә күҙ һалаһы юҡ Хәсәндең! Юғиһә шикләнеүе дөрөҫкә сыҡҡан Сәғиҙә тантана итәсәк... «Не дождетесь!» – тип урыҫса уйлап ҡуйҙы Хәсән. Күңелен сорнай башлаған шундай иләҫ-миләҫ халәтенән ҡотолорға теләгәндәй, ҡулы менән битен һыпырып алды. Урынынан торҙо. Баянан бирле коллегалары үҙен «пятиминутка»ға көтөп ултырған ординаторскийға йүнәлде.

***

Ай ярым самаһы ваҡыт үткәс, Хәсән Хөрмәтович улының туйына саҡырылды. Инде өс аҙна тирәһе ул күрше район больницаһының хирургия бүлеге мөдире вазифаһын тарта. Килгәс тә уға дауахананың дөйөм ятағынан бүлмә бирҙеләр. Коллегаларының күпселеге уны электән белә һәм хөрмәт итә ине. Өҫтәүенә, дауахананың баш табибы Рәжәп Ибраһимович – Хәсәндең курсташы. Институттың тәүге курстарында уҡыған саҡта хатта дөйөм ятаҡта бер бүлмәлә йәшәгәйнеләр. Сәғиҙә менән Никах йортона барғанда, Хәсән яғынан шаһит булған егет тә ошо Рәжәп ине. Уның ҡатыны менән айырылышып килгәнен белгәс, Рәжәп Ибраһимовичтың йөҙөндә ғәжәпләнеү генә түгел, бер аҙ ризаһыҙлыҡ билдәләре сағылып ҡалғаны һиҙелде.

– Нисек... «айырылыштыҡ»? – тигән һүҙен ҡабатлап, уға һораулы ҡарашын төбәне баш табип, тәүге көн кабинетында ҡабул иткәс. – Сәғиҙә менән һеҙҙең

арала шундай мөхәббәт ине бит! Ай-һай, үҙең берәй эш боҙғанһыңдыр, Хәсән Хөрмәтович, – түрә, ни өсөндөр, рәсми тонға күсте.

...Яҙҙың йылы, муйылдар күпереп сәскә атҡан иң йәмле мәле. Салт аяҙ күк йөҙөндә болот әҫәре юҡ. Баш ҡалаға машинаһы менән елдергән Хәсән Хөрмәтовичҡа был яҙ айырыуса матур күренде. Автомобиленең тәҙрәһен яртылаш асып, рәхәтләнеп һулай-һулай барҙы. Туй өсөн һатып алынған өр-яңы ҡара костюм-тройка, аҡ күлдәк кейгән, яҫы галстук таҡҡан йөҙө бер аҙ йәшәрә төшкән һымаҡ...

Афзал менән Әлфиә килене ҡаршыланы. Ейәнсәре Ғәлиәне етәкләп алғандар. Улар менән арҡа ҡағып күрешеүгә, төрлө шарҙар менән биҙәлгән аҡ машинаға ултырған йәштәр килеп етте. Күҙ яуын алырҙай туй күлдәге, аҡ бирсәткә кейгән, ярым үтә күренмәле селтәр менән бите ябылған йәш кәләшен етәкләгән, кейәүҙәрсә аҡтан ғына кейенгән шат йөҙлө Арыҫлан, машинанан сығыу менән, атаһының ҡаршыһына уҡ килеп баҫты. Һәммәһе лә аҡ төҫтә! Бәхет тигән төшөнсәне лә ни өсөндөр аҡ төҫлө итеп күҙ алдына килтерә Хәсән...

– Таныш бул, атай, киленең – Сәриә...

– Кем тинең, улым? – Ишетһә лә, ҡабатлап һораны атаһы. – Сәриә?.. Теге?..

– Эйе, эйе, Зәлифә апайҙың берҙән-бер ҡыҙы, – тип йылмайҙы Арыҫлан. – Ассәле, Сәриә, шул бөркәнсегеңде. – Йәш килендең битен ҡаплап торған йоҡа селтәрен күтәрҙе. Шатлыҡ тулған йәшкелт күҙҙәр бер аҙ аҫҡа ҡарап, керпектәр аҫтына йәшеренде...

– ?..

– Беҙҙе ғәфү ит, атай. Был «военная тайна»ны беҙ үҙебеҙ генә белдек, Афзал ағайымды һанамағанда. – Арыҫлан ағаһы яғына ҡарап күҙ ҡыҫып алды ла, оялышынан бер аҙ ҡыҙара биреп, һөйләргә тотондо. – Ике йыл элек, әсәй арҡаһында Сәриә менән асыуланышҡандан һуң, күп тә тормай ҡабат ярашҡаныбыҙҙы ошо көнгәсә сер итеп һаҡланыҡ. Хәҙер килеп, өйләнешергә ҡарар иттек. Әммә был юлы Сәриәнең әсәһе лә белмәне. Кисә шылтыраттыҡ – ул да аптыраны. Оҙаҡламай килеп етер ҡәйнәм. Ә «өлкә гәзите хәбәрсеһе Гөлсинә» өсөн асыуланма берүк, атай. Был маскировканы үҙебеҙ уйлап сығарҙыҡ. Тап шул саҡ, ай ярым элек, ЗАГС-ҡа теркәлдек...

Туй мәжлесен улдары ҡуртымға алған кафела ойоштороғандар ине. Зал урталай бер рәткә теҙелеп, һәр төрлө тәм-томға һығылып торған өҫтәлдәр башында ҡояштай балҡып, пар аҡҡоштарҙы хәтерләтеп ап-аҡ кейемдәге кейәү менән кәләш ултыра. Йәштәрҙең бәхетле йөҙҙәренән һирпелгән нурҙар бар тирә-яҡҡа йәм өҫтәй. Барса ғаләм бөгөн уларҙан көнләшкәндәй... Яурынбаштары аша киң ҡыҙыл ебәк таҫма һалынған шаһит егет менән шаһиҙә ҡыҙ, почетлы ҡарауылға баҫҡан һаҡсыларҙай, йәштәрҙең ике яғынанан урын алған. Ә шаһиттар янында ултырған төп ҡоҙа Хәсән Хөрмәтович һәм төп ҡоҙағый Зәлифә Моратовнаның йөҙҙәрендә ниндәйҙер илаһи ҡәнәғәтлек сағыла... Оҙон өҫтәл артына ике яҡлап теҙелгән ҡупшы кейемле ҡунаҡтар ошо шат йөҙҙәргә ҡарап баҡҡан.

– Хөрмәтле ҡунаҡтар, – тине туйҙы алып барыусы егет, – ә хәҙер йәштәрҙе ҡотлау һүҙе иң төп ҡоҙаға – егеттең атаһына бирелә...

Нәҡ ошо мәлдә Үҙәк телевидениеның беренсе каналынан «Хайуандар донъяһында» телетапшырыуының әллә нисәнсе йылғы кадрҙарын күрһәтәләр ине. Ҡоштар тураһында. ...Ниндәйҙер йәнлектән ҡыҙғанып, әсәһе ояһынан ҡаҡҡылап төшөргән бөркөт балаларын йәлләп тағы ла күҙ йәштәренә мансылды

Сәғиҙә: «...И-и-и, меҫкенкәйҙәрҙе... Бахырҡайҙар...» Уға ҡушылып уфтанды әхирәте. Яңғыҙы ҡалған инә бөркөттө телевизор экранында, ни өсөндөр, оҙаҡ ҡына күрһәтеп торҙолар. Бөтөнләйгә бушап ҡалған ояһын тағы ла кемдәрҙәндер ҡурсалап, билдәһеҙ дошманына ташланырға әҙерләнеп, ҡанаттарын бер аҙ йәйә биреп, тирә-яҡҡа уҫал ҡараш ташлап, бер талай талпынып ултыра бирҙе инәлек...

***

Был хикәйә шулай осланыр ҙа ине. Кемдәрҙер, айырыуса көнсөл ҡатынынан михнәт күреп йәшәгән ирҙәр, ихтимал, был ваҡиғаның тап ошолай тамамланыуын теләр ине. Йәнәһе, шул кәрәк уның ише ҡатындарға... Кемдер, киреһенсә, Сәғиҙәне йәлләйҙер... Ә тормош ысынбарлығы иһә бөтөнләйгә икенсегә бора.

Утыҙ йылдан ашыу бергә үткәргән ғүмер... Уйынмы ни?.. Ҡатынынан айырылыу шатлығынан бар донъяһын онотоп, ҡойороҡто һыртҡа һалып, һин дә мин йәшәп алды ла китте Хәсән, тип уйлаһаҡ – хаталанасаҡбыҙ. Киреһенсә, ифрат та күп уйланды ул яңғыҙы иркен өйҙә ултырып ҡалған хәләл ефете хаҡында. Килененән һуңғы йылдарҙа «ҡәйнәм» тигән бер генә йылы һүҙ ҙә ишетмәгән, уның уҫал ҡарашынан тартынып, улының өйөнә ҡапылда аяҡ баҫырға ла ҡыймаған әсәһе лә: «Ҡуй, Хәсән улым, олоғайып килгән көнөгөҙҙә әҙәм көлдөрөп, айырылышып йөрөмәгеҙ улайтып. Самай ҡартатай, ҡәртәсәй булып, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ менән һөйөнөп ултырыр мәлегеҙҙә...» – тип улын килене менән ҡабаттан ҡушылырға өгөтләне. Икенсенән, балалары өсөн улар икеһе лә ғәзиз икәнен бик яҡшы аңлай Хәсән. Афзал үткән килгәнендә әсәһендә ике кис йоҡлап, ә уның янында бер сәғәт кенә булып киткәйне: «Әсәй менән бергә йәшәһәгеҙ, яҡшыраҡ булыр ине»... Уйлап ҡараһаң, ысынлап та, йәшәү урыны ла алышынғас, бәлки, арыу ғына тороп та китерҙәр. Бәлки, Сәғиҙәһе лә үҙенә күрә тейешенсә һығымта яһағандыр. Бөтөнләйгә уйлай белмәгән кеше түгел дә.

– Илле йәштән уҙып барған сағында яңғыҙың бер бүлмәлә холостяковать итеү ялҡытманымы, Хәсән Хөрмәтович?– тине бер көн баш табип, иртәнге оперативканан һуң кабинетта икәүҙән-икәү ҡалғас. – Ай-һай, ғәйеп үҙеңдәлер, Хәсән. Ни өсөн айырылышҡанығыҙҙың сәкен-сөкөнөн һорашып тормайым, әммә, электән яҡын дуҫың булараҡ, үтенәм: нисек булһа ла Сәғиҙәңдән ғәфү үтенеп, бында күсереп алып кил. Һиңә – бер аҙна срок!

– Бынығын һин главный булараҡ әйттеңме, Рәжәп Ибраһимович? – тип һораны Хәсән дә, рәсми мөрәжәғәт иткәндәй.

– Нисек теләйһең, шулай аңла, – тине Рәжәп. – Минең штатта һиңә әҙерләп ҡуйған башҡа бисә юҡ! – Тороп, Хәсәндең яурынынан ҡаҡты. Халатының кеҫәһенән «Парламент» ҡабын сығарып асты ла бер сигарет алып һондо.

– Тартыуыңды ташламаныңмы әле?

– Ташлarһың ташламай ҙа, һеҙҙең менән...

«Әҙерләп ҡуйған бисә» тигәндәй, ысынлап та, Хәсән һуңғы осоро ҡатын-ҡыҙ тураһында йыш ҡына ғәмләнә. Бәй, етмеш-һикһән йәшлек ҡарт түгел дә ул... Буйҙаҡ икәнен белеп, дауаханалағы ҡайһы бер «холостячка»лар уның алдында тегеләй-былай быйтаңлауҙарын да күреп йөрөй. Айырыуса кадрҙар бүлегендә эшләгән Гөлнәзирә исемле йәтеш кенә кәүҙәле сибәркәй, баш табип ниндәйҙер ғариза яҙҙырып алған мәлдә, үк үҙенең сөм-ҡара күҙҙәренән сәселгән йәшенле ҡарашы менән өтөп алғайны.

Хәҙер административ бүлеккә берәй йомош менән инеүе була, ана шул осҡор

сихри ҡараш уны тағы ҡаршы ала, һәр саҡ уға нәзәкәтле йылмайыу бүләк итә. Иремәҫ ерҙән ирерһең... Етмәһә, кемдәрҙәндер ишетеүенсә, Гөлнәзирә һылыу бер нисә йыл тирәһе тол икән. Тәбиғәте шаян, шуҡ кеше булараҡ, бер-ике уйын һүҙ әйтмәйенсә лә түҙмәне Хәсән. Шуны ғына көткәндәй, аяҙ күктәге тулған айҙай балҡыны ла китте Гөлнәзирә. Тик... Тик хәҙер инде бынан ары һалҡын һыуҙы ла өрөп эсергә үҙенә һүҙ биргән ир шунан да ары үтмәне. Нисек кенә аяғы тартһа ла, үҙен еңеп, был бинаға һирәгерәк инергә тырышты. Ҡатындың үҙе менән бергә йәшәгән әзмәүерҙәй улы бар икәнде ишеткәс, был тирәгә юлын бөтөнләйгә һыуытырға ҡарар итте. Алла һаҡлаһын, элеккеһенән дә ҡатмарлыраҡ мәсьәлә сыҡмағайы...

Балаларының әсәһе һуңғы осорҙа йыш ҡына төшөнә ингеләй. Моғайын, Сәғиҙәһе лә уйланалыр... Өр-яңынан ҡушылышып, йәш саҡтарындағы һымаҡ татыу тормош башлай алырҙар кеүек тойола уға. Ысынлап та, ҡатынының көнләшеү сәбәпсеһе һаналған Зәлифә лә, «информбюро» Ҡәмәриә лә алыҫта бит хәҙер...

...Ял көндәренең береһендә, алдан хәбәр итеп тормаҫтан, Хәсән өс ай элек Сәғиҙәһен ташлап сығып киткән өйө янына машинаһын туҡтатты. Фатирын үҙенең асҡысы менән асып инһә лә, ни өсөндөр, артынан ябылған ишекте һаҡ ҡына шаҡыны.

– Мөмкинме? – тине Хәсән, ярайһы ғына күңелле итеп.

Ҡаршыһына «семейный» халатын кейеп сыҡҡан Сәғиҙә... ҡапыл ҡосағына ташланды.

Үткәндәрҙең тик яҡшы мәлдәрен генә һағынып иҫкә алдылар. Балалары хаҡында һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Әле генә өйләнешкән йәш ғашыҡтарҙай бәхетле минуттар кисереп, шәмбе һәм йәкшәмбе көнөнөң тәүге яртыһы нисек үтеп киткәнен һиҙмәнеләр ҙә. Ҡабаттан бергә йәшәргә һүҙ ҡуйышып, Хәсәндең хәҙерге йәшәгән ҡасабаһына юл алдылар.

Юл эреле-ваҡлы биш-алты ауыл аша үтә. Район үҙәгенә етерҙән алда осраған һуңғы ауылдарҙың береһенең туҡталышында ҡулына ауыр ғына сумка тотоп торған ҡатын, юлға сыға биреп, ҡулын күтәрҙе. Бәй, «отдел кадр» Гөлнәзирә лә баһа...

– Һаумыһығыҙ, Хәсән Хөрмәтович. – Һаулыҡ һорашты юлсы ҡатын, матур күҙҙәрен көлдөрөп, йәнәшәһендә ултырған Сәғиҙәгә ҡарап та өлгөрҙө. – Ҡайҙан ҡайтып киләһегеҙ?

– Әйҙә, ултырығыҙ, Гөлнәзирә Мәжитовна. Бына, ғаиләмде күсереп алып килә ятам әле. Таныш булығыҙ: ҡатыным Сәғиҙә.

– Ә-ә-ә, улай икән... – Гөлнәзирә башҡаса өндәшмәҫ булды. Ул үҙ өйө тапҡырында төшөп ҡалды.

Баянан бирле һөмһөрө ҡойолоп барған Сәғиҙә, ауыҙ мөйөштәрен тартыштырып алғас, күҙҙәрен ҡыҫа биреп, Хәсәнгә төбәлде:

– Кем ул? Ниңә ултыртып алдың шуны?

– Дауахананың отдел кадры, – тине Хәсән, юлдан күҙен алмай ғына. Үҙе эстән генә ҡабат ҡауышҡан хәләлбикәһенә ҡушамат тағырға маташты:«Ҡыҙғансыҡбикә... Көнсөлбикә... Ҡыҙғансыҡ».

– Ире бармы?

– Әллә? Кем белһен?.. – Алдашҡан булды рулдәге ир һәм ҡатыны менән яңы урындағы киләсәк тормошон күҙалланы...



**Риф**
**ӘХМӘҘИЕВ**

## Урал алды ҡайындары

*Урал алды ҡайындары*
*Үҙенә бер тамаша!*
*Тәлгәш-тәлгәш сыҡтарына*
*Ҡарап күҙҙәр ҡамаша.*

*Бөтә нурын йыйған улар*
*Селләлә йәй айының —*
*Һәр сығынан балдар тама*
*Урталыҡ* ҡайынының.*

*Гүйә, өйөрөлөп бейей*
*Туйсина һымаҡ — ҡара!*
*Йә, ҡулға-ҡул тотоношоп,*
*Тауҙарға китеп бара...*

*Шиҙәленең үҙәнендә*
*Нисә төп ҡайын үҫкән?*
*Уға илаһилыҡ биреп,*
*Әллә махсус ел иҫкән?*

*Тыуған ауылымдағы матур бер төбәк.

*Риф Әхмәҙиев (1954) Ҡыйғы районының Әбдрәзаҡ ауылынан. БДУ-ны тамамлай. Әлеге көндә шунда уҡыта — филология фәндәре докторы, профессор. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Алда — тауҙар,*
*Артта — тигеҙлек,*
*Ҡояштың байымдары.*
*Шул саҡта ла йәмле бит һеҙ,*
*Ауылым ҡайындары —*
*Тыуған яҡ ҡайындары —*
*Уралым ҡайындары!*

## Зыяраткүл* ямғырҙары

*Зыяраткүлдән болот «сыға» —*
*Ямғыры булыр инде.*
*Беҙҙе ситләп үткәне юҡ,*
*Әле лә килер инде.*

*Килһә, йыуаш ҡунаҡ түгел*
*Ул минең ауылымда:*
*Алып килә ғәрәсәтен,*
*Елен дә, дауылын да.*

*Әле лә барлыҡ болотто*
*Үҙенә йыйып алған —*
*Меңенсе ҡат күреп торам,*
*Күңелгә шул шом һалған.*

*Мәңгелек булып тойола*
*Зыяраткүл ямғырҙары.*
*Тиҙерәк болото таралһын,*
*Балҡыһын йәйғорҙары!*

*Болоттар ҙа, ахыры, арый,*
*Тауҙарға барып ҡуна.*
*Күктең йөҙө ярылып китеп,*
*Яуған ямғыр ҙа тына.*

*...Алда тора икән әле*
*Тағы ла бер тамаша:*
*Сыҡҡан ямғыр етеп килә*
*Һатҡы йылғаһы буйлап,*
*Аҫылғужа, Әй аша.*

---

* *Көньяҡ Уралдағы милли парк-заповедник.*

## *Көҙгө мотивтар*

*Ҡара асфальт. Һары япраҡ.*
*Көҙ менән ҡыш араһы,*
*Әллә тәбиғәт сараһы,*
*Әллә күңел яраһы.*

*Ҡара асфальт, һары япраҡ,*
*Урталыҡта ниҙәр бар?*
*Унда меңләп спектрҙан*
*Торған хистәр, төҫтәр бар.*

*Ҡара ла бар донъяла,*
*Һары ла бар донъяла,*
*Ҡара ҡайғы, һары һағыш*
*Төрлө көйгә уйнала,*
*Бер йөрәккә йыйнала.*

*Асфальт — ҡара, япраҡ — һары,*
*Аңлау кәрәк ни бары.*
*Яттар торһа ла ялтырап,*
*Үҙ ҡояшың яҡтыраҡ.*

*Ҡара асфальт, һары япраҡ.*
*Күңелгә кәрәк сыраҡ:*
*Ерҙе япраҡ ҡаплап ятҡас,*
*Күңелемә йылыраҡ.*

* * *

*Килдем иртүк сабынлыҡҡа*
*Ысыҡ һыуы кипкәнсе,*
*Үләндәрҙең һуты, һөтө*
*Тамырына киткәнсе.*

*Күпереп ятҡан үләндә*
*Ысыҡ тамсыһы уйнай.*
*Күбәләк ҡунды ысыҡҡа,*
*Әллә үбергә уйлай.*

*Тик ул ҡосҡан ысыҡ ҡына*
*Ысын ысыҡ булманы.*
*Шуны белеп, күбәләгем*
*Бүтән килеп торманы...*

*Ысыҡ булып күренгәне*
*Ҡояш ярсығы ине,*
*Шуның салғымдың осонда*
*Сағылған сағы ине...*

*Быйыл үлән уңған, тимен,*
*Торам шуға ҡыуанып.*
*Болоном да кәйефләнде,*
*Салғы сыңлауын танып.*

*Сутылдап ҡуя һандуғас,*
*Йылы ел үсә уңдан.*
*Ҡоштар, үләндәр, бүтәндәр —*
*Беҙ бер болонға һыйған.*
*Тереклектең хужалары —*
*Беҙ — барыбыҙ бер туған.*

* * *

*Минең дә бит*
*Йәмле яҙ еткәндә*
*«Үҙемдеке!» тигән айым бар.*
*Май айында*
*Бөтә донъя буйлап*
*Япраҡ яра дөрләп ҡайындар...*

*Тертләп китә бөрө шартлауынан*
*Йоҡомһорап торған тәбиғәт.*
*Был хәл үҙе —*
*Тормош яңырыуын*
*Дәлилләүсе иҫке тәълимәт.*

* * *

*Йөрәктәрҙе өтөүҙәре,*
*Ҡиткәндәрҙе көтөүҙәре*
*Аңһат ҡына буламы?*
*Йылдың көҙгә күскәнендә*
*Бар тәбиғәт илаhы.*

*Йоламы был, ихласлыҡмы —*
*Ҡитте күңеле тулып,*
*Илаhы тәбиғәт, илаhы*
*Август ямғыры булып.*

*Япраҡтарҙан, күҙ йәшеләй,*
*Йомарт тамсылар тамды.*
*Өй алдындағы баланым*
*Һағыш булды ла ҡалды.*

*Үрмәкестәр ҡорған ауға*
*Күктең йөҙө сорналған.*
*Ҡояшҡа ғашиҡ мәлдәрем*
*Ҡалған бит, бер аҙ ҡалған...*

*Үрмәкес ауын торналар*
*Йырып үтерҙәр микән?*
*Тыуған ерҙәрҙең ҡәҙерен*
*Бер саҡ белерҙәр микән?..*

* * *

*Төндө көнгә алыштырып,*
*Офоҡта таң беленә.*
*Көтөүгә сығыр һәүкәштең*
*Һөт төшә елененә.*

*Таңғы нурҙарға эйәреп,*
*Сәм килер вайымлыға.*
*Абаға сәскәһе күренер,*
*Сыҡһын тик яйы ғына,*
*Әле май айы ғына.*

*Ишле булып ҡайтып төшкән*
*Ҡоштар үҙ төйәгенә.*
*Айҙың үкһеҙ етемлеге*
*«Төшмәһен» Ергә генә.*

*Кемдер, бәлки, яңғыҙлыҡҡа*
*Мәжбүр булыр, күнегер.*
*Кемдер берәү сараһыҙҙан*
*Мәжнүн булып күренер.*

*Мөхәббәттең ҡануны был —*
*«Мәжбүр» һүҙе юҡ унда:*
*Яратыу бар, яратмау бар,*
*Башҡасараҡ була икән,*
*Бары — юрау, легенда.*

***

*Рәхмәтлемен — көндәремдең күңелле уҙғанына,*
*Рәхмәтлемен — кейемемдең кейелеп туҙғанына,*
*Рәхмәтлемен — һинең мине бәхетһеҙ иткәнеңә.*
*(Яҙмыштарҙы теҙеп булмай бары бер епкә генә.)*
*Шунан бирле күңелемдең хис-моңға тулғанына,*
*Берсә тыныс, берсә ғәрсел, үпкәсел булғанына.*
*Башҡа төрлө йәшәүҙәре үкенес, ыҙа ғына*
*Әйләнгәнсе сал ғәләмдең бер бөртөк туҙанына.*

* * *

*Һап-һарынан минең донъям:*
*Тирә-яғым —*
*Умырзая сәскәһе.*
*Ә эргәмдә —*
*Тәпәй баҫҡан*
*Бер көтөү ҡаҙ бәпкәһе.*

*Ҡаҙ бәпкәләрен һаҡланым*
*Шиҙәле — һыу буйында.*
*Минең өсөн ҙур эш булды,*
*Эш аралаш уйын да...*

*Минең власть менән һис тә*
*Ата ҡаҙ килешмәне —*
*Һиҙмәй ҡалһам,*
*Һушһыҙ итеп*
*Аяҡ-ҡулды тешләне...*

*Быға ғына бирешмәнем.*
*Ни эшләйһең — түҙәһең.*
*Донъя — матур,*
*Мин дә батыр,—*
*Эштән нисек биҙәһең?*

*Тик ҡотолоп булмай ине*
*Хәлһеҙлек сараһынан —*
*Эҙләп йөрөп бәпкәләрҙе*
*Кесерткән араһынан.*

*Хәҙер инде ата ҡаҙға*
*Ҡәмегән үпкәләрем.*
*Минең һымаҡ, теүәл итеп,*
*Һаҡлаһын бәпкәләрен...*



Нәжибә
ӘМИНЕВА

## Онотторалар

*Эш, бала...*
*Йүгерәм,*
*Ҡайнап тора көн.*
*Һуң был йәшендә*
*Тыныс йәшәй кем?..*
*Балалар тип, йүгереп*
*Эшемдән ҡайтам.*
*Иртүк торам да*
*Һуң ғына ятам.*
*Эй, был балалар!..*
*Бигерәк ғәзиз, йәл.*
*Түҙәйем дә, үтер*
*Мәж килгән был мәл.*
*Балалар үҫте.*
*Ейәндәрем бар.*
*Абау, бигерәк тә*
*Яҡын ейәндәр.*
*Шулар тип йүгерәм,*
*Онотола йәшем.*
*Инде шулар менән*

---

**Нәжибә Әминева (1945) Кушнаренко районының Әхмәт ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Байтаҡ шиғри китаптар авторы. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Үҙ ауылында йәшәй.*

*Мәж килеп йәшәйем.*
*Ейәндәрем дә*
*Бер үсер әле.*
*Түҙәйем дә, был мәл*
*Бер үтер әле.*
*Ейәндәремде*
*Үстерәйем тырышып.*
*Унан миңә лә*
*Килер тыныслыҡ.*
*...Ә ейәндәрҙең*
*Балаларына?*
*Вайымһыҙ ҡалайым*
*Ник уларына?!*
*Мәж килмәй булмаҫ,*
*Беләм инде, беләм,*
*Ейәндәремдең*
*Ейәндәре менән...*
*Ниндәй ғүмергә,*
*Ҡара, өмөт бар!..*
*Эй, был балалар,*
*Эй, был ейәндәр!*
*Тормош тынлығын*
*Юйып торалар.*
*Фанилығыңды*
*Онотторалар...*

## *Мөмкин түгел*

*Йәйҙәр етһә, ситса күлдәк*
*Кейергә керешә инек...*
*Аҡ сәскәле ситса күлдәк*
*Йәйен, эй, килешә ине!*

*Инде йәйен йәп-йәш ҡыҙҙар*
*Ни кейеп китеп бара...*
*Һәм был ярым шәрәлеккә*
*Күҙ күнеп килә, ҡара...*

*Йырҙары ла башҡа инде —*
*Йыр йырға оҡшамай шул.*
*Күнәһең моңһоҙ осорға —*
*Осор осорға оҡшамай шул...*

*Ҡунмәйенсә ни сараң бар,*
*Ҡунмәйенсә ярамай!*
*Әммә йән тертләй, яңғыраһа*
*«Һибелә сәсәк» йә «Рамай»...*

*Уяна йән, таный күңел:*
*Был — беҙҙең йыр, минең йыр.*
*Моңло йырлы, тыйнаҡ дәртле,*
*Был — беҙҙең, минең осор!*

*Бөтә ул йыр... Заман йыры,*
*Заман сыңы күмәлер.*
*Ысын моңға йәштәр шул, түң*
*Күңел күҙем күрәлер.*

*Тартылһа ла йән элекке*
*Көй-моңға әле һаман —*
*Күнегә баралыр ул да:*
*Үҙенсә итә заман.*

*Ят кейемгә, моңһоҙ йырға*
*Күнегә бара күңел...*
*Башҡа дәүергә ингәстен,*
*Башҡаса мөмкин түгел...*

## *Килде аҡыл...*

*Ҡояһың, ямғыр, августа,*
*Белеп яумайһың шул һин дә...*
*Өҙөлөп көткәйнек бит һине,*
*Ҡайҙа инең май, июндә?*
*Әрәм итмәҫкә тырышып*
*Танһыҡ ямғыр тамсыларын,*
*Ямғырға бар һауыттарҙы,*
*Биҙрәләремде сығарҙым.*
*Туйҙы ер...*
*Тулды һауыттар,*
*Ҡайҙа йыйырға белмәйем.*
*Эй, артыла ямғыр һыуы,*
*Ҡайҙа ҡуйырға белмәйем.*
*...Һуңлап яуған шул ямғырға*
*Оҡшатам аҡылымды ла.*
*Йәшлегемдә алыҫ булды,*

*Инде килгән, инде бында.*
*Гел янымда, гел яҡында,*
*Яңылыштарҙан тора тыйып.*
*Бүлдем ейән-балаларға,*
*Инде улар бөттө туйып.*
*Тырышам мин тормошта гел*
*Инде уйлап эш итергә,*
*Үҙемдән бигерәк балалар,*
*Ейәндәрҙе кеше итергә.*
*Ишетһәм дә мин уларҙан*
*Гел бер яуап: «Уф, етер ҙә!»*
*Аҡыллы, сабыр булығыҙ,*
*Тип һөйләнәм уның һайын.*
*Һөйләнмәҫкә,*
*Яңылышалар*
*Минут һайын, аҙым һайын.*
*Һәм, етмәһә, улар минең*
*Яңылыштарҙы ҡабатлайҙар.*
*Аҡыллы кәңәште минең*
*Юҡҡа, юҡҡа яратмайҙар...*
*Юҡ инде, юҡ аҡылдары,*
*Аҡыллыһы бында бер мин.*
*...Килде аҡыл, сабырлыҡ та...*
*Ҡайҙа ҡуйырға белмәйем...*

## Юҡ шул

*Эш мәлендәге кейемдәр иҫән.*
*Кейенеп ҡайҙа*
*Барайым тиһәм,*
*Һаман шуларҙы*
*Кейәм дә китәм.*
*Былары булғас,*
*Ник миңә бүтән?*
*Ғүмеркәй инде*
*Бара бит уҙып.*
*Өлгөрөрмө һуң*
*Былары туҙып?..*
*Улар туҙмағас,*
*Яңы ниңә һуң?*
*Балалар уны,*
*Йә, кейәме һуң?!*
*Кейем дә бына*

Өҫтөмдә туҙа...
Юҡ, туҙмай кейем,
Ә ғүмер уҙа.
Әллә һуң бер аҙ
Байыныҡмы беҙ —
Ҡала ғүмерҙән
Күп кейемебеҙ.
Йй-ыңғайлыҡтар,
Бәлки, коттедж...
Эй, кеше! Оло
Байлыҡ шул, имеш.
Ысын байлыҡ ул
Бары бер генә:
Ул — ғүмер генә,
Ул — ғүмер генә.
Ниндәйе булһын
Йй-ыңғайлыҡтың,
Ғүмерҙән ҙуры
Юҡ шул байлыҡтың.
Йәғни иҫ-аҡыл
Китер байлыҡ юҡ.
Ғүмерҙе уҙмаҫ
Итер байлыҡ юҡ...

## Йөрәк

Тормош, тормош...
Ҡайғылар ҙа,
Шатлыҡтар ҙа күп һиндә.
Йөрәгеңә ҡағылмаған
Тып-тыныс көн юҡ һиндә.

Ҡайғы, шатлыҡ, һөйөү, нәфрәт,
Һағыныуҙар һағышы...
Мең хистән меңгә төрләнә
Йөрәгеңдең  ҡағышы.

Бөтәһен дә һиҙә йөрәк,
Бөтәһен дә ул тоя.
Яҙылып китә ул шуға
Йә йомарланып ҡуя.

*Тормош, тормош...*
*Сәстәреңде*
*Салартып ул аъыла.*
*Йөрәгеңдең саларыуы*
*Сәстәреңдә саъыла...*

## Йәшәү матур

*Тыуъас уҡ үтә башлаъан*
*Был ъүмер үтеп бара.*
*Һуңъы нөктә менән инде*
*Яҡынлашалыр ара...*
*Күңелдә күңелһеҙ һорау:*
*«Ни эшкә һуң ярайым?»`*
*Бер туҡтауһыҙ сәй эсәм һәм*
*Сериалдар ҡарайым.*
*Һәм көн буйы көтөп өйгә*
*Берәйһенең керәһен,*
*Сылтырамаҫмы? — Тыңлайым*
*Мин гел ҡапҡа келәһен...*
*Бына шундай минең хәлдәр,*
*Шундайын минең эштәр.*
*Ә һеҙҙең хәлдәр һуң нисек,*
*Нисегерәк, йәштәштәр?*
*Беләм, күбегеҙ: «Йәшәү матур*
*Һәр йәштә», — тиерһегеҙ.*
*Ҡайһы берегеҙ: «Һаман әле*
*Мин эштә», — тиерһегеҙ.*
*Әйтерһегеҙ: «Кешегә был*
*Төшөнкө рух килешмәй».*
*Афарин!*
*Оптимистар шул*
*Бер йәштә лә бирешмәй.*
*Оптимистар...*
*Бәлки, үндай*
*Түгелдер барсаъыҙ ҙа —*
*Бәлки, минең кеүектәр ҙә*
*Осрайҙыр араъыҙҙа?..*
*— Юҡ, мин дә «Йәшәү күңелһеҙ»*
*Тиергә теләмәйем.*
*Сериалдар ҡарауы ла*
*Рәхәт әле, беләм мин.*

*Булһа йырымда ҡартлыҡтың*
*Моңһоу яғын күбәйтеү,*
*Ул бит бары: «Йәшлек матур,*
*Йәшәү матур!» — тип әйтеү.*

## Яраттыра

*Баш осондағы ҡояшты*
*Алтынға үк тиңләйбеҙ.*
*Уның ут шары икәнен*
*Белергә теләмәйбеҙ.*
*Улай ғынамы, ҡояшты*
*«Ул беҙгә көлә», тибеҙ.*
*Беҙгә вайымһыҙ есем ул —*
*Аңларға теләмәйбеҙ.*
*Аяҡ аҫтағы үләнде*
*«Табандан үбә» тибеҙ.*
*Һәм «Ул ябай үлән түгел,*
*Ул — бәрхәт үлән» тибеҙ.*
*Үлән дә беҙгә вайымһыҙ —*
*Аңларға теләмәйбеҙ.*
*Һоҡланабыҙ ҡайындарға,*
*Һоҡланабыҙ күлдәргә,*
*Һоҡланабыҙ үләндәргә,*
*Һоҡланабыҙ гөлдәргә.*
*Эй... Күпме һоҡланыу һүҙен*
*Ишетмәй был Тәбиғәт!..*
*Вайымһыҙ тора, бер кемде*
*Иш итмәй был Тәбиғәт...*
*Матурлыҡ!..*
*Үҙенә мәңге*
*Ҡараттыра, нишләйһең.*
*Һиңә битараф булһа ла,*
*Яраттыра, нишләйһең...*



**Р а у и л**
**Ш А М М А С**

# «КӨНӨМ НУРҺЫҘ, ЙЫРҺЫҘ БУЛМАҪ...»

## *Эй, хәйерле иртәм минең!*

*Көн дә иртән шиғыр яҙам,*
*Бөгөн яҙа алманым.*
*Ә шулай ҙа был иртә лә*
*Шиғриәтһеҙ ҡалманы.*

*Эй, иртәм, тим, һин шиғырһыҙ*
*Көндө нисек башларһың?*
*Ниндәй аҫыл нурҙар менән*
*Түтәлдәрҙе ашларһың?*

*Шул нурҙарға шиғри моңдар*
*Бар(ы)бер ҡушылып таралыр.*
*Шул нурҙарҙан, шиғырҙарҙан*
*Яңы гөлдәр яралыр.*

*Көнөм нурһыҙ, йырһыҙ булмаҫ.*
*Шиғырһыҙ көн буламы?*
*Беҙҙең урам — моңло урам,*
*Шағирәнә урамы.*

---

*Рауил Шаммас (1930) Стәрлебаш районы Хәлекәй ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Мәктәптә, район, «Ҡыҙыл таң» гәзиттәре редакцияларында, «Китап» нәшриәтендә, Яҙыусылар союзында эшләне.*

*Моң-шиғырҙар яңғырап торһон,*
*Күңелдәргә шул кәрәк,*
*Шиғыр рифмалары менән*
*Тибәләһә һәр йөрәк.*

*Үҙе генә белмәй йөрәк*
*Моң-шиғырҙар яҙғанын.*
*Белеп тибә, татып тибә*
*Йәшәйештең бальзамын.*

*Эй, хәйерле иртәм минең,*
*Инде мине аңланың.*
*Бына яңы шиғыр яҙҙым,*
*Һин шиғырһыҙ ҡалманың.*

## Иҫ китмәй

(Исемдәрен атамайым, үҙҙәре белә)

*Ҙур ағасҡа эйелеп: «Мин нур», — тигән*
*Күләгәне ҡояш нур итмәй.*
*Блат менән дуҫ-иш аша алған*
*Ҙур исемде донъя ҙур итмәй.*

*Күпме генә күкрәк һуҡмаһындар,*
*Ундай исемдәргә иҫ китмәй.*
*Ошо яһалманы яһаусыға*
*Намыҫ тигән оло хис етмәй.*

*Был ер көтә күләгәне түгел,*
*Ҙур ҡояштың яҡты, аҡ нурын.*
*Халыҡ көтә ысын таланттарҙың*
*Ғәҙел исем менән балҡырын.*

*Ерҙе киптерәм, тип йөрөгәндәр бар.*
*Ут сәсәләр, барыбер ер кипмәй.*
*Тәндең тирен йыуып була ла ул,*
*Күңелдәге керҙәр һис бөтмәй.*

*Ижад, талант тигән алтын мөхит*
*Ундайҙарҙы барыбер иш итмәй.*
*Ерҙә кешеләр тигән бөйөк синыф*
*Кеше булмаҫ йәнде кеше итмәй.*
*Ялған исемдәргә иҫ китмәй.*

## *Ҡулъяулыҡ*

*Ҡул усымда минең кескәй яулыҡ —*
*Күпме йырға кергән ҡулъяулыҡ.*
*Күпме мөхәббәтте берләштергән.*
*Сифаты бит матур, ниндәй ныҡ.*

*Урыҫтар уны «носовой платок» ти.*
*Беҙ әйтәбеҙ, һөйөп: «Ҡулъяулыҡ».*
*Танау түгел, ҡул бит, ҡул яулығы —*
*Шуны уйлап торам бераулыҡ.*

*Күптәр һаҡлай уны бүләк итеп,*
*Изге итеп ғүмер буйына.*
*Ике йәрҙе ул бит берләштергән,*
*Алып килгән ғүмер туйына.*

*Юҡҡамы ни ҡыҙҙар сигеү сигеп,*
*Ҡулъяулыҡҡа һала сәскәһен.*
*Йырҙа ғына әйтеп бирерлекме*
*Ҡулъяулыҡтың бөтә мәғ(ә)нәһен.*

*Танау яулығы түгел, ҡул яулығы —*
*Инсафлығы туған телемдең.*
*Ул ҡәҙерле миңә, ҡәҙерле булған кеүек*
*Тамаҡ туйҙырыр икмәк телемем.*

*Мин дә йөрөтәм йөрәк эргәһендә*
*Ҡәҙерлемдең аҫыл бүләген.*
*Тоям уны шулай яҡын итеп,*
*Мине һөйгән йәндең йөрәген.*

*Эй, ҡулъяулыҡ, шиғырыма керттем,*
*Йырланһаң да бик күп йырҙарҙа.*
*Һине юлдаш итеп бергә барам*
*Алда килер матур йылдарға.*

## *Аҡ гөлләмә өләшә-өләшә*

*Бөтә донъя ап-аҡ, ап-аҡ,*
*Табип халатымы ни.*
*Алдарымда аҡ ҡар һуҡмаҡ,*
*Аҡҡош ҡанатымы ни!*

*Ап-аҡ ҡыштың аҡлыҡтары*
*Табип дауаһы һымаҡ.*
*Аҡҡош ҡанатылай һуҡмаҡ:*
*«Талпын!» — тип әйтә һымаҡ,*
*Алда барыр юл йыраҡ.*

*Тормош юлы еңел түгел,*
*Йәндәргә дауа кәрәк.*
*Маҡсатыңа талпынғанда,*
*Ныҡ булһын тибер йөрәк.*

*Ап-аҡ ҡарҙай аҡ өмөттәр*
*Алға саҡырып торһон.*
*Ә маҡсатың, аҡҡош булып,*
*Һине ҡаршылар булһын.*

*Аҡ донъяның уртаһында*
*Шундай уйҙар уйлайым.*
*Йәнем һөйгән кешеләргә*
*Аҡ гөлләмә өләшә-өләшә,*
*Илем иңен буйлайым.*

## Бармағымда алтын балдаҡ

*Алтын балдаҡ кейҙерҙең һин*
*Ологайған көнөмдә.*
*Бөгөн миңә алтын һымаҡ*
*Һәр төшөм дә, өнөм дә.*

*Аслы-туҡлы күмәк үҫтек,*
*Ҡайҙа уйлау алтынды.*
*Ахыры, минең ғүмер таңым*
*Ологайғас балҡыны.*

*Бәлки, шуға үҫмер сағым*
*Һыя ярып үткәндер.*
*Ҡартлығыңда шатлан, тиеп*
*Алтын бүләк иткәндер.*

*Әле саф алтындай сағым.*
*Ҡалтырар саҡ та етер,*
*Әлегә иҫәнмен-һаумын —*
*Тормошома мең шөкөр.*

*Бармағымда алтын балдаҡ*
*Ялтлаһын оҙағыраҡ.*
*Йәшәйек беҙ, күрәйек беҙ!*
*Ҡалтырар көн, тор йыраҡ!*

## Матурлыҡ күҙе

Әсәйем Раузаға

*«Рауза гөлдәренең үҙәненә*
*Бармай ҡалма», — тине кемелер.*
*Дөрөҫ икән:*

*Әгәр күрмәй үтһә,*
*Был ерҙәге күпме матурлыҡтан*
*Мәхрүм булыр ине был ғүмер.*
*Барҙым, күрҙем.*
*Гөлдөң ниндәйе юҡ.*
*Аҫыл, аҫыл сәскә атҡандар.*
*«Беҙ — матурлыҡ» тиеп, ғорурланып,*
*Бар ғәмәлгә улар баҡҡандар.*

*Күҙ алдыма килде Рауза әсәм,*
*Матурлыҡты һөйҙө ғүмергә.*
*Ҡайҙа инде уға, беҙҙең кеүек,*
*Ҡавказдарҙы килеп күрергә.*
*Стәрленән ары йөрөмәне,*
*Өйҙә булды бөтә хәстәре.*
*Аҡтарҙылар улар ауыр саҡтың,*
*Һуғыш осороноң кәҫтәрен.*
*Шундай саҡта ла ул матурлыҡҡа*
*Ғашиҡ ине, гөлдәр үҫтерҙе.*
*Һеҙ — гөлдәрем, тиеп әйтә-әйтә,*
*Етебеҙҙе егет еткерҙе.*
*Сибәр ине уның күҙҙәре лә.*
*Гүзәл ине рауза гөлөләй.*
*Шағир улым, тиеп ғорурланып,*
*Ҡарап тора һымаҡ бөгөн дә.*
*Рауза гөлдәренең үҙәнендә*
*Әсәм исемен әйтеп хисләндем.*
*Раузаларҙың аҫыл сәскәләрен*
*Әсәм күҙҙәренә тиңләнем.*
*Минең алда мең-мең рауза гөлө,*
*Сәскәләре елгә тирбәлә.*
*Беҙ матурлыҡ күҙе Ҡавказдың, тип*
*Бөтә илгә хәбәр ебәрә.*

## Үҙең шәп булдың

Улым Алмасҡа

*Бөгөн мин — ул хәстәрендә,*
*Иң һуңлап тыуған улдың.*
*Әсәм һүҙен хәтерләйем:*
*«Үҙең шәп булдың, улым».*

*Шул һүҙҙәрҙе уға әйтәм:*
*— Үҙең шәп булдың, улым.*
*Һин бит, Хоҙайым ҡушҡанса,*
*Бәхетем өсөн тыуҙың.*

*Белем мәрйене тауына*
*Ҡесе йәштән юл һалдың.*
*Үҙең өсөн генә түгел,*
*Ҡешеләр, тиеп яндың.*

*Әсәң менән минең һүҙҙе*
*Һәр саҡ ҡәҙерләй белдең.*
*Һин — сәскәһе һәм емеше*
*Беҙ үҫтергән ал гөлдөң.*

*Буй-һынымды, бар холҡомдо*
*Алғанһың йәндәреңә.*
*Шәплегең һәм саф күңелең*
*Үтер аҫыл юлдарыңды*
*Биҙәһен йәмгә генә.*

## Тауҙай маҡсат булһын маяғың

*Көҙ айы ла бына башланды бит.*
*Көҙ айы — ул минеке. Минеке...*
*Ғүмер үтә, тиеп уйланам да,*
*Борсолоп та ҡуям бер килке.*

*Борсолоу, тим... Ниңә борсолорға?*
*Дауам итә ләһә был ғүмер.*
*Нимә булыр ине, туҡтап ҡалһа?*
*Һәр минуты — бүләк, ҙур ҡәҙер.*

*Сентябрҙең бере уйландыра.*
*Үткән ғүмер килә алдыма.*
*Төрлө төҫтә булды уҙған юлдар,*
*Булманылар зәңгәр, ал ғына.*

*Ҡара, һоро саҡтары ла булды.*
*Мәктәп юлы — ялан аяҡтан...*
*Ә уҡырға теләк — тау ҡәҙәрле,*
*Алда торған алтын маяҡтай.*

*Шул маяҡҡа ҡарап барҙым, барҙым,*
*Шыя ярҙым, утлы һыу кистем.*
*Ғәжәпләнәм әле ҡартлығымда*
*Ҡабат ҡабыныуға шул хистең.*

*Сентябрҙең бере. Бөгөн тағы*
*Белем юлына баҫҡан балалар.*
*Затлы кейем өҫтә, нурҙар — йөҙҙә,*
*Ҡурсаҡмы ни, нисек баралар!*

*Ялан аяҡ саҡтар ҡуптән артта,*
*Ул замандар бер ҡайтмаһын.*
*Һәр бер ғаиләнең киләсәген*
*Матур тормош, бәхет биҙәһен.*

*Ә маҡсаттар? Булһын тауҙай улар.*
*Маяҡ булып торһон саҡырып.*
*Мин көтәмен алда киләсәктең*
*Яҡты ҡояш кеүек балҡырын.*

*Тормош етеш бөгөн. Балалар шат.*
*Тамаҡтар туҡ, өҫ тә бик бөтөн.*
*Беҙҙең бала саҡты, ас саҡтарҙы*
*Әммә онотмайбыҙ беҙ бөгөн.*

*Һуғыш осороноң михнәттәре*
*Сыныҡтырған минең быуынды.*
*Әммә маҡсаттарҙы юялмаған,*
*Быуалмаған барыр юлымды.*

*Бөгөн балаларға ундай һынау*
*Ҡуйылмаған һәм юҡ кәртәләр.*
*Әммә маҡсаттарға барыу юлы*
*Ауырыраҡ унар мәртәбә.*

*Еңеллекте еңеү еңел түгел.*
*Барлыҡтан бит боҙола бик күптәр.*
*Уларҙың да ята елкәһенә*
*Маҡсаттарға барыр ҙур йөктәр.*

*Ошо юлды улар үтә алһын*
*Тап төшөрмәй кеше исеменә.*
*Гел яҡшылыҡ ятһын, гел яҡтылыҡ*
*Улар киләсәге есеменә.*

*Сентябрҙең бере. Шундай уйҙар*
*Ҡарт шағирҙың башын ҡайната.*
*Күңелендәге изге теләктәрен*
*Шиғыр итеп һеҙгә тарата.*

*Тауҙай маҡсат торһон, яҡты маҡсат*
*Һәр баланың ғүмер юлында.*
*Кеше исемен ерҙә байраҡ итеп,*
*Йәшәһен ул бәхет нурында.*

Рауил
БИКБАЕВ

# Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер...

**25.06.89. Йәкшәмбе.**

**Кисә Рәшит Назаровтың «Ағиҙел»дәге шәлкемен уҡып сыҡтым. Журналға бирер алдынан да уҡығайным, әле ташҡа баҫылғас, күҙ алдына тулыраҡ баҫа. Бындай феномен беҙҙең әҙәбиәттә генә түгел, ғөмүмән, тиҙ ҡабатлана торған мөғжизәләрҙән түгел. Араһында өйрәнсек шиғырҙар ҙа бар, әлбиттә. Ләкин быларҙың барыһын да малай, үҫмер яҙған бит. Ошо шиғырҙарында уҡ донъяны ни тиклем тетрәнеп, һыҙланып аңлау, күпме аяуһыҙ философия. Уларҙа киләсәктә буласаҡ әллә нindәй фажиғәләрҙе, трагик яҙмышты тойған кеүек булаһың. Бәлки, хәҙер барыһын белгәс кенә шулай тойолалыр. Әммә ул саҡта уҡ Рәшиттең донъя менән мөнәсәбәтендә фажиғә ята.*

**30.10.89. Дүшәмбе.**

**Кешенең ғүмер юлында әжәл тигән ҡороулы мина ята. Тик әҙәм балаһы ул минаға ҡасан, ҡайһы урында барып баҫып шартларын ғына белмәй, бисара.*

**3.12.89. Йәкшәмбе.**

**«Утро вечера мудренее» тигән мәҡәлдең аҡылын олоғая килгәс кенә аңлай бараһың (хәйер, ул мәҡәлде генәме ни?) Ҡайһы бер кистәрҙә шул тиклем арыта, төшөнкөлөк, ҡыйралыш, донъяның йәме ҡалмай һ.б. Ә иртән донъя яңынан балҡып, яңынан һине арбап тора. Шул хәлдә асҡандан бирле әлеге мәҡәлде иҫкә төшөрәм, осона сыға алмаған уйҙарымды иртәгәгә ҡалдырам.*

**«Донъялар имен булһын!» – кешеләрҙең изге теләге. Тик шағирҙың ғына донъялары һил булмаһын, тыныс булмаһын! Һыҙланыуы уның тынмаһын!*

**Фантасгармония: ҡояшҡа ҡараған тәҙрәләрҙең береһендә нур*

---

*Дауамы. Башы 1-се һанда.*

*балкый, эргәһендәге икенсеһе ҡап-ҡараңғы, шомло, һалҡын. Донъяла былдай хәлдәр булмаһа ла, кеше яҙмышында улар – аҙым һайын.*

**Шагомер. Кеше үлемгә табан аҙымдарын һанай. «Бөгөн нисә аҙым атланым?» – тип уйлай ул. Асылда үлемгә нисә аҙым яҡынайыуы хаҡында һүҙ бара.*

**«Кешенең нимә уйлағанын белергә ине» – кешенең ғүмерлек хыялы. Кешенең ниндәй яман уй уйлағанын алдан белергә ине, шул уйҙың юлын киҫергә ине. Яҡшы уйҙы алдан белһәләр, уға арҡыры сығыусылар былай ҙа етерлек булыр.*

**27.12.89. Шаршамбы.**

**Станция тирәһен урап ҡайтам, Солнечнаяла булдым. Яңы ғына гөрләп торған донъя ҡайҙа булған? Переделкино хатта былтырғы менән сағыштырғанда ла танырлыҡ түгел. Хатта һыу юҡ, өйөлөп ятҡан алма ла юҡ. Ашамлыҡтар тураһында әйтеп тораһы ла түгел.*

*Магазин тирәһендә йөрөгән кешеләр шул тиклем ҡыҙғаныс күренә. Йәмшәйеп, иҙелеп бөткәндәр һымаҡ. Әллә элек тә шулай булып, мин күрмәгәнмен. Донъя көндән-көн ҡараңғыраҡ.*

**28.12.89. Кесаҙна.**

**Рәми ағайҙың яратҡан шишмәһенә барып, ауыҙ итеп, битемде сайҡап килдем кисә төштән һуң. Ул шишмә тураһында бер шиғыр моронлап ҡуйҙы, бәлки, яҙылыр ҙа. «Еленем бар ҙа, һөтөм юҡ», – был ғәжәп мәҡәлде тәүге тапҡыр кисә Шакир Янбаев ағайҙан ишеттем. Бик үҫал, бик мәғәнәле һүҙҙәр. Кисә телевизорҙан яңы мәҙәниәт министры Губенконы күргәс, ағай шулай тип ҡуйҙы.*

**25.02.90. Йәкшәмбе.**

**Переделкинонан ҡайтҡанға бер ай үтеп китте. Нимәләр булды был ай эсендә? Хәҙер донъя йыллап йәки айлап ҡына түгел, көн эсендә, сәғәт эсендә үҙгәрә. Ваҡиғалар ҡайнай, ташҡын булып таша. Күҙ асып йомғансы күпме яңылыҡ. Кисәге диктатор тәхетенән оса, төн эсендә илдәр юҡ була, яңылары тыуа. Ғәләмәт заман.*

**Солженицындың «ГУЛАГ»ын уҡып сыҡтым. Бигерәк ауыр. Быларҙы белергә кәрәк, әлбиттә. Ләкин хәҙерге үҙәк журналдарҙа бөтөнләй яҡтылыҡ ҡалманы тиерлек. Йә төрмә, йә эмиграция әҙәбиәте. Әле яҙылғандары ла шул рухта. Шиғырҙар ҙа шул бер көйҙө көйләй. Донъяла бөтөнләй изге нәмә ҡалманымы ни? Бары бушлыҡ менән генә, бары инҡар итеп йәки емереп кенә нисек йәшәмәк кәрәк?*

**27.02.90. Шишәмбе. Иртәнге алты.**

**Хәҙер көндән-көн эшләүе ауырыраҡ. Көс кәмегәндән түгел, заманаларҙың буталыуынан. Сүп-сар өҫкә ҡалҡты, иман бөтөп бара. Ялған аллаларҙы фашлау шау-шыуынан файҙаланып, кисәге иблистәр бөгөн Аллаға әйләнмәксе. Быйыл буталыштың сигенә килеп етелде һымаҡ, донъяның аҫты өҫкә килмәгәйе.*

**Шәхесте асыусы өс аспект: халҡыңа мөнәсәбәт, кешегә мөнәсәбәт, үҙ-үҙеңә мөнәсәбәт. Башҡаларҙан таптырыу йәки көлөү еңелерәк, үҙ-үҙеңдән көлә белеү, самоирония – ҙур нәмә.*

**15.03.90. Кесаҙна.**

**Иҫ-аҡыл етмәҫлек икһеҙ-сикһеҙ йыһан – беҙҙең галактика – ҡояш системаһы – Ер – беҙҙең ил – беҙҙең республика – Өфө – урам – фатир – бүлмә – бүлмәләге кеше. Ошондай кесерәйә барыу планында күҙ алдына килтерһәң, кешенең йыһанда ни тиклем бәләкәй булғанлығын башҡа һыйҙырырлыҡ түгел. Ә шул туҙандан да кесе әҙәми зат үҙенең зиһененә күпме галәмде һыйҙыра, уйы менән яҡтылыҡ тиҙлеген уҙып китә. Ә бит беҙ ниндәйҙер түбән цивилизациябыҙҙыр, беҙҙән нисә мәртәбә ныгыраҡ үҫешкән интеллекттар барҙыр. Һуңғы ваҡыттағы сәйер хәлдәр, беҙ аңламаған ниндәйҙер серле күренештәр, «йыһан ҡунаҡтары» ерле юҡтан микән? Мин ошоно яҙып ултырғанда берәй юғары аҡыл миңә, бәлки, мыҫҡыл ҡатыш йәлләү менән ҡарап йылмайып тора торғандыр...*

**29.03.90. Кесаҙна.**

**Ырымбур яғына шәмбе киткәйнек, кисә ҡайттыҡ. Рәйсә апайым хәл өҫтөндә. Тәүге көндө һәйбәт кенә һөйләшә ине, икенсе көндө бик һөйләшә алманы. 45 йыл элек яҙ көнө атайым үлгәйне, бына быйыл тере апайым менән бәхилләшеп ҡайттым. Ни генә рәхәт күрҙе инде бахыр? Үҙе бер ваҡытта ла зарланманы, асыҡ күңелле булды. Мин ишеткән һуңғы һүҙе лә: «Күсти» булды, күстәнәс бирергә онотмағыҙ, тип һөйләп ятты.*

**Һыуҙар ташып таҙарына. Ныҡлап ташмаһа, йылға ныҡлап таҙарынып та ҡала алмай.*

*Күңел таҙарынғансы, юшҡындары ҡубып төшкәнсе бер ташырға ине.*

**Халыҡ тигәндән беҙ шау алтынды күҙ алдына килтереп өйрәнгәнбеҙ. Кешенең аҡсаһы гел йөҙәрлектән генә тормай. Уның һумдары ла, тутығып бөткән баҡырҙары ла була. Халыҡты аҡса менән сағыштырыу бик үк һәйбәт тә түгелдер. Әммә халыҡ та бит әллә күпме аҫыл кешеләрҙән, шул уҡ ваҡытта һуҡыр тингә лә тормаған йүнһеҙ әҙәмдәрҙән дә тора. Етмәһә, аҡсаның хаҡы төшә барған һымаҡ, кешенең дә баһаһы төшә бара. Бында кеше үҙе лә, уны формалаштырыусы система ла гәйепле. Ләкин аҡсаны тиҙ генә алмаштырып була, ҙур ҡыйынлыҡтарға, ауырлыҡтарға, ҡорбандарға барып, реформа үткәреп булһа ла; халыҡты бер ваҡытта ла алмаштырып булмай, тотош ил граждандарына тоталь реформа яһап булмай. Ҡаҙнаның алтын нигеҙен, запасын яңынан да тултырып була торғандыр, ләкин милләттең генофонды бөтһә, уны яңынан тергеҙеү мөмкин микән? Беҙ хәҙер ошондай хәл иткес сиккә килеп еттек.*

**Әллә ниндәй партиялар ойоша, кадеттар яңынан пәйҙә була. Яңыраҡ либераль демократик партия тигәндәренең программаһын уҡығайным, улар өсөн милләтең булды ни ҙә, булманы ни. Халыҡтың ергә хоҡуғын да улар феодализм ҡалдығы тип аңлата. Ундайҙарға көнөң ҡалһа, халҡың бөттө.*

**2.04.90. Дүшәмбе.**

**Бөгөн редколлегия булды. Журналга ҡарағанда дөйөм мәсьәләләр, милләттең бөгөнгө хәле тураһында һөйләшеү күберәк булды. Милләт иң хәүефле хәлдә. Милләтебеҙ милләт булараҡ һаҡланып ҡаламы-юҡмы – һүҙ шул хаҡта бара. Киләһе 10-20 йылда хәлдәр яҡшыға үҙгәрмәһә, артабан тау түбәненә тәгәрләп китәсәк. Ил буйынса һүҙ һөйләү күп, беҙҙә – бигерәк тә. Зарланыуҙан уҙыу юҡ. «Башҡорт халҡын ҡотҡарыу» комитетын ойоштороу тураһында һөйләштек. Хәҙер тик конкрет эш менән генә алға китеп буласаҡ. Миллион ярым халыҡтың үҙ йөҙөн һаҡларлыҡ потенциалы табылмаҫмы ни?*

**22.04.90. Йәкшәмбе.**

**Донъяла ҡыҙыҡ хәлдәр була. Өфөләге шишмәләр тураһында быға тиклем кем уйлап ҡараны икән. Крандан һыу ағып торғанда уларҙың ни кәрәге бар?.. Водопровод бысраныу менән, Ҡариҙел ағыуланыу менән, шишмәләр иҫкә төштө, күнәк, банка тотоп, халыҡ шунда ағылды.*

*Рухи тормошта ла шулай түгелме ни? Тирә-яҡ керләнеп бөткәндә кешене халыҡ күңелендә һаҡланып ҡалған саф шишмәләр, халыҡ моңо, халыҡ һүҙе, халыҡ аҡылы ҡотҡарасаҡ.*

*Шиғриәтте лә мин ошондай шишмәләрҙән тип уйлайым. Дежур һүҙҙәрҙән, сираттағы ығы-зығыларҙан ялыҡҡан кеше шиғриәттең мәңгелек шишмәһенә килеп ял табасаҡ.*

*Халыҡ фәлсәфәһенең иң бай хазиналарын, иң боронғо тамырҙарын үҙенә туплаған дин дә ошондай мәңгелек шишмә бит. Хатта дин әһелдәрен төрмәләрҙә сереткән, ниндәй хайран ҡомартҡыларҙы ҡырып емергән дәһшәтле, ҡанһыҙ Сталин да, итәгенә ут ҡапҡас, һуғыш йылдарында яңынан динғә мөрәжәғәт итергә, уның ярҙамына таянырға мәжбүр булған.*

*Бөгөнгө көндә лә динғә официаль ҡараш ерле юҡтан ғына үҙгәрмәне, уға иғтибар тикҡә генә артманы. Кешеләр бер-береһенең боғаҙын сәйнәп өҙөргә әҙер торғанда, исмаһам, дин һис юғында аҙыраҡ миһырбанлыҡ өҫтәр, иманды аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итер.*

**Союзға инеүселәр һаны әҙәбиәткә инеүселәр һанына бәрәбәр булһа икән.*

*Яҙыусылар союзына яңы ағзалар алыу ваҡыты еттеме – оло бәлә. Исемлектәге ҡарттарҙан тиҙерәк ҡотолорға кәрәк, йәштәргә юл асып булмай.*

**17.05.90. Кесаҙна.**

**Кисә переговорныйҙан Зөлхизәләргә шылтыратып алдым. Бик һәйбәт ишетелә. Оҙаҡ та көттөрмәнеләр. Өйҙән алып булмай. «Һөйләшеү пунктында» – үҙе бер хикәйәме, шиғырмы. Бер юлы күпме кешенең яҙмышы, шатлығы, ҡайғыһы, һағышы һинең йөрәк аша үтә.*

**Кисә кис Зөбәржәттең яңы шиғырҙарын уҡып ултырҙым. Бик һәйбәттәре байтаҡ. Байтаҡ ваҡыт яҙмай тороуы үкенесле. Ләкин ни хәл итәһең, һәр кемдең үҙ яҙмышы. Әгәр Зөбәржәт баштан уҡ әҙәби белем алып, профессиональ кимәлдә эшләй башлаған булһа икән дә бит... Әле ул үҙенең тәбиғи зирәклеге менән юл яра.*

**23.06.90. Шәмбе.**

**Больница. Туғыҙынсы ҡат. Палата 9403. Аллаға иң яҡын урын.*

*Аллаға иң яҡын урын мәсеттә түгел, сиркәүҙә түгел, бына ошо больницалалыр инде. Теге донъя менән был донъя араһы – бер аҙым ғына, күҙ асып йомған ара ғына.*

*Ғибәҙәт урынында ла ихлас булмаусылар етерлектер, әммә бында кеше үҙе алдында ла, Алла алдында ла алдаша алмай.*

*Һәр төрлө буш боғаҙҙарҙы больница аша үткәрәһе ине.*

*Ун йыл һайын Алла һөйләшергә саҡырып ала. Быныһы – икенсеһе, тәүгеһе – һары менән ауырығанда. Ҡасан булыр өсөнсөһө, өсөнсөһөмө, әллә һуңғыһымы?*

**29.06.90. Йома.**

**Бер ҡатын асфальтта тыҡ-тыҡ атлап килә ине. Ерҙәге һуҡмаҡҡа төшкәс, тыҡылдауы-шаҡылдауы шундуҡ тынды. Ҡалала шаулаһаң да, ергә баҫҡас, тормош башҡасараҡ ул.*

**30.06.90. Шәмбе.**

**Шишмәнән һыу эскәндә йәки еләк өҙгәндә генә баш эйҙем, ҡалған саҡта ғорур булдым,– тип кәпәренмә. Ялҡауҙар ҙа ғүмер буйы баш эйергә лә йыбанып йәшәргә мөмкин бит әле.*

**Монтенды күптән уҡырға хыяллана инем. Ысынлап та, хазина икән – тәүге битенән үк арбап алды. «Әҙәби ҡомартҡылар» серияһынан, ике томда. Һис бер нindәй инеш һүҙһеҙ, туранан-тура Монтендан башлап ебәреүҙәре бигерәк һәйбәт.*

*Монтендың күпме фекерҙәре бөгөнгөгә тап килеп тора. Бигерәк тә дәүләт ҡуләмендәге үҙгәрештәр тураһында. Мәҫәлән: «не только предположительно, но и на деле лучшее государственное устройство для любого народа – это то, которое сохранило его как целое». (Монтень, Опыты. Книга третья, М., 1979, стр. 163)*

*«Ничто не порождает в государстве такой неразберихи, как вводимые новшества; всякие перемены выгодны лишь бесправию и тирании... »*

**13.07.90.**

**Бөгөн бындағыса дүртте үткәс уяндым. Кисәле-бөгөнлө бәләкәй шиғырҙар яҙыла: элек төртөп ҡуйғандарҙы эшләп ултырам. Кисә кис Андрей Белыйҙы (үҙе, уның хаҡында – бик ҡалын китап, «Проблемы творчества», 1988) уҡып ултырҙым. Беҙҙең мөмкинлектәр ни тиклем сикләнгән! Белый – бөтөнләй ғәҙәти булмаған хыял донъяһы, үҙе нindәй ғилем хазинаһы! Беҙҙә шундай кеше тыуған хәлдә лә, уны аңларлыҡ, баһаларлыҡ уҡыусы ҡайҙа? Ул кимәлдәге редакторы ла, хатта тәнҡитсеһе лә юҡ бит.*

*Монтенды, Эразм Роттердамскийҙы ҡулға алһаң, айырылып булмай. Шундай китаптар ғына уҡып ултырыр инем, ваҡыт ҡайҙа? Ошондай китаптарҙың быға тиклем сыға баргандарын ниңә йыйып киленмәгән? Әлеге аңҡаулыҡ.*

*«Тик шәүләһе ҡалып бара дәүләттең...»*

**14.07.90. Шәмбе.**

**Рустың «На злобу дня» тигән һүҙе. Бөгөнгө көндә «на злобу дня» яҙылған шиғырҙар байтаҡ, әммә злоба күберәк, кешеләр араһында асыу күберәк.*

**16.07.90.**

**Көндәремде, бал ҡыуған умартасы кеүек, көн дә һығып алам, бындай татлы мәлдәр ҡабат булмаҫ һымаҡ тойола. Ә тормошом кәрәҙҙәре яңынан мөлдөрәмә тулыша. Балдай татлы шатлыҡ та бар уның кәрәҙҙәрендә, әсе һағыштар ҙа етерлек. Тик буш булмаһын тормош кәрәҙҙәре.*

**6.08.90. Дүшәмбе.**

**Хәҙерге йәштәрҙе уйлайым да, күбеһенең киләсәген күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Алда күпме тартыш-йолҡош, тарҡалыш көтә. Йәштәрҙең күпселегенә яңыса мөнәсәбәттәргә әҙер түгел. Бик йылғырҙары һәм йыртҡыстары йырып сығыр, ә күпмеләре фәҡирлектә, эшһеҙлектә ғазапланасаҡ йәки енәйәт юлына баҫасаҡ, мафиялар ҡолона әйләнәсәк.*

*Ниндәй бәхетһеҙлектәр көтә икән бисара илемде?*

**13.08.90. Дүшәмбе.**

**Тағы ла «Мәҡәлдәр ҙә иҫкерә барамы?» тигән уй тыуа. Мәҫәлән: «Юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ яраштыра». Элек фәҡир саҡтарҙа ла халыҡ татыу ине бит. Бөгөн байыр өсөн бер-береһе менән ҡомһоҙланып ярыша, һуҡыр тин тип күңеле һуҡырайған. Йәки: «Ас күңеле – икмәктә, туҡ күңеле – ирмәктә». Бөгөн бер ҙә улай түгел бит әле. Күптәр ирмәге менән дә ихлас ҡыҙығырға ваҡыт таба алмай. Ә элек ас көйө лә йырлы ине, дәртле ине, татыу-тәүфиҡлы ине. Һүҙ кешене аслыҡта һаҡлап торорға кәрәклеге хаҡында бармай. Мул тормош ҡорорға тырышыу – кешенең иң изге ынтылыштарынан. Ләкин фәҡир күңел нимәһе менән фәҡир тормоштан һәйбәтерәк әле?*

**28.08.90. Шишәмбе.**

**Көн дә һыу индем. Бер-ике көн бик һыуыҡ булды. Күл өҫтө томан, шомло. Томан шул тиклем ҡабаланып ярға саба, күл өҫтөндә өшөй, ярға йылынырға сыға һымаҡ.*

*Күлдән йүгереп ҡайтҡанда үҙ елең дә үҙеңә һыуыҡ, һыу ингәндән һуң һыуыҡ көйөнә.*

**17.11.90. Шәмбе.**

**Илдәге хаос сығырынан сыҡты. Донъя бурҙар ҡулына, мафия ҡулына күсә бара. Былдай капитал тупламаған беҙҙең халыҡҡа иң ҡыйыны буласаҡ. Тик бер өмөт:*

*Ер туҡтауһыҙ тетрәп тормай, туҡтауһыҙ булмай дауыл.*

**28.11.90. Шаршамбы.**

**1959 йылда республикала 7300 ауыл булһа, 1989 йылда 4646-ға ҡала.*

*(«Башҡортостан», 28.11.90, Аҡназаровтың иҫтәлектәренән.) Тимәк, йыл һайын уртаса 90-лап ауыл юҡҡа сыҡҡан.*

**27-һендә Союзда йыйылыш булып үтте. СССР Яҙыусылар союзын тарҡатыу өсөн айырым төркөмдәр бөтә көсөн һала. Бында ла шул уҡ экстремизм, теневая экономика барыһын ҡулға алмаҡсы, минеңсә.*

*РСФСР депутаттарының съезы бара. Ельцин социализмды бөтөрөү өсөн бөтәһен дә эшләй. Ерҙе һатмаҡсылар. Ер һатыу беҙҙең халыҡты бер нәмәһеҙ ҡалдырасаҡ.*

*Был үҙгәртеп ҡороуҙың һүҙ бутҡаһынан тамам төңөлдөм. Ҙур фразалар менән халыҡты алдап, һаман да шул уҡ власть өсөн көрәшеү. Беҙҙең халыҡтың күндәмлеге...*

**Яңынан ижадҡа бикләнергә ине, тик уның өсөн дә күңел тыныслығы кәрәк.*

*Блоктың фажиғәһен мин бөгөн нығыраҡ аңлайым. Ул да бит революцияға ни тиклем ихлас ҡыуанған, әммә бик тиҙ уның йыртҡыслыҡтарын күреп, ниндәй рухи фажиғә кисергән, күңеле һынған һәм, ошо хәлдән һауыға алмайынса, донъянан киткән. Физик яҡтан үлер алдынан ул бер нисә йыл элек рухи үлгән.*

**6.04.91. Шәмбе.**

**Көҙгө Аҡ тирмәлә ырымбурҙарҙы йыйыу тураһында халыҡҡа әйткәйнем. Кеше аҙ килде. Шунан да беҙҙең халыҡтың дәртһеҙлеген, ғәмһеҙлеген күреп була. Оргкомитет төҙөп ҡуйҙыҡ. Башта Ырымбурҙа үткәреп ҡарарға кәрәк.*

**Сценарий яҙғанда Рәми ағайҙың «Болан» тигән шиғырын алмаҡсы булғайным. Мөгөҙөндә ҡояшты тотоп торған боланды. Тик тәржемәниҙәләр һағайтты. «Олениха»ның мөгөҙө булмай бит. Хәҙер һәр тәржемә шик тыуҙыра. «Аҡ сәпсек»те синица тип алған, быныһы ла дөрөҫ түгел. Ә мин уны сценарийға индерҙем, урыны ла бик йәтеш һымаҡ ине.*

**РСФСР депутаттары Ельцинға тағы ла ҙурыраҡ власть биреү өсөн ҡул күтәрә. Үҙҙәренә үҙҙәре хөкөм сығарып тауыш бирмәйме икән улар?*

**29.05.91. Шаршамбы.**

**Кисә биштә тороп, Мәскәү юлына ҡуҙғалдым. Самолет ваҡытында осто. Мин РСФСР Яҙыусылар союзына килеп ингәндә, халыҡ юҡ ине әле. 12-гә тиклем эштәрҙе бөтөрҙөм. Литфондта 8 көнгә путевка алдым. Союзда Борис Романов янына инеп сыҡтым. Мин аҙыраҡ ултырыуға, Пшонкин да килеп инде. Яңы ағзаларҙы ҡабул итеү буйынса элекке беҙҙең хоҡуҡтарҙы һаҡлауға теше-тырнағы менән ҡаршылар. Динис юҡҡа ғына ышанып йөрөгән. Приемная коллегияла ла беҙҙең бер кеше лә юҡ. Беҙгә лә РСФСР-ҙан айырылыу тураһында һүҙ күтәрергә, уны хәл итергә тура киләсәктер, теләһәң-теләмәһәң дә. Үҙ хөкүмәтең, үҙ дәүләтең генә хәлде ҡотҡара аласаҡ. Мәскәүгә өмөт самалы.*

*РСФСР Союзының икенсе ҡатында коридор тултырып яҙыусыларҙың төрлө осрашыуҙарҙағы, ултырыштарҙағы һ.б. фотоларын теҙеп*

*сыҡҡандар. Юван Шесталовтан башҡа, бер генә милләт яҙыусыһы ла юҡ. Бына РСФСР!*

*«У национальных меньшинств сейчас может быть меньше прав, чем у сексуальных меньшинств...»*

**2.06.91. Йәкшәмбе.**

**Бер ботинканан таш киҫәген һелкһәм, икенсеһенә барып төштө. Тормошта ла, ил күләмендә лә йыш ҡына шулай була бит. Бер ерҙәге ауырлыҡты, кризисты икенсе ергә күсереп, халыҡты алдайҙар, бер ерҙән киҫеп алып, икенсе ерҙәге йыртыҡты ямайҙар.*

*Ҡайһы саҡта үҙебеҙҙең аяҡты өйкәгән таш киҫәген башҡаның ҡатаһына һелкеп төшөрәбеҙ.*

*Хөкүмәт – хөкөм әйт. Ғәҙел хөкөмөңдө әйт. Хөкүмәт һүҙе хөкөм һүҙенән бит. Ғәҙел хөкөм итеүсе. Беҙҙең бөгөнгө «ил хужалары» быға һәләтһеҙ.*

**Сит ил инвестициялары тураһында яңы законды ҡайһы берәүҙәр иҫтәре китеп һөйләй. Бирәсәккә алған күпме миллиардтар елгә осто. Аҡсанан аҡса эшләй белмәһәң, уны алып тороуҙан ни файҙа? Сит илдән килгән хәйер-саҙаҡаға бәғзеләр ҡыуанған була. Ҡол психологияһы ла түгел, хәйерсе психологияһы, дөрөҫөрәге, ата ялҡау ҡыуаныуы ул. Теләнселәп ғүмер итергә тырышыу. Ул саҙаҡалар ҙа бит юҡҡа бирелмәй, илеңә, халҡыңа, иманыңа ниндәйҙер хыянатың өсөн «бүләк» итеп бирелә.*

**Байтаҡ журналдарҙы ҡараштырам: дин дә дин. Самаһыҙ шаштырыу. Был тема булмаһа, бөгөн нимә баҫырҙар ине, тип тә уйлап ҡуяһың. Бушлыҡты былай ғына тултырып булһа икән...*

*Ғөмүмән, һуңғы ваҡытта яңы матбуғат шул тиклем күбәйҙе. Элекке сикләүҙәргә яңы иркенерәк шарттарҙа үҙенсә реакциялыр ҙа был. Ләкин яңы, баҫмаларҙың күбеһе үтә сифатһыҙ: йөкмәткеһеҙ йәки кеше күңелен тарҡатыусы яман уйлы. Элекке тарлыҡ, ҡоршауҙар ҡыҫҡан тынсыу мөхит урынына иманды емергес ағыулы иркенлек. Быгау ҙа яман, бәйһеҙлек тә яман.*

*Беҙҙең «Ағиҙел»дең күләме артыу ҙа мине артыҡ ҡанатландырмай. Иң һәйбәт әйберҙәрҙе баҫырға элекке күләме лә етерлек ине. Хәҙер – күләмде буш һауа өрөп тултырыу ҡурҡынысы.*

**3.06.91. Дүшәмбе.**

**Ҡайҙа барабыҙ? Хәҙер һәр көнөм ошо һорауҙан башлана. Нимә менән бөтөр был тартыш-йолҡоштар? Халыҡ ғүмере буйы алдана, сараһыҙҙың көнөнән күптәр Ельцин һымаҡ яңы кумирҙар уйлап сығарған була. Ышанмайынса, нимәгәлер өмөт итмәйенсә йәшәүҙәре ҡыйын бит.*

**9.07.91.**

**Кисә баҡсала М. Чвановтың «Корни и крона» тигән китабын уҡып сыҡтым. Былай кәрәк китап. Тик артыҡ күп һүҙле, бер нәмәне сурыта, үҙ-үҙен ҡабатлай. Дөйөм алғанда, краеведение жанрында яҙылған. Башҡортостан ерлегендә булһа ла, башҡорт һыҙланыуы, башҡорт*

*халҡының фажиғәләре етмәй. Хәйер, ниңә уны урыҫтан таптырырға, был хаҡта беҙ үҙебеҙ хәстәрләргә тейешбеҙ.*

**22.07.91. Дүшәмбе.**

**Әкрәм ағай Бейештең «Йәшлек»тә баҫылып килгән башҡорт тарихы бөгөнгө көндәргә килеп етте. Бик кәрәкле китап, бигерәк тә йәштәр өсөн. Халыҡ өсөн үтемле тел, стиль, йүнәлеш табылған. Бында ғилем баштан ғына сыҡмаған. Тарих тураһында, халыҡтың ауыр яҙмышы тураһында ғорурланып ҡына түгел, һыҙланып, йәне әсеп һөйләй кеше.*

**Келәш хыялыйы. Үткән шишәмбе Келәштә автобус көтөп торабыҙ. Ямғыр һибәләп ҡуя. Урамдың үрҙәге башынан ямғыр һыуы ағып төшкән. Таяҡҡа таянып, саҡ тәнтерәкләп йөрөгән бер ғәрип ир тырышып-тырышып ошо «йылға»ны йырып-көйләп маташа. Бер урында соҡона ла, түбәнгәрәк төшөп, «көйләргә» тотона. Эй, изге күңелле хыялый! Ошо мәлдә, бәлки, ул үҙенең балалыҡ илендә йөрөйҙөр. Донъяла нисек тә яҡшылыҡ эшләргә тырыша. Бер ҙә ахмаҡланмай, дурак дуракланмай бит, йылғаға юл яра! Уның күңел донъяһын беҙ бит аҙ ғына ла күҙ алдына килтерә алмайбыҙ. Хыялыйҙар, диуаналар хаҡындағы әҫәрҙәрҙә яҙылғандар күбеһе шартлы.*

*Иреkһеҙҙән тағы ла уйлап ҡуям: хыялыйҙар, диуаналар, бәлки, камил заттарҙыр, ә беҙ – камил булып күренгән кешеләр, бәлки, аҡылдан яҙған, зиһене, рухы зәғиф йәндәрҙер?*

**Баҡсала бисә күнәктәгеңә ҡыуана, мин йөрәктәгеңә ҡыуанам. Ысынлап та, ҡатын емеш йыйып ҡыуана. Бындағы тынлыҡта минең күңелдә лә байтаҡ емеш моронлап ҡуя йәки өлгөрөп тә етә. Минең шатлығым шулар. Кисә Булат Рафиҡов менән баҡсалағы ваҡыттың ҡәҙерен белеү тураһында һөйләшеп торғайныҡ. Ҡәҙерен белеп еткермәйбеҙ. Бына өс сәғәт эсендә күпме нәмә теркәп ҡуйылды. Ә бит көн әле яңы башланырға ғына тора!*

**25.07.91. Кесаҙна.**

**Үҙгәртеп ҡороу етенсе йылға китте. Ошо арала (ете йыл!) илдә берәй ваҡиға булырҙай әҫәр тыуҙымы? Элек баҫтырылып ятҡандарҙың баҫылыуы, матбуғатҡа «диссидент» әҙәбиәтенең төрлө сүп-сарҙарының бысраҡ ташҡын булып тулыуы – уныһы икенсе мәсьәлә. Иң ҙур таланттарҙың да өнө ишетелмәй бит. Революциянан һуң да тын ара булып алған. Дөйөм алғанда, тын миҙгел. Ләкин Есениндар туҡтап тормаған. Ә хәҙер?*

*Был йылдарҙа мин бик күтәренке мәл кисергәйнем (1986–1988 – «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ», «Сират» һ.б), тәнҡит көсәйгәйне, өмөттәрем дә ҙур ине. Артабан ирония, ниндәйҙер дәрәжәлә скепсис үҙәккә сыға башланы («Система», «Таш майҙан»). Шул уҡ ваҡытта публицистик тон туҡтаманы («Халҡыма хат»). Хәҙер иронияна философияға нығыраҡ тарта, дөрөҫөрәге, әсе фәлсәфәгә. Күп нәмәнән күңел төңөлдө, тәүге талпыныштың тамсыһы ла юҡ. Шуныһы бар: был ара минең өсөн бик ырамлы булды. 1987–1991 йылдарҙа 4 поэма*

*(«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ», «Халҡыма хат», «Система», «Баҙар балтаһы»), 200-ҙән артыҡ шиғыр. Был йылдар – ижади яҙмышымда бик мөһим, етди, шатлыҡлы һәм ғазаплы осор.*

**Шиғриәт, һәр шағирҙың ижады тылсымлы ағас һымаҡ күҙ алдына килә: һәр ботағында – үҙенсә бер емеш. Береһендә - алма, береһендә - йөҙөм, береһендә - сейә, береһендә - әфлисун һ.б. Әллә күпме төрҙәге сәскә, әллә күпме төрлө емештәр.*

**Ельциндың дәүләт ойошмаларында политик партияларҙы тыйыу тураһында указы. Демократия исеменән диктатураға табан аҙыммы?*

**Нурҙағы саң-туҙан. Тотош бүлмәгә нур тулғанда бер бөртөк туҙан күренмәй. Ә кескәй генә нур ҡараңғы бүлмәлә күпме туҙанды күрһәтә. Тормош та ҡайһы саҡта ал да гөл, ә айырым кешенең күҙенә ҡараһаң, күпме моң-һыҙланыу.*

**1.09.91. Йәкшәмбе.**

**15 миллионлыҡ армияның бер юлы тарҡалғаны йәки ҡамалып әсиргә төшкәне бармы тарихта? Юҡ, әлбиттә. Был бит Ватан һуғышында ике яҡтың да бер юлы тар-мар ителеүе йәки бер юлы юҡҡа сығыуы тигән һүҙ. Тормошта ундай хәлдәр булмай. Ә бына бөгөн булмаҡсы. КПСС бөгөн шундай хәлдә. Бер юлы шундай ғәскәрҙән баш тартҡан Горбачев һымаҡ бүтән юлбашсыны ла тарихтың әлегә тиклем күргәне юҡ ине. Батшаны халыҡтың күҙ алдында бәреп төшөргәндәр. Ә Горбачевты аҫтыртын ғына бик оҫта ҡолаттылар.*

**21.10.91. Дүшәмбе.**

**Китап магазинында булдым. Башҡортса 5-6 китап тора. Татарса күп. Ә ҡаҙаҡса менән донъя тулған. Китаптарға заказ биреү тәртибе тураһында һөйләшергә Облпотребсоюзға барғайным, уның буйынса эшләүсе кеше урынында булмай сыҡты. Беҙҙең китаптарҙың, Ырымбурға килеүенән дә бигерәк, райондарға, ауылдарға етеүе ҡиммәтерәк.*

**Хәҙер күп нәмә алдан ҡурҡытыуға ҡорола, халыҡты алдан шуға әҙерләйҙәр, хатта алдап әтәрәләр һымаҡ. Хәҙер хаҡтарҙы арттырған өсөн Павловты ҡәһәрләйҙәр. Ә бит алдан уҡ был сараның ҡотолғоһоҙлоғо хаҡында күпме ҡыҫҡырҙылар. Әле буласаҡ эшһеҙлек, аслыҡ, яланғаслыҡ, йылы етмәйәсәге, ҡыйралыштар, хатта Граждандар һуғышы тураһында күпме ҡотҡо таратыуҙар, күпме тамаҡ ярыу. Шуларҙы махсус рәүештә халыҡтың аңына һеңдерергә тырышалар. Аҙаҡ шулар була ҡалһа, кемделер ғәйепләүе еңел буласаҡ бит.*

**10.11.91. Йәкшәмбе.**

**Байрам да иҫән-һау үтеп китте. Октябрь тантаналары менән хушлашыу ошо буламы икән инде? Хәҙер «Октябрь переворотьы» тип кенә ебәрәләр. 7-һендә Ельцин коммунистарҙы тыйып указ сығарҙы. Бына ниндәйерәк ул яңы демократия!*

**Кисә толчокта (ипподромда), торговый центрҙа йөрөп, хайран*

*булып ҡайттыҡ. Былай булһа, ябай халыҡ нисек йәшәр? Етмәһә, тағы ла, хаҡ арттырыу мотлаҡ, тип лаф оралар илде етәкләүселәр, дөрөҫөрәге, упҡынға этеүселәр. Ил тарҡалыуҙың сигенә етте кеүек, ә бит асылда былар барыһы ла фажиғәләрҙең башы ғына кеүек. Уйлаһаң уйылдыра, ҡулдан ҡәләм төшөп китә, яҙаһы ереңдән, ни мәғәнә тип, яҙмаҫ булаһың.*

*Ил тарҡалғандан тарҡалыр,*
*Аҙғандан аҙыр һаман.*
*Шиғыр яҙыр заманмы ни!*
*Аҡылдан яҙыр заман!*

*Салауат Низаметдинов, гимн яҙайыҡ, тип шылтыратҡайны. Әле гимн яҙыр саҡмы, реквием яҙыр заман.*

*Кемдәр йәнен фиҙа ҡыла,*
*Кемдәр бөгөн файҙа ҡыла.*

*80-се йылдарҙағы блокнотта, «Ер менән күк араһында» – ошо исемдә пьеса яҙырға ине, тигәнерәк яҙыуға тап булдым. Бөгөн яҙырға кәрәк ул әҫәрҙе. Бына бөгөн беҙ ер менән күк араһында аҫылынып торабыҙ.*

*Әрәм генә булды кем өсөн*
*Бар хазинаң, алтын-көмөшөң?*

**17.11.91. Йәкшәмбе. Ырымбур.**

**Ельцин, теләгәнсә йотоғоҙ, тигәйне, хәҙер үҙе беҙҙең президентты йотмаҡсы – улай ғына булһа икән. Ул милли мөстәҡиллекте бөтөнләйе менән йотмаҡсы.*

**19.05.92. Шишәмбе.**

**Донъя тағы ла иҫ киткес. Урам тулы матурлыҡ. Ҡыҙҙар миниҙың да иң минимумын кейәләр, йөрәкте максимум яндыралар.*

*Яҙҙар һайын ҡыҙҙар тоҡанамы,*
*Ялмап ала ҡыҙҙар ялҡыны...*
*Өфө һылыуҙары,*
*Әгәр диоксин ағыуламаһа,*
*Әгәр төтөн-коромдар ыҫламаһа,*
*Нисегерәк балҡыр инегеҙ һеҙ!?*

**Каруанһарай тураһындағы мәҡәләгә тотонам. Әле ҡайһы бер нәмәләр һыҙғыланым. Күҙ алдына килә башланы.*

**31.05.92. Йәкшәмбе.**

**Праздники украли! Байрамдарыбыҙҙы урлағандар! Йолаларыбыҙҙы туҙҙырғандар! Ҡайындарыбыҙ ҙа, ҡыштарыбыҙ ҙа, урмандарыбыҙ ҙа, яландарыбыҙ ҙа – русский! Хатта сәйебеҙ ҙә русский! Ә бына ялҡаулыҡ, наҙанлыҡ, тупаҫлыҡ, ҡырағайлыҡ булһа – улары мотлаҡ башкирский!*

*Западная цивилизация, восточное коварство – был һүҙҙәре генә лә ни тиклем һауалы!*

*Үҙгәртеп ҡороуға, дөрөҫөрәге, илде, халыҡты ҡырыуға, тарҡатыуға*

*һигеҙенсе йыл китте. Ә ошо арала рус әҙәбиәтендә һиҙелерлек күренеш, ваҡиға булырлыҡ яңы әҫәрҙең күренгәне юҡ. «Тартма»нан алынғандары, сик аша килтерелгәндәре күптән ялҡытты. Чернуха, порнуха тигәндәре хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ.*

*Был яҡтан беҙҙә хәл бер ни тиклем яҡшыраҡ. Тарихҡа инеү бар, бөгөнгө хәл-мәсьәләләрҙе ҡыйыу күтәреү бар. Шиғриәттә яңылыҡтар бар. Милләттең күп нәмәгә күҙе асыла: был – үҙе үк тарихи ҡаҙаныш.*

**3.06.92. Шаршамбы.**

**Уйлайым-уйлайым да, нишләһәң дә аңлап булмай, баш етмәй. Нимә булды, ниңә ил был хәлгә төштө? Ярар, элек хаталар етерлек булды. Ләкин уларҙан һабаҡ алыу юҡ, хата өҫтөнә хата өйөлә, улар өсөн тағы ла уҙғандар гәйепләнә. Ә һуңғы йылдарҙағы хәлдәрҙе объектив анализлау, фекер уртаҡлашыу, күмәкләп аңларға, баһаларға, ниндәйҙер һығымталар яһарға, саралар күрергә тырышыу юҡ. Амбиция, власть өсөн көрәш. Ельцин һ.б. Горбачевты йығыр өсөн халыҡты, бигерәк тә шахтерҙарҙы забастовкаларға ҡоторттолар ҙа хәҙер үҙҙәре уларҙың теҙгенендә. Союзды тарҡатыу, бумеранг булып, Россия Федерацияһына бәрә. Улар «чем хуже, тем лучше» принцибы менән йәшәй, күрәһең. Ил тиҙерәк тарҡалһа, халыҡ тиҙерәк хәлдән тайһа, баштаҡ итеү шул тиклем еңелерәк буласаҡ. Хәләл тире менән мал тапҡан кешенең көсө етмәҫлек билет хаҡтары, уҡыусыны асылда газета-журналдарҙан мәхрүм ителгән хәлгә еткереү – былар бит барыһы ла кешене кешенән айыра, шәхесте ярлыландыра, аҙаҡ сиктә халыҡты аңра итә.*

*Приватизация талауға әйләнәсәк, һәм беҙҙең милләттең бөтөнләй буш ҡул менән ҡалыуы бар. Иң ҡурҡынысы бына нимәлә.*

**14.06.92. Йәкшәмбе.**

**Һабантурғайҙың моңо түгелә, ә үҙен күреүе ҡыйын. Һандуғасты бигерәк тә. Ә бына ҡарға күҙгә күренеп ҡарҡылдай. Һүҙеңде халыҡ күңеленә еткерер өсөн халыҡтың күҙенә кереп барыу бер ҙә мотлаҡ түгел.*

**14.07.92. Шишәмбе.**

**Бабич тураһында иҫтәлектәр китабы аҡрынлап ҡалыная бара.*

**«Йәшлек»тә (9.07.92.) яҙыусыларҙың йәштәр (журналистар) менән һөйләшеүенең, редакциялағы түңәрәк өҫтәлдең отчеты баҫылған (яҙыусы, заман, йәштәр). Мостай ағай бына нимә ти: «Үткәндәрҙе гел ҡарарға буяу дөрөҫ түгел. Һәҙиә Дәүләтшинаға, Рәми Ғариповҡа юл бирмәгәндәр, тигән ҡараш йәшәп килә. Улар юғары шәхестәр ине. Гел ҡаҡҡыланған, типкеләнгән итеп һүрәтләү уларҙы кәмһетә». Уны Роберт Байымов йөпләй: «Юбилей көндәрендә Рәмиҙең тормошон дөрөҫ яҡтыртманылар. Ниңә, хәҙер беҙ Салауатты ла гел ҡолаҡ-танауы ҡырҡылған, ситлектә килеш иҫтә һаҡлайыҡмы ни? Рәми меҫкен булһа, обкомдарға барып көрәшеп йөрөй алмаҫ ине».*

*Ниндәй демагогия! Юбилей ваҡытында Рәмиҙе меҫкен тип кем һүҙ әйтте икән? Ниңә бындай сафсата менән уҡыусының башын ҡатырырға? Ҡара һин уны, дөрөҫлөк нисек оҡшамай, һаман да барыһы ла ал*

*да гөл булған, тип ышандырырға тырышалар. Әйтерһең дә, Һәҙиә апайҙың фажиғәһе булмаған, әйтерһең дә, Рәмиҙе аҙ шельмовать иткәндәр. Юҡ, улар бер ҡасан да меҫкен булмаған, меҫкен итергә тырышып, күпме ауырлыҡтар өймәһендәр, донъянан ғорур көйө киткәндәр. Ләкин улар хаҡындағы хәҡиҡәтте асыу һаман да кемдәргәлер оҡшамай.*

**Ике мөсәл – Бабич ғүмере.*

*Бабичты татар тормошонан айырырға ярамай. Ләкин уның бәғерен башҡорт милләтенең һыҙланыуынан да нығыраҡ һыҙланыу бер ҡасан да телеп үтмәгән. Милләттең иң тантаналы һәм иң фажиғәле сәғәттәрендә шағиры уның менән булған, шул һыҙланыуҙар, яныуҙар эсендә шәһит киткән.*

**22.10.92. Кесаҙна.**

**Бабич хаҡында замандаштарының иҫтәлектәрен уҡығанда, бер нәмәне нығыраҡ аңлай бараһың, шуға күңел нығыраҡ һыҙлана. Шағирҙың күпме замандаштарын, туғандарын яҙмыш ситкә һөргән, күбеһе Урта Азия, Ҡаҙағстан һ.б. яҡтарға, сит өлкәләргә китергә мәжбүр булған. Бер туғандары, иптәштәре Рәхмәти, Ченәкәй, Йәрмәкәй, Бәшири һ.б. Вәлидиҙе әйтеп тораһы ла юҡ. Беҙҙә эмиграция асылда булмаған кеүек. Ә был күренеш эмиграция түгелме ни? Күпме уҡымышлы, зирәк халыҡ ситкә таралған бит.*

*Уйлап ҡараһаң, был эмиграция бөгөн дә дауам итә, милләтебеҙ йөҙәр меңләп ситкә ағыла.*

**27.10.92. Йома.**

**Кисә Самат, Рәшит Солтангәрәев урамда һөйләшеп байтаҡ йөрөнөк. Саматҡа ҡарап ҡыуанаһың да, һыҙланаһың да! Сабый ихласлығын һаҡлаған ошондай изге йәндәр арабыҙҙа тағы ла бармы икән? Егеттәрҙең һәр береһен төндәр буйы барлап сығам, нимә эшләп йөрөйҙәр икән тип, – шулай тип һөйләй. Һис бер көнсөллөк, тарлыҡ юҡ, күңелендә ҡара юҡ. Бөрйән редакцияһында иң аҙ эш хаҡын миңә тәғәйенләгеҙ, һеҙҙең ғаилә, бала-сағаларығыҙ бар, тигән. Бындай Дон-Кихоттарҙы бөгөн көндөҙ сыра яғып та эҙләп таба алмаҫһың. Йөрәк һыҙландырғаны: бигерәк ҡарауһыҙ, ауыр йәшәй, бөтөрөнгән, һаулығы насар күренә. Беззащитный Алла бәндәһе. Әле килгәнендә, гәҙәттәгесә, Руслан Мәҡсүтовҡа барған. Ундағы ҡоҙғондар бер-ике көндә Саматтың 4 меңен елгәргәндәр. Хәҙер үҙе, киске поезды көтөп, урамда ҡаңғырып йөрөй.*

**24.11.92. Шишәмбе.**

**26 – 28 Балтачта Батырша тантанаһы булды. Әле уның хатын яңынан уҡып сыҡтым да, күңелгә әллә нисек булып китте. Күпме халыҡтарҙы дин өсөн яуға өндәгән дә үҙе урманға ҡасҡан. Унда ҡатыны менән балаларын ташлап китә, юлдашы, тоғро шәкерте Яхъяны тотҡанда ҡасып-йәшенеп ҡала. Ә инде халыҡ күтәрелгәндә, барлыҡ Башҡортостан ҡуҙғалғанда ҡурҡып-ҡаушап ҡалыуын әйтеп тораһы ла юҡ. Башҡортостандағы күтәрелештәрҙә булғанмы бындай хыянатсы юлбашсы? Бик ҡаршылыҡлы, фажиғәле шәхес.*

*Ләкин хаты, һис шикһеҙ, ҡиммәтле документ. Ғәжәп халыҡсан тел, хәл-ваҡиғаларҙың бирелешендә бик нескә психологизм һәм шул уҡ ваҡытта тарихи дөрөҫлөк.*

**8.12.92. Шишәмбе.**

**Айлы аяҙ төндәр. Уяныб китһәң, ай, Есенин әйтмешләй, тәҙрәнән инеп килгәндәй.*

**8.04.93. Кесаҙна.**

**Кисә мунсаға барҙым. Хәҙер мунса ла парламент һымаҡ, ундағы кешеләр боронғо тогалағы йәки ялангас сенаторҙарҙы хәтерләткән депутаттар һымаҡ. Бөтә һүҙ политика, хаҡтар, президенттар, спикерҙар, уҙған менән бөгөнгөнө сағыштырыуҙар һ.б. тураһында. Элек бисә-сәсә, шешә һ.б. тураһында әтәк-сәтәк анекдоттар бында күп була торғайны, хәҙер барыһын да политика күмеп китте.*

**14.04.93. Шаршамбы.**

**Референдум алдындағы фарс ҡыҙғандан-ҡыҙа, Ельцин ояттһыҙланғандан-оятһыҙлана бара. Әле студенттарға, әле пенсионерҙарға, әле шахтерҙарға, әле тағы әллә кемдәргә әллә нәмәләр вәғәҙәләр итеп туҡтауһыҙ алдай, ҡыуыҡ указдар осора. Инде был юлы ла был проститут үтеп китһә, халыҡҡа ла, политикаға ла бер ышанысым ҡалмаясаҡ.*

**3.08.93. Шишәмбе.**

**Донъяла, беҙҙең элекке ватаныбыҙҙа күпме ҡыйралыш, ҡан ҡойош... Үҙебеҙҙең еребеҙҙә иң ҙур байлығыбыҙ – тыныслыҡ, үҙ-ара татыу йәшәү. Ыҙғыш-тартыш көҫәүсе Яуышевтар, Аринindар күпме тырышһа ла, Аллаға шөкөр, беҙҙең халыҡтар барыбер сабыр, аҡыллы.*

*Бер кешенең аҡылдан шашыуы ни тиклем оло ҡайғы. Ә тотош милләттәрҙең зиһенен юйыуы, тотош халыҡтарҙың психоз хәленә килеп етеүе – быныһы донъя күләмендәге ҡот осҡос фажиғә.*

**21.10.93. Кесаҙна.**

**Ельциндың оятһыҙлығы сигенән сыға. 3-4 октябрҙә тағы ла «путч» ойошторорға мәжбүр итте. Август «путч»ынан һуң коммунистарҙы ҡыйратҡайны, хәҙер советтарҙы борхота башланы. Башҡортостанға губернатор ебәрмәксе. Быныһы ла барып сыҡһа, башҡортҡа көн ҡалмаясаҡ. Азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелеһе ҡала. Үлгәнең артығыраҡ.*

*Урыҫ ғүмер буйы башҡа халыҡтар иҫәбенә артҡан, уларҙы көсләп суҡындырған, йотҡан. Восстаниеларҙан һуң күпме башҡорт меңәрләп, унар меңәрләп язалауҙан тыш, ҡатындар, балалар урыҫ түрәләренә, офицерҙарына таратып бирелгән. Урыҫ үҙенең ҡанына әллә күпме халыҡтарҙың ҡайнар ҡанын ҡушҡан. Әле лә шул дауам итә, тик башҡа формаларҙа.*

**Кешенең кеше башын ашауы ҙур яуызлыҡ, ләкин көнсөллөк, яһиллыҡ, тәкәбберлек, ике йөҙлөлөк һ.б. аламалыҡтар арҡаһында кешенең үҙ-үҙен ашап йәшәүе ни тиклем ҙур бәхетһеҙлек?*

**9.03.94. Шаршамбы.**

**Рәмилә һөйләй: Октябрскийҙа өс балалы ҡатынды аҫылынған еренән алып ҡалалар. Теге ҡатын, ниңә мине ҡотҡарҙығыҙ, балаларымдың астан үлгәнен күргәнсе, үҙем үлер инем, тип илай, ти. Комиссия өйөнә барып ҡараһа, бер тамсы ризыҡ тапмағандар. Бына нимәгә килтереп терәне Горбачевтар, Ельциндар һ.б. демократ йораттары.*

**2.08.94. Шишәмбе.**

**Ҡартлыҡ килеп, ғүмер бөтөүҙән ҡурҡмайым, оҙаҡ йәшәп, күпте күреп, донъяның мәғәнәһеҙлеген аңлап бөтөрмөн, тип ҡурҡам.*

**10.09.94. Шәмбе.**

**Баҡсала, ямғырлы кистә, Булат Рафиҡовта табын (8.08). Алтмыш йәше.*

*Быйылғы ямғырҙарҙың шул тиклем ныҡ яуыуҙары. Мәҫәлән, 25 августа баҡсаға барғанда ер һытылып, һыуы сәсрәп ята ине. Ундайҙы бында күргән юҡ ине әле.*

*Быйылғы йәй бигерәк холоҡһоҙ. Әҙерәк айнып, кире иҫергән эскесе һымаҡ... Әле генә ипкә килеп, яңынан ҡылтайған үсексән бисә һымаҡ...*

**Ҡайһы саҡта, үткәндәргә ҡарап, ул саҡтағы хаталарҙы, бер ҡатлылыҡтарҙы уйлап аптыраған булабыҙ. Бөгөн килеп, бөтәһен дә аңлайбыҙ, йәнәһе, барыһын да дөрөҫ кенә эшләйбеҙ, йәнәһе. Бер нисә көндән бөгөнгө ахмаҡлыҡтарыбыҙҙы уйлап аптыраясаҡбыҙ бит, ғүмерҙәр булһа...*

**26.09.94. Дүшәмбе.**

**Йома көн Нефтселәр һарайында Булат Рафиҡовтың юбилей кисәһе үтте. Халыҡ шығырым тулғайны. Булаттың йомғаҡлау һүҙендә «бөгөн эйәрҙән башҡортто шешәбикә һөйрәп төшөрә» тигән бик урынлы фекер.*

**Өфө араҡы-ликер заводына йөҙ йыл! Йәнәһе, Уралда иң ҙуры! Бына нимә менән маҡтанаһы ғына ҡалды!*

**22.11.94. Шишәмбе.**

**Милләттең сәңгелдәге буш булһа, иң оло фажиғә. Әлегә ул, Аллаға шөкөр, буш түгел. Ләкин күпме сәңгелдәк йырһыҙ бәүелә, күпме сабый бишек йырын ишетмәйенсә үҫә. Был һуң үҙе үк милләттең буш сәңгелдәк фажиғәһенең башы түгелме ни?*

**23.11.94. Шаршамбы.**

**Йылан һәм ташбаҡа. Береһе йыл да тиерлек тиреһен алмаштыра. Икенсеһе ғүмере буйы ҡабырсығын – ҡалҡанын күтәреп йөрөй. Ваҡытҡа ике төрлө мөнәсәбәт, уның менән ике төрлө бәйләнеш. Шағирҙа шуларҙың икеһе лә бар: ул көн һайын яңыра һәм ғүмергә үҙе булып ҡала.*

**26.12.94. Шишәмбе.**

**Чечняға ҡаршы Россия хакимдары, Ельцин енәйәт эшләй, уны быуа,*

*ҡанын ҡоя. Элекке осорҙа Ер шарының берәй урынында ошондай ғәзелһеҙ һуғыш башланһа, матбуғатта тиҙ генә нәфрәт һүҙе сыға ине, шиғыр баҫыла ине. Ә Чечнялағы ваҡиғалар хаҡында бөгөн шиғыр күренмәй. Элек ситтәге хәлдәргә йөрәгебеҙ һыҙланһа, бөгөн илдәге фажиғәләргә күнегеп барабыҙмы әллә? Һуғыш, ҡан ҡойош кеше аңында ғәҙәти күренешкә әйләнеп барамы әллә? Бына шуныһы бигерәк тә ҡурҡыныс.*

**14.02.95. Шишәмбе.**

**Халыҡ юҡ, тип зарланыуҙар йышая. Халыҡ барыбер уяныу, күтәрелеү юлында. Йәмһеҙ күренештәр етерлек, әлбиттә. Ләкин яҡшылыҡты күрергә, күберәк шуны дәртләндерергә кәрәк бит.*

*Халыҡ бөтә, тип зарланған кеше Бабич кисәләрендәге (Өфө, Дүртөйлө, Йылайыр, Мәләүез һ.б.) тамашасыларға ҡараһын ине.*

*Опера театрындағы кисәлә Рәхимов башлап һүҙ әйтте. Унан һуң мин доклад һөйләнем. Яҙыусыларҙан Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Ғәзим Шафиҡов сығыш яһаны. Минең докладты, Ғәзимдең сығышын әллә күпме алҡышлап ҡотланылар.*

**22.03.95. Шаршамбы.**

**Динис вафат булды, 13-нән 14-нә төндә мин төнгө икенсе яртыла тороп, дүртенсе яртыға тиклем эшләп ултырғайным. Төнгө өстә Динис 21-се больницаның реанимация бүлегендә китеп барған.*

*Был тиклем ярһыуҙары, тулауҙары юҡҡа булмаған икән шул...*

*Мине ерләү комиссияһы рәйесе итеп ҡуйҙылар. 16-һында ерләгәндә көн бик йылы, ҡояшлы булды. Рәхимов һ.б. етәкселәр килде. Ә халыҡтың күплеге – быңдайҙы әле күргән юҡ. Рәми ағайҙы оҙатҡанда ла кеше күп ине, тик былай уҡ түгел ине.*

*Ләхеттең таҡталар менән көпләнеп ҡалғанын ҡарап торҙом. Кешенең мәңгелеккә шулай яңғыҙ ятып ҡалғанын әлегәсә ап-асыҡ күҙәтеп торғаным юҡ ине. Айҙарҙы ҡуйғанда ла улай булманы.*

**24.08.95. Кесаҙна.**

**Кисә бик шатлыҡлы көн булды. Ниһәйәт, Бабичтың альбомын ҡулға алдым. Әлбиттә, полиграфик яҡтан бик шәп итеп эшләгәндә, яҡшыраҡ ҡағыҙ тапҡанда, башҡа урында баҫҡанда иҫ киткес альбом булыр ине. Ҡаҙаҡтар «Абай иле» тигән альбомды Прагала баҫтырғандар, хайран ҡалырлыҡ китап.*

*Бабичта мин туплаған материал күпкә бай, слайдтар ҙа насар түгел. Әммә күңелдә барыбер юшҡын ҡала.*

*Ярар, ошо көйө сығыуы ла – беҙҙең тормошта тарихи ваҡиға ул. Әҙәбиәткә бәйле быңдай альбомдың беҙҙә әле бер ваҡытта ла булғаны юҡ бит.*

**Яҙыусылар союзында минең янға кемдәр генә килеп инмәй ҙә кемдәр генә шылтыратмай.*

*Динис әйтә торғайны, эх, рәхәт һиңә, Бикбай, тип. Институтта ғилми эш алып барыуы ла еңел түгел. Әммә унда үҙеңә үҙең хужаһың. Бында һиңә бөтәһе лә хужа булырға тырыша.*

**26.08.95. Шәмбе.**

**Бишкәккә Манастың мең йыллығына осоп китеп барабыҙ. Төнгө өстө үткәс ҡуҙғалып киттек. Әхмәт Сөләймәнов, Нияз Мәжитов, мин.*

**27.08.95. Йәкшәмбе.**

**Лоджиҙан Алатауҙың ҡарлы түбәләре күренә. Алматалағы ҡунаҡхананан уға бер яҡтан ҡараһам, бында килеп икенсе яҡтан ҡарарға насип булған. Ҡайһы яғынан ғына ҡараһаң да, Алатау бары – бер Алатау инде: мәғрур, сал, серле, үҙенә тартып, арбап, бейеклектәргә саҡырып тора.*

*Ә һуң ысын кеше лә, ысын бөйөклөк тә шулай түгелме ни? Ҡайһы яғынан ғына ҡараһаң да, ул барыбер аҫыл, ул барыбер һоҡландырғыс.*

*«Манас»тар, «Урал батыр»ҙар ҙа шулай бит. Ниндәй генә быуат ерлегенә баҫып, ниндәй генә күҙлектән ҡарама – улар барыбер бөйөк булып ҡала.*

*Бында Сыңғыҙ Айытматовты алла урынына күрәләр. Күп күргәҙмәләрҙе ул аса, һәр тантанала тиерлек һүҙ әйтә. Үҙе нисектер моңһоу күренә.*

**28.08.95. Дүшәмбе.**

**Бөгөн симпозиумдың пленар ултырышында сығыш яһап, сувенирҙы тапшырҙым. Бик урынлы булған. Бына тантаналы кисә бара, Акаевтың телмәренән һуң Алиев, Назарбаев, Кәримов, Демирель, Ниязов, Яров һөйләне. Былай ҙа байтаҡҡа һуҙылып бара.*

*Президиумда әллә нисә президент, башҡа халыҡ һәм тәүге рәттә ситтә генә Айытматов. Шул халыҡтың барыһын бизмәндең бер яғына өйөп, икенсе яғына Сыңғыҙҙы баҫтырһаң, кем еңер ине икән? Моғайын, Айытматов еңелмәҫ ине. Теге хакимдар бит барыһы ла ваҡытлыса, ә Сыңғыҙ – бик оҙаҡҡа. Әлбиттә, Назарбаевтар – милләттең бөгөнгө яҙмышы өсөн ҙур ваҡиғалар тыуҙырыуҙы етәкләгән кешеләр. Ләкин улар – локаль күренеш, ә Сыңғыҙ Айытматов – донъя, кешелек күләмендәге ваҡиға.*

**29.08.95. Шишәмбе.**

**Халыҡ күңелендәге тетрәүҙәр. Шифалы тетрәүҙәр, тектоник хәрәкәттәр. Нигеҙҙәр ҡаҡшамай, киреһенсә, үҙ урынына ултыра, тамырҙар яңыра, ләм ҡаплаған шишмәләр тетрәүҙәге үҙгәрештәр арҡаһында яңынан ер өҫтөнә атлығып килеп сыға. Кешеләр һәләк булмай, һибелмәй, тарҡалмай, киреһенсә, берләшә, үлгән хыялдар терелә, һынған күңелдәр яңынан ҡанатлана.*

*Манас байрамы – ҡырғыҙ милләтенең бөгөнгө рухи яңырыуы өсөн бына шундай тантана.*

*Беҙҙә лә «Урал батыр»ҙың ошондай байрамын мотлаҡ үткәрергә кәрәк.*

**24.12.95. Йәкшәмбе.**

**Берәүҙең күҙҙәре шундай матур, ә ул донъяны ла, кешеләрҙе лә шундай йәмһеҙ итеп күрә, сирканып, ерәнеп ҡарай.*

*Икенсе берәүҙең күҙҙәре, русса әйткәндә, так себе, ә ул донъяны шундай матур итеп күрә, кешеләргә һоҡланып ҡарай, тормошто яратып туймай.*

**19.01.96. Шишәмбе.**

**Ялда ейәндәр килеп китте. Бик шаяндар, һығышып та китәләр, ныҡ ҙурайып баралар.*

**Динистең иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса һәйбәт ҡарар ҡабул ителде. Тиҙерәк тормошҡа ашырырға кәрәк.*

**Крәҫтиән халҡының тыныслығы, тигеҙлеге, шул уҡ ваҡытта йыйнаҡ, өлгөр булыуы уның йәшәү рәүешенән килә. Сәсеү, урыу, йорт һалыу ваҡыттарында өлгөр, берҙәм булмай ҡара.*

**15.01.96. Дүшәмбе.**

**Бер мәҡәлде ике төрлө әйтәләр:*

*«Иртәгәһен ишәк ҡайғыртҡан».*
*«Иртәгәһен ишәк тә ҡайғыртҡан».*

*Бында иртәгәгә ике төрлө мөнәсәбәт: 1) Иртәгәне хәстәрләп йәшәү. 2) Иртәгәгә ҡул һелтәү. Хатта өсөнсө нескәлекте лә тойорға мөмкин: барыһын да иртәгәгә япһарма, бөгөнгөңдө нығыраҡ уйлап йәшә. Иртәгә лә ваҡыт барыбер булмаясаҡ ул, булмаясаҡ.*

**22.01.96. Дүшәмбе.**

**Бөгөн бишенсе яртынан тороп, Б. Рафиҡовтың «Көнгәк» романын уҡып сыҡтым. Башҡортса роман-газетаның тәүге ҡарлуғасы булып донъя күргән баҫма.*

*Халыҡтың үҙ тарихын нығыраҡ белеү өсөн бик кәрәк, бик һәйбәт китап. Осор ҙа, булған материалдар ҙа ныҡ ҡына өйрәнелгән. Характерҙар, яҙмыштар ҙа бар.*

**23.01.96.**

**Йәкшәмбе көн иртәнсәк Ҡасим ағай Аҙнабаев китеп барған. Кискә табан янында ултырҙыҡ. Журналистар союзына, Матбуғат министрлығына хәбәр иттем. Кисә лә инеп сыҡтым, инәйем Ҡөрьән уҡып ултырҙы.*

**Был донъяның тәки гәжәп хәлдәре бар, был тәүлектең тәки гәжәп мәлдәре бар! Ошолай тип йышыраҡ әйтергә яҙһын ине! Бөгөн бишенсе яртыла тороп ошо дәфтәргә ҡайһы бер ҡағыҙ киҫәктәрендәге «төртөп ҡуйған»ларҙы яҙып ҡуйыйым тиһәм, алтыға тиклем ошо шиғыр яҙылды ла ҡуйҙы. Бөтөнләй уйлаған да юҡ ине: «Йылмайыу» – Ҡасим Аҙнабаев иҫтәлегенә.*

**27.01.96. Шәмбе.**

**Кисә Фәнил Әсәнов ағайҙың өйөнә иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйҙыҡ. Халыҡ байтаҡ йыйылғайны. Кисен телевидениенан күрһәттеләр. Табында бик ихлас һөйләшеп ултырҙыҡ.*

**29.01.96. Дүшәмбе.**

**Переделкиноға элек ашҡынып килә торғайным. Әле әллә нисек моңһоу булып китте.*

**Ҡыҙыҡ ҡына параллель: Бабич һәм Есенин. Тыуған йылдары, осорҙары, халыҡтарының ҡаһарман яҡтары тап килә. Әммә Бабич үлгәндән һуң Есенин ете йылға яҡын ижад итә. Был арала Бабич нимәләр генә тыуҙырмаҫ ине. 1919 йылдың башындағы Бабич менән шул ваҡыттағы Есенинды сағыштырып ҡара. Бабичтың юлы инде фажиғәле тамамланған, ә Есенин үҙенең иң аҫыл әҫәрҙәрен Бабич һәләк булғандан һуң яҙған бит. Ошо бәхет Бабичҡа ла бирелгән булһа, нимәләр генә донъяға килмәҫ ине...*

*Ләкин ижадта бындай фараз итеүҙәр менән генә бер нәмәне лә тергеҙеп булмай. Бабич та, Есенин да – икеһе лә тарихи милли күренеш, икеһе лә халыҡ шағирҙары. Яҙмыш башҡорт халҡына Бабичты бирмәҫкә лә мөмкин ине бит әле. Ә биргән икән, шуныһы бәхет, шуныһына рәхмәт.*

**2.02.96. Йома.**

**30-ында төштән һуң Мәскәү-Чебоксар поезында сыуаш башҡалаһына килеп еттем. Поезд таҙа, йылы.*

*31-ендә иртәнге етелә Чебоксарҙан автобус менән Ҡазанға киттем, Яр Саллы маршруты. Оло машинала 5 кеше килдек. Ара яҡын, дүрт сәғәт тә үтмәне.*

*Көн тамамланыуға меңәр һорауҙарҙан баш әйләнә. Ике һорау ҡала: ошондай ығы-зығылар йолҡҡолағанда кеше күңелендә нисек мөхәббәткә урын ҡала? Һөйөү өсөн генә яратылған кеше күңеле нисек шул юҡ-бар ығы-зығыларға үҙендә урын бирә, шулар менән ваҡлана?*

**9.04.96. Шишәмбе.**

**Күпселек ҡайҙа – хаҡлыҡ шунда, күпселек ҡайҙа – көс шунда. Гел генә шулай булһа икән дә бит! Хәҙер күпселек эскелектә, улар хаҡлы, улар күпселек булып сығамы ни? Иң ауыр, иң аяныс хаҡлылыҡ – яңғыҙ кешенең йәки аҙсылыҡтың хаҡлы булыуы бит ул.*

**Хәҙер ологайып килгәндә шағирҙар фамилияларын ҡыҫҡарталар, үҙгәртәләр. Белмәйем, быныһы – һәр кемдең үҙ эше. Шулай ҙа илле-алтмышҡа еткәс, бабаға барған, сөннәткә ултырған һымаҡ күрәм быны.*

**18.04.96. Кесаҙна.**

**Әле бына килеп яңынан ентекләп шағирҙың донъяһына иҫтәлектәр аша ла, уның әҫәрҙәре аша ла инә башлағас, күп нәмә башҡасараҡ күренә.*

*Күрәһең, ҡайғы ла үҙенсә эйфорияға яҡын бер кисереш, шағирҙы изгеләштереүҙән иҫереү, илереү кәйефе тыуҙыралыр. Аҙаҡ Рәмизең китаптарын сығарып, кисәләрен үткәреп, исемдәр юллап, уны раҫлауҙағы беҙ яулаған тантана-байрамдар был эйфорияны тағы ла көсәйтеберәк ебәрҙе.*

*Ләкин бындай хәл мәңге дауам итә алмай. Айныу килә, айнығанда кәйефтең дә төрлө сағы, баш ауыртҡан ваҡыттар була.*

**21.04.96. Йәкшәмбе.**

**Профилакторийҙа яңы корпус төҙөйҙәр, миңә ҡаршы ғына, тәҙрәмдән 2-3 метрҙа ғына ташсылар эшләй. Төнгө ун бергәсә эшләйҙәр. Шау-шыуһыҙ ғына, сабыр ғына эшләүҙәрен беләләр. Көнө буйы шулай матур итеп, ҡойоп ҡуйған итеп кирбес теҙер өсөн күпме тырышлыҡ кәрәк, ысынын әйткәндә, миңә уны аңлауы ла ҡыйын. Ҡалҡып сыҡҡан йорттоң күпме кирбесе уның ҡулынан үткән, һәр береһен тотҡан, һәйбәтләп теҙгән-төҙәткән бит. Шуларға ҡарап, бер ҙә эшһеҙ ултырғы килмәй.*

*Икенсе яҡтан уйлап ҡараһаң, шағирҙың яҙмышы ла ошо ташсы эшенә нисектер оҡшаш бит. Шағирҙың йөрәген яндырып, зиһенен балҡытып, уның рухы аша үтмәгән берәй генә һүҙ бармы икән туған телдә? Ҡалдымы икән шундай берәй һүҙ? Бер генә түгел, нисә тапҡырҙар шағирҙы яндырып-тетрәтеп үтә улар.*

*Ярар ҙа ул, ташсының кирбестәре ҡул аҫтында, лайын да килтереп торалар. Ә шағирға һәр һүҙгә үҙ урынын табырға, уларҙың һәр береһен ҡат-ҡат эҙләргә тура килә. Шағир үҙе бер юлы ташсы ла, крансы ла, лай әҙерләүсе лә, прораб та, участка начальнигы ла, ошо йортто ҡағыҙҙа ижад иткән архитектор ҙа, уның һәр ҡоролмаларын планлаштырған инженер-төҙөүсе лә һ.б.*

*Көнө буйы баш күтәрмәй эшләгән ташсыларға ҡарап һоҡланамын, ә, уйлап ҡараһаң, шағир эше лә һоҡланырлыҡ икән дә. Ситтән ҡараһаң, ул ныҡыраҡ күренәлер, беҙ үҙебеҙ уға күнегеп бөткәнбеҙ һымаҡ.*

**22.05.96. Шаршамбы.**

**Кисә торлаҡ мәсьәләһенең осона сыҡтым һымаҡ. Аҡ йорттан «Солтановка, Тойғоновка, Вахитоваға» тигән фарман алып килдем. Наил Ғафаровҡа рәхмәт.*

**Динистең сәңгелдәге. Шул исемдә шиғыр яҙылыр һымаҡ. Музейға Динистең сәңгелдәген элеп ҡуйғандар. Бик ҡотло булған ул. Бер ғаиләнең бер-бер артлы өс балаһы тыуған да үлеп торған. Шунан Динистең сәңгелдәген шул ғаиләгә биргәндәр, алты балалары шул бишектә аунап үҫкән. Был сәңгелдәктә утыҙға яҡын сабыйҙы бәүеткәндәр.*

**25.07.96. Кесаҙна.**

**Ер мәсьәләһе – кешелектең мәңгелек мәсьәләһе. Донъялағы барлыҡ һуғыштар асылда ер өсөн тартыштан башлана. Башҡорт тарихы был яҡтан бигерәк тә фажиғәле, шанлы ла, ҡанлы ла. Ер өсөн, ирек өсөн быуаттар буйына һуҙылған башҡорт күтәрелештәре, баштарын һалған ҡорбандар, яндырылған ауылдар...*

*Ә бына яңыраҡ осорҙар тураһында күпселек халыҡ бөтөнләй тиерлек белмәй. «Царь-освободитель» Александр II-нең реформалары, бигерәк тә башҡорт ғәскәренең таратылыуы беҙҙең аҫабалыҡ хоҡуҡтарына бик ныҡ ҡырын килтереп һуға, шунан һуң башҡорт ерҙәрен талауҙың айырыуса йыртҡыстарса, быуат аҙағында йәш Ульяновтың да асыуын килтергән яңы дәүере башлана, күренеш глобаль ҡолас ала.*

*Быуат башында япон һуғышы, революция ғәләмәттәре арҡаһында бер аҙ туҡтап торған был талауҙар Столыпин заманында яңынан башлана, яңыса, тағы ла мәкерлерәк юлдар менән дауам итә, көсәйә бара. Ошо осорҙа ер бәйеттәре, шиғырҙар тыуа.*

*Ләкин беҙ был политиканың, Столыпиндың ер сәйәсәтенең совет дәүерендә – егерменсе йылдарҙа бик оҫта һәм тағы ла мәкерлерәк дауам итеүе тураһында бөтөнләй белмәйбеҙ икән дә баһа! Һәр хәлдә, был хаҡта минең быға тиклем ишеткәнем юҡ ине.*

*Ҡыҙраста беҙ төшкән мәктәп директоры менән бер ихатала уның ҡайныһы йәшәй икән. Ғәҙәтемсә, иртүк тороп ишек алдында йөрөгәнемдә шул ағай менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Исемен-атын яҙып алмағанмын, Харис Мусин булһа кәрәк. 1913 йылғы, һуғышта Монголияла булған, һуғыш пенсияһы түләмәйҙәр, тип ҡат-ҡат зарланып алды.*

*Бына шул ағай үҙенең бала саҡтағы күргәндәрен һөйләп ултырҙы. Ҡыҙрастың әллә күпме иң һәйбәт ерҙәрен, хуторҙар төҙөйбөҙ, тип тирә-яҡтағы урыҫтарға таратып биргәндәр. Хуторҙар ойошор-ойошмаҫтан таралып бөткәндәр, ә ерҙәр урыҫ крәҫтиәндәренә элеккесә һатып та түгел, бөтөнләйгә бушлай, совет власының йомарт өләшеүе буйынса мәңгелеккә күскән. Был бит асылда – бик нескә сәйәсәт, милли иҙеүҙең, милләттең ерен тартып алыуҙың үтә лә хәйләкәр рәүештә дауам итеүе.*

*Һөҙөмтәлә ошо Ҡыҙрас ауылы, Асылы тирәһендәге башҡа башҡорт ауылдары ла бөтөнләй тиерлек ерһеҙ тороп ҡала.*

**26.07.96. Йома.**

**Көнө буйы йүгереп арыта. Йүгереүҙәреңдең файҙаһын күрһәң – бер хәл дә ул. Союз аппаратының эш хаҡы хәйерсе хәлендә. Шуны аҙыраҡ булһа ла арттырырға тип күпме сабам, әлегә бер ҙә алға китеш юҡ. Әгәр былай барһа, бер ҙә эшләргә перспектива ла, дәртләнер сәбәптәр ҙә күренмәй. Исмаһам, егелеп эшләрлек, йөктө тартып алып китерлек йәштәре лә бик күренмәй.*

**10.08.96. Шәмбе.**

**Библияла әйтелгәнсә, таштар ташлар заман һәм таштарҙы йыйыр заман. Таштар менән бәндәләр һуңғы йылдарҙа күп бәреште, хәҙер таштарҙы йыйыр заман етте. Тик ниндәй маҡсат менән? Яңынан таш бәрешер өсөнмө? Әле төҙөләсәк йортҡа бәләкәй генә булһа ла өлөш индерер өсөнмө?*

**30.08.96.**

**Бөгөн Зәйнәб апайҙың етеһендә булдыҡ. 24-ендә киткән, 27-һендә ерләнек. Мосолман зыяратында. Урыны шау таш.*

*Әлдә оҙатыу урынын «Нефтяник»та һөйләшкәнбеҙ. «Дом актера»ға халыҡтың бер өлөшө лә һыймаҫ ине. Әле оло һарайҙа ла тығын булды. Апайҙы халыҡ бик ҙурлап, ололап оҙатты. Республика, ҡала етәкселәре килде. Күп мәшәҡәттәрҙе, сығымдарҙы хөкүмәт үҙ өҫтөнә алды.*

**16.11.96. Шәмбе.**

**Тормош поезы, каруаны, ғүмер составы. Берәү йомшаҡ купела бара, икенсеһе товарняктың буферында саҡ-саҡ йәбешеп килә. Ләкин ваҡыт икеһен дә был поездан һелкеп ырғытасаҡ. Вагон араһында эләгеп килгәне, бәлки, оҙағыраҡ барыр әле...*

**30.11.96. Шәмбе.**

**Кисә Опера театрында Шәһит Хоҙайбирҙиндың йөҙ йыллығына арналған кисә матур үтте. Сығыш яһаным. Концерт ялҡытҡыс булманы, туйҙырған сығыштарҙан ҡотолғандар, үҙенсәлекле ҡоргандар. Йәштәр, уҡыусылар күп булды, һуңғы яруска тиклем ултырҙылар. Ҡайһы берәүҙәр, нимәгә был бала-сағаны тултырғандар, тип мыжып тора ине кейем биргән ерҙә. Шул бала-сағаны күберәк ылыҡтырырға кәрәк тә инде. Бындай кисәләр кем өсөн байрам, ә беҙҙең өсөн уларҙы ойоштороу – матурлыҡ аша тарихыбыҙҙы барлау, кешеләр күңелен сафландырыу, хәтерҙәрен яңыртыу. Был кисәләрҙең тәьҫир көсө вәғәҙәләрҙән, күңелһеҙ дәрестәрҙән көслөрәк.*

*Данлап һүҙ әйтә алыр кешеһе табылһа, халыҡ данлыраҡ була. Уның өсөн халҡыңдың данларлыҡ ҡаҙаныштары, сифаттары булырға тейеш, әлбиттә. Ләкин оло таланттар халыҡтарын донъя күләменә алып сыға. Мәҫәлән, Ғамзатов һәм авар халҡы, Кулиев һәм балҡар халҡы. Йыш ҡына күпкә ҙурыраҡ милләттәргә лә бындай өлөш теймәй, уларҙың булған данын донъяға еткерерлек һүҙ оҫталары булмай сыға. Мәҫәлән, Сыңғыҙ Айытматов ҡырғыҙ донъяһын бар ғәләмгә танытты. Мәҫәлән, төркмән донъяһы ла, моғайын, бик ҡыҙыҡлылыр, ләкин Берды Кербабаев романдары менән генә уны кешелек аңына еткереп булмай. Ә инде үзбәк халҡы ни тиклем оло һәм ҡеүәтле лә бит, ул Шәрәф Рәшидовтан бөйөгөрәк әҙиптәре тыуыуын һаман да көтә. Ә һуң беҙҙең башҡорт яҙмышы?*

**5.12.96. Кесаҙна.**

**Күпме даһи аҡылдар әллә ниндәй бөйөк уйҙар менән яналар, күпме даһи яҙыусылар, кеше яҙмышы тураһында борсолоп, төндәр йоҡламай, уның хәлен яҡшыртыу хаҡында әллә нимәләр яҙа, иҫбатлай, раҫлай. Һүҙенең көсһөҙлөгөн, үҙенең меҫкенлеген уйлап, эскегә бирелә, ауырыуға һабыша, ҡырағайға әйләнә, шәхесен, ғорурлығын юғалта, йөрәге ярылып йәки аҫылынып үлә.*

*Ә ниндәйҙер Гайдар бер көндә тотош дәүләт халҡын хәйерсегә әйләндерә, миллиондарҙың тинләп йыйған аҡсаһын көлгә әйләндереп, елгә осора.*

*Ә ниндәйҙер Чубайс бер көндә приватизация ғәләмәте менән халыҡ ҡулынан дәүләт милкен тартып ала, ил байлығын ил талаусылар ҡулына күсерә.*

*Ошоларҙан һуң шиғыр яҙып ҡара, кешеләрҙе ниндәйҙер яҡтылыҡҡа әйҙәп, матурлыҡ тәрбиәләп ҡара! Ҡәләм осонан тамырға торған шиғырҙы ла ҡайһы саҡта яҙғы килмәй. Унан кешеләргә ни файҙа, ул кемгә кәрәк, тип уйлайһың.*

**16.12.96. Дүшәмбе.**

**Тағы ла йыр ғәләмәттәре. Нисәнсе ҡат йырлайҙар, сама менән шулайыраҡ: «...күл буйында табып алдым пар ҡанат, һөйөү иҫтәлеге итеп, түшемә ҡуйҙым ҡаҙап...»*

*Шиғри техника тураһында әйтмәйем, деталдәргә иғтибар итегеҙ! Пар ҡанатты түшкә ҡаҙап ҡуйыу. Күҙ алдына килә лер: ниндәй карикатура! Ҡанат – крыло була. Табып алғанды ҡауырһын тиҙәр. «Ҡоймаҡты ҡанат менән майлау» тигән һүҙ ҙә бар, әлбиттә, ике ҡауырһынды түшкә ҡаҙап ҡуйыу ҙа бик көлкө бит әле.*

*Элек иғтибар итмәй инем, баҡһаң, был Буранбайҙың һүҙҙәре икән. Кемдән-кемдән, унан көтмәгәйнем.*

**22.12.96. Йәкшәмбе.**

**Ниһайәт, тарихыбыҙҙы төрлө яҡлап аңларға өйрәнә башланыҡ. Юғиһә или-или ине бит. Шәһит – һәйбәт, Вәлиди – дошман, йәки һуңғы ваҡытта киреһенсә Вәлиди – шәп, Шәһиттәр – насар. Тарих улай бер яҡлы түгел. Шәһит тә, Зәки ҙә бер маҡсат өсөн – Башҡортостан өсөн янған, шул ҡәғбәгә төрлөһө төрлө юлдан ынтылған.*

**3.01.97. Йома.**

**Мейе туҡтауһыҙ яңырып, ҡан аша кәрәк мәтдәләр менән тәьмин ителеп торғанда ғына тупланған информацияны үҙендә һаҡлай, яңылары менән тулылана ала.*

*Милләт тә үҙенең традициялары, тарихы, хәҙергеһе һ.б. бик күп сифаттары, компоненттары буйынса үҙенсә тере бер оло зиһен, рухи донъя бит. Ул үҙендә туплаған хазинаны һаҡлау һәм уға яңы мәғлүмәттәр, яңы ҡиммәттәр өҫтәр өсөн һәр саҡ тере булырға, күҙәнәктәрен туҡтауһыҙ яңыртырға, быуаттар теҙеменде үрелеп килгән сылбырҙы өҙмәҫкә тейеш.*

**4.01.97. Шәмбе.**

**Эй ҡөрьән сүрәләренең аяттарын матур, яғымлы тауыш менән уҡығандарында ғәрәп теленең шул тиклем дә йәнде арбарлыҡ илаһи яңғырашы! Мөхәммәт ғәләйһиссәләм ниндәй шағир һәм музыкант булған. Ҡөрьән һүҙе менән генә түгел, көйө, моңо менән дә бергә тыуғандыр бит! Эй, тыуған телде шул дәрәжәлә яңғырата алырлыҡ берәй даһи шәхес тыуһын ине!*

*Ҡөрьән сүрәләрен уҡығанда серлелек, беҙҙең ғәрәп телен белмәүебеҙ тылсым көсөн, арбау көсөн үҙенсә арттырмай микән? Телде аңлаған кешегә нисегерәк икән? Бәлки, тағы ла тәьҫирлерәктер? Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәнде кешеләргә еткерер өсөн ғәрәп телен юҡҡа ғына һайламағандыр бит.*

**Муса ғәләйһиссәләм тигәнгә рифма: Муса Ғәлигә сәләм. Тик «Муса Ғәли вәссәләм» була күрмәһен.*

**10.01.97. Йома.**

**Мин үҙ-үҙемде хөрмәт итмәй башлаһам, тимәк, мин шәхес булараҡ тарҡала, юғала, түбән тәгәрәй башлағанмын тигән һүҙ. Үҙеңде*

*үҙең күрә алмаған саҡтар һәр кемдә була. Кеше үҙенең битенә үҙе төкөрә алмай, уның үҙен-үҙе яҙалауҙары ла самалы. Ләкин үҙеңә үҙең хөрмәтеңде, ышаныстарыңды юғалтып, оҙаҡ йәшәп булмай. Кешенең барлыҡ кешеләргә лә ышанысы ҡалмаҫҡа мөмкин, әммә үҙенә ышанысы, моғайын, иң һуңынан һүнәлер. Шул саҡта ул үҙен-үҙе үлтерәлер. Был – кешенең үҙенә үҙе ҡылған иң ҙур, иң һуңғы яҙаһылыр.*

**3.02.97. Дүшәмбе.**

**30-ында Шишмәлә сәнғәт мәктәбе залында Динис Исламов кисәһе, яҡын дуҫтарынан Нәжиб Асанбаев булды. Атнабай бара алманы. Динис ағайҙың ҡустыһы Әҙһәм Исламов сығыш яһаны.*

*Атнабай Д. Исламовты, милләттең үгәйһетелгән балаһы, Ҡазанға китергә лә уйланы, тип яҙып сыҡҡайны. Әҙһәм ағай банкетта ошондай уйҙырмаларға ҡырҡа ҡаршы сығыш яһаны. Хеҙмәттә сағымда Прибалтикала диңгеҙ ярында бик һәйбәт шарттарҙа йәшәгәндә сағынғайным, Өфөһөҙ яҙа алмайым, тип килмәне, тип һөйләне.*

*Әле уның буклетын ҡарап ултырҙым. Йыл һайын (алтмышынсы йылдарҙа), йыл аралаш китабы сығып торған. Был яҡтан бер ҙә ҡыйырһытылмаған, Башҡортостандағы «иҙелгән татар» булып нужа һурпаһын эсеп йәшәмәгән. Яҙғаны халыҡҡа етеп торған, халыҡ уның яҙғандарын уҡып, һүҙенең бәҫен белеп торған.*

**11.02.97. Шишәмбе.**

**Батшаға рәхәт булһа, башҡаларға ҡыйын буласаҡ, халыҡҡа ҡыйын буласаҡ. Ил хужаһы тынғы белмәҫкә тейеш, шул саҡта илгә тыныслыҡ килер. Батша рәхәтлеккә, кәйеф-сафаларға сумһа, илдә тәртип бөтөр, ил ҡарауһыҙ булыр.*

*Әлбиттә, хафалы хәлдәр етерлек. Элекке күтәрелештәр ваҡытында халыҡ физик ҡырылған, кешеләре күҙ алдында үлтерелгән, яҙаланған, һөргөнгә ебәрелгән, ҡоллоҡҡа таратылған һ.б. Әммә нигеҙ ҡалған.*

*Бөгөн эштәр мәкерлерәк бара. Күҙ алдында берәү ҙә милләтенән йолҡоп алынмаған һымаҡ, әммә уны иплән кенә кимерәләр, күпме кешеләрен телһеҙгә, моңһоҙға, эскесегә, наркоманға әйләндерәләр. Ситкә таралыуҙар, сит милләт кешеһе менән ғаилә ҡороуҙар һ.б. – һуң былар башҡорт милләтен теләһә ниндәй боролоштарҙан һуң килгән бәләләрҙән дә нығыраҡ һура, имгәтә, йота түгелме ни? Элек физик ҡырылған, ере тартып алынған, ауылдар ер йөҙөнән юҡ ителгән. Әммә рух, иман, тел һаҡланып ҡалған.*

*Хәҙер рухты талау бара, элек ғаиләләр ҙә физик яҡтан таркатылған, хәҙер ул рухи яҡтан талана, ғаилә йортоноң таш нигеҙе түгел, рухи нигеҙе емерелә, милләт өйөндә, милли йорт-ғаиләләрҙә милләткә ят балалар үҫә. Бына ҡайҙа ул ҡурҡыныс.*

**3.03.97. Дүшәмбе.**

**Бер ерҙә ҡош һайрай, бер ерҙә ҡыуаҡ ҡыштырҙай, бер ерҙә йылға шаулай, бер ерҙә һыйыр баҡыра, ат кешнәй, ҡарға ҡарҡылдай, ҡарт ҡарғана, ҡарсыҡ һукрана, ҡыҙ көлә, бала илай, бүре олой, ел һыҙғыра, күк күкрәй, диңгеҙ шаулай, янар тауҙар атыла, ямғыр тыпылдай һ.б., һ.б.*

*Беҙгә генә былар барыһы ла тырым-тырағай һымаҡ. Тик Алла ғына, юғарғы илаһи аң ғына быларҙың берлеген, гармонияһын, бер-береһе менән тәбиғи үрелгәнлеген, бер уртаҡ моң хасил итеп бергә ҡушылғанлығын аңлай ала, шул матурлыҡты тоя һәм баһалай ала.*

**5.03.97. Шаршамбы.**

**Тоталар ҙа кәрәкһәнгә-кәрәкмәгәнгә яңы һүҙ ҡуллана башлайҙар. Бына һуңғы ваҡытта «виртуальный» тип радионан йыш һөйләй башланылар: «виртуальные новости» һ.б. Аптырағас, Ғәзим Шафиковҡа шылтыраттым. Ул да белмәй. Һүҙлектәрҙе аҡтара торғас, таптым: «возможный, булыуы мөмкин булған» тигәнерәк мәғәнәлә икән. Бөйөк рус теле лә бына шулай сүпләнә, ул да дәүләт һаҡлауына мохтаж. Был хаҡта бик үсал ғына һүҙҙәр, талаптар ҙа ишетелеп ҡуя, ә прессала, бигерәк тә радио, унан да бигерәк телевидениела, әхлаҡһыҙлыҡ, тупаҫлыҡ вакханалияһы дауам итә, ярһығандан ярһый, шашҡандан шаша.*

**16.03.97. Йәкшәмбе.**

**Кисен филармонияның ҙур залында Рәми Ғариповтың «Умырзая йыры» тигән ҡәҙер һәм хәтер кисәһе.*

*Кисә ғәжәп күтәренке рухта, бер тында үтте, йөкмәткеле, яҡты рухлы, һағышлы ла, фекерле лә булды. Хронометраж яғынан да иҫ киткес камил килеп сыҡты. Сценарийын һаҡлап алып ҡалырға кәрәк. Мин инеш һүҙемдә кисәгә тональность бирергә тырыштым, килеп сыҡты һымаҡ.*

*Кисә башланыр алдынан Мостай ағай: «Мин һинең менән йәшерен генә бәхәсләшеп алам әле, Рәми ҡыйырһытылып, меҫкен булып йәшәмәне», – тип әйтеп алды.*

*Эй, Мостай ағай, хөрмәтле остазыбыҙ! Кем һуң әле, Рәми Ғарипов меҫкен булды, тип әйтергә йыйына? Ләкин ниңә уның ҡыйырһытылғанын инҡар итергә тырышырға? Был бит – Мостай Кәримдең һәм шул ваҡыттағы башҡа яуаплы ағайҙарҙың үҙҙәренең вайымһыҙлыҡтарын аҡларға тырышыуҙары. Рәми Ғариповты ғәҙелһеҙ эҙәрлекләүҙәрҙән яҡлап ҡала алмауҙары хаҡында ла һүҙҙең килеп сығыуынан ҡурҡыу.*

*Рәми ағай тураһында китабымда был мәсьәләгә туҡталып, асыҡлыҡ индереп китәсәкмен, Алла бирһә!*

*Рәми кисәһе һымаҡ кисәләр – шағирға һынау, үҙебеҙгә, барлыҡ шиғриәткә ҙур һынау ул. Тамашасыларыбыҙ ниндәй кимәлдә, уларға беҙҙең һүҙ барып етәме? Бындай кисәләр – күңелдәребеҙҙе сафландырыу, сафтарыбыҙҙы барлау, барлығыбыҙҙы раҫлау, раҫлығыбыҙҙы нығытыу ҙа ул. Рухыбыҙҙы сыныҡтырыу, аң тәрбиәләү ул.*

**21.03.97. Йома.**

**19-ында университетта «Әҙәбиәт тарихы»ның 6-сы томы сығыуы уңайы менән башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрелде. Институт егерме йыл буйы ер һөрөп, егелеп эшләп, ошо томдарҙы донъяға сығарҙы. Университет кафедраһы уның*

*дан туртаһын эсмәксе. Әлеге беҙҙең институттың, бигерәк тә Ғайса ағайҙың һәлкәүлеге инде. Бүлек бөтөнләй бөтөп бара бит, исмаһам, ошо кәңәшмәне беҙҙә үткәреп йәки, университетта үткәргән хәлдә лә, кадрҙар мәсьәләһен үҙәккә ҡуйырға ине.*

*Ярар, нисек кенә булмаһын, был һөйләшеү бик кәрәк. Ректор Рәғиб Насретдин улының асып ебәреүе, саф башҡорт телендә беҙҙең мәсьәләләрҙе бик аңлап, төплө һүҙ әйтеүе, һөйләшеү ваҡытында бик урынлы актуаль мәсьәләләр буйынса һорауҙар биреп алып барыуы мине бик ҡыуандырҙы. Бына бит, үҙе технарь, ә фекерләүе «махсуслаштырылмаған», киң ҡараш менән йәшәй, үҙ һөнәренең ҡалыбына бикләнмәй, милләттең яҙмышы хаҡында ҙур ҡолас менән фекер йөрөтә.*

*Алты томлыҡ был тарих – бер нисә быуын ғалимдарҙың халыҡ алдында быуат аҙағындағы, мең йыллыҡ алдындағы хисап биреүе. Был – үҙенсә тантана ла, хисап көнө лә. Әммә был тарихты ижад иткән ғилми ҡеүәттең бик мөһим, талантлы бер өлөшө күптән вафат (Ким, Әнүр, Вафа, уларға тиклем Харисов ағай, Марат М.), бик күптәре бөгөн ологайған йәки шул рубежда.*

*Яңы быуатта, яңы мең йыллыҡта яңы быуын ғалимдары нимә әйтер? Ҡайҙа һуң ул өр-яңы быуын?*

**24.03.97. Дүшәмбе.**

**Сәнғәт һәм сәнәғәт – күпселек уҡыусыларыбыҙ был һүҙҙәрҙе бутай ҙа торғандыр. Бер генә хәреф айырып тора бит. Ләкин халыҡ тормошонда, бөгөнгө һәм киләсәк тарихи яҙмышыбыҙҙа улар айырылмаһын, милләтем сәнғәтен дә, сәнәғәтен дә үҫтерә алһын, шуларҙың ысын хужаһы, ижадсыһы булһын ине.*

**25.03.97. Шишәмбе.**

**Нисә йәшемдә икәнемде яҡшы беләм, мин был йәшкә еттем дәме ни, тип ҡыланмайым. Мин һаман да ошо йәштәменме ни әле, тип аптырап ҡуйған саҡтарым була. Сөнки мин был йәштәремә күптән еткәнем бар һымаҡ, әле күргән-кисергәндәремде күп тапҡырҙар кисергәнем бар һымаҡ. Хатта асылда бер ҡасан да булмаған ерҙәремде лә ҡасандыр күргән һымаҡмын, өр-яңы ситуацияларҙы ла ҡасандыр башымдан үткәргән һымаҡмын.*

*Тәүге көнөмдө йәшәгән кеүек йәшәгәнем бар, һуңғы көнөмдө йәшәгән кеүек йәшәгәнем бар.*

**13.04.97. Йәкшәмбе.**

**Бар кешеләрҙең дә бер тигеҙ булыуын, барлыҡ балаларҙың да бишкә генә уҡыуын теләйбеҙ. Тәбиғәт барыһын да тигеҙ генә яратмаған шул. Анау көндө урманда йөрөйөм, көнбағыш ярып барам. Көн матур. Сыуаҡ. Ҡариҙел ярына яҡынайып килгәндә, битемә һарыла яҙып, бер ҡош (турғай) уралып оса. Ем һорай, ем бир, ти, әлбиттә. Көнбағыш һиптем. Береһен эләктерҙе лә ситкә осто. Ашағас, тағы килеп етте. Тағы бер көнбағыш төшөрҙөм. Уныһын эләктерә һалып осто. Шулай ҡабатлай ҙа ҡабатлай. Унан күрмәксе, икенсе бер турғай янда урала. Уны саҡырып та ҡарайым, көнбағыш һибеп тә ҡарайым. Юҡ, килергә*

*ҡурҡа. Күпме тырыштым, тәки килмәне. Ә теге ҡыйыуы, отҡоро, зирәге ташыуын ғына белә. Бына шунан һуң һин уларҙы тигеҙләп ҡара.*

**25.06.97. Шаршамбы.**

**Төркиәт ҡоролтайында бер фекер айырыуса мөһим булды, Мусаев әйтте, ахыры: һәр республикала барлыҡ төркиҙәр берләшеп, төп халыҡтың телен үҫтерергә ярҙам итергә тейеш. Дәүләт теле кимәленә күтәрешергә тейеш, тип өҫтәр инем. Унан һуң, ниңә төркиҙәр менән генә сикләргә? Был изге эшкә республикалағы барлыҡ милләттәр тотонорға тейеш түгелме ни?*

**Кешене балыҡ менән бутап ҡуялар, башлыһын арзанға һатып ебәрәләр.*

**Ҡайһы саҡта йортта ла, эштә лә һис бер кәрәкмәгән әйберҙәр тора бирә. Уларға иғтибар итеүсе лә юҡ, алып ташлаһаң да, һиҙеүсе, уны юғалтыусы, эҙләүсе юҡ.*

*Тормошта ла шундай кешеләр була.*

**26.06.97. Кесаҙна.**

**Баланың үҫерен уйлап, кейемен үҙенән ҙурыраҡ итеп тегәләр, һатып алғанда ла шулайталар. Кеше бер мәл үҫеүҙән туҡтай һәм үҙенә таман ғына кейем һайларға тырыша.*

*Ә бына һәләтле шағирҙар, әҙиптәр ғүмерҙәре буйы үҫеүҙән туҡтамай. Һәр саҡ яңыса асыла бара. Бер саҡ уға тыуған төйәге, тыуған республикаһы тар була башлай, дан-хөрмәте, шөһрәте уның сиктәренән сыға.*

**12.08.97. Шишәмбе.**

**Ял көндәрендә баҡсаға халыҡ тула. Булаттар килде. Таңға табан Булаттың уты һүнә, минеке тоҡана.*

**Анау көндө быҫҡаҡлап яуған ямғырҙа һыйыр көтөүе йөрөй. Ул көтөүгә ямғырың бар ни ҙә юҡ ни... Хатта ямғырҙа малдар үҙҙәренсә рәхәтләнә һымаҡ. Себен-серәкәй, күгәүен дә эйәләмәй, үҙҙәре ҡойоноп-таҙарынып ҡала.*

**Киттар йылғала йәшәмәй. Бөйөк ағымдар океандарҙа тыуа. Ә ҡайһы саҡта кескәй йылғаларҙағы мөғжизәләр, океандарыңда һирәк була торған күренеш-ваҡиғалар ҡайҙан тыуа һуң? Рәсүл Ғамзатовтар, Сыңғыҙ Айытматовтар кескәй инештән сығып, океандарҙы ҡайнатҡан көс-ҡеүәттәр түгелме ни? Ундай шәхестәр аҙ түгел.*

*Йылғала үҫкән киттар.*

**28.09.97. Йәкшәмбе.**

**Иртән Алатау өҫтөндә телебашняға яҡын еп һымаҡ ҡына һыҙылған Ай. 1970 йылда, Алматала Ғайса ағай докторлыҡ диссертацияһын яҡлағандан һуң поезд менән Өфөгә ҡайтып төшкәс, вокзал өҫтөндә ошондай уҡ йәш Ай күҙгә ташланып, хәтергә уйылып ҡалғайны. «Күк әрем» поэмаһының тәүге строфаһы шул мәлде тыуғайны. Ул саҡта мин үҙем дә яңы тыуған йәш Ай инем. Әле лә күктә нәҙек кенә Ай, тик ул бөтөп барған Ай түгелме, минең дә шундай мәлем түгелме?*

**Шәхес һәм халыҡ. Бер кеше генә лә халҡын ни тиклем күтәрергә, исемен донъяға сығарырға мөмкин. Әүэзов тантаналарында шул турала уйландым. Ғүмеренең һуңғы йылдарында данға мансылып, бигерәк тә милләтенең ихлас һөйөүен һәм абруйын татып йәшәһә лә, тормошо еңелдән булмаған. Хатта үҙе үлгәс тә уның исеме тирәһендә милләтселек ғәләмәттәрен эҙләү туҡтамаған. Тантаналы кисәлә Назарбаев ҡыҙыҡлы документ уҡыны. Әүэзовтың 90 йыллығын үткәргәндә (1987) үҙәккә ялыу әҙерләгәндәр.*

**Арала йәшәгән, киләсәктә милләттең таянысы, зиһене, күҙе булырҙай ир-азаматты сабый сағынан, үҫмер сағынан таный белһәң икән. Уның юлын бағып, өҫтөнән туҙанын ҡағып, атын һуғарып, йортон һаҡлар инем, уның ярҙамсыһы, хатта хеҙмәтсеһе булыр инем. Тик уны ҡайҙан танып беләһең?.. Шуға бер-беребеҙгә иғтибарлы булайыҡ, сабыйҙарға, йәштәргә хәстәрле булайыҡ. Бәлки, һиңә күҙен мөлдөрәтеп торған бынау малай ил маңлайын нурландырыр, илдең алтын ҡаҙығы булыр бер изге йәндер.*

*Хоҙай беҙгә йәннәттәй Уралыбыҙҙы бәҫебеҙҙе, дәрәжәбеҙҙе һынау өсөн биргән һымаҡ, ир-азаматтарҙы, даһи йәндәрҙе лә милләтте һынамаҡҡа тыуҙыра торғандыр. Милләт ошо даһи йәнен аңлар дәрәжәләме, уны ҡәҙерләй белерме? Салауаттар, Бабичтар, Рәмиҙәр, Р. Назаровтар донъяға шуның өсөн тыуалыр ҙа... Милләттең ғорурлығы һәм мәңгелек һыҙланыуы булһын өсөн...*

**19.10.97. Йәкшәмбе.**

**Кисә Роза Сәхәүетдинованың ижад кисәһе – 60 йәше. Роза асылда – тәүге профессиональ башҡорт ҡатын-ҡыҙ композиторы. Исеме есеменә тап килгән. Сәнскәкле сәскә, сағыу талант, рухлы шәхес. Ҡылыҡтары үҙе менән булһа ла, һәләте лә үҙенеке, тәбиғәт биргән.*

**31.10.97. Йома.**

**Менталитет мәсьәләһе. Милли менталитет тураһында һөйләйҙәр. Бындай раҫлауҙың нигеҙе йылдан-йыл ҡаҡшай бара. Хәҙер кешеләрҙе быуындар менталитеты ныҡыраҡ берләштермәйме икән? Берләшеү тигән һүҙ бында бик шартлы, әлбиттә. Оҡшаш итмәйме икән, тип әйтеү урынлыраҡтыр. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә, әхлаҡи бурыстарҙа, енси бәйләнештәрҙә һ.б. нормаларҙа, дөрөҫөрәге, нормаһыҙлыҡта бөгөнгө йәштәрҙең күпселегендә милли айырмалар юҡ тиерлек. Рухи нигеҙҙәр, милли ҡағиҙәләр емерелә. Әхлаҡи һәм милли йөҙһөҙ кешеләр күбәйә. Телдәре генә төрлөсә, уйлауҙары, аҙыуҙары бер төрлө.*

*Миллилек һыҙаты булып бары тел генә ҡалып бара түгелме?*

**9.11.97. Йәкшәмбе.**

**Етеһендә Ғәлим Дәүләтовтарҙа булдыҡ. Үҙе рәхәтләнеп көлөп ала. Уны, бәлки, шул оптимислығы йәшәтәләр. Ғүмерҙә кешегә зыян итмәүе лә ҙур сауап бит, ул да ауырлыҡтарын еңеләйтәлер. Ауылында бер зыяратҡа әсәһе, ҡатыны, ике улы теҙелешеп ятты бит, быларҙы күтәреүе еңел тиһеңме?*

**13.11.97. Кесаҙна.**

**Был дәфтәрҙе ентекләп яҙып барырға ваҡыт ҡалмай. Кисәгенең һуңғы битен әле таңда яҙып ҡуйҙым. Шишәмбе, шаршамбы бик матур, бик йөкмәткеле үтте. Кисә Топҡапене ҡарап йөрөү – үҙе бер тотош сәйәхәт. Ошо ҡомартҡыларҙы ҡарау ғына ла ғүмергә онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар менән байытырлыҡ, үҙенә бер сәфәр арнарлыҡ.*

*Солтандар бында, ләззәткә бирелеп йәшәүҙән бигерәк, ил яҙмышын уйлаған, дәүләтте туҡтауһыҙ киңәйткән.*

*Үҙ рәхәтен генә уйлаған солтан рәхәт күрмәгән, тинеләр.*

*Төрлө яҡтарҙан етем ҡалған төрки балаларын бында килтереп, ошонда иң һәләтлеләрен йылдар буйына тәрбиәләп, хәрәмдәр араһында (гаремдан) ҡатын алып биреп, дәүләт эшмәкәрҙәре әҙерләгәндәр. Солтан һарайында ҡалғандары, төрлө тарафтарға ебәрелгәндәре күп булған.*

**Иҫәнбикә менән тәржемәсеһеҙ аңлашып була. Күп һүҙҙәрҙе башҡортса әйтә. Субедәй ҙә элекке менән сағыштырғанда нығыраҡ аңлай, әммә тәржемәсе кәрәк.*

*Адрестарын яңылыш аңлап, ҡаланан ситкә сығып киткәнбеҙ. Сәғәт ярым самаһы ваҡытыбыҙҙы юғалттыҡ. Ҡаланан ситтәге йорт тип эҙләһәк, ул бөтөнләй үҙәктә булып сыҡты.*

*Иҫәнбикә әле тарих уҡытыуҙа фольклорҙы файҙалана икән. Тарихты Ҡытайҙа өйрәнә башланым, әле Урта Азияға еттем. Ибн-Фаҙлан юлы менән Башҡортостанға ла барып етергә уйлайым, тип шаярта. «Ҡорҡут ата»ны файҙаланырға материал аҙ, тип һөйләне.*

*Мин Динис тураһында иҫтәлек яҙыуын һораным. Һуңлағанмындыр, тигәйнем, былай булғас, мотлаҡ яҙам, тине. Минең дә һеҙгә үтенесем бар, тине. Минең Вәлидиҙең 100 йыллығында, Бешкәктә «Манас»тың 1000 йыллығында сығыш яһағанымды оҡшатҡан. Өфөлә баҙарҙа, Рауил Бикбаев тауышы яҙылған кассета юҡмы, тип һорап йөрөнөм, ти. Шундай кассета ебәреүемде үтенде.*

**17.11.97. Дүшәмбе.**

**Кисә көнөбөҙ Зәки Вәлиди зыяратына барыуҙан башланды. Ҡараса Әхмәт тигән иң билдәле зыяратта ерләнгән. Тыныс, матур урын. Ағастар күп. «Туған ғаиләһе» тигән ҙур таштағы эре яҙыу алыҫтан уҡ күренде. «Көзен башҡорт» тип башлана. Вәлидиҙең ниндәй милләттән булыуы тураһында бәхәс ҡуҙғатыусы бына ошо ҡәбер ташындағы яҙыуға ҡараһын. Нисек яҙырға кәрәклеген Зәки Вәлиди әйтеп ҡалдырмаһа, «башҡорт» тип асыҡлап тормаҫтар ине. Ҡатыны ла бында ерләнгән, ташында яҙыу әлегә юҡ.*

**14.12.97. Йәкшәмбе.**

**Кисә 21-се больницала Булат Рафиҡов янында булдым. Хәлдәре хәл өҫтөндә. Һауығыуына өмөт юҡтыр инде. Тын юлын киңәйтеп операция яһағандар. Бик нык ябыҡҡан. Булаттың китеүе милләтебеҙ өсөн бик ҙур юғалтыу буласаҡ. Ғаиләһе лә торлаҡ яғынан бик ауыр хәлдә ҡала: квартираһы дүрт бүлмәле булһа ла, унда өс ғаилә йәшәй. Был мәсьәләлә нимә лә булһа эшләргә кәрәк.*

*Төрлө йылдарҙа төшкән фотоларҙы барлап ултырғандағы ҡыҙыҡлы кисерештәр. Уларҙың ҡайһы берҙәрен элек оҡшатмаған булаһың, ҡарт күренәм, тип уйлайһың. Ә хәҙер шуларға ҡарайһың да, ниндәй бер ҡатлы булғанмын, тип ҡуяһың. Хәҙер шул саҡта ҡарт күренгән ҡиәфәттә булһаң икән дә бит...

*«Ниңә һөйләтмәнегеҙ?» Ошондайыраҡ пьесаның төйөнләнеше. Бик киҫкен мәлдәрҙә берәү бик ғәҙел һүҙҙәр һөйләй башлай, әммә уны гел генә иң кәрәк ерҙә туҡтаталар. Аҙаҡ ҡына халыҡ үкенә: «Ниңә һөйләтмәнегеҙ?!»

*Рәйлә төшөндә Динисте күргән. Уны эҙләп Булат килгән. Хәҙер ҡайта ул, тип ҡараһа ла, юҡ-юҡ, ул миңә әле бик кәрәк, тип папкаһын тотоп, Динисте эҙләп киткән. Был сәйер төш үҙенсә күрәҙәлек булып ҡуйыр микән ни?

*Көн ныҡ ҡыҫҡарҙы. Бер сәғәт ҡараңғыла йөрөп керҙем. Көн һалҡынайта башланы.

**17.12.97. Шаршамбы.**

*15-ендә «Нефтяник»та университеттың 40 йыллығы кисәһе булды. Ғәҙәттәгесә ҡотлауҙар. Президент, ректор һ.б. Һуңғы йылдарҙа яһалған «университеттар», БДПИ үҙҙәренең юбилейҙарын әллә ҡасан үткәрҙеләр, ә университет – иң аҙаҡтан. Киреһенсә булырға тейеш ине. Юбилейға бик ашҡынып барғайным. Тик уның бәҫен, дәрәжәһен, әһәмиәтен балҡытып күрһәтә алманылар.

Башҡорт телендә иң аҙаҡтан бер студент, уға тиклем американец һөйләне. Донъя ҡоролтайында ла шулай булғайны. Башҡорт телендә оло йыйындарҙа башҡорттар башҡортса телмәр тотмай, ул сит ил ҡунаҡтарының «дәүләт теле»нә әйләнеп бара түгелме? Башҡортса нисек сығыш яһарға, уны нисек хөрмәт итергә башҡорттарға сит илдән килеп үрнәк күрһәтәләр. Бына шундай хәлдәбеҙ.

**11.01.98. Йәкшәмбе.**

*«Алтмышымдың алтын тауында» тиеберәк бер шиғыр башланыр һымаҡ. Нимә генә тиһәң дә, етемлек аша, күпме ауыр һәм буталсыҡ юлдар аша, үҙемдең күпме буталыуҙарым һәм бәргеләнеүҙәрем аша, күпме ғәзиз кешеләреңде теге донъяға мәңгелеккә оҙатыуҙар аша, был донъяла тере булған бәғзеләрен дә мәңгелеккә юғалтыуҙар аша, бәғзеһен мәкер-хыянаты өсөн йөрәктән йолҡоп ташлау аша алтмышҡа аяҡ баҫыуың барыбер алтын тауға артылыу менән бәрәбәрҙер ул.

**12.01.98. Дүшәмбе.**

*Кисә Йоматауҙағы «Музей этнографии народов Башкирии»ла булдыҡ. Үҙем өсөн ғәжәп донъя һәм ғәжәп бер шәхес астым. Ошо донъяның хужаһы Наталья Сергеевна Зырянова. Ире менән (хәҙер мәрхүм инде) улар бөртөкләп күпме хазина йыйғандар, ошо музейҙы астырмаҫҡа тырышҡан күпме түрәләрҙең ҡаршылыҡтарын күргәндәр. Апай әле барлыҡ эште бер үҙе алып бара. Унан һуң нишләр был ҡомартҡылар?

*Ҡайһы берәүҙәр әҙәпте юғалтҡанда һәҙәпте юғалтҡан тиклем дә ҡайғырмай. Улар өсөн һәҙәп әҙәптән ҡиммәтерәк.

*Мариҙар бала тыуғанда илайҙар, кеше үлгәндә, уны күмгәс, ҡәбере өҫтөндә йырлашып-бейешәләр икән. Яңы тыуған бала был хәсрәтле донъяға күпме ҡайғылар күрер өсөн килә, үлгән кеше был хәсрәтле тормоштоң ауырлыҡтарынан ҡотолоп, теге донъялағы рәхәтлектәргә китә. Кисә музейҙа мари бүлеге менән таныштырғанда Наталья Сергеевна ошо турала һөйләне. Ошондайыраҡ йола тураһында мин элегерәк тә ҡайҙалыр уҡығайным.

Сәйер, әммә ни тиклем тәрән мәғәнәле фәлсәфә, тормош асылына ни тиклем ҡырыҫ һәм аяуһыҙ ҡараш! Бары мәжүси кеше генә шулай ҡарай ала торғандыр. Дин кеше рухында быңдай ҡыйыулыҡҡа урын ҡалдырмай, кешене тулыһынса Аллаға буйһондороп, теҙләндереп ҡуя. Ә мәжүси тәбиғәткә һыйынып, уның менән тиң булып йәшәй. Ул тәбиғәт менән тәбиғи бәйләнештә, тәбиғи мөнәсәбәттә.

**14.01.98. Шаршамбы.**

*Иллюзиялар менән йәшәмәҫкә. Күңелем менән ғүмерем буйы романтик булдым, күктәрҙә остом, кемделер изгеләштерергә тырыштым. Ошоға тиклем ошондай инаныуҙарымды яҙмышымдың хыянаттар менән шаңғытмайынса күңелемдә һаҡлап килә алыуым минең, бәлки, ҙур бәхетемдер. Бәлки, бәхетһеҙлегемдер. Шулай ҙа барыбер бәхетемдер. Донъяны мин ғүмерем буйы тиерлек матур итеп күреп йәшәнем.

**23.01.98. Йома.**

*Хатта алдыңдағы йылы ризыҡты үрелеп ҡапмаған саҡта, хатта ҡайнар ҡосаҡта йәм тапмаған саҡта, хатта һине өҙөлөп саҡырғандарын кире ҡаҡҡан саҡта күҙ алдыңа килтер: нәк быңа был саҡта кемдәрҙер зарыға бер ҡабым ризыҡҡа, кемдәрҙер зарыға йылы ҡосаҡҡа, кемдәрҙер зарыға иректә йөрөргә, һөйгәнен күрергә, кемдер ҡалтырана ыжғыр бурандарҙа, кемдер өмөтләнә тағы бер көн йәшәргә, кемдер хыяллана саф һауа һуларға, кемдер үрһәләнә ҡотолорға тоҙаҡтан... Шуларҙы уйлаһаң, балҡып китер донъяң, ҡәҙерлерәк булыр һәр көн, һәр төн, һәр таң; йәм тапмаған сағың үҙеңдә оялтыр, ваҡ тигән шатлығың бик оло күренер, ҡанатың кирелер, шуларҙы уйлаһаң...

*Етмешенсе йылдарҙа «Үҙеңде бел тәүҙә, үҙеңде... үҙеңде ең тәүҙә, үҙеңде!» тип яҙғайным. Ул һүҙҙәрҙең хаҡлығына йылдан-йыл нығыраҡ инанам. Минең иң ҙур дошманым, иң ныҡ аяҡ салыусым – үҙем, минең иң яҡын дуҫым, иң ышаныслы таяныусым – үҙем. Кеше яҙмышындағы бик күп, бик күп нәмә – уның үҙенән.

**4.03.98. Шаршамбы.**

*«Градообразующее предприятие» тигән һүҙҙәр хаҡында уйландым әле. Ҙур булмаған байтаҡ ҡалаларҙы берәй хәрби завод йәки ҡиммәтле продукция эшләүсе ниндәйҙер комбинат, рудник, шахта һ.б. тотоп тора. Хатта ҡайһы бер ҙур ҡалаларҙың нигеҙен шундай предприятиелар

*тәшкил итә. Мәҫәлән, хәрби заводтар, нефть эшкәртеү заводтары булмаһа, Өфө бөгөнгөсә миллионлы ҡала булыр инеме ни?*

*Әҙәбиәттәрҙә лә шундай хәлдәр була. Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа СССР-ҙа яңы әҙәбиәттәр тыуыуы хаҡында күп шауланылар. Асылда улар бер йәки ике-өс яҙыусынан торған әҙәбиәт ине. Мәҫәлән, эвен әҙәбиәте – Андрей Кривошапкин, юкагир – Семен Курилов. Шул уҡ хәл – Юван Шесталов һ.б. Тимәк, әҙәбиәтте барлыҡҡа килтереүсе әҙиптәр. Әлбиттә, был осраҡта ниндәйҙер камил әҙәбиәт хаҡында һүҙ алып барыуы мөмкин түгел. Әҙәбиәт – ул бик ҡатмарлы система, ә бында айырым эпизод ҡына. Әҙәбиәттең үҫеше эпизодтан, артабан айырым осраҡтарҙан, күренештәрҙән башланып, артабан системаға әйләнеп китергә мөмкин. Ләкин әле әйтелгән миҫалдар, ҡағиҙә булараҡ, эпизод дәрәжәһенән уҙманы, яңы әҙәбиәт тигәндәре күп тармаҡлы системаға әйләнеп үҫеп китә алманы.*

*«Градообразующее предприятие» төшөнсәһен «әҙәбиәт тыуҙырыусы әҙип»кә әйләндереп, оло һәм тәжрибәле, бар тармаҡтары ла үҫешкән әҙәбиәттәргә ҡарата ла ҡулланырға мөмкин. Мәҫәлән, Тургенев, Толстой, Достоевскийҙар, Пушкиндар, Лермонтовтар һ.б. булманы, ти, рус әҙәбиәте донъя алдында шундай абруй яулар инеме? Йәки Туҡайһыҙ татар әҙәбиәте? Йәки Мостайһыҙ башҡорт әҙәбиәте? Ҡайсынһыҙ балҡар, Рәсүлһеҙ авар, Сыңғыҙһыҙ ҡырғыҙ әҙәбиәттәре? Улар йәшәр ине, әлбиттә. Әммә бөгөнгө ҡеүәттәрендә түгел.*

*Шуныһы ҡыуаныслы: завод һәм шахта ябылһа, ниндәйҙер мөһим производство туҡтаһа, шуларҙың көс-ҡеүәте менән йәшәгән ҡалалар бик ауыр хәлгә тарый, ҡайһы саҡта йәшәүҙән туҡтай. Әммә «Әҙәбиәтте булдырыусы әҙиптәр» – «Литературообразующие писатели» тип атарға булалыр – донъянан китһәләр ҙә, уларҙың әҫәрҙәре, уларҙын ижады һаман да әҙәбиәтте йәшәтеп, уның ғүмерен оҙайтып йәшәй.*

**25.06.98. Кесаҙна.**

**19-ында күпер аҫтында һыу инеп йөрөйбөҙ, эштән ҡайтышлай. Шул саҡ ике ҡыҙ иҫәнләшә. Һөйләшеп киттек, университет студенткалары. Аҙыраҡ торғас, блокнот, ручка тотоп, минән автограф һорап килгәндәр. Һыу эсендә автограф яҙған юҡ ине әле!..*

**11.07.98. Шәмбе.**

**Минең шатлығым да, борсолоуҙарым да ике тапҡырға күберәк: Башҡортостан өсөн дә, Ырымбур өсөн дә.*

*Икарҙың ҡанаттары ҡояшҡа яҡынайғанда иреп, ул һәләк булған. Минең ҡанаттарым, илем бейеклегенә нығыраҡ күтәрелгән, ҡояшына нығыраҡ яҡынайған һайын, көсәйә һәм нығый бара.*

**Башҡорттарҙағы коллективизм тойғоһо. Быны рус сәйәхәтселәре, әҙиптәре лә әйтә. Нефедов булһа кәрәк, яҙа, башҡорт малайына икмәк биргәйнек, ул барыһы менән дә бүлешеп сыҡты, ти.*

**Хәҙер байтаҡ ғаиләләрҙә ике, хатта өс тел: өләсәләре – башҡортса, ата-әсәһе – ни русса, ни башҡортса, ни татарса булмаған зәғиф һөйләштә, балалары – русса.*

**31.07.98. Йома.**

**Тәнҡит юҡ, тип зарланыуҙар дөрөҫ һымаҡ. Ләкин зарланыуҙан ғына эш үҙгәрмәйәсәк. Беҙҙә ике йөҙләп яҙыусы бар. Шулар йылына икешәр генә мәҡәлә яҙһа ла, 400 мәҡәлә - көн һайын берәр! – мәҡәлә булыр ине бит. Әммә шуның йөҙө лә, хатта иллеһе лә юҡ. Минең хаҡта һүҙ әйтмәйҙәр, мине күрмәйҙәр, тип мыжыусылар иһә етерлек. Ул һуң үҙе кемде күргән дә кем хаҡында һүҙ әйткән? Бына был хаҡта уйлау юҡ.*

**18.12.98. Йома.**

**Ринат Мөхәмәҙиевтың юбилей кисәһе Ғәлиәскәр Камал исемендәге театрҙа булды. Бындай кисәләрҙе күреп өйрәнелмәгән. Тәүге бүлектә әҫәрҙән өҙөк уҡыуҙар, ике инсценировка булды. «Кәндә бәйете»нән башланып китте. «Сират күпере»нән өҙөк насар түгел. «Кәнәрей»ҙәре лә, ҡалғандары ла ялҡыта башлай.*

*Икенсе бүлектә Дәүләт Советы рәйесе Фәрит Хәйрулович Мөхәмәтшин башлап ҡотланы, Маҡтау грамотаһы тапшырҙы. Унан һуң Мәскәүҙән МСПС-тан Тимур Пулатов, Егор Исаев, Төркиәнән профессор Туран менән тәржемәсе Мостафа (Измирҙан), шунан һуң беҙ ҡотланыҡ. Маҡтаныуҙан түгел, әммә беҙҙең тәбрикләү, Почет грамотаһы биреү, елән ябындырыу, бүрек кейҙереү, Ҡәҙимдең юбилярға яңы сыҡҡан китабын бүләк итеүе иң көслө алҡыштар алды. Елән менән бүректе Мортаза ағай үҙе биргәйне. Президент бүләге тип тапшырғас, был тантананың дәрәжәһе бермә-бер артып китте.*

**12.01.99. Шишәмбе.**

**Алтмышынсы артылышымдан ғүмерем юлдарымды байҡайым да, хәҙер инде ғүмерем буйы шиғыр менән йәшәгәнмен һымаҡ. Бәлки, ысынлап та шулайҙыр. Шиғыр яҙмағанда ла шиғырһыҙ булмағанмын. Һулар һауам, эсер һыуым, йылыныр ҡояшым да, ғазаптарым, һағышым да – шиғриәт. Иң яҡын серҙәшем – шиғриәт. Ҡәҙерләүсем дә, ҡәһәрләүсем дә – ул. Мин уға сер сисәм, ә ул минең сискән серҙәремде донъяға еткерә, ғәләмгә фаш итә. Шиғриәтем, сер һаҡламаҫ серҙәшем. Ә мин һаман уның менән сер бүлешәм.*

**14.03.99. Йәкшәмбе.**

**«Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит». Бик аҡыллы кәңәш. «После меня хоть потоп»тың ҡапма-ҡаршыһы. Кеше бер урында ла мәңгелек түгел, әммә шул урынында, мәңгелек өсөн эшләгән һымаҡ, намыҫ менән эшләргә тейеш. Юғиһә китерен һиҙеп, үс менән ҡыйратып китеүселәр ҙә аҙ түгел бит.*

*Кисә санаторий аллеяһында ҡарҙа яҙыу уҡыным: «Счастья всем!» Күңелле булып китте. Йылы һүҙ ҡарға яҙылһа ла, йөрәккә уйылып ҡала.*

**3.04.99. Шәмбе.**

**Халҡыңа инанып йәшәү тигәндән, барлыҡ ғүмереңә һайлаған оло маҡсаттарыңа тоғролоҡ тигәндән, һиңә бирелгән йәшәү ваҡытының*

*һәр мәлен ҡәҙерләп тотона белеү тигәндән, беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә Булат Рафиҡов – иң юғары һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һирәк өлгөләрҙең береһе ул. Бигерәк тә совет дәүерендәге әҙәбиәтебеҙ тарихында бындай әҙиптәребеҙҙең үтә һирәк булыуы милләтебеҙҙең үҙенсә фажиғәһелер, тип уйлап ҡуям. Аҡмуллалар, Бабичтарҙан һуң ундай шәхестәрҙе табыуҙары ла еңел түгел бит. Әлбиттә, халҡына инанып, уның өсөн янып йәшәгән әҙиптәр, шағирҙар беҙҙең әҙәбиәттә элегерәк тә, хәҙер ҙә бар, байтаҡ улар. Тик уларға боронғо мәғрифәтселәребеҙгә хас ниндәйҙер рухи камиллыҡ, эске бөтөнлөк, һайлаған юлыңдан һис кенә лә ситкә тайпылмайынса йәшәү барыбер етеңкерәмәй. Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти ағайҙар халыҡ тип өҙгөләнеп йәшәгән. Әммә Һәҙиә апай, Зәйнәб апай башҡасараҡ.*

*Ирҙәр тиҙерәк имгәнде, рухи яҡтан нисектер тарҡалыбыраҡ китте. Рәми ағайҙар быуыны ла, беҙҙең быуын да шулай булды.*

*Был бигерәк тә бөгөнгө йәштәр аҙмышында асыҡ күренә. Әле шағирәләр ижадының көндән-көн һәлмәкләнә барыуы – уларҙың рухи яҡтан нығыраҡ һаҡланыуынан ул.*

**30.05.99. Йәкшәмбе.**

**Алтынсы майҙа ҡар яуҙы. Санаторий янында бәләкәй генә бесәй балаһы өшөп ҡалтыранып мыяулай. Бер ир уны ҡулына алды, ана, ағаста был бесәй балаһын ҡарға ҡарауыллап ултыра, ти. Ә мин уға иғтибар ҙа итмәгәнмен. Йәлләү генә аҙ, ярҙам итергә кәрәк шул.*

**Әгәр бәйҙән ысҡыныбыраҡ йәшәп алһаң: «Үҙеңде һаҡлаһаң, йөҙ йәш йәшәр инең», – тиҙәр. Әгәр режимды боҙмай, бик суфый булып йәшәй башлаһаң: «Үҙеңде бигерәк һаҡлайһың, йөҙ йәшкә тиклем йәшәргә уйлайһың, ахыры», – тиҙәр, үҙҙәренсә мыҫҡыллы ғына сәнсергә тырышып.*

*Кәңәштәре-юрауҙары үҙҙәренә булһын, рәхмәт уларға. Тик бына иң дөрөҫ йәшәү рәүешен нисек табырға? Алтмыш йәшеңдә шулай тип аптырап ултырыу ахмаҡлыҡтыр, бәлки?*

**12.06.99. Шәмбе.**

**Миңештелә Дүртөйлө администрацияһы Назар Нәжмигә ижад йорто һалған. Кирбестән һалынған ике ҡатлы йорт та, урыны ла хайран ҡалырлыҡ. Икенсе ҡаттағы эш бүлмәһенең киң тәҙрәләренән ғәжәп киң панорама асылып китә, Ағиҙел туғайҙары йәйрәп ята. Өй атаһының йорто – тыуған нигеҙе менән йәнәш һалынған. Мебеленә тиклем алып биргәндәр.*

*Асыу митингыһында премьер Р. И. Байдәүләтов, хакимиәт башлығы Р. Ш. Дәүләтов, Өфө башлығы Ф. Ә. Ямалтдинов, мин, Ҡазандан Роберт Миңнуллин һөйләнек.*

*Назар ағай әйтә, был йорт минең ғүмерҙе оҙонайтыр һымаҡ, ти. Шулай була күрһен.*

*Мин шағир яңғыҙлығы хаҡында тост әйттем.*

*1987 йылдың ғинуарында «Башҡортостан» гәзитендә баҫылған шиғырындағы:*

*Киткем килә, тик ҡайтаһым килмәй,*
*Еңел түгел ул юл йөрөүе.*
*Еңел түгел яңғыҙлыҡтан сығып,*
*Яңғыҙлыҡҡа ҡайтып инеүе,*

*– тигән юлдарынан һүҙемде башланым.*

**13.06.99. Йәкшәмбе.**

**Шағир яңғыҙлығы. Асылда шағир эше, шағир яҙмышы ғүмере буйы яңғыҙлыҡтан тора. Ләкин бөгөнгө тормош ритмы, дөрөҫөрәге, аритмияһы, туҡтауһыҙ тетрәнеү-ҡыйралыуҙар, туйҙар, байрамдар, юбилейҙар, презентациялар, йыйын-митингтар һ.б. шағирҙы ошо «яңғыҙлыҡ бәхете»нәндә мәхрүм итә. Назар ағай өҫкө ҡаттағы иркен, яҡты эш бүлмәһендә әллә ҡайҙан йәйрәп ятҡан сәхрә-туғайҙарға, Ағиҙелгә ҡарап, «яңғыҙлыҡ ләззәте»н тағы ла оҙағыраҡ татыһын, күберәк яҙһын, уҡыусыларҙы йышыраҡ ҡыуандырһын ине!*

*Назар Нәжмигә – яңы йортонда теләгем:*

*Барыһы ла һуңлап килде, тиһең,*
*Һәр бер һуңлау үкенесле, тимә.*
*Килер бәлә килһен һуңлабыраҡ,*
*Һуңғы мәлең һуңлап килһен һиңә.*

*Назар ағайҙың ҡатыны Флорида, бында бер ай буйы бер нәмә бешермәнек, ай буйы ауылдаштар күстәнәс менән килде, тип һөйләй.*

**Минең өсөн ҡаланың 425 йыллыҡ байрамы элекке «Луч» кинотеатры бинаһында «Ихлас» мәсетен асыу байрамынан башланып китте. Халыҡ күп йыйылғайны, Нурмөхәмәт хәҙрәт тә бар ине. Хәҙрәттән һуң яңы фонтан атыла башланы. Шунан миңә һүҙ бирҙеләр. Башҡорттарҙың Торатау, Имәнҡала тигән урынында төҙөлгән Өфө үҙенең оло тарихында ҡыуаныслы һәм хәсрәтле ваҡиғаларҙы аҙ күрмәгән. Ошо егерменсе быуатта ғына ла уның башынан ниҙәр генә үтмәгән! Мәсеттәр емерелгән, дини китаптар яндырылған, доғалар тыйылған, аҙан тауышы туҡтаған.*

*Ләкин беҙҙең халҡыбыҙҙың күңелендә бер ваҡытта ла иман бөтмәгән, ул ихласлығынан яҙмаған, киләсәккә һәр ваҡыт өмөт менән, ышаныс менән ҡараған. Бөгөн яңы мәхәлләнең үҙәген асыу – һуңғы йылдарҙа тормошобоҙҙағы яңы үҙгәрештәрҙең, шатлыҡлы хәлдәрҙең бер сағылышы. Яңы мәхәлләнең исеме лә ниндәй матур – «Ихлас». Әле яңы урғыла башлаған фонтан тамсыларында мин мәсеттәрҙең ҡыйралыуына, китаптарҙың яндырылыуына, доға-аҙандарҙың тыйылыуы-быуылыуына шаһит булған ата-бабаларыбыҙҙың хәсрәт күҙ йәшен күрәм. Ошо яңы фонтандың йым-йым килгән тамсыларында мин замандаштарымдың илдәге матур үҙгәрештәрҙе, мәсеттәрҙең асылыуын, доғаларҙың яңырыуын, аҙандың терелеүен күреп тамған шатлыҡ йәштәрен күрәм. Бөгөнгө яңырыу еңел генә булмаясаҡ, һәр беребеҙ үҙебеҙ яңырмай тороп, милләтебеҙ, халҡыбыҙ,*

*тормошобоҙ яңырмаясаҡ. «Үҙеңде бел тәүҙә, үҙеңде!» шиғырымды уҡыйым. Һүҙем, сығышым бына шулайыраҡ булды.*

**16.06.99. Шаршамбы.**

**Кешенең тормоштағы баһаһын белер өсөн «Ул булмаһа» тигән һорау, шарт ҡуйып ҡара. Мәҫәлән, дәүләтебеҙҙә фәләнсә етәксе булмаһа, әҙәбиәтебеҙҙә шул шағир йәки әҙип булмаһа, хәстәханала шул табип булмаһа, мәктәптә шул уҡытыусы булмаһа, ауылда шул оҫта булмаһа, мәжлестә шул йырсы булмаһа, майҙанда шул батырыбыҙ булмаһа, яланда шул көтөүсе булмаһа, баҫыуҙа шул игенсе булмаһа һ.б. – барыһы ла етемһерәп ҡалыр, ерҙең йәме кәмер ине. Ә башҡа берәү булмаһа, тормош тағы ла матурайып китер ине.*

**12.09.99. Йәкшәмбе.**

**Кешелектең үҫеше һәр кеше яҙмышында, һәр бер яңы тыуған сабыйҙың шәжәрә ағасында ни тиклем киңәйә, тармаҡлана, байый бара. Һәр сабыйҙың яҙмышында атаһы һәм әсәһе яғынан тупланған ниндәй оло мираҫ килеп ҡушыла. Хайран ҡалырлыҡ бит! Ошонан һуң да кеше нисек ваҡ булырға тейеш? Хаҡы юҡ. Уға ике шәжәрә ағасының тамырҙарынан, күпме-күпме быуындарынан килгән ҡараштар төбәлгән, өмөттәр, ышаныстар бағланған бит!*

**Яланда һабантурғай һайрауына оҡшаш тауыш ишетелеп ҡала. Ҡыҫҡа ғына. Бик йырлағыһы килеп, моңо өҙөлгән һымаҡ. Ҡоштоң үҙен күрә алмайым. Һабантурғайҙар бындамы икән ни әле? Яҙҙан өҙөлөп ҡалған моң һымаҡ, йәйҙең бер биҙәге һымаҡ. Әйтерһең дә, ҡошсоҡтоң тыуған еренән китер алдынан йырлап хушлашҡыһы килә лә, бисараның күңеле тулып, моңо өҙөлөп ҡала.*

**3.12.99. Йома.**

**Кисә «Даирә» программаһында тура эфирҙа сығыш яһаным, Шамил Кучуков менән әңгәмә. Бик үтенделәр. Һүҙ – һайлауҙар тураһында.*

*Мәскәү тележурналистарының битһеҙлегенә лә ҡағылмай булманы: Доренко, Сванидзе...*

*Беҙҙең ишек алдында Тобик тигән эт йәшәй, мүскә (сәүек). Эштән ҡайтҡанда мине йүгереп ҡаршы ала, сөнки мин уны ашатырға тырышам. Берәй нәмә алып сыҡһам, ашай ҙа шунан урамда үтеп барған кешеләргә өрә башлай: минең яҡшылыҡты хеҙмәте менән аҡлай, йәнәһе.*

*Доренко ла үҙен һатып алған хужалары алдында шулай ярамһаҡланып өрә. Тик инде уның бульдог ҡылanыштары Тобиктың гонаһһыҙ өрөүе һымаҡ ҡына түгел: ағыу сәсә, йырта, йолҡа.*

*Элек парктарҙа көлкө бүлмәләре була торғайны. Ундағы салыш көҙгөләрҙән танымаҫлыҡ хәлгә килгән йөҙөңдө, кәүҙәңде төрлө әкәмәт рәүештәрҙә күреп, көлмәй мөмкин түгел ине. Сванидзеның «Көҙгөләре» бына шундай салыш көҙгөләр. Ләкин ул ысын тормошто мәрәкә өсөн түгел, мәкер өсөн, емереү, тарҡатыу өсөн боҙоп күрһәтә.*

# «Ағиҙел»гә – 90 йыл

## Нәфис әҙәбиәт:

### ХЫЯЛ, ЫСЫНБАРЛЫҠ, ТОРМОШ ТАЛАБЫ

## *ТАЛАНТ ТАЛАПТАН ҠУРҠАМЫ?*

*(Әмир Әминев һәм Зәки Әлибаев менән әңгәмә)*

***– Журналыбыҙҙың юбилейы айҡанлы ойошторолған әңгәмәләрҙә, әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгө торошона бәйле, ҡәләмдәштәребеҙ иғтибарға алырҙай фекерҙәр әйтте. Баш мөхәррир үҙе, Әмир Мөхәмәт улы, әңгәмәләргә ҡағылышлы ниҙәр уйлай?***

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Иң беренсе сиратта оло һөйләшеүгә ҡатнашҡан бар иптәштәргә лә рәхмәт әйткем килә: уларҙың һәр ҡайһыһы, был – журналдың ғына эше, тип торманы, дөйөм әҙәбиәт эше тип ҡараны һәм бөгөнгө әҙәби процесты, уңыштарын барлау менән бергә, проблемаларын да күрһәтергә, асыҡларға тырышты, теге йәки был мәсьәләгә үҙенең мөнәсәбәтен белдерҙе, айырым әҫәрҙәргә туҡталыу менән бер рәттән, дөйөм йүнәлеште лә тоҫмалланы. Тамсынан күл йыйыла, ти, әлеге һөйләшеү ҙә айырым әҙиптең шәхси фекерҙәренән, күҙаллауынан ғибәрәт бит.

Әлбиттә, бер дискуссия ғына тотош әҙәбиәт сифатын, әҙәби тәнҡит торошон күтәрмәҫ, реалист булайыҡ. Әммә уның йомшаҡ урындарын асып, проблемаларын күрһәтер. Ә был бик мөһим: медицина термины менән әйткәндә, сиргә диагноз ҡуймайынса уны дауалау мөмкин түгел. Һөйләшеүҙең маҡсаты ла шул ине, һәм беҙ, редакция, уға ирештек, тип хисаплайым. Ғөмүмән, бындай формалағы һөйләшеүҙәр кәрәк.

***– Зәки Арыҫлан улы, Яҙыусылар союзында тәнҡит секцияһы етәксеһе булараҡ, был һөйләшеүҙәрҙе нисегерәк баһалар инегеҙ?***

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Әҙәби тәнҡит өлкәһендәге эшмәкәрлек хаҡында ҡыҙыу бәхәстәр барғанда, республикабыҙҙың әҙәби көҙгөһө булған “Ағиҙел” журналында баҫылған был әңгәмәләр, ысынлап та, ярайһы уҡ ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле һәм киң даирәне яуларлыҡ булды, тип иҫәпләйем. Уларҙы ойоштороусы редакция хеҙмәткәренең әҙәбиәтте төптән аңлап, йөрәк аша үткәреп, уның киләсәге өсөн борсолоп йәшәүе күренеп тора. Һөйләшеүҙәр барышында әҙәбиәтебеҙҙең төрлө аспекттары яҡтыртылды, мәсьәләнең актуаллеге асыҡланды, артабанғы үҫеш тенденциялары билдәләнде. Әгәр ҙә ошо йүнәлештә, әйтелгәндәрҙән сығып, артабан да

ныҡышмал эҙләнеүҙәр алып барһаҡ, асыҡтан-асыҡ аңлашыуҙарҙан тартынмаһаҡ, тейешле һығымталар яһаясаҡбыҙ.

Әңгәмәне әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин башлап ебәреүе лә һөйләшеүҙәрҙең кимәле, мәсьәләнең бик ҡырҡыулығы хаҡында бәйән итә. Әҙәбиәттең төрҙәре, жанрҙары хаҡындағы әңгәмәләр күберәк һүҙ сәнғәтенең кимәле, художестволы оҫталыҡ тирәләй барҙы. Драматург Наил Ғәйетбай башҡорт сәхнәһендә барған драмалар, уның үҙенсәлекле яҡтары тураһында ғына түгел, ә төрлө алымдар, ижад иреклеге хаҡындағы ҡараштары менән уртаҡлашты.

Әҙәбиәттәге тарихилыҡ принцибы һәр осор өсөн дә мөһим булып ҡала. Йылдар үткән һайын тарихи ваҡиғаларҙы объектив рәүештә художестволы туҡымаларға күсереү – оҫталыҡтың бер яғы. Мәүлит Ямалетдин башҡорт прозаһындағы тарихилыҡ тураһында ғына фекер йөрөтмәй, ә һуңғы йылдарҙа донъя күргән тарихи әҫәрҙәр ҙә уның иғтибар үҙәгендә. Прозаиктың «Ҡуласа» романы ла ошо типҡа ҡарай. Ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәтендә халҡыбыҙҙың ҡайһы осорона ғына баҡма, бынамын тигән эпик ҡоласлы роман ижад итерлек. Тарихи шәхес һәм халыҡ яҙмышында хәл иткес ваҡиғалар – әҫәрҙең нигеҙен тәшкил итә. Ә үҙ тарихыбыҙға объектив ҡараш булдырыу – беҙҙең күптәнге бурысыбыҙ. Ф.Күзбәковтың М. Ямалетдин менән «Үткәнебеҙҙе бөгөнгөгә бәйләп » тигән әңгәмәһендә ошолар иғтибар үҙәгендә.

Урта быуын әҙиптәре Әхмәр Үтәбай менән Дамир Шәрәфетдинов һәр ваҡыт үҙенсәлекле ҡараштары, тәрән фекерле сығыштары менән билдәле. Шуға ла сираттағы «Ижади бойондороһоҙлоҡ... Мәңгелек проблемамы?» тигән әңгәмәлә идея һәм идеология, герой һәм тәрбиә хаҡында фекерҙәр урын алған. Ә күренекле прозаиктар Т. Ғарипова һәм Ф. Аҡбулатова менән әңгәмә «Дәүер көҙгөһө лә, дәүер һулышы ла – әҙәбиәт» тип аталып, күберәк хәҙерге башҡорт прозаһының йәшәү рәүеше, уның кимәлен билдәләү, әҙәбиәт менән донъяуи хәлдәрҙең мөнәсәбәттәре тураһында бара. Бигерәк тә тәрбиә мәсьәләһенең төрлө аспекттары нигеҙле билдәләнгән. Ф. Аҡбулатова һөйләгән дини тәрбиәнең асылдары ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул ителә.

Ғөмүмән, милли әҙәбиәт яҙмышы, әҙәбиәт һәм уҡыусы, ундағы төп мәсьәләләр хаҡында әңгәмәләрҙә бик етди, көн ҡаҙағына һуғыусы фекерҙәр әйтелде. Былдай кимәлдә һөйләшеүҙәр, һуңғы съезыбыҙ алдынан ойошторолғанын иҫәпкә алмағанда, булғаны юҡ ине бит. Артабан да ошоноң ише формаларҙы йышыраҡ ҡулланаһы ине.

***– Бөгөнгө әҙәбиәт прозаик Әмир Әминевты ҡәнәғәтләндерәме? Ҡәнәғәтләндермәһә, ни яғы менән? Тәнҡитсе күҙлегенән ҡарағанда? Ә уҡыусы зауығынан? Әллә Әмир Әминев ҡәләмдәштәр ижадын бүлгеләнмәй генә ҡабул итәме?***

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– «Оҡшай йәки оҡшамай» тигән төҫлө, «ҡәнәғәтләндерә» йәки «ҡәнәғәтләндермәй» тип кенә өҙә һуғыу дөрөҫ булмаҫ. Минең быға хаҡым да юҡ, һәм әҙәбиәт үҙе лә быға мохтаж түгел. Был мәсьәлә ифрат ҡатмарлы, ҡатлы-ҡатлы, шуға ла төрлө яҡлап тикшереүҙе талап итә. Беҙ уның осона сыға алмаясаҡбыҙ, әммә ниндәйҙер ориентирҙар билдәләү, маяҡтарҙы күрһәтеү, оло бәхәскә әҙерләнеү (әгәр уны ойоштора алһаҡ), темалар тамғалап ҡуйыу шулай ҙа кәрәктер. Әлбиттә, нимәнелер ҡабул итәм, нимәнелер юҡ, аптыраған саҡтар ҙа була, әсенгән саҡтар ҙа. Журналға килгән материалдар буйынса ғына ла мин бына

нәмә һиҙәм: үткән быуаттың 70 – 80-се йылдарында әҙәбиәтебеҙгә ҡеүәтле ташҡын булып бәреп ингән ҙур проза, анығыраҡ әйткәндә, тарихи романдар, һуңғы ун йылдар тирәһендә үҙенең позицияһын бирә башланы. Төп сәбәбе шул осорҙа актив эшләгән романистарҙың арабыҙҙан китеүендә (Б. Рафиҡов, Ә. Хәким, Я. Хамматов, З. Ураҡсин), иҫәндәренең (Ғ. Хөсәйенов, Н. Мусин, М. Ямалетдин, Ғ. Хисамов, М. Иҙелбаев, И. Ноғоманов) тик шул жанрҙа ғына эшләмәүендә лә түгел, ә республикала, илдә сәйәси, ижтимағи, милли тормоштоң һилләнеүендә. Вулкан атты-атты ла тынысланды. Ҡарағыҙ, суверенитеттан «с» хәрефе лә ҡалманы бит, ике башлы сәмреғош барыһын да суҡып бөтөрҙө. Ә бит, миңә ҡалһа, тап ана шул тарихи проза менән үткер публицистика айырым кешеләргә, тотош халыҡҡа, беҙҙең ҡанлы үткәнебеҙ, беҙҙең бөйөк шәхестәребеҙ бар, беҙ үҙебеҙҙе уратып көн иткән бер милләттән дә кәм түгел, тигән фекерҙе нығытҡайны, күптәрҙең күҙен асҡайны. Тап ана шул аң, хис-тойғо, тарихи романдарҙан алынған мәғлүмәт суверенитет яулауға алып килде. Мин мәсьәләне, бәлки, үтә ябайлаштырамдыр, әммә киң халыҡ массаларына ошо бөйөк күтәрелеште идеологик яҡтан әҙерләү өсөн тап шундай әҫәрҙәр кәрәк ине. Төп идеология тәүҙә тап ана шул осорҙағы тарихи романдар, саҡ ҡына һуңыраҡ үткер публицистика булды (Ғ. Шафиҡов, М. Ҡолшәрипов, Ә. Юлдашбаев, И. Аҡманов, Н. Ҡолбахтин, Р. Янғужин, Й. Солтанов). Артабанғы ваҡиғалар барыбыҙға ла мәғлүм: беҙ тарихи үҫештең бер бөгөлөндә үҙ маҡсатыбыҙға ирештек. Үкенескә күрә, ирешкәйнек, тип әйтергә ҡала бөгөн.

Тарихи проза үлде, тип уйларға ярамай. Ул яҙыла, әммә сағыштырмаса һирәгерәк яҙыла, сөнки республикалағы, илдәге сәйәси, ижтимағи тормош үҙгәрҙе, икенсе яҫылыҡҡа күсте, ҡиммәттәр алышынды, милли хәрәкәт һүлпәнләнде, беҙгә федераль үҙәктең мөнәсәбәте үҙгәрҙе. Әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт сәйәсәттең бер тармағы, айырылғыһыҙ бер өлөшө булғанлыҡтан, ул да үҙгәрҙе, үҙгәрә бара. Үҙгәрештәр күҙ алдында, бер быуын ғүмере эсендә. Ким Әхмәтйәновтың, Әнүр Вахитовтың, Марат Минһажетдиновтың үткер мәҡәләләрен, Ғайса Хөсәйеновтың дәлилле сығыштарын әле генә уҡыған, тыңлаған инек, тәүгеләре мәрхүм булып ҡуйҙы, һуңғыһы 85 йәштә. Улар фанатиктар ине – үҙҙәрен аямай эшләне, бәлки, шул арҡала янғандарҙыр ҙа. Ә бына ул яныу бөгөн юҡ, фронт һыҙығы ҡеүәтле артподготовканан һуң тымып ҡалған һымаҡ шып-шым, онотҡанда һирәк-һаяҡ берәмләп атыу тауышы ғына ишетелеп ҡала. Фанатиклыҡ бөгөн хоббиға әйләнде – барыбыҙ ҙа ижадты ниндәйҙер ҙур эшкә ҡушымта итеп ҡарайбыҙ һәм ошо эшкә ваҡыт ҡалғанда ғына тотонабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Һөҙөмтәлә ҙур әҫәрҙәр тыумай, ҙур, киҫкен социаль проблемалы әҫәрҙәр тыумағас, тәнҡите лә юҡ. Бына шулай бер-беребеҙгә ҡағылмай, бер-беребеҙҙе борсомай, тып-тыныс йәшәй бирәбеҙ. Халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин әйтмешләй, бутафор тормошта.

Бөгөн романдар урынын повесть, хикәйә алып бара. Был шулай уҡ тәбиғи тип ҡарайым – тормош ваҡланғас, жанр ҙа ваҡлана. Сөнки күҙенә аҡ-ҡара күренмәгән, бөгөнгө ҡабалан уҡыусының күләмле әҫәр уҡып ултырырға ваҡыты юҡ. Бар нәмә ҡыҫҡа, йәһәт башҡарылырға тейеш. Бөгөнгө капитализм формацияһында әҫәр шулай уҡ тауар, һәм уның үтемле булыуы фарыз.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Дөрөҫ әйтәһең. Ижадты йәшәү рәүеше иткәндә генә ҙур әҫәрҙәр тыуыуы мөмкин. Әммә шиғыр яҙып, бигерәк тә әҙәби тәнҡит менән генә шөғөлләнеп, ғаиләңде ҡарай алмайһың. Тимәк, әлеге шул хөкүмәт ярҙамына өмөтләнергә тура

килә. Мин бер сығышта, көндәлек әҙәби тәнҡитте үҫтерәйек тиһәк, Тарих, тел, әҙәбиәт институтында ике-өс кешелек булһа ла бары ошо йүнәлештә генә эшләгән бүлек булдырайыҡ, тигән тәҡдим индергәйнем. Исмаһам, исем өсөн генә булһа ла бирәү ҙә хупламаны. Хөкүмәт, институт тарафынан да бер тын сыҡманы. Тимәк, әҙәби тәнҡиттең бер кемгә лә кәрәге юҡ. Хатта яҙыусыларҙың үҙҙәренә, һәр хәлдә күпселегенә (ә бит маҡтауға ҡоролғанын шул уҡ күпселек хатта көн дә ишетеп-уҡып тороуҙан да баш тартмаясаҡ).

Әҙип өсөн әҙәбиәткә хобби итеп ҡарау бер ҡурҡыныс булһа, тәнҡитсе өсөн был икеләтә-өсләтә... ҡурҡынысыраҡ. Сөнки урыҡ-һурыҡ эшләгән тәнкитсе әҙәбиәтте тулайым күҙаллай алмай. Бер хикәйәгә генә лә объектив баһа бирә-йем тиһәң, уны тотош әҙәбиәт фонында ҡарар кәрәк. Шунһыҙ һинең фекерләүең фрагментар буласаҡ. Теге йәки был әҫәр конкрет яҙыусы ижадында ҙур уңыш булған хәлдә лә, бөгөнгө әҙәби процеста уның бер ниндәй әһәмиәте лә булмауы бар.

Әҙәбиәткә фанатиктарса бирелеү... Әлбиттә, теләһә ниндәй өлкәлә лә мөкиб-бән китмәйенсә һиҙелерлек уңыштарға ирешеү ҡыйын. Шулай ҙа талант менән фанатикты айырып ҡарау кәрәктер ул.Талант та тир түкмәйенсә бигүк алыҫ китә алмай. Ана, атаҡлы уйлап табыусы Томас Эдисон (1847–1931): «Талант бер процент булһа, хеҙмәтең туҡһан туғыҙ процентҡа торош итһен!» – тип ебәрә. Фанатиклыҡҡа йәмәғәтселек тә бик етди ҡарайҙыр, тип уйламайым. Сөнки фанатиклыҡ барыбер ҙә бер сиктән икенсеһенә килтереп сығарыусан. Был – хыял илендәге гениаль шағирҙы ла ҡәҙимге кеше фиғелендә күрергә тырышыуҙы аңлатмай. Пушкин, мәҫәлән, меңдәр араһында берәү. Әммә уның артындағы меңде шағир түгелдәр тип кем әйтер? Бәлки, шул мең булған өсөн Пушкин – Пушкин була алалыр?

Әнүр, Ким ағайҙар билдәле идеологияға (идеалдар дөрөҫмө-ялғанмы, яҡшы-мы-насармы – һүҙ ул турала түгел) ихластан хеҙмәт итте. Художестволы әҫәрҙәр-ҙе баһалау критерийҙары бер, әҙәбиәттең маҡсаттары аныҡ билдәләнгән ине. Ә хәҙер?

Ҡәнәғәтлеккә килгәндә «эйе» лә, «юҡ» та тиергә мөмкин. Бөгөнгө зауыҡлы уҡыусының ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерҙәй әҙиптәребеҙ бар ул беҙҙең. Төрлө жанрҙа бынамын тигән әҫәрҙәребеҙ ҙә байтаҡ. Улар хаҡында әңгәмә бары-шында ла әйтелә киленде. Шулай ҙа килеп тыуған проблемаларҙы юғары ху-дожестволылыҡ кимәлендә күтәрә алғаныбыҙ юҡ әлегә. Урамдағы ысынбарлыҡ төшөнкөлөккә этәргән халәттә лә – бындай осраҡта, бәлки, айырыусалыр ҙа әле – һүнгән өмөттәрҙе баҙлатырлыҡ әҫәрҙәр кәрәк ине бит... Быға бәйле Зәки Арыҫлан улы ни уйлай икән?

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Һуңғы йылдарҙағы проза йәмғиәтебеҙҙең, заманыбыҙҙың бар яғын да яҡ-тыртып бөтмәй. Бигерәк тә бөгөнгө көн темаһы – ауыр мәсьәлә. Ә тарихи проза үҙ кимәлен юғалтманы. Прозаиктарҙың форма йәһәтенән эҙләнеүҙәре ҡыуан-дыра. Ғөмүмән, бай традициялы башҡорт әҙәбиәтенән уҡыусы ла, тәнҡитсе лә күпте өмөт итергә хаҡлы. Быға ерлек тә бар. Гөлсирә Ғиззәтуллина, Фәрзәнә Аҡ-булатова, Тәскирә Даянова, Әмир ағайҙың үҙенең әҫәрҙәренең художестволы кимәле ярайһы юғары, тип билдәләр инем.

***– Талаптар ҡуйып, саҡырыуҙар ташлап, әҙәбиәт кимәлен күтәреп буламы?***

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Талаптар ҡуйып кимәлде күпмелер дәрәжәлә күтәреп булалыр. Талапсан уҡытыусының уҡыусылары дәрескә әҙерләнеп килергә тырыша, ҡушҡанын үтәй. Йәғни үҙендә яуаплылыҡ тоя. Яҙыусы алдына ҡуйған талапты мин уның ижадына ҡарата яҙылған мәҡәләлә, рецензияла ыңғай яҡтарын күрһәтеү менән бергә уның кәмселектәрен дә билдәләү тип аңлайым. Нәшер ителгән әҫәрен әҙип рецензент әйткән буйынса яңынан эшләп ултырмаҫ, хәйер, тәнҡитте ихласлап ҡабул итеп яңынан ҡарап сығыуы ла ихтимал (китапҡа йәки башҡа баҫмаларға биргәндә кәрәк бит), ләкин ул артабан яҙыласаҡ әҫәрҙәргә ярҙам итеүе бар, һәм ул, нигеҙҙә, шуға тоҫҡап әйтелә лә. Һөҙөмтәлә уның дөйөм ижадының кимәле күтәрелә. Әлбиттә, күпселектә улай булмай, мин инде авторҙарҙы ла, мәсьәләне лә үтә идеаллаштырам. Шулай ҙа әлегеләй килеп сығыуына ниндәйҙер өмөтөм дә бар.

Ә быны саҡырыу ташлап, абстракт хәбәр һөйләп ошоға тиклем бер кемде лә «тәртипкә» ултыртҡандарын, эшкә файҙа килтергәнен белмәйем. Коммунистар заманында урамдарға, өй, ҡапҡа баштарына күпме лозунг яҙып эләләр ине, берәйһе партияны емерелеүҙән һаҡлай алдымы? Һәр эш конкрет бурыс ҡуйыуҙан башлана. Һуғышсыларға шул бейеклекте алырға йәки сигенгәндә дошмандың һан яғынан үҙенән бер нисә тапҡырға күберәк көсөн һис юғы бер нисә сәғәткә тотҡарлап торорға бойороҡ бирелгән икән, ике осраҡта ла һалдаттар һуңғы патронға тиклем һуғышасаҡ.

Әҙәби тәнҡит, ҙурҙан ҡупҡанда, алда әйткән уҡытыусы һымаҡ барыбер ҙә ана шул юғары талапты ҡуйыусы, билдәләүсе фактор ролен үтәргә бурыслы. Заманында Белинский булмаһа, беҙ Пушкин, Лермонтов, Гоголь, башҡа бөйөк рус әҙиптәренең ижадын бындай юғарылыҡта белә лә, аңлай ҙа, ҡабул итә лә алмаҫ инек. Рус әҙәбиәтенең алтын быуатының алтын тәнҡитсеһе лә булған. Объектив ҡарағанда, булырға тейеш тә. Сөнки, әйткәнемсә, әҙәбиәт ниндәй, тәнҡитсенең кимәле лә шулай. Башҡорт әҙәбиәте тәнҡитенең «алтын быуаты» булғандыр ул, бәлки, булмаһа, алдағы йылдарҙа тыуыр, тигән өмөттә ҡалам.

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Талапты мин ике яҫылыҡта ҡарар инем: бар күңел талабы, йәғни әҙиптең үҙ-үҙенә ҡуйған талабы, бар йәмғиәт ҡуйған талаптар. Ижадсы, минеңсә, иң тәүҙә күңел талабына яуап бирергә тейеш. Был тегеһенә ҡарағанда мөһимерәк. Күңел талабы һәр осраҡта ла алдараҡ йөрөй. Бабич, әгәр ҙә күңеле ҡуйған талаптарға яуап бирмәһә, бөгөн дә бәҫен юғалтмаған әҫәрҙәр ҡалдыра алыр инеме ни?!

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Был талаптар яраша алһа, тағы ла шәберәктер, бәлки. Күңелең ҡушыуы күпселектең теләк-маҡсаттары менән тап килә икән, эшеңдең һөҙөмтәле булырына мөмкинлектәр ҙә киңәйә, тимәк. Совет осоро әҙиптәренең ҙур абруйға эйә булыу сәбәптәренең иң һәлмәге лә ошоноң менән бәйлелер, тием мин: уларҙың барса уй-ынтылыштары халыҡтыҡынан бер ние менән дә айырылманы. Киреһенсә, әҙипкә ауыл да, ҡала ла иң һөйөклө балаһына ҡараған ата-әсәләй ҡәҙер-хөрмәт күрһәтте. Мостай ағайҙың өс ул тураһындағы хикмәте иҫкә төшә. Ҡарттың өлкән улы – һабансы, уртансыһы – яугир, кинйәһе йырсы-ҡурайсы-сәсән булырға фатиха ала. Хикмәттең айышы атайҙың кемде яҡыныраҡ күреүенә ярайһы асыҡ ишаралай булһа кәрәк. Йәнә бер әтнәкәһе лә бар: аҡыл эйәһе булған ҡарт, башта уландарҙың мөмкинлектәрен самалап ҡарағандан,

кемдең нимәгә һәләтле булыуҙарын билдәләгәндән һуң ғына үҙ фатихаһын бирә – һәр кем күңеле ятҡан һөнәрҙе һайлаһын.

Ҡуйылған проблемаға икенсе яҡлап килеп ҡарағанда... Талантҡа йәмәғәтселек тә ниндәйҙер талаптар ҡуйырға хаҡлылыр, моғайын. Уны тормош талабы тип тә ҡарарға мөмкин. Бындай талаптарға ысын ижадсы бер нисек тә битараф ҡала алмай. Киреһенсә икән, уңышҡа өмөтләнеүе икеле. Хикмәтле ҡарт та, сәсән улы үҙенең кемлеген онотоп ебәрһә, шунда уҡ быны иҫенә төшөрәсәк, илйорт ҡуйған талаптарҙы ла еткерәсәк. Тәрбиәле улан алтмышта ла атай кәңәштәренә ҡолаҡ һалыр, әйткәндәрен йөрәгенә алыр. Ысын талант талаптарҙан ҡурҡмай ул. Юҡтан ҡоҙағый булып йөрөүселәргә генә ҡыйын... Бына ни өсөн объектив әҙәби тәнҡиттән уттан да былайыраҡ ҡурҡыусылар күбәйҙе.

Шуныһы: ижад эшендә бойороҡ, саҡырыу, намыҫҡа ишаралау менән күпкә ирешеп булмай. Күпмелер кимәлдә матди стимул ғына ыңғай һөҙөмтә биреүе бар. Иң мөһиме – талантты тейешенсә баһалау.

***– Бөгөнгө халыҡ шағирҙары, халыҡ яҙыусылары халыҡтың рухи әйҙәүсеһе булырлыҡ кимәлдәме?***

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Уларҙы мин ике категорияға бүлеп ҡарар инем. Берәүҙәр хөкүмәт тарафынан рәсми раҫланған, икенселәрен халыҡ үҙе йөрәгендә йөрөтә. Халыҡты, әлбиттә, «дөкәмитлеләр» түгел, ә һуңғылары алға әйҙәй. Мәктәп программаларына төрлө юлдар менән ингәнгә түгел, ә күңел талабы менән уҡыусылары күп икән – шулар халыҡ әҙибе. Мәҫәлән, Рәшит Солтангәрәев әҫәрҙәрен бик яҡын күрәләр. Сәғит Агиш тотош осор рухиәтен бирә алыуы менән әһәмиәтле. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, хөкүмәт халыҡтың тын алышын белмәй, рухи талаптары менән иҫәпләшмәй. Исемдәр, премиялар биргәндә ғәҙеллектең емерелеүен күптәр күреп тора ла баһа.

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Дөйөм алғанда, бар ижад кешеләре лә ниндәйҙер кимәлдә халыҡтың рухи әйҙәүселәре инде ул. Шул иҫәптән юғары исемдәргә лайыҡ булғандары ла. Ләкин, һәр ҡайһыһына конкрет туҡталғанда, барыһын да әйҙәүселәр тип әйтеп булмайҙыр. Уның өсөн ижадтан тыш (уныһы, әлбиттә, иң мөһиме) уның сәйәси, ижтимағи, милли йөҙө, халыҡты борсоған проблемаларҙы аңлауы һәм үҙенеке итеп ҡабул итеүе һәм шуны хәл итеү юлдарын күрһәтә белеүе лә кәрәктер. Мостай ағайҙың депутаттар алдында суверенитетты яҡлап сығыш яһауын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Күпме ижад кешеләре, шул иҫәптән, яҙыусы бар, ләкин ул ғына әйтә алды иң кәрәкле һүҙҙе! Мин был миҫалды «башҡалар ҡул ҡаушырып ултырҙы» тигәндән иҫкә төшөрмәйем, ә әҙип, әлеге әйткәнсә, «халыҡтың рухи әйҙәүсеһе була ала» тигәндән килтерәм.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– «Киске Өфө» (5 – 11 ғинуар, 2013 йыл) биттәрендәге сығышында Илдус Бүләков ҡыйыу ғына, ысынбарлыҡҡа тап килгән фекер әйтте: «Лирика менән публицистиканы бергә ҡушып яҙған... Мостай Кәрим кимәленә хатта Рауил Бикбаев та етә алмай әле...» Тимәк, әйҙәүсе лә юҡ. Ваҡландыҡ беҙ. Ә бындайҙар исем, премия алып булһа ла, эре күренергә тырыша. Ошолай дауам иткәндә,

намыҫы булған ысын талант тегеләр рәтенә баҫыуҙан, йәғни маҡтаулы тигән исемдәрҙән баш тарта башлаясаҡ.

Шулай ҙа халыҡ яҡын күргән, ихластан хөрмәт иткән, һүҙе эше менән тап килеп, көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ижады менән дә, халыҡ менән туранан-тура аралашып та йөрөгән әҙиптәребеҙ бар ул. Рәшит Шәкүр, Мәүлит Ямалетдин, мәҫәлән. Йәшерәктәрҙән Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай. Бындайҙар, әлбиттә бик һирәк. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һанайым тиһәң, бер ҡул суғың да етмәй ҡалыр. Һабы килһә, йәбе килмәй тигәндәй, таланты булһа, рухы юҡ йә бар яҡтан да уртаса ғына, ә амбицияһы унауға бүлеп бирерлек, йә тәбиғәт бүләк иткәнен әрәм-шәрәм итеп тотоноп бөткән дә хәҙер байыған ҡояш яҡтыһында ҡыҙынып йөрөмәксе...

Нисек кенә булмаһын, әгәр ҙә хәлебеҙ рухи әйҙәүселәргә мохтаж икән, улар һис шикһеҙ алға сығасаҡ. Алға сығыуҙы туранан-тура ғына аңларға ла ярамай. Бигүк күренеп бармаһа ла, дөйөм рухи кимәлгә көслө тәьҫир иткән шәхестәр була. Ауылдарыбыҙҙа уҙған быуаттың 60-сы йылдарына тиклем шундай аҡһаҡалдарыбыҙ, Кендектең Оло инәһеләй ил инәләре лә бар ине. Һуңғы 20 – 25 йыл йәмғиәтебеҙгә әле беҙ тулыһынса аңлап та бөтә алмаған емергес эштәр эшләне. Милләттең киләсәге тураһында уйланһаң, уйылып китерҙәй хәлдәбеҙ. Әгәр ҙә күпселек ата-әсәләр үҙҙәре үк балаһын туған теленән яҙҙыра икән, нимәгә өмөтләнергә ҡала һуң?! Был балаларҙа ниндәй милли рух булыуы мөмкин?! Һәм ошондай хәлдә, милләт өсөн аяныслы хәлдә, халыҡ шағиры булайым тип сабыулап йөрөүселәр бар. Оят та юҡ, намыҫ та. Халыҡтың әйҙәүсеһе булыу өсөн бер ниндәй таныҡлыҡ та кәрәкмәй! Йөрәгеңдең халыҡ йөрәге менән бергә тибеүе генә кәрәк.

***– Нисек уйлайһығыҙ: хөкүмәт тарафынан тейешле иғтибар ителһә, әҙәбиәттә һиҙелерлек үҙгәрештәр көтөп булыр ине микән?***

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Был һорауға яуап биргәндә, Крыловтың билдәле мәҫәле иҫкә төшә. Уның һығымтаһы шул: суртан, ҡыҫала, аҡҡош төрлөһө төрлө яҡҡа тартҡанлыҡтан, йөк ҡуҙғалмай, ҡуҙғатыр өсөн бер йүнәлештә генә тартырға кәрәк. Шуның һымаҡ, хөкүмәт бер йүнәлештә генә алға һөрөп, ҡалғандарын, әйтәйек, мәҙәниәтте, әҙәбиәтте, сәнғәтте иғтибарһыҙ ҡалдырһа, йәмғиәт үҫеше тигеҙ бармаясаҡ, аҡһаясаҡ, һәм ул теүәл, тулы ҡанлы йәмғиәт булып үҫешмәйәсәк. Был – аксиома. Б. Ельциндың «Культура подеждет!» тигәнен бөтәбеҙ ҙә хәтерләйбеҙ. Тороп ҡалды, хәҙер уны башҡа йүнәлештәр рәтенә сығарыу өсөн күпме көс, ваҡыт, сығымдар кәрәк буласаҡ. Шуға ла бөгөн республика, ил масштабында ла әҙәбиәткә ҡараш үгәй балаға ҡараған кеүек бит. Беҙҙә улай уҡ ҡот осҡос тип әйтмәҫ инем, әммә Үҙәк телевидениела берәй күренекле әҙиптең сығыш яһағанын күргәнегеҙ бармы? Осһоҙ көлкө-шоуға ҡоролғандарынан (Радзинский, Задорнов, Жванецкий) тыш, береһен дә күргәнебеҙ юҡ. Гәзит биттәрендә лә юҡ улар, китаптары ла һирәк сыға. Бына һиңә «культура көтөп торор» тигәндең һөҙөмтәһе. Барыбыҙ ҙа ҡырағайланып бөтмәһәк ярай ҙа. Оҙаҡламай шулай булыуы бик ихтимал.

Әлбиттә, алда әйткәнемсә, беҙҙә хәл ул тиклем дә мөшкөл түгел. Гәзит-журналдар, китап сыға, әҙме-күпме гонорары ла түләнә, ләкин, ҙурҙан ҡупҡанда, барыһы ла ал да гөл, тип маҡтана ла алмайбыҙ. Маҡтанырлыҡ өсөн хөкүмәттең етди ярҙамы кәрәк, әгәр ул булһа, һүҙ ҙә юҡ, әҙәбиәттә лә яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр булыр ине. Үҙгәреш тигәнем дә әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт әһелдәренә ижад итер өсөн мөмкинлектәр, шарттар (ижад йорто, оҫтахана, мәҫәлән) тыуҙырыу

тураһында әйтәм. Ә былай ижад индивидуаль хеҙмәт, хөкүмәт бер кемдең дә ҡулынан тотоп яҙҙыра алмай.

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Әлбиттә. Яҙыусы ла кеше бит. Ә кешегә иғтибар кәмергә тейеш түгел, һүҙ оҫтаһына айырыуса. Уны, саҡ ҡына булһа ла бөгөнгө «ваҡлыҡтар»ҙан арындырып, ижади юғарылыҡҡа күтәрелергә мөмкинлек тыуҙырыу – хөкүмәт эшелер. Ижад йорттары, махсус командировкалар – былар барыһы ла элек бар ине бит. Былар-ҙан тыш, бөгөнгөгә ярашлы мөмкинлектәрҙең яңыларын да ҡулланырға була. Тик теләк кенә кәрәк.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Һәр яҡлап та булдыҡлы, халыҡ ихтирамын яулап өлгөргән, әммә юғары даирәлә ала ҡарғаға әйләнгәндәрҙе нисек «урамға сығарып ебәрәләр» икән тип аптырай торғайным. Бер мәл асыҡтан-асыҡ һорай ҡуйҙым. «Беҙҙең мөмкинлектәр етерлек ул!» – шулай булды яуап. Тимәк бындай «киң мөмкинлектәр»ҙе чиновниктарҙың үлсәменә тап килмәгәндәргә ҡаршы түгел, ә шартларға етешкән проблемаларҙы хәл итеүгә, шул иҫәптән әҙәбиәтте үҫтереүгә йүнәлтергә булалыр бит. Була! Тик әлегеһе мәлдә ул хыял ғына. Бөгөнгө юғары даирәләрҙә әҙәбиәтте яҡшы белгән, белергә, аңларға, уға ярҙам итергә, ул үткәргән идеяларҙы эшендә ҡуллана алғандар бик һирәк. Ә бит аҡыллы власть әҙәбиәтте бик урынлы һәм һөҙөмтәле файҙалана алыр ине.

***– Күҙ терәп торған «Ағиҙел»ебеҙ үҙенең 90 йыллығын билдәләү алдында... Уның яҙмышын 10–15 йылдан нисегерәк күҙаллайһығыҙ?***

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Тел һаҡланғанда, әҙәбиәт булыр, әҙәбиәт булғанда, «Ағиҙел» дә, республиканың башҡа баҫмалары ла йәшәр. Миллион ярымдан ашыу кешеһе булған халыҡтың шул байлыҡтарын икенсе төрлө күҙ алдына ла килтереп булмай. Әлбиттә, тираж кәмеүе ихтимал. Әле лә кәмеү яғына бара. Нишләйһең, тенденция шулай. Төрки донъяһында «Ҡазан утлары» (4000), «Ағиҙел»дән (3200) башҡа әҙәби-нәфис журналдарҙың тиражы меңгә лә етмәй, 500 дана булғандары ла бар, әммә сығалар бит. Бөтмәһен өсөн алдырырға, яҙылырға, яҙҙырырға кәрәк – үҙебеҙ үҙебеҙҙе хәстәрләмәһәк, берәү ҙә хәстәрләмәйәсәк...

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– «Ағиҙел» яҙмышы баҫманың нисек эшләүенә лә бәйле. Әгәр ҙә замандан артта ҡалмай икән, заман менән бергә атлай икән – йәшәйәсәк. Заман менән бергә үҙгәрмәһә, юҡҡа сығасаҡ. Үҙебеҙгә үҙебеҙ талапсан булайыҡ: кәмәбеҙ тишелмәгәнме, төбөнә һыу үтмәйме, елкәненә ел иҫерлекме? Заманса төҙөлгән кәмәгә дауыл-ғәрәсәттең дә ҡурҡынысы юҡ ул. Журналды алдырып уҡыусыларҙың да тын алышын белеп тороу кәрәк: нимә ҡыҙыҡһындыра уларҙы, нимәгә өҫтөнлөк бирәләр, ниндәйерәк әҫәрҙәрҙе, кемдәрҙекен күргеләре килә? Башҡорт әҙәбиәтенең флагманы булараҡ, сифатты, юғары художестволылыҡ кимәлен юғалтырға ярамай. Бөгөнгө уҡыусы, аҡрынлап булһа ла, осһоҙ, сенсация артынан ғына ҡыуған матбуғаттан арына, яңыса фекерләй башланы. Юғары зауыҡлы әҫәрҙәргә мохтаж ул беҙҙең уҡыусы.

Әлбиттә, хөкүмәт етәкселегенән дә күп нәмә тора...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Мин тираж, кәмегән осраҡта ла, мең ярымдан да түбәнәймәҫ, тип өмөтләнәм. Сифат кимәле лә, моғайын, һаҡланыр, ә бына күләме яғынан журналдың йоҡарыуы бар.

Беҙ, әҙиптәр (рәсми рәүештә Союзда 240-лап ағза!), «Ағиҙел»ебеҙ тип борсолһаҡ, моңһоҙораҡ туғандарыбыҙ, һәлкәүерәк дуҫтарыбыҙ өсөн 5 – 10 дана яҙҙыра алабыҙ бит (бына һиңә мең дана!). Әгәр ҙә үҙебеҙгә лә кәрәкмәй икән, ниндәй киләсәк булһын?!

***– Йәмғиәттәге проблемаларҙы хәл итеүҙә художестволы әҙәбиәт нисек ярҙам итә ала?***

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Мин был темаға алда ниндәйҙер кимәлдә ҡағылғайным инде. Әлбиттә, сарсағанда һыуҙы, асыҡҡанда икмәкте алыштыра алмай художестволы әҙәбиәт. Ләкин үҙенең тереклек итеү дәүерендә кешелек уйлап сығарған бөтә ҡиммәттәрҙе лә һыу, икмәк, йәки аҡса эквивалентына күсерергә ярамай. Һәр нәмәнең үҙ тәғәйенләнеше, үҙ бурысы. Бер аҡыл эйәһенең, әгәр Аллаһы Тәғәлә булмаһа, уны уйлап сығарырға кәрәк булыр ине, тигән мәғәнәле фекере бар. Кеше бербереһе менән тәүҙә ым-ишара, унан һүҙ аша аралашҡан, шул һүҙҙе ташҡа, мал тиреһенә, туҙға, башҡа предметтарға, һуңыраҡ ҡағыҙға төшөрөү хәсиәте тыуғас, әлеге һүҙ, һүҙҙәр йыйылмаһы көнкүреш ҡулланышынан ғәжәпләнеү, һоҡланыу, ҡурҡыу, аптырау тойғоһона күсә һәм шул хис-тойғоларҙы кемгәлер һөйләүҙән уҙып теркәп ҡуйыу хәжәтен барлыҡҡа килтергән. Ул кешеләрҙең ҡанында, һәр күҙәнәгендә, тел осонда, һиҙгер йөрәгендә, үткер күҙендә, һаҡ ҡолағында. Шулай икән, ул нишләп йәшәү проблемаларын хәл итмәһен?!

Мин алда Мостай ағайҙың батырлығы хаҡында әйткәйнем инде, 60 – 70-се йылдарҙа Распутин Байкал күлен һаҡлау буйынса күпме яҙҙы, күпме набат һуҡты. Эше һөҙөмтәһеҙ ҡалманы: күлде ағыулаусы ҡағыҙ-целлюлоза комбинатын туҡтаттылар бит. Белов Вологда өлкәһенең йылға-күлдәрен бысратыуға ҡаршы үткер публицистик мәҡәләләр яҙҙы. Властар барыбер иғтибар итте уның сығыштарына. Төньяҡ йылғаларын кирегә бороуға ҡаршы бөтә йәмәғәтселек, шул иҫәптән яҙыусылар ҙа, күтәрелде. Ул ҡырағай проекттан да баш тарттылар. Үҙебеҙҙә Борис Павловтың, Вил Ғүмәровтың, Марс Сафаровтың һ.б. мәҡәләләре шулай уҡ ҙур резонанс тыуҙырҙы. Күтәрелеш барыбер ҙә эҙһеҙ ҡалманы, иң мөһиме, тирә-яҡ мөхитте бысратыуға, зыянлы объекттар төҙөүгә, хужаһыҙлыҡҡа ҡаршы һүҙ әйтеп була икәнлеген күрһәтте халыҡҡа. Ә был бәләкәй эш түгел. Дискуссия, бәхәс ҡора, үҙ фекереңде властар алдында ҡуя белеүҙән һәм шуны талап итеүҙән башлана бит йәмғиәттәге үҙгәрештәр. Кемдер әйтергә, һүҙ күтәрергә, халыҡ массаларына аңлатырға тейеш. Ә быны иң ҡыйыу кешеләр генә булдыра ала. Шул иҫәптән художестволы әҙәбиәт тыуҙырыусылар ҙа...

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Ярҙам итә, әлбиттә. Тик туранан-тура түгел, ә үҙенең художестволы теле менән кеше күңеленә йоғонто яһауы аша. Мәҫәлән, ергә бәйле, эскелеккә ҡаршы күпме әҫәрҙәр яҙылды. Студенттар менән эшләгәс, халыҡ менән аралашҡанда иғтибар итә йөрөйөм: күптәрҙе «Ҡытай-город» ныҡ уйландырған. Торатауға бәйле гәзит-журналдарҙағы сығыштар ҙа эҙһеҙ үтмәгән. Ҡолой кантон шәхесенә яңыса ҡараш күптәрҙең иғтибарын яулаған. Художестволы әҙәбиәт күңел ҡылдарына ҡағыла алыуы менән хәл итә мәсьәләләрҙе. Әҙәм балалары теге йәки был әҫәргә ҡарата бер-береһенән ишетеп ҡалып та ҡыҙыҡһыныу белдерә,

уларҙы табырға, уҡырға тырыша. Ана шул ҡыҙыҡһыныуҙы һүндермәҫкә ине, ҡыҙыҡһындырырлыҡ әҫәрҙәр яҙырға ине.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Әҙип йәмғиәттәге проблемаларҙың, башлыса, кешенең үҙенә, уның мәҙәни, тәрбиәүи, белем кимәленә бәйле булыуын аңлап, әҙәби таланты, һүҙгә маһирлығы булғанға айырым әҙәм балаһының ғына түгел, тотош милләттең, илдең, кешелек донъяһының бөгөнгөһөн, артабанғы үҫешен, иртәгәге яҙмышын төрлө вариантта күрә, тасуирлай алыу һәләте менән сиселмәҫтәй тойолған гордий төйөндәрен сисеү яйын эҙләй, самалай, үҙе күҙаллағанса сисеп тә ҡуя. Шул нигеҙҙә әҙәм балаһының рухи ныҡлығын тәьмин итә. Һәр хәлдә шулай булырға тейеш.

Ике йөҙлөләрҙе, бөҙрә һүҙҙәр артына йәшенеүселәрҙе, «урамдың күләгәле яғындағылар»ҙы (Мостай Кәрим) яҡтылыҡҡа сығармайынса, сәйәси, иҡтисади, ижтимағи мәсьәләләрҙе генә түгел, ә рухиәт, әҙәбиәткә ҡағылышлыларын да хәл итеп булмай. Ғөмүмән, үҙебеҙҙең проблемаларға үҙебеҙ үк күҙ йомоуыбыҙ, ҡурҡыныс тыуыу менән башын ҡомға тығыусы дөйәғош ҡылығынан арына алмауыбыҙ йәки беҙҙе төрлө юлдар менән шундай хәлдә ҡалдырыуҙары сисәһе төйөндәрҙе тағы ла сеймәлдерә генә бара. Алдынғы әҙәбиәт иһә иң уйлы, фекерле интеллигенция вәкилдәренең бөгөнгө проблемаларға ҡарашын, халыҡтың мөнәсәбәтен, хис-тойғоларын, кәйефен сағылдыра, шул проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләй. Әгәр ҙә етәкселек халыҡ тормошона битараф булмаһа, уның бөгөнгө хәлен ҡалҡытып, дөйөмләштереп, йөрәккә лә, аңға ла етерлек итеп һүрәтләүсе художестволы әҙәбиәтте мөмкин тиклем тулыраҡ, киңерәк файҙаланырға тырышыр ине.

Кешелек төрлө дәүерҙәр кисергән. Быуат-быуат һуҙылған ҡатламдарҙың байтағын музей экспонаттары аша ғына күҙалларға мөмкин. Улар иһә: музей әйберҙәре, археология ҡомарттылары бөтә кеше лә аңлай алырлыҡ итеп, асылып китеп һөйләй алмай. Бынан айырмалы – әҙәбиәте сәскә атҡан дәүләттәр бар. Уларҙың тормошо бар тулылығында, күҙ ҡыҙырлыҡ та, ғибрәт алырлыҡ та булып тауирлана. Был йәһәттән айырыуса Урта Азиялағы Саманидтар дәүләте (875 – 999) ҙур иғтибарға лайыҡ. Ул осорҙағы ил тотҡалары мәҙәниәтте, әҙәбиәтте алғы планға сығара, ә рух илселәре, халыҡты аң-белемгә саҡырып, зирәк аҡыллы хакимдарҙы данлай. Атаҡлы Фирҙәүсиҙең үлемһеҙ «Шаһтар тураһындағы китаб»ын бөгөнгө батшаларҙың көн дә күреп йөрөрҙәй урынына ҡуйырлыҡ. Бәлки, тейешле фәһем алырҙар ине.

Бөгөнгө ысынбарлыҡ иһә шундай: етәкселек күбеһенсә үҙе менән генә мәшғүл, әҙәбиәт торошо үҙ ағышына ҡуйылған, халыҡ, иң көнүҙәк мәсьәләләр ҙә инде тиҫтә йылдар буйы хәл ителмәгәнгә, үҙ йүнен бары үҙе генә булһа ла күрергә тырыша. Элгәре идеологик баҫым көслө булһа, бөгөн хәлдәрҙең үҙағышына ҡуйылыуы 1861 йылда крәҫтиәнде ерһеҙ азат итеүгә тиң. Азатлыҡ бар ҙа ул, ижад емешең тейешенсә баһаланмағас, унан ни фәтеүә? «Донъя киңлегенән ни файҙа, аяҡ кейемдәрең тар булғас?!» Ошондай ситуацияла рухи әйҙәүсе булаһы ҡайһы бер әҙип, этешеп-төртөшөп, премия, маҡтаулы исем юллап йөрөй!..

Ни эшләй алабыҙ һуң? Намыҫлы теләһә ниндәй ҡатмарлы хәлдә лә йөрәге ҡушҡанын, ҡулынан килгәнен эшләр! «Мин – бәләкәй кеше, ни генә эшләй алам?» – тип ҡул ҡаушырып ултырмаҫ. Рухи әйҙәүселәребеҙ ҙә ошо мәлдә һыналыр: ижады менән дә, ҡылыҡ-фиғеле менән дә.

Тәрән тамырлы милләтебеҙҙе һаҡлап алып ҡалайыҡ тиһәк, ил инәһе, ил ағаһы, ил улы булайыҡ. Намыҫыбыҙ, йөрәгебеҙ ҡушҡанын эшләйек, йәмәғәт!

**Әңгәмәне Фәнил КҮЗБӘКОВ ойошторҙо.**

# «Ағиҙел» архивынан



*Журналдың*
*1952 – 1955 йылдарҙағы*
*баш мөхәррире Әкрәм ВӘЛИ.*



*Рәми ҒАРИПОВ,*
*Әнгәм АТНАБАЕВ,*
*Хәким ҒИЛӘЖЕВ*
*Салтыков-Щедрин*
*исемендәге китапханала.*

*Ленинград, 1969 йыл.*



*Сәйфи ҠУДАШ,*
*Шәйехзада БАБИЧТЫҢ*
*һеңлеһе Фәсәхәт апай*
*һәм Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.*

*Үткән быуаттың*
*70-се йылдары.*



*Фәрит ИҪӘНҒОЛОВ, Сәгит АГИШ, Агиш ҒИРФАНОВ.*



*Балҡар шағиры Ҡайсын КУЛИЕВ менән Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ.*

*Переделкино. 1976 йыл, октябрь.*



*Илдар ЮЗЕЕВ, Әнгәм АТНАБАЕВ, Рафаэль САФИН, Шәүкәт ҒӘЛИЕВ, Марат КӘРИМОВ.*

*Ҡазан, 1985 йыл, ғинуар.*



*Мөхәтдин ТАЖИ.*



*Мазһар АБДУЛЛИН.*



*Назар НӘЖМИ.*



*Ғилемдар РАМАЗАНОВ менән Хәким ҒИЛӘЖЕВ.*



*Мостай КӘРИМ.*



*Агиҙел буйында. Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ, Ғариф АХУНОВ, Назар НӘЖМИ, Салауат ГАЛИН, Миәссәр БАСИРОВ,*

*1980 йыл.*

## ЙЫЛМАЙЫУЫ МӘҢГЕ КҮҢЕЛДӘ...

*(Әмир Гәрәевтың тыуыуына – 85 йыл)*

Беҙ, театр училищеһының 1952 йылғы сығарылыш студенттары, бөтәбеҙ ҙә театрға әлегә алманыҡ. Һуғыш йылдарында уҡ һәм унан һуң да театрҙар ябыла торҙо. Сөнки улар хозрасчетта ултырҙы, үҙҙәрен аҫырай алманы. Һабаҡташтарым талантлы ине. Күптәребеҙ район культура йорттарына, хатта Алтай крайына художество етәксеһе итеп ебәрелде. Хәллерәктәр уҡыуҙарын дауам итте. Ә ҡайһыларыбыҙ китапханасы, балалар баҡсаһында тәрбиәсе, хатта һатыусы булып эшләне. Нишләйһең, йәшәргә кәрәк бит. Шулай ҙа береһе лә юғалып ҡалманы. Беҙҙән һуң 1953 йылда һуңғы сығарылыш булды һәм училище оҙаҡ ваҡытҡа ябылды.

Училищены тамамлағандан һуң, ҡайҙа ебәрәләр, шунда өс йыл эшләү мәжбүри ине. Һуңынан, теләйһең икән, икенсе эшкә күсә алаһың.

Мин дә, театрҙа эшләү теләге менән, Мәҙәниәт министрлығына барҙым. Әлбиттә, ҡырҡа кире ҡаҡманылар. «Бер артисыбыҙ пенсияға китергә тейеш, ҡасанныраҡ икәнен әлегә өҙөп кенә әйтә алмайбыҙ. Бәлки, кире уйлауы ла ихтимал. Белешеп тороғоҙ», – тинеләр.

Эсем бошоп, күңелһеҙ генә Карл Маркс урамынан китеп барам. Көтмәгәндә ҡаршыма һабаҡташым осраны.

«Башыңды эйеп, балтаһы һыуға төшкән кешеләй, ҡайҙа ашығаһың?»– тине, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас. Хәлемде һөйләп бирҙем.

– Эш тиһеңме? Эш ни, булыр ул.

– Миңә бит бөгөндән кәрәк, – тим. – Театрҙа урын бушағанды көтөп ултыра алмайым бит инде.

– Юҡҡа борсолма. Иҫән кешегә эш табылмаймы ни? Ана, редакцияларҙа булғылап тора. Иртәгә кил. «Совет Башҡортостаны»на инеп белешербеҙ, – тине курсташым, йыуатып. Ул үҙе «Ҡыҙыл таң»да хәбәрсе икән.

Икенсе көндө, һөйләшкәнсә, иртүк редакцияға килеп еттем. Ул саҡта бер нисә газета редакцияһы Карл Маркс урамының 25-се һанлы йортонда урынлашҡайны. Икенсе ҡатҡа күтәреләбеҙ, ә беренсе ҡатта – типография.

Баш мөхәррир командировкала икән, ярҙамсыһына керҙек. Йомошто аңлатҡас:

– Ғаффан Ғаффанович бөгөн юҡ, иртәгә мотлаҡ буласаҡ. Килегеҙ, һөйләшербеҙ, – тине олпат һәм мөләйем ағай. – Вәли Вәлиевич Нафиҡов, – тип таныштырҙы үҙен. Тағы килдем редакторға. Йылы ҡабул итте «баш» һәм һорауҙар яуҙырҙы:

– Белемегеҙ, ҡайҙа уҡынығыҙ? Яҙышҡанығыҙ бармы?

– Яҙышҡаным юҡ. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң, Өфөләге театр училищеһында уҡып, «драма актрисаһы» һөнәренә диплом алып сыҡтым.

Мөхәррир миңә ҡараны ла:

– Драмалар создавать итмәҫһегеҙ микән һуң? – тип йылмайҙы һәм: – Беҙҙә әле машинистка урыны ғына бар, машинкала баҫа беләһегеҙме? – тип һораны.

– Юҡ, бер ҙә баҫҡаным юҡ. Булдыра алырмын микән,– тим, икеләнеп. – Өйрәнерһегеҙ. Йәштәр атҡармаған эш бармы ни! Ғариза яҙығыҙ ҙа бүлек мөдирҙәренән ҡул ҡуйҙырып сығығыҙ. Шунан миңә инерһегеҙ, приказ яҙырмын. Беҙҙә тәртип шундай, – тип, техник секретарҙы саҡырып, мине эйәртеп ебәрҙе.

Машбюро тигәндәре – бер тәҙрәле бәләкәй генә ҡараңғы бүлмә. Биш өҫтәл ултыра, тимәк, биш машинистка эшләй бында. Өлкән машинистка Рабиға апай Сәйфуллина, минең урынымды күрһәтеп, машинкаға нисек ҡағыҙ ҡуйырға һәм нисек баҫырға икәнде аңлатты. Машинисткалар шул хәтлем шәп баҫалар – ҡулдарына күҙ эйәрмәй.



*Әмир Гәрәевтың ғаиләһе: (һулдан уңға) беренсе рәттә — ейәнсәре Алина, Әмир Гәрәев, ҡатыны Фәниә, икенсе рәттә — улы Әнүр, ҡыҙы Зилә.*

Мин уларға аптырап ҡарайым, миңә лә өйрәнергә кәрәк, башҡа сара юҡ. Әлдә фатирым яҡын – хәҙерге Яҙыусылар союзы йорто – Коммунистик урамы, 34, ауылдаш апайҙарҙа йәшәйем. Көн дә эшенән һуң ҡалып эшләйем. Бына шулай мин, серәшә торғас, машинистка булып киттем. Артистка – машинистка! Бына һиңә сәхнә ҡошо!

Бер йыл ғүмер үтеп тә китте. Коллективҡа ла, эшкә лә өйрәндем. Диктовкаға ла ултырта башланылар, дежурға ла ҡалдыралар. Күмәк көс менән бынамын тигән машинистка иттеләр мине.

Аҙнаға бер ял – йәкшәмбе. Подписка ваҡыты еттеме, агитбригада менән яҡынтирә ауылдарға концерт менән сығабыҙ. Әмир Гәрәев – лектор, Файыҡ Мөхәмәтйәнов «Ҡаҙ канаты»н йырлай (уның ошонан башҡа йыры ла юҡ ине шикелле), Рафаэль Сафин баянда һыҙҙыра, Уран Кинйәбулатов үҙенең шиғырҙарын уҡый, Тамара Тимофеева (мәрйә) – башҡорт, мин (башҡорт) татар бейеүҙәрен башҡарабыҙ. Һуң ғына ҡайтып йығылабыҙ, ә иртәгәһенә – эшкә. Күңелле һәм дуҫ йәшәнек. Ошолай йөрөүҙәр беҙҙе яҡынайтҡандыр ҙа инде. Көндәрҙән бер көндө Әмир Сәлимгәрәй улы (беҙ уны йомшаҡ ҡына баҫып, ашыҡмай ғына йөрөгәне өсөн «Бохар бесәйе» тип атай торғайныҡ) машбюроға йылмайып килеп керҙе лә:

– Фәниә ҡәрендәш, мин Польша яҡтарында йөрөп ҡайттым, юлъяҙмаларымды баҫып бирмәҫһегеҙме икән? Байтағын ҡағыҙға төшөргәнмен инде, ә ҡалғанын диктовать ҡына итермен, ваҡытығыҙ булһа... – тип һынсыл ғына ҡарап ҡуйҙы.

– Ярар, Әмир ағай, баҫырмын. Һеҙҙең өсөн ваҡыт йәл түгел.

– Иртәгә үк килтерәм. Килештек, әләйһә, – тип күңеле булып сығып китте.

Тиҙ эшләп бөттөк. «Совет Башҡортостаны»нда доңъя күрә торҙо.

Ҙур кәүҙәле, олпат кеше булғанға, ағайҙыр, тип уйлай инем. Мин унан алты айға ғына кесемен икән. Ҡатын-ҡыҙға ихтирам йөҙөнән «ҡәрендәш» тип өндәшкәндер, моғайын. Беҙҙең яҙмыштар ҙа оҡшаш: һуғыш йылы балалары. Аслыҡ, яланғаслыҡты буйтым татығанбыҙ. Аҙна артынан аҙна үтеп кенә тора. Тағы ла бер көндө:

– Фәниә ҡәрендәш, киноға ике билетым бар, компания составить итмәҫһең микән? – тине, эш аҙағында инеп.

– Әлләсе, – тим, икеләнеп.

– Әйҙә, әйҙә, үкенмәҫһең.

Луначарский баҡсаһындағы йәйге кинотеатрға барҙыҡ. Әлбиттә, киноға

кермәнек. Ике аҡҡош йөҙөп йөрөгән күл янындағы эскәмйәгә ултырҙыҡ та һөйләштек тә һөйләштек. Ул – үҙе хаҡында, мин – үҙем тураһында.

...Һуғыш сыҡҡас, уларҙы Сауҡайортҡа мал ҡарарға ебәрәләр. Ғаиләләре менән күсеп китәләр.

1943 йылдың майында аслыҡтан атаһы үлә. Ун дүрт йәшлек малай бер үҙе көнө буйы ҡәбер ҡаҙый. Етмәһә, ҡәбер төбөндә ҙур таш ята – уны соҡоп сығарырлыҡ түгел. «Ике ҡатын юғарынан мәйетте төшөрә башланы, ә мин – түбәндә. Көсөм етмәйенсә, ҡулымдан ысҡынып китте лә «шаҡ» итеп башы ташҡа бәрелде. Өнһөҙ ҡалдым. Атайҙың башын һәрмәп ҡарайым: ярылмағанмы, ҡанамаймы, йәнәһе. Үҙ алдыма һөйләнәм: «Атаҡайым, ғәфү ит, көсөм етмәне шул, ғәфү ит, атаҡайым». Йөрәгем өҙөлөп төшкәндәй булды. «Нишләп сыҡмайһың, нимә унда ҡатып ҡалдың?» – тип һөрәнләй әсәйем өҫтән. Шунан ғына иҫемде йыйҙым.

Атайҙы ер ҡуйынына биреп, ауылға ҡайттыҡ. Итәк тулы бала менән әсәй тол ҡалды. Бишәүҙең иң олоһо – мин. Аслыҡ, яланғаслыҡ. Әллә нисә ҡабат шешендем», – тип әсенеп, шул замандағы михнәттәрҙе йыш ҡына телгә ала торғайны ул. Йәшләй генә үҙенән бер нисә йәшкә өлкән ҡыҙға өйләнә. 1947 йылда ҡыҙҙары Рәйсә тыуа. Ә 1948 йылда  хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Ул китеү менән, ҡатыны, алты айлыҡ балаһын ҡәйнәһенә ҡалдырып, бергә йыйған бөтә нәмәне тейәп, икенсе иргә сыға. «Бала тәҡәтһеҙ булып илай, имергә һорай. Аптырап-алъяп, үҙем имеҙә башланым, – тип һөйләгәйне бер ҡайтҡанда ҡәйнәм. Нисә йылдар бала ҡапмаған имсәгемә һөт төшөп китте. Кеше күрмәһен тип, атайығыҙҙың иҫке тунын бөркәнәм имеҙгәндә».

Хәрби-диңгеҙ флотында биш йыл хеҙмәт итеп, Тымыҡ океан флотының өлкән лейтенанты дәрәжәһендә ҡайтып (1953 йылда), «Совет Башҡортостаны» газетаһында эшләй башлай.

Оҙаҡ та көттөрмәй, әсәһенән хат килеп төшә. «Улым, ҡыҙың ҙурайҙы инде. Үҙ яныңа алһаң, арыу булыр ине. Ҡараманым түгел, ҡараным. Инде үпкәләмәҫһең. Мин дә ҡартайҙым, бик йонсоном», – тип яҙған.

Атай кеше нишләһен, ҡайтып ала ҡыҙын. Ауылдашы шағир Фәйзи Сиражетдиновтарҙа фатирҙа йәшәй башлайҙар. Аҙналыҡ балалар баҡсаһына урынлаштыра ҡыҙын. Ял көндәре баланы алып ҡайтып йыуындырып, өҫ-башын таҙалап, яңынан илтеп тапшырырға тейеш. Үҙе менән мунсаға алып бара ла ҡатындар бүлеген йөрөп сыға. «Минең ҡыҙымды йыуындырып ҡына бирегеҙсе, күпме һораһағыҙ ҙа, хаҡын түләйем», – тип үтенә икән. Шулар араһында барыбер мәрхәмәтлеһе табыла, ә мин үҙем тиҙ генә йыуынып сығам да көтөп ултырам, тип үткәндәрен хәтеренә төшөрә ине. Ҡайһы саҡ дежурство ял көнөнә тура килә: «Балалар баҡсаһынан алып ҡайтам да, эшем бөткәнсе, диванда уйнай торғас, йоҡлап китә». Шундай көндәрҙә М. апай, баланы яратҡан булып, үҙенә эйәләштереп ала. Яңғыҙ иргә, ҡыҙ баланы үҫтереүсе атайға, башҡа сара ҡалмай – ул ҡатын үҙенән егерме йәшкә өлкән булһа ла, өйләнә. Әлбиттә, яҙылышмайҙар. «Минең тормошомдоң иң ҡара полосаһы – уның менән йәшәгән йылдарым, – тине ул, айырылғас. – Кейемдәремде бирмәне, һуңынан, ауылға илтеп, минең дуҫтарыма һатып йөрөгән».

* * *

График буйынса отпускым көҙгә тура килде. Ул мине вокзалға төшөрөп, поезға ултыртып ебәрҙе. Инде отпускының яртыһы үтеп тә китте. Ҡул эше менән ултырам.

– Әзмәүерҙәй бер кеше инеп килә, кем булыр икән? – ти әсәйем, тәҙрәнән ҡарап.

Ишек шаҡынылар. Йүгереп барып ишекте асып ебәрһәм, ҡояштай балҡып Әмир «ағай» баҫып тора.

– Үтегеҙ. Ниндәй елдәр ташланы?

– Юл төштө. Архангелгә командировкаға китеп барам, ыңғайға хәлеңде белеп сығайым, тинем.

– Рәхмәт, – тим, аптырап.

Сәйҙән һуң, килеүенең сәбәбен аңлатты: атай-әсәйемдең ризалығын алырға, мине ҡоҙаларға килгән икән. «Хәйерле булһын», – тип атай-әсәйем ризалыҡ бирҙе. Туған-тыумасаны йыйып, туй һымаҡ мәжлес үткәрҙек. Ике кис ҡунып, ул мине үҙе менән алып та китте.

Зенцов урамындағы йорттоң бер бүлмәһенә аҡса түләп ҡуйған. Шунда йәшәй башланыҡ. Төшкө ял сәғәтендә ЗАГС-ҡа барып, яҙылышып ҡайттыҡ. Тәүге көндәрҙән үк ҡаршылыҡтар тыуа торҙо. «Ҡатын айырған» тип, Әмирҙе партбюроға ҡуйҙылар. «Партиянан сығарырға!» – тип күптәр оран һалған. Шул саҡ газетаның мөхәррире Ғилемдар Йыһандар улы Рамазанов урынынан тороп:

– Йәштәргә ҡағылмағыҙ. Йәшәһендәр әйҙә. Партияға беҙ алманыҡ, флотта хеҙмәт иткәндә кергән. Әгәр ҙә ризаһыҙлыҡтар була ҡалһа, обкомға үҙем барып һөйләшәсәкмен, – тигән. – Беҙҙең уны партиянан сығарырға хаҡыбыҙ юҡ.

Уға хаттар бүлеге мөдире Роза Ғәли ҡыҙы Кәримова ла ҡушыла:

– Ул ғаиләнең нигеҙе юҡ. Хеҙмәттән ҡайтҡас, ҡыҙын етәкләп, фатирһыҙ йөрөгәндә, аптырап барып кергәнен бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Ул ханым үҙенән егерме йәшкә өлкән. Әмир Сәлимгәрәевичты партиянан сығарырлыҡ сәбәп күрмәйем мин. Уйлағыҙ, кеше яҙмышы хәл ителәә, – тигән.

Мәсьәлә ыңғай хәл ителгән. Әммә беҙҙең өйләнешеү күптәргә тынғылыҡ бирмәне. «Ир менән ҡатын бергә эшләргә тейеш түгел»,– көнсөлдәр шулай тигән.

Әҙәм балаһының яҙмышы ниндәй етәксе ҡулы аҫтында эшләүгә нығ бәйләнгән. Беҙҙең ғаилә ҡороп йәшәп китеүебеҙҙә Ғилемдар Рамазановтың ярҙамы ҙур булды. «Совет Башҡортостаны» газетаһы мөхәррирҙәренән (үҙем белгәндәрҙән) иң кешелеклеһе, кеселеклеһе, мәрхәмәтлеһе ул ине. Редакцияла эшләүселәрҙең бөтәһенә лә – ул ҙур вазифалымы йәки бәләкәй генә эш башҡарамы – һәммәһенә лә ихтирам менән ҡарай торғайны. «Бөтәгеҙ ҙә газета сығарыуҙа ҡатнашаһығыҙ. Шулай булғас, барығыҙ ҙа берҙәй үк яуаплы»,– тип иртәнге биш минутлыҡ планеркаға барыбыҙҙы ла саҡыра ине.

Ғилемдар Йыһандар улының юбилейында илдең төрлө төбәктәренән йыйылған арҙаҡлы яҙыусылар араһында Хәсән Туфанды күреү бәхете тейҙе.

Тормош иптәше шағирә Фәниә Чанышева менән әле лә шылтыратышып, хәбәрләшеп торабыҙ. Әмирҙең вафатынан һуң иҫтәлекте беренсе булып «Ағиҙел»дә Фәниә ханым баҫтырып сығарҙы. Рәхмәт уға. Ғүмер буйы беҙ уларҙың ярҙамын, изгелеген тойоп йәшәнек.

Талантлы шағирә, яҙыусы үҙенең матур юбилейына ла саҡырҙы. Ғаиләбеҙҙе яҡын иттеләр, ҡурсаланылар. Рәхмәт уларға.

* * *

...Ул йылдарҙа «Сельское хозяйство Башкирии» тигән журнал сыға торғайны. Редакторы, элек газетала эшләп киткән Заһир ағай Вахитов:

– Мин һеҙҙең хәлдәрҙе ишеттем. Беҙҙең машинистка пенсияға китә. Кил беҙгә, Салауатова, бергәләп эшләрбеҙ, – тине. Ризалаштым. Бәләкәй генә, татыу коллективҡа өйрәнеү бер ҙә ҡыйын булманы.

...1958 йылдың майы. Ҡытай сигендә бола ҡупҡан. Әмиргә повестка килде. Уның университетта уҡып йөрөгән сағы, ә мин ауырлымын. Ҡалдырыуҙарын һорап военкоматҡа барып ҡараны. Ҡалдырманылар. Элек хеҙмәт иткән диңгеҙ офицерҙарын, лейтенанттарҙы эшелон-эшелон оҙата башланылар. Тормош беҙҙе тағы һынау алдына ҡуйҙы. Нишләйһең, яҙмышыбыҙ шулайҙыр. Иремде юлға әҙерләүҙән башҡа сара юҡ. Бөтә байлығыбыҙ – фанерҙан эшләнгән ике сумаҙан.

Ҡараһы – үҙе менән бергә диңгеҙҙең тоҙло һәм әсе елдәрен буйтым татып сыныҡҡаны – Әмирҙеке. Алһыу ерлеккә ҡып-ҡыҙыл ике алма төшөрөлгәне, студент йылдарында үҙем менән михнәт күргәне – минеке. Килька ашап, титандан йылы һыу эсеп уҡылды. Ул заманда Өфөлә йәшәүсе ауылдаштарым, алыҫыраҡ туған тейеш кешеләрем дә бар ине. Әммә ас ваҡытымда мин уларға бер ҡасан да барманым. Ас икәнемде күҙемдән күрерҙәр, тип ояла инем. Ғүмерем буйы «хәйерсенең эреһе» булдым.

* * *

Ҡара сумаҙанды тағы сәфәргә әҙерләйбеҙ. Иң кәрәк кенә әйберҙәрен, бер нисә китабын һалды. «Форсат тейһә, имтиханға әҙерләнермен», – тине. Урамға сыҡтыҡ. Өнһөҙ атлайбыҙ. Бер аҙ барғас, ҡапыл туҡтаны ла:

– Фәниә, һин мине вокзалға хәтлем оҙатма инде. Айырылышыу былай ҙа ауыр, үҙеңә лә ҡыйын булыр. Бар, ҡайт, илама, һин илап ҡалғас, минең юлым уңмаç. – Етәкләп килгән ҡулын тиҙ генә ысҡындырҙы ла шәп итеп атлап китте. Ә мин толҡа тапмай, һыҡтап, ҡайғыларға күмелеп тороп ҡалдым.

Икенсе көндө эшкә шылтыратты: «Юлдабыҙ. Тейешле урынға барып еткәс тә адреслы хат яҙырмын. Борсолма, үҙеңде һаҡла!» – тине. Ә мин һытыҡ: «Әмирүк, тиҙерәк ҡайт. Көтәм», – тип ҡысҡырып илайым.

Хаттары көн дә килде. «Боевая вахта» тигән газетала эшләй башлаған. «Совет Башҡортостаны»на ла мәҡәләләре килә торҙо. Гонорарын алып, посылка ебәргеләнем: һуған, һарымһаҡ, сәк-сәк, ҡорот, папирос һәм бик ныҡ йәшереп бер «мерзавка» һалдым. Унда посылка кемгә килһә лә, коллектив менән һыйланалар икән. «Посылканы алғас та, тиҙ генә «мерзавка»ны кеçәмә тыға һалдым, ә ҡорот, сәк-сәктең нимә икәнен дә белмәйҙәр», – тип көлөп хат яҙғайны. («Мерзавка» – бармаҡ буйы ғына шешә йоратына һалынған хәмер.)

Минең хәлдәр мөшкөлләнде. Фатирға түләргә аҡса етмәй. Әхирәтем янына – Аксанов-Бондарная мөйөшөндәге йортҡа күсергә тура килде. Икебеҙ бер карауатта йоҡлап йөрөйбөҙ. Ике бүлмә: береһендә – хужабикә улы менән һәм беҙ. Ә икенсеһендә – Һаҙый ағай Бикчәнтәев ҡатыны Сажиҙә апай менән (Һаҙый ағай – яҙыусы Әнүәр Бикчәнтәевтың атаһы).

Ишектән кергәс тә тар ғына коридор – кухня һымаҡ нәмә. Форсат тейгәндә, иртән тамаҡ ялғап китәбеҙ эшкә.

Көндәр үтә тора, Әмирҙең китеүенә лә бер нисә ай уҙҙы. Эштән ҡайтыуыма һөйөнөслө хәбәр алдым: «Ҡайтаралар, фәлән көндө ҡаршы ал» тиелгән телеграммала. Шатлығымдың сиге юҡ. Әммә «Ҡайҙа алып ҡайтайым? Өсәүләп бер карауатта йоҡлай алмайбыҙ бит инде», – тигән уй башымды быраулаh, төнө буйы йоҡлай алманым. Эштән сыҡтым да таныштарыма йөрөп әйләндем. Зорин исемендәге 2-се трамвай депоһы урынындағы шәхси йорттарҙың береһендә (элекке Ырымбур урамы) таныштарым йәшәй ине. Уларҙың утын һаҡлай торған каретниктары бар. Матур ғына һике эшләп ҡуйғандар, армияға киткәнсе, йәйҙәрен малайҙары шунда йоҡлап йөрөгән. Ваҡытлыса булһа ла йәшәрлек урын табыуыма ҡыуанысымдың сиге булманы.

Вокзалға иртәрәк төштөм. Поездар киләләр, китәләр. Перрон тулы халыҡ гөжләп тора. Ваҡытты үткәрә алмай, арлы-бирле йөрөйөм. Ниһайәт, көткән поезд, әсе һыҙғыртып, килеп туҡтаны. Халыҡ ағымын йырып, этелә-төртөлә алға йүгерәм. Үткән кешеләр араһынан уны эҙләйем.

– Фәңкәш! – тип ҡулымдан эләктереп алмайынса, үҙен танымaным. Ҡояшта ҡап-ҡара булып янған, ҙур тирәсле һалам эшләпәлә негрға оҡшап ҡалған.

Икенсе фатирға күсеүемде яҙғайным инде. Әле йәшәгән ергә инеп сәй эстек тә Ырымбур урамындағы «торлаҡ»ҡа киттек, һалҡындар ныҡлап төшкәнсе шунда көн күрҙек. Эштән сығабыҙ ҙа, етәкләшеп, фатир эҙләп ҡала ҡыҙырабыҙ.

– Һеҙҙең балағыҙ буласаҡ, ә беҙ бала тауышына ярамайбыҙ, – тигән яуапты йыш ишетергә тура килде.

Һаҙый ағайҙарға фатир бирәләр икән, тигән хәбәр еткерҙе әхирәтем. Һалҡындар ныҡлап башланды, «каретник»та йәшәү мөмкин түгел, эсе туп-тулы утын булһа ла – йылытмай икән.

Маһи апайға килдек һөйләшергә. Иҙәндә йоҡлап йөрөргә лә ризабыҙ. Әйберҙәрен төйнәгән көйө, ордер көтөп байтаҡ яфаландылар улар ҙа. Һаҙый ағай менән Әмир бик дуҫлашып алды.

– Әмир ҡусты, бер «әфисәр бармағы»нды бир инде, еңгәң күрмәгәндә генә, әйҙә, көйрәтеп керәйек, – ти торғайны, мут ҡына йылмайып. Бик шаян, күңелле кеше ине.

Беҙ улар бүлмәһендә ҡалдыҡ. Әмир баштан-аяҡ эшкә сумды. 1958 йылдың декабрендә ҡыҙыбыҙ Зилә донъяға килде. Ул заманда декрет отпускыһы бик ҡыҫҡа ине: бала тыуыр алдынан – бер ай, тыуғас – бер ай. Ике айлыҡ баланы ҡалдырып, эшкә сығырға кәрәк, ә ҡалдырыр кешебеҙ юҡ. Атайым менән әсәйемде ауылдан күсереп килтерҙек. Ғаиләбеҙ тиҙ генә ишәйеп китте. Тәүге ҡатынынан тыуған ҡыҙы Рәйсә лә беҙҙең менән.

Ун квадрат метр ғына бүлмәлә ике тимер карауат, мейес янында хужабикәнең һандығы – оло ҡыҙыбыҙҙың урыны. Бәләкәй генә өҫтәл, ә сабыйҙың үҙ урыны юҡ. Одеялдың дүрт мөйөшөн үҙебеҙҙең карауат башына бәйләйбеҙ ҙә Зиләбеҙҙе шунда һалабыҙ. Иртәнгәсә беҙҙе ҡойондороп та ҡуйғылай.

Фатирығыҙ бәләкәй, тип тормайҙар. Ике яҡтан да туғандар, таныштар ағыла башланы. Ул заманда ауыл халҡы йә көнбағыш, йә муйыл һатырға килә торғайны, һатыуҙары үтһә, икмәк, май артмаҡлап ҡайтып китәләр. Ҡуна ҡалһалар, төндә тороуҙы онот: кеше өҫтөнә һыта баҫаһың. Аяҡтары өҫтәл аҫтында, баштары ишек тупһаһында тиерлек.

1959 йыл. Әмирҙе үҙ хәбәрсе итеп Сибайға ебәрмәкселәр.

– Әмир Сәлимгәрәевич, ризалаш, ҡатыныңды театрға урынлаштырырбыҙ, дипломлы актриса була тороп, машинка төбөндә ултыра, – тинеләр.

– Юҡ, мин Өфөнән бер ҡайҙа ла китмәйем. Ә ҡатыным театрҙа эшләмәйәсәк. Ул минең үҙемә кәрәк, – тип ҡәтғи яуап биргән. –Флоттан мин уҡырға тип, матбуғатка һәм әҙәбиәткә хеҙмәт итер өсөн ҡайттым. Юғиһә, сверхсрочник итеп ҡалдырырға бик өгөтләгәйнеләр, – ти. Ысынлап та, ул киске мәктәптә уҡып, унды бөтөрҙө һәм аттестат алды. Артабан ситтән тороп уҡып, университет тамамланы. Ул заманда яҙыу машинкаһы алыу–хыял ғына. Шуға күрә уның яҙған әҫәрҙәрен йә эштән һуң, йә ял көнө редакцияға барып баҫа инем. Уның ижади отпуск алып, яҙышып ултырғанын хәтерләмәйем. Ул–йөк аты ине. БДУны бөтөргәс, обком Мәскәүгә Юғары партия мәктәбенә уҡырға ебәрҙе. Бер ай уҡығас, тар күңелле кешеләр, ялыу яҙып, ҡайтарҙылар.

* * *

Бер көндө Тәхәү ағай Ҡазыҡов (районлашы, танкист, һуғышта танкта янып яраланып ҡайтҡан) килде. Оҙаҡ йылдар «Совет Башҡортостаны»нда бергә эшләнек. Әмирҙе бик яҡын күрҙе. Байтаҡ гәпләшеп ултырҙылар. Икәүләп оҙата сыҡтыҡ. Шул саҡ ул:

– Һеҙ беләһегеҙме, ҡартығыҙҙың көнө һанаулы ғына ҡалған, бөтөнләй ҡулбаштары төшкән бит. Тере сағында ауылына оҙатыу хәйерле булыр, – тине.

Атайым менән әсәйемде Биктимер ағайым килеп алды. Ҡайтып бер ай ҙа торманы – вафат булды. Әсәйем 24 йыл беҙҙә торҙо, ә һуңғы йылдарын ауылда – бер туған апайым Рәхимәлә йәшәне.

1960 йылда улыбыҙ Әнүр тыуҙы. Уны Әнүр Вахитов хөрмәтенә шулай ҡуштыҡ. Атай кеше шатлығынан, беҙҙең янға килеүҙе лә онотоп, урамда осраған һәр

танышын һыйлап йөрөгән. Икенсе көндө килеп, шатлыҡтан йөрәк туҡтарлыҡ хәбәр һалды: «Беҙгә ике бүлмәле фатир бирҙеләр!»

– Әмир, шаярма әле, йә ысынлап ышанып ҡуйырмын да, һуңынан бик ҡыйын булыр,– тим. Ул гелән юмор менән һөйләшергә ярата ине.

– Бындай хәбәрҙе алдап һөйләмәйҙәр,– тип кеҫәһенән ордер тартып сығарҙы ла миңә һондо. Ә мин ҡыуаныстан йәштәремде тыя алмайым.

Бер аҙна тигәндә беҙҙе бала табыу йортонан сығарҙылар. Яңы фатирға ҡайттыҡ – ур-ра, үҙ мөйөшөбөҙ бар!

«Сельское хозяйство Башкирии» журналын Свердловскиға күсерҙеләр. Мин унда ҡабат эшкә бара алманым. Яңынан газетаға саҡырҙылар. Өйҙә ултырып эшләйем. Декреттамын. Өлкән машинистка Рабиға апай Сәйфуллина ашығыс материалдарҙы кис эштән алып ҡайта, ә мин уны иртәнгә баҫып, «Голубой Шаяп»ҡа сығарып бирәм. Ҡыҫҡа ғына декрет отпускыһында ла эшләргә тура килде.

Ул заманда Матбуғат йортонда эшләүселәрҙе Октябрь проспектынан эшкә алып китәләр, ҡайтарып ҡуялар ине. Ҡайтҡанда Абдрахман ағай Баязитов машинала бейей-бейей ҡайта торғайны. Ул да мәрхүм инде.

«Голубой Шаяп» – зәңгәргә буялған япмалы йөк машинаһы. Нәшриәт директорының фамилияһы Шаяпов булғанға шулай атағандар.

1968 йылда Рамаҙан Ҡондоҙбаев (редактор урынбаҫары), Әмир Гәрәев (ауыл хужалығы бүлеге мөдире), Ишбулды Рауилов (бүлек мөдире) – өсәүләп бер гектар самаһы ер юллап алдылар һәм «Совет Башкортостаны»ндағы журналистарға өсәр сутый ер бүлделәр. Дәррәү генә, кем нисек булдыра ала, таҡтанан будка төҙөп керҙеләр. Ямғырҙа ышыҡланырлыҡ ҡына инде.

1971 йылда Әмирҙе «Китап» нәшриәтенә баш мөхәррир итеп үрләттеләр. Үҙе эшләгән дәүерҙә ҡағыҙ һаҡларға – келәт, машиналар ҡуйырға гараж төҙөттө.

Берҙән-бер көндө директор менән аралары боҙолдо. Сәбәбе – рәссамдар. «Арҡыс-торҡос өс-дүрт һыҙыҡ һыҙғанға мул итеп гонорар ҡуяһың»,– тип бәйләнгән директор.

– Һеҙ ҙә һыҙығыҙ шундай һыҙыҡтарҙы, һеҙгә лә шул саҡлы гонорар ҡуйырмын,– тигән Әмир. – Әгәр ҙә һеҙ минең эшемә кәрәк-кәрәкмәгәнгә ҡыҫылаһығыҙ икән, мин былай эшләй алмайым,– тип ташлап сығып киткән.

Бер нисә көн эшкә сыҡманы. Шунан директор шылтырата:

– Улай булғас, килеп ғариза булһа ла яҙып кит...

– Һинең шоферың бар бит, ебәр. Яҙырмын ғариза, – ти Әмир.

Унын нәшриәттә эшләүенә көнсөллөктән эстәре көтөрләгән меҫкендәр, ул киткәс, шатлыҡтарын йәшерә алманы. Газетала оҙаҡ йылдар бергә эшләгән, баҡсаһында «ҙур» кишерҙәр үҫтереүсе урамда мине туҡтатты ла: «А-а-а, министром хотели стать, не вышло»,– тине сарказм менән.

– Һуң, ағай кеше, нәшриәттә нисә йылдар ятҡан шиғырҙар йыйынтығың Әмир барғас донъя күрҙе түгелме һуң? – тим. – Әмир кеүек киң күңелле булырға кәрәк әле һеҙгә.

– Уныһы бар инде, уныһы бар... – ти үҙе тағы ла.

– Әле ул урын буш икән, барып ултыра алаһығыҙ, ҡулығыҙҙан килһә,–тинем, аптырап.

Бер нисә йыл үткәс, нәшриәт директоры, аэропорттан ҡайтышлай баҡсабыҙға кереп, ғәфү үтенде урынһыҙға рәнйеткән өсөн.

1995 йыл баҡсаға яңы күршеләр килде. Шул уҡ бәндә, биш-алты кеше эйәртеп килеп, утыҙ биш йыл файҙаланған еребеҙҙе яңы күршеләргә бүлеп бирҙе. Әмир ныҡ борсолоп:

«Һеҙгә тағы минән нимә кәрәк – алығыҙ», – тине ҡоҙғондарға.

Шул көндө Әмиргә инсульт, ә миңә нервный стресс булып, икебеҙ ике дауаханала берәр ай ятып сыҡтыҡ. Шунан һуң ул мандый алманы.

Үлгәндән һуң да тыныс ятырға бирмәйҙәр. «Юҡҡа ваҡытығыҙҙы әрәм итмәгеҙ, егеттәр», – тип әйтке килә ҡайһы берәүҙәргә. Кеше үҙе тере саҡта алышырға кәрәк. Ул намыҫлы эшләне. Юҡҡа маташаһығыҙ.

* * *

Әсғәт Мәсғүтович Мирзаһитов Яҙыусылар союзына рәйес итеп күсерелгәс, баш мөхәррир булып Рәйес Низамов ҡалды «Ағиҙел»дә. Рәйестән һуң пенсияға сыҡҡансы Әмир баш мөхәррир булды. Намыҫлы эшләне, тип икеләнмәйенсә әйтә алам. Дуҫтарына ғүмере буйы тоғро ҡалды. Рәйес Низамовҡа үҙе йөрөп бюст ҡуйҙырҙы.

Һуңғы йылдарҙа нығ ауырыны, ҡан баҫымы бик юғары булды. Дүрт тапҡыр ауыр операция үткәрҙе. Дуҫтарының күбеһе баҡыйлыҡҡа күскәйне инде.

Баҡсала Рәшит Солтангәрәев менән бик дуҫ йәшәнеләр. Уларға Абдрахман Баязитов та ҡушыла ине. Рәшиттең вафатын ауыр кисерҙе Әмир. Зиннәт ағай Әминев менән дә әшнә булдылар.

Балалар үҫте. Утыҙ ике квадрат метрлы «хрущевка» алты кешенән торған ғаиләгә тарыраҡ була башланы. Өҫтәүенә, туғандарҙың йә ауылдаштарҙың уҡырға килгән балаларын һыйындырырға тура килде. Ижад кешеһенә ултырып эшләргә үҙ мөйөшө булманы. Фатир юллау проблемаһы килеп тыуҙы.

Бер көндө әхирәтем Рәғнәгә зарымды һөйләнем.

– Һеҙ бит кисәләргә йыш йөрөйһөгөҙ, начальствоны шул ваҡытта ғына тотоп була, – тине әхирәтем.

Мин шулай эшләнем дә.

Мостай Кәрим ағайҙың 60 йәшен «Рәсәй» ҡунаҡханаһының ҙур залында үткәрҙеләр. Бөтә яҙыусыларҙы ла ҡатындары менән саҡырғайнылар. Тәнәфестә, бөтә ҡыйыулығымды йыйып, оло ағайҙың биш минутҡа ғына ҡабул итеүен үтендем. «Ярар» тигән яуап алдым, һуңынан Әмир мине бик ҡаты әрләне: «Һинең ирең юҡмы ни, ниңә улай кеше аптыратып йөрөйһөң...»

Бер йыл үтеүгә, беҙ дүрт бүлмәле фатирлы булдыҡ. Өлкә комитетында эшләгән ағай әле иҫән. Рәхмәтем сикһеҙ ҙур. Оҙон ғүмер, иҫәнлек теләйем. Серҙәшем, кәңәшсем, ярҙамсыл әхирәтем Рәғнәгә рәхмәттең иң олоһо. Ғүмеребеҙҙең һуңғы минутына тиклем беҙ бергә. Аллаға шөкөр.

* * *

Ата-әсәһенең тыуған малайҙары гел үлеп торған була. 1928 йылдың 18 февралендә сирләшкә генә ир бала донъяға килә. Инде быныһы ла үлеп ҡуймаһын тип, уны һатып алырға кәңәшләшәләр. Шундай йола бар икән.

Баланы кемдер күршеләренә илтеп ҡуя. Ата-әсәһе барып, һатыулашып алырға тейештәр. Шулай эшләйҙәр ҙә. Улдарын күршеләренең тәҙрәһе аша һатып алалар. Әмирҙән һуң Рауза, Разия, Әнүәр һәм Нурия тыуа. Разия исемле һеңлеһе генә иҫән, Сабир кейәү менән матур итеп балалар үҫтерҙеләр, донъя көтәләр.

Ярҙам һорап килгәндәргә ҡулынан килгәнсә булышты.

Ун дүрт йәшенән үҙенең колхозы «Әрмет»тә эшләп, ғүмере буйы ярҙамынан ташламаны. Яңы председатель һайландымы–ярҙам һорап Әмиргә киләләр ине. Уларҙы эйәртеп йөрөп, хужаларға инеп, үтенестәрен хәл итеп ебәрә торғайны.

Ауылдашы – һуғыш инвалиды, яҙыусы Ибраһим ағай Ғиззәтуллин ғаиләһенә ғүмере буйы изгелек эшләне. Бөтә балаларын да йә уҡырға, йә эшкә урынлаштырҙы. Хатта оло улы Димде йылға яҡын үҙебеҙҙә фатирҙа тотто́к. Хәсәнде Мәскәүҙән Өфөгә ҡайтартыу өсөн күп йөрөнө. Ибраһим ағайҙың әҫәрҙәрен баҫтырып сығарыуҙа ла ярҙамы ҙур булды. Ауылдаштарына, дуҫтарына бер ҡасан да хыянат итмәне – тоғро ҡалды.

Һуңғы йылдарҙа нык сирләне. Олоғайғас, йыш ҡына үлем хаҡында ла һөйләшә инек. Ул: «Барыбер мин элек китермен инде. Һин мине арыу ғына итеп ерләрһең дә үҙең яйлап ҡына үлерһең әле. Тик ҡәбереӊ минең янымда булһын, ҡулыңды булһа ла тотоп ятырмын»,– тип көлә торғайны. Романтик ине, үтә сабыр, ғорур ине. Үҙе әзмәүерҙәй булһа ла, күңеле нескә ине. Балаларым атай тип өҙөлөп торҙо. Ҡыҙыбыҙ Зилә – юғары белемле, ике институт бөтөрҙө. Егерме ете йыл Зәки Вәлиди исемен йөрөткән Республика милли китапханаһында эшләне, һуңғы йылдарҙа сит телдәр бүлеген етәкләне. Әле Өфө дәүләт авиация техник университетында өлкән китапханасы.

Улыбыҙ Әнүр – замана кәсебе – бизнес менән шөғөлләнә. Бер бөртөк кенә ейәнсәребеҙ Алина институт тамамлап эшләп йөрөй, һәр береһе үҙ эштәрен намыҫлы башҡара, кешелекле һәм изгелеклеләр. Иҫән генә булһындар балаҡайҙарым.

Тик мин генә уның юҡлығына ышана ла, күнегә лә алмайым. Аллаҡайым, сабырлыҡ бир. Илле бер йыл бергә йәшәү дәүерендә төрлө саҡтар булғандыр. Урынһыҙға һаҡһыҙ һүҙҙәр әйтеп, рәнйеткән, хәтерен ҡалдырған мәлдәрем дә булғандыр. Ғәфү ит, Әмирүк! Тыныс йоҡла.

*Һине һағынам, һине көтәм*
*Иртәләрен, кистәрен.*
*Айына түҙҙем, йылына түҙҙем,*
*Мәңгеһенә нишләрмен? –*

тип йырлап ебәргән булам. Һағынам, юҡһынам...

* * *

Вафатынан һуң папкаларын ҡарап ултырам. Һикһән биш йәшенә (юбилейына) әлегерәк сыҡҡан ике китабын редакторлап ҡуйған. Яңынан баҫтырырға уйлағандыр. Күрәһең, әжәлде әле генә көтмәгәндер. Ул үҙ ғүмерендә бер тапҡыр – 50 йәшлек юбилейын ғына үткәрҙе. Унда ла клубта йәки культура һарайында түгел, ә Ленин урамындағы ашханаға дуҫтарын һәм бөтә яҙыусыларҙы йыйып ҡунаҡ итте. Ҡалған юбилейҙары өнһөҙ генә үтеп китте, тиер инем, гонаһлы булырмын. 70 йәшен – Солтангәрәев Рәшит, 75 йәшен Риф Тойғонов менән Марс Әхмәтшин килеп ҡотлап киттеләр. Рәшиттең бүләге – матур ғына будильник – уларҙы юҡһынып, һаман тыҡылдап ултыра яҙыу өҫтәлендә.

Бына тағы бер блокнотын битләйем. Мин уның шиғыр яҙғанын хәтерләмәйем. Йәш сағында, бәлки, яҙғандыр ҙа. Блокноттың өсөнсө битенә:

*Мин үҙем дә бигерәк йәш инем,*
*Егерме лә йәшкә баш инем.*
*Алты ла ҡатын, ун ике ҡыҙҙың*
*Күҙ өҫтөндә булыр ҡаш инем,*
*Фәнкәшкәйем кеүек йәр ҡайҙа? –*

тип яҙып ҡуйған.

**Фәниә ГӘРӘЕВА.**

# Дуҫымды юҡһыныу

*(Юрий Андриановтың тыуыуына – 60 йыл)*



Юрий Андрианов тигән шағирҙы башҡорт уҡыусыһы әҙип булараҡ бөтөнләй белмәй тиерлек. Үҙе байтаҡ башҡорт шағирҙарының шиғырҙарын руссаға тәржемә итеп республика матбуғатында, төрлө йыйынтыҡтарҙа, альманахтарҙа, антологияларҙа баҫтырһа ла, бер нисә шәлкем, хатта бер нисә бөртөк шиғырын иҫәпләмәгәндә, үҙенекен башҡорт теленә ауҙарыусы булманы ла. Ул талантлы әҙип ине. Тәүҙә нәшриәт эшенә, ошо эшенә параллель рәүештә тәржемә хеҙмәтенә ныҡлап күмелеп, унан русса сыҡҡан «Бельские просторы» журналының баш мөхәррире вазифаһын башҡарып, ижады тәүҙәрәк икенсе планға күсте, үҙенең шиғырҙарын тәржемәләү эшен бөтөнләй ҙә хәстәрләмәне. Мин үҙем дә, мәҫәлән, тәүҙә «Шоңҡар»ҙа, унан «Ағиҙел»дә эшләгәндә бер нисә тапҡыр, шәлкемеңде бирәйек, тип етди әйткәнем булды. Өлгөрөрбөҙ, алда күпме ғүмер бар, тип ҡул ғына һелтәне. Ә ғүмере ҡыҫҡа булып сыҡты, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Башҡортса түгел, хатта байтаҡ йыйылған шиғырҙарын русса нәшер итеп тә, китабын күреп-тотоп та өлгөрә алманы...

Әйткәндәй, атаған баҫманың тәүге баш мөхәррире вазифаһына тәғәйенләнгәс, уның концепцияһын эшләне, хеҙмәткәрҙәр, авторҙар коллективын тупланы. Бынан тыш, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре лә булды: журнал мәшәҡәте менән, Яҙыусылар союзы идараһы ағзаһы булараҡ, төрлө осрашыуҙарға, әҙәби сараларға йөрөнө, әҙәбиәтте пропагандаланы. Әҙәбиәт, әҙәбиәт тарихы, әҙәбиәт ғилеме, әҙәби тәнҡит тураһында төплө фекер йөрөттө, үҙе лә принципиаль тәнҡитсе булды. С. Злобин, Ф. Кәрим исемендәге премиялар лауреаты, республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре ине. Ғөмүмән, ижады һәлмәкләнә, ижтимағи фекере үткерләнә, сәйәси, әҙәби йөҙө баҙыҡлана барған осорҙа ғүмере өҙөлөп ҡуйҙы. Уға ни бары 54 йәш ине.

Беҙ уның менән Мәскәүҙә А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында бер курста уҡыныҡ. Дәрестәр, лекциялар – бергә, ижади семинарҙар ғына айырым: ул – шиғриәттә, мин – прозала.

## Студент йылдары

Институтҡа инеү имтихандарын тапшырған көндәрҙә ул нисектер хәтергә ныҡ уйылып ҡалмаған. Әлбиттә, кәүҙәгә бер ишерәк егеттәр араһында уның ҡолғалай ҡаҡса оҙон кәүҙәһенә, яурындарына тиклем төшөп торған аҡһыл сәстәренә, ҡарсыға суҡышы ише көмөрө танауына, тәрбиәле һаҡал-мыйығына иғтибар итмәү мөмкин түгел ине. Көлгәндә бөтә йөҙө йылмая, башы артҡа

ҡайҡайып китә. Ә волейболды унан да оҫтараҡ уйнаусы юҡ ине шикелле. (Яҙлыкөҙлө тәнәфес йә дәрестәрҙән һуң ҡалып, институт ихатаһында ҡайсаҡ туп һуҡтыҡ.) Һуңынан белдем: Юра уҡыусылар араһында Башҡортостан йыйылма командаһы ағзаһы булған икән… «Хәтергә ныҡ уйылып ҡалмаған» тигәнем шул: көнө-төнө тигәндәй имтихандарға әҙерләнеп, мөмкин тиклем арыуыраҡ биреү ҡайғыһы ныҡлап танышыуға ваҡыт ҡалдырмағандыр. Шулай ҙа мин уның яҡташ, Өфөнән икәнен белдем һәм имтихандар осоронда, дөйөм ятаҡтың төрлө бүлмәләрендә йәшәһәк тә, йә оҙон коридорҙа, йә институтҡа барған көндәрҙә осраша инек тә ҡыҫҡаса ғына һөйләшеп ала инек. Имтихандар тамам булып, һынауҙарҙы уңышлы үткәндәрҙең исем-фамилиялары иғландар таҡтаһына эленгәс, әле лә иҫтә – 1975 йылдың 14 авгусы – исемлектең башында уҡ фамилияларыбыҙҙы күреп (икебеҙҙеке лә «А»ға башлана) шатланышҡан иҫтә. Өфөгә ҡайтып, августың һуңғы көндәрендә йәнә китергә – был юлы инде уҡырға – йыйынып йөрөгәндә, Октябрь революцияһы урамында осраҡлы ғына тап булышып, бер килке һөйләшеп тә торғайныҡ.

Юра билдәле шағир, күп популяр йыр текстары авторы, СССР Дәүләт премияһы лауреаты Лев Ошанин семинарында шөғөлләнде. Уҡый башлағас, шуны ла белдек: имтихандарға тиклем ике турҙа үткән ижади конкурсҡа ебәрелгән шиғырҙар, хикәйә, пьеса, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрен, тәржемәләрҙе (институтта тәржемәселәр төркөмө лә булды) ул йылды семинар йыясаҡ профессиональ әҙиптәр ҡараған-тикшергән һәм үҙҙәренең булмышына, хис-тойғоһона тура килгәндәрҙе үҙ семинарына алған икән. Тимәк, Лев Ошанин да Юраның өйрәнсек шиғырҙарында нимәлер тапҡан, күргән һәм, билдәле, биш йыл эсендә шиғриәтте нескә аңларлыҡ әҙәбиәтсе, талантлы шағир әҙерләй алырына өмөт бағлаған…

Хәтерем яңылышмаһа, Юра ошо шиғриәт семинарының старостаһы ла булды. Семинарҙарында, рустарҙан тыш, монгол, украин, латыш, балҡар, ҡабарҙа, адыгей егет һәм ҡыҙҙары, өсөнсө башҡорт курсташыбыҙ, һуңынан билдәле шағир, драматург, сәйәсмән, тәржемәсе булып китәсәк Вил Ғүмәров та бар ине. Кеше менән еңел аралашыу-танышыу маһирлығы, хәбәр тота белеү, юғары интеллект, әҙәби теоретик әҙерлек, шиғриәтте нескә аңлау, юғары зауыҡ уны семинарҙа ғына түгел, бөтә курс алдында баһалы итте. Мин, уларҙың дәрестәренә бер нисә тапҡыр кереп ултырғас, быны шулай икәнен яҡшы белдем.

Семинарҙары институт аудиторияһында ғына түгел, йыш ҡына яҡындағы «Лира» кафеһында, хатта Лев Ошаниндың дачаһында ла үтә торғайны. Күрәһең, саҡыра, ә былар электричкаға тейәлә лә китә профессорҙары янына. Беҙ, башҡа семинарҙарҙа шөғөлләнеүселәр, уларҙан көнләшә лә инек. Көнләшмәҫлекме ни: билдәле шәхестәрҙең дачаһына барыу кемгә эләгә? Етмәһә, етәкселәре егеттәрҙе һыйлап та ҡайтара. Улары ҡайта ла маҡтана…

Юра һәйбәт уҡыны. Бер нисә семестр юғары стипендия ла алды. Юғары стипендия алыу өсөн сессияла ҡаралған 6-7 зачет, кәм тигәндә 5-6 имтихандың барыһын да тик «бишле»гә генә тапшырырға кәрәк. Курс эштәрен, зачет, имтихандарҙы һәр саҡ ваҡытында һәм тәүгеләрҙән булып тапшыра ине. Дәрестәрҙән тыш, уҡыу программаһы буйынса мотлаҡ уҡылырға тейешле һәм тәҡдим итеү рәүешендә төҙөлгән исемлекте лә уҡып барҙы. Мин быларҙы белеп әйтәм, сөнки уларҙы дәрес йәки семинарҙарҙа һөйләү – бер, унда алдашырға ла мөмкин, ә бына дөйөм ятаҡтағы һөйләшеү-аралашыуҙарҙа, бәхәс, фекер алышыуҙарҙа уҡымай ҡатнашып булмай. Курстың яртыһы тиерлек бер юғары уҡыу йортон тамамлап, бында икенсе диплом артынан килгәнлектән, дөйөм әҙәби, теоретик кимәлдең ярайһы уҡ юғары икәнен һиҙмәү мөмкин түгел.

Курсташым бик моңло итеп йырлай ҙа торғайны. Дөйөм ятаҡтағы кис

ултырымдар унының йырынан башҡа уҙманы. Нисектер көсәнмәй, бөтә хис-тойғоһон һалып, рус халыҡ йырҙарын былай ҙа оҙон көүҙәһен артҡа ҡайҡайта биреп башҡара. Мул һыулы тәрән йылғаның һил ағышына оҡшаш ине унының тауышы – ярҙарына бәрелмәй-һуғылмай, һаҡ ҡына шылып үткән йылға. Бирелеп, онотолоп, булмышының һәр күҙәнәге менән моңлана. Йөрәгендә халыҡ ижадына, йыр-моңона битараф булмағандар ғына күңелен шулай түгә алалыр. Ә Юра халыҡ ижадын, фольклорҙы бик яҡшы белә ине.

Дөйөм ятаҡҡа йыш ҡына – ғәҙәттә, шәмбе йәки йәкшәмбе көнө – үҙенән дүрт йәшкә оло ағаһы, архитектура институтында уҡыған Андрей килә. Юраның үҙе һымаҡ оҙон кәүҙәле, һәр саҡ тәртипле ҡырылған ҡыҫҡа һаҡал-мыйыҡлы, оҙон сәсле аристократ. Тыныс, әллә ни артыҡ хәрәкәт яһамаҫ, аҙ һүҙле был уртансы ағаһын Юра бик ярата ине. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй, ике бер туған Өфөнән алыҫ ҡалала бер осорҙа уҡығанғамы, осрашыуҙары оло байрамға әүерелә. Миңә лә, яҡташ булараҡ, улар менән бер-ике тапҡыр табындаш булырға яҙҙы. Юра башлай, Андрей ҡушыла, икеһенең дә тауышы моңло һәм һағышлы. Юра – үҙ шиғырын, Андрей үҙ шиғырын уҡый. Андрей институтты ике йылғамы алдараҡ бөтөп ҡайтты, оҙаҡ йылдар «Башкиргражданпроект» институтында тәүҙә ябай архитектор, унан баш архитектор вазифаһында эшләне һәм... Юранан ике йыл ғына ҡалып вафат булып ҡуйҙы. Уға тиклем оло ағалары Виктор үлгәйне. Өс бер туған бына шулай йәшләй генә бер-бер артлы донъя ҡуйҙы...

Каникул ваҡыттарында Юра Өфөгә бик ҡайтып йөрөмәне. Сәбәбен теүәл генә әйтә алмайым. Стипендия ғына йәшәргә етмәй. Шуға ла ул, йыл һайын булмаһа ла, йыш ҡына студенттарҙың төҙөлөш отрядтары менән сығып китә, аҡса эшләй – өйҙән һораманы. Дипломын яҡшыға яҡланы – йоҡа ғына булһа ла шиғырҙар китабы бар ине. Шиғырҙары «Комсомольская правда» гәзитендә, «Литературная учеба» журналында, сығарылыш йылында семинарҙағы күптәрҙең шиғри шәлкемдәре етәкселәре Лев Ошанин баш һүҙе менән «Литературная Россия», «Литературная газета» аҙналыҡтарында баҫылды. Әйткәндәй, семинар етәксеһе унының ижады тураһында «Юрий Андрианов – эҙләнеүсән, уйлана белгән шағир. Ул актив тормошто, тормоштағы хәрәкәтте тоя һәм шуны күрһәтә белә», – тип яҙҙы. Тимәк, ул Юраны үҙенең семинарына алып һис яңылышмаған.

## Шағир, тәржемәсе

Институтты тамамлап ҡайтҡас (совет әҙәбиәте кафедраһына аспирантураға ҡоҙалағандарын байтаҡ йылдар үткәс ишеттем, әммә Юраның үҙенән түгел, икенсе кешенән, шулай ҙа ышанам – ул, алда әйткәнемсә, һәйбәт уҡыны), Юра редактор булып «Башкнигоиздат»ҡа – хәҙерге «Китап»ҡа эшкә керҙе. Бер аҙҙан уны рус әҙәбиәте секторы мөдире итеп үрләттеләр. Ошо вазифала ул Мәскәүгә, элекке союздаш республикаларҙың баш ҡалаларына нәшриәт вәкиле булараҡ күп йөрөнө, башҡорт китабын, Башҡортостан китабын күрһәтте, пропагандаланы, ойошмаға һәр ҡайҙан файҙалы тәҡдимдәр, килешеүҙәр алып ҡайтты. Ун томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйылмаһы, «Ағиҙел» башҡорт романы китапханаһы, «Алтын шишмәләр» классик серияларының тиҫтәләгән томдары унының мөхәррирлегендә донъя күрҙе һәм күп милләтле Рәсәйҙең рухи хазинаһына ҡушылды.

Рус булһа ла, ул башҡортҡа, ғөмүмән, башҡа милләттәргә кәмһетмәй, ихтирам менән ҡараны, уға толерантлыҡ, интернационаллек тойғоһо хас ине. Студент йылдарында ла, эшләп йөрөгәндә лә унының менән күп тапҡырҙар төрлө компанияларҙа, табындарҙа ултырырға һәм телгә, милли темаға һүҙ сығып, бәхәстәргә тарыған, ҡатнашҡан саҡтар булды, Юраның теге йәки был милләтте



кәмһеткәнен, хатта шаяртып та берәй һүҙ ысҡындырғанын, билләһи, иҫләмәйем. Кәүҙәһе һымаҡ, күңеле лә, эске донъяһы ла ҙур ине.

Бынан ун – ун биш йылдар әүәле Алыҫ Көнсығыштан бер егет Өфөгә килеп эшкә урынлашты. Шиғырҙарын редакцияларға, нәшриәткә илтте. Ослашып һөйләшеп тә киткеләнек, уның беҙҙең заманда Әҙәбиәт институтын ситтән тороп тамамлауы асыҡланды. Бәлки, беҙҙе – «беҙҙе» тип әйтеүем мине һәм Юраны, «әлеге егетте» тип әйтеүем – бер институт студенттары булыу яҡынайтҡандыр ҙа. Осрашҡан саҡтарҙа һүҙ артынан һүҙ сығып, хәбәр әҙәбиәттән сәйәсәткә, телгә, китаптар, гәзит-журналдар сығарыуға, Яҙыусылар союзы эшмәкәрлегенә төшөп китә, һәм яңы дуҫыбыҙ, бер ҙә тартынып тормай, Башкирия – Рәсәй эсендәге субъект, тимәк Рәсәй, шулай икән, нишләп бында башҡортса китап, журналдар, гәзиттәр сыға ул, улар барыһы ла рус телендә генә нәшер ителергә тейеш, тип һөйләй башлай. Тәүге бер-ике осрашыуҙа мин дә, Юра ла аңламайбыҙ, был шаярталыр, юрамал һөйләйҙер, тип уйлаған булабыҙ, хәбәр-һорауын уйынға борабыҙ. Ләкин ул ысынлап һөйләй ине. Владимир йәки Рязань өлкәһенән, шул уҡ Мәскәүҙән йәки Алыҫ Көнсығыштан сыҡмаған, милли республикаларҙы күрмәгән, телдәрен бер ҡасан да ишетмәгән урта статистик рус кешеһе кеүек үк. Шәхсән үҙенең хатаһы ла түгел, ә бәләһе, шовинистик империяның бер емеше.

Мин тотонам аңлатырға, шунан Юра тотона, әрләшеп бөтәбеҙ, бер мәл хатта бер-беребеҙгә ҡул күтәреү дәрәжәһенә еттек. Шулай ҙа аҡыл еңде туҡталырға. Шунда мин Юраның республикалағы милли сәйәсәтте дөрөҫ аңлауына, телде һаҡлау маҡсатында башҡорт телен рус теле менән бер ҡатар дәүләт теле итеп ҡабул иткәнебеҙҙе, китап, гәзит-журналдарҙың республиканан тыш бүтән бер регионда ла сыға алмаясағын, Яҙыусылар союзы составында ла башҡорттар күпселекте тәшкил итергә тейешлеген бармаҡ бөгөп тигәндәй аңлатыуына һоҡландым.

Әлбиттә, оҙаҡ барып етмәне быңдай «дәрестәр» яңы дуҫыбыҙға, байтаҡ осрашыуҙар талап ителде мейеһендәге таш стенаны емереүгә. Шулай ҙа яйлап йомшарҙы, ҡәтғи фекерҙәр әйтеүҙән тыйылды, хәҙер ундай сетерекле темаларға ҡағылмай. Асыуы таман бөтөүенә ышаныуы ҡыйын, әммә хәҙер ул беҙҙең платформала бара, белмәгәнен, аңлап етмәгәнен һораша. Уны «аҡылға ултыртыу»ҙа мин иң беренсе иратта Юраның түҙемле хеҙмәтен күрәм. Миңә, башҡортҡа, әлбиттә, бигүк ышанманы, бәлки, хәҙер ҙә ышанмайҙыр, ә үҙенең урыҫына ышанмай ҡайҙа барһын? Сөнки Юра ошонда тыуған, башҡорт менән бәләкәйҙән аралашҡан, һөйләште ишетеп үҫкән, мәҙәниәтте, әҙәбиәтте уҡыған, йыр-моңдо ишеткән, ҡурайҙы тыңлаған. Ә тегенең тирә-яғы – урыҫ мөхите... Уның өсөн башҡа мөхит юҡ та донъяла. Хәйер, хәҙер бар, теләйме-теләмәйме, беҙҙең мөхиттә йәшәй һәм уңышлы эшләп йөрөй.

Юра менән бәйле йәнә бер ваҡиға иҫтә ҡалған. Институтты бөтөрөп ҡайтҡандың тәүге йылдары булһа кәрәк, Юра Аксаков урамындағы шәхси ағас өйөнә саҡырҙы. Бер нисә бүлмәле ҙур йорт. Атаһы ла иҫән ине әле. Сәй-мәй ҡапҡылап һөйләшеп ултыра торғас, атаһы минән: «Һин башҡортмо?» – тип һораны.

Башҡорт, мәйтәм. «Үзеңдең телеңде беләһеңме?» – «Беләм» – «Һөйләшеп ҡара әле, улайһа», – ти был. Мин телгә килгән бер нисә һөйләмде әйттем. Был минең һөйләмдәрҙе шундуҡ руссаға әйләндереп әйтеп тә ҡуйҙы. Аптыра ла ҡал. Ниндәй хәбәр әйткәнемде онотҡанмын инде, күрәһең, көнкүрешкә бәйле булғандыр, тип фараз ғына итәм. «20-се – 30-сы йылдарҙа башҡорт теле дәүләт теле булараҡ республикала уҡытылды, мин дә уҡыным һәм бына шул запас ҡалған, – тип көлә үҙе. – Ул саҡта рус милләте яғынан да, етәкселек яғынан да башҡорт телен уҡытыуға бер ҙә ҡаршылыҡ булманы, киреһенсә, мәктәптә беҙ теләп өйрәндек, ул беҙгә республика теле, ошо республикала йәшәгән төп милләт теле булараҡ өйрәтелде, ә хәҙер күпме ҡаршылыҡ, әллә ҡайҙа ятҡан Германия, Англия, Франция телен өйрәнгәнсе, һәр мәктәптә элеккесә башҡорт телен өйрәтергә ине бала-сағаға», – шулай тип әсенде оло Андрианов. Бына ошондай мәҙәни мөхиттә үҫкән Юра курсташым нисек интернационалист булмаһын да, республикалағы милли сәйәсәтте, тел сәйәсәтен төптән аңламаһын?!

Шағир булараҡ Юраның яҙғандары әллә ни күп түгел. 54 йәшкә тиклем байтаҡҡа күберәк тә яҙа алыр ине. Хәйер, ысын шиғыр күп яҙылмайҙыр ҙа. Күп яҙылһа, уның бәҫе китә һәм сифат һанға күсә. Ә Юра үҙ ижадына ифрат талапсан ҡараны, яҙғандарын ҡат-ҡат эшләне, «камиллыҡтың сиге юҡ» тигән прициптан сығып ижад итте. Һөҙөмтәлә һәр яҙғаны техник эшләнеш яғынан ғына түгел, фекер тослоғо, һүҙ теүәллеге йәһәтенән дә камил ине. Ул бер ҡасан да ҙур тема эҙләп, юғары категориялар юллап һауала йөҙмәне, уҡыусыны нимә менәндер шаҡ ҡатырырға ынтылманы, шиғыр ябай һәм аңлайышлы булырға тейеш, тип эш итте. Уның ҙур темаһы, юғары категориялары – ихатала үҫкән кесерткән, киндер, ямғыр ҡарайтҡан ҡойма, ҡойма артындағы күршеләр. Тормоштоң ябай күренештәренән, тирә-яҡ мөхиттән, тәбиғәттән юғары категориялы поэтик табыштар таба белеү – үҙе ысын шағирлыҡтыр. Үҙенән һуң шағирҙың ысын бер шиғыры ҡала икән, ул бәхетле шағир, тигәне лә иҫтә ҡалған. Әҙәбиәт тарихында ҡалырлыҡ ана шул бер шиғырын ижад итергә әҙерләнде лә шикелле ул. Бәлки, уны яҙып та өлгөргәндер, бәлки, юҡтыр. Уныһын ваҡыт күрһәтер...

Үҙе иҫән сағында «Дни» (1984), «Под весенней звездой» (1987), бәләкәй йәштәге балалар өсөн «Собака по кличке Дружок» (1990), «По воле твоей» (1992), «Зимний ветер» тигән шиғыр китаптары, 2008 йылда тыуыуына 55 йыл тулыу уңайы менән «По тропе жизни» исемле йыйынтыҡтары донъя күрҙе.

## Баш мөхәррир

Республикала бер нисә йыл дауамында «Бельские просторы» тип аталған әҙәби альманах сығып килә ине. Унда сағыштырмаса йәш быуын рус шағирҙары, яҙыусыларының тәүге әҫәрҙәре, башҡорт һәм татар телдәренән тәржемәләр баҫыла килде. Башҡортса сыҡҡан «Йәш көстәр» һымаҡ, үҙенә күрә йәш таланттарҙы күрһәтеү, уларҙың әҫәрҙәрен пропагандалау маҡсатын ҡуя ине әлеге альманах. Ләкин был баҫма ғына аҙ ине республика әҙәби, мәҙәни тормошо өсөн, «Ағиҙел» тибындағы рус журналын асыу мәсьәләһе өлгөрөп еткәйне. Был хаҡта яҙыусыларҙың дөйөм йыйылыштарында ла, съезд трибунаһынан да әйтелә килде. Һәм бына 1998 йыл аҙаҡтарында уны «тыуҙырыу» мәсьәләһе сәйәси яҡтан хәл ителгәс, билдәле, уға баш мөхәррир табыу ҙа көнүҙәк проблемаға әйләнде. Хәйер, республика етәкселеге лә, Яҙыусылар союзы идараһы ла, Киң мәғлүмәт саралары министрлығы ла был вазифаға кешене оҙаҡ эҙләмәне шикелле. Сөнки ундай кеше бар һәм ул Юрий Андрианов ине. Һәр хәлдә мин альтернатив варианттарҙы хәтерләмәйем, бәлки, булғандыр ҙа.

Юра тәүге көндән үк ең һыҙғанып эшкә егелде. Документтар артынан йөрөнө, хеҙмәткәрҙәр һайланы, үҙе эшләгән «Китап» нәшриәтенән, Яҙыусылар союзынан,

башҡа редакцияларҙан артыҡ өҫтәл, ултырғыстар йыйҙы, үҙе ташыны, башҡа йыһаз, ҡағыҙ хәстәрләне һәм быға тиклем йылына бер мәртәбә сығып килгән «Бельские просторы» альманахының исемен алып, шул йылдың декабрендә тәүге һанын донъя күрһәтә алды.

Рәсәй, Башҡортостан өсөн сәйәси, иҡтисади йәһәттән еңел булмаған был йылдарҙа өр-яңы ҡалын журнал асыу ул саҡтағы республика етәкселегенең егетлеге ине. Яңы баш мөхәррир быны бик яҡшы аңланы һәм баҫманы тәүге һандарынан уҡ юғары художестволы әҫәрҙәр менән тултырырға тырышты. Һөҙөмтәлә бер нисә йылдан журнал республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендә абруйлы баҫмаға әйләнде. Башҡорт һәм Башҡортостандағы русса яҙыусылар ғына түгел, Рәсәйҙең башҡа субъекттарында йәшәгән исемле әҙиптәр ҙә үҙҙәренең әҫәрҙәрен был журнал биттәрендә күрергә теләне. Баҫылғандарҙан бер нисә фамилияны ғына атап китергә мөмкин: Белов, Распутин, Куняев, Генатулин... Юра, баш мөхәррир булараҡ, еңел-елпе әҫәрҙәрҙе баҫыуға юл ҡуйманы. Тәржемәләргә ҙур урын бирҙе – баҫманың яртыһы самаһын урындағы әҙиптәрҙең әҫәрҙәре алырға тейешлеген аңлай ине. Йыш ҡына миңә, һин башҡорт прозаһы буйынса кәңәшсем бул, үҙеңдә («Ағиҙел»дә – **Ә. Ә.**) ниндәй әҫәрҙәр сығараһың, шуларҙың иң арыуҙарын миңә тәҡдим ит, тәржемәләп бирербеҙ, ти торғайны. Мин байтаҡ коллегаларҙың – исем-шәрифтәрен атап тормайым – «Ағиҙел»дә сыҡҡан хикәйә, повесть, хатта романдарын уға тәҡдим иткәнем булды. Ул инде тәржемәсе тапты ла үҙендә нәшер итте.

2003 йылдың октябрь айында беҙ, Юра һәм мин – «Бельские просторы» һәм «Ағиҙел» журналдарының баш мөхәррирҙәре – Мәскәүгә ҙур сараға барҙыҡ. Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союздары менән берлектә ойошторолған был сара «Ағиҙел»дең сыға башлауына – 80, «Бельские просторы» журналының 5 йыллығына бағышланып, Әҙәбиәтселәрҙең үҙәк йортонда (ЦДЛ) үтте һәм «Аксаков иле һәм Башҡортостандың әҙәби журналдары» тип аталды. Беҙҙән тыш, ул саҡтағы БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев, киң мәғлүмәт саралары министры урынбаҫары Венера Хәкимова, тағы бер нисә кеше барҙы. Әлбиттә, һүҙ, дөйөм алғанда, ике баҫма хаҡында ғына барманы: Рауил Төхвәт улы дөйөм башҡорт әҙәбиәте, Башҡортостанда йәшәп ижад иткән рус әҙиптәре, тәржемәләр хаҡында телмәр тотто, министр урынбаҫары Венера Миҙхәт ҡыҙы ике журналдың, ғөмүмән, республикала сыҡҡан баҫмаларҙың финанс хәле, иҡтисады, сәйәсәте тураһында бәйән итте. Беҙҙән тыш, байтаҡ рус әҙиптәре, тәнҡитселәре: Вадим Дементьев, «Дружба народов» журналының баш мөхәррире урынбаҫары Леонид Теракопян, Әҙәбиәт институты профессоры Александр Власенко, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы рәйестәше Валентин Сорокин, Мәскәүҙә йәшәгән башҡорт әҙиптәре Әхиәр Хәким, Йәмил Мостафин, Талха Ғиниәтуллин, тәржемәсе Илгиз Кәримов сығыш яһаны. Мин быны ентекләп шуның өсөн һөйләйем: беренсенән, «Бельские просторы» тураһында Мәскәү әҙиптәре ныҡлап ошо осрашыуҙа белде, икенсенән, Юраның баҫма тураһында һөйләгәне ентекле, тәрән, мәғлүмәтле һәм ялҡынлы булды. Шәхсән мин үҙем уны һоҡланып тыңланым. Бынан аҙаҡ та ул журналын күрһәтеп, пропагандалап Мәскәүгә байтаҡ йөрөнө.

Баш мөхәррирҙең, редакция хеҙмәткәрҙәренең профессиональ эшмәкәрлеге оҙаҡламай журналды, ысынлап та, Бөтә Рәсәй орбитаһына сығарҙы. Журнал исемен йыш ҡына үҙәк матбуғатта телгә алдылар, йыйылыштарҙа атанылар, йәштәр генә түгел, хатта исемдәре илгә билдәле әҙиптәр ҙә унда баҫылыуҙы дан күрҙе. Оҙаҡламай йәнә бер рәсми танылыу килде: 2006 йылда Рәсәй Яҙыусылар союзы журналды Бөтә Рәсәй әҙәби премияһы «Традиция» – «Классик әҙәбиәт руслоһы традицияһындағы күп яҡлы ижади эшмәкәрлеге, шулай уҡ башҡорт

әҙәбиәтенең иң яҡшы өлгөләрен рус теленә тәржемәләгәне өсөн» – дипломы менән бүләкләнә.

Юра быйдай юғары баһаларға балаларса, ихлас ҡыуана торғайны. Сөнки бында үҙенең дә хеҙмәтен күрҙе. Ә һәр уңыш хаҡы ифрат юғары ине: тынғыһыҙ көндәлек эш һәм йәшәлмәгән йылдар.

Ҙур ағас йортондағы үҙ бүлмәһе – кабинеты бәләкәй генә ине. Дүрт квадрат метрҙан да артмағандыр – ике метрға ике метр. «Бында нисек һыяһың ул?» – тип һораным аптырап. «Баҫып тормайым бит, ултырам», – тип көлдө Юра. «Ултырғанға тиклем керергә лә кәрәк тәһә». – «Эш бит бүлмә бәләкәйлегендә түгел, эш – ошо бәләкәй бүлмәнән ҙур шиғыр сығарыуҙа». Яуапта – Юраның бар холоҡфиғеле ине. Бер стенаға терәтеп кескәй генә өҫтәл ҡуйылған, өҫтәлдә – яҙыу машинкаһы, ҡулдан яҙылған һәм баҫылған ҡағыҙҙар, төпсөк тулы көл һауыты, ултырғысы ҡаршылағы стенаға терәлеп тора. Юғарыла – китаптар, журналдар, гәзиттәр һалынған кәштә һәм асыҡ форточка. «Минең оло донъяға сығыу тишеге бына ошо инде, төнгө йондоҙҙар, ай, яуған ямғыр, ҡар, иҫкән ел, ихаталағы ағас япраҡтарының шыбырҙашыуы. Шағирға тағы нимә кәрәк?» Минең аптырауға яуабы ла, аңлатыуы ла, аҡланыуы ла ошо булды шикелле курсташымдың...

Әйткәндәй, Аксаков урамындағы ошо ҙур ағас йорт Юра өсөн Йыһан уртаһы ише иң ҡәҙерле, иҫтәлекле ҡомартҡы ине. Нәшриәттә эшләгәндә Сипайлово биҫтәһенән алған өс бүлмәле фатирына бөтөнләй ҙә күсенмәне, әлеге йортонда йәшәне. Был йәһәттән ул ниндәйҙер кимәлдә ауыл кешеһе булып ҡалды һәм кескәй форточкаһы аша Йыһан менән хәбәрләште. Яҙын йорт ҡыйығын ҡарҙан таҙартҡанда йығылып төшөп, умыртҡа һөйәген һындырҙы, ҡатмарлы операция эшләтте һәм бер ай тулыр-тулмаҫтан корсет кейеп эшкә йөрөй башланы. Редакцияла баҫҡан көйө уҡырға трибуна рәүешендә махсус ҡулайлама ла ҡороп бирҙеләр. Баҫҡан килеш ҡулъяҙмаларҙы төҙәтә, редакторлай, авторҙарға хаттар яҙа, рәсми ҡағыҙҙарға ҡул ҡуя һәм эш аҙағына тамам арып, бүрәнәләй йыуанайған аяҡтарын саҡ һөйрәп әлеге йортона ҡайтып йығыла...

Больницала ятҡан көйө лә эшләп ятты әле ул. Хеҙмәткәрҙәрен берәмләп тә, төркөмләп тә палатаһына саҡыра, сираттағы номер материалдарын килтереүҙәрен һорай, ултырыштар үткәрә, авторҙарға заказдар бирә, телефон аша ҡушҡан йомоштарының үтәлешен тикшерә. Бына шундай башы-тояғы менән эшкә сумған бөйөк баш мөхәррир ине ул...

Яҙыусылар, әҙәби, мәҙәни йәмәғәтселек араһында шағир һәм тәржемәсе Александр Филипповты «башҡорттан да былайыраҡ башҡорт» тигәнерәк атама менән йөрөтә торғайнылар. Ул, ысынлап та, башҡорттоң оло дуҫы булды, кәрәк урында яҡлап һүҙ әйтә белде, ҡурсаланы, әҙәбиәтте пропагандаланы, күп коллегаларының әҫәрҙәрен руссаға ауҙарҙы. Күңеле киң, йөрәге ҙур шағир ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, 2011 йылдың октябрендә мәрхүм булып ҡуйҙы. Ул иҫән саҡта мин йыш ҡына, был шәхесте кем алыштыра алыр икән, тип уйлай торғайным – милли әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт донъяһында ике аралағы балансты тигеҙлекте һаҡлар өсөн ундай шәхес мотлаҡ кәрәк – һәм гел генә Юрий Андриановҡа туҡталдым. Филипповты алыштырыр фигура ине ул. Булманы. Яҙылмаған әллә күпме шиғырҙары, яһалмаған тәржемәләре ҡалды, ижтимағи эштәре. Ярай ҙа, уның иҫтәлеге булып журнал сыға, үҙе дуҫтары, коллегалары, ғаиләһе, ике ҡыҙы, туғандары хәтерендә йәшәй.

**Әмир ӘМИНЕВ.**

# ИКЕЛӘТӘ «ЫШАНЫСҺЫҘ» БАТША АРМИЯҺЫ ОФИЦЕРЫ ҺӘМ БОЛЬШЕВИК

1917 – 1920 йылдарҙағы башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең береһе Тәҡиулла Абдулханнан улы Алиев 1894 йылдың 14 июлендә Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙенең Яңы Зейәш ауылында донъяға килә. Атаһы 1901 йылға тиклем шул ауылда мулла вазифаһын башҡара, мәҙрәсәлә яңыса уҡытыу яҡлы була. Ауылында урыҫ мәктәбе асылғас, Абдулханнан өҫтөнән кемдер шикәйәт яҙа, һәм 1901 йылда суд приставы килеп, тентеү ойоштора ла муллалыҡ «указ»ын алып китә. Бынан һуң Тәҡиулланың атаһы крәҫтиән синыфына күсеп, дүрт улы һәм ҡыҙы менән иртә таңдан кискә тиклем иген игеп, мал аҫрап көн күрә.

Т. А. Алиев 1827 йылда тыуған олатаһы Яҡшығол тураһында былай тип яҙа: «1860 йылға тиклем олатайым үҙ аллы хәрби берәмек иҫәпләнгән Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән. Ул урыҫ телендә уҡый-яҙа белгән, шуға күрә башҡорт йәмғиәте олатайға төрлө эштәр ҡушып торған. Ошондай эштәрҙең береһе беҙҙең өйәҙҙә йәшәгән башҡорттарҙың ерҙәрен тартып алыуға ҡағылған. Әммә олатайым эште атҡарып сыға алмай, сөнки башҡорт ерҙәрен талап алған алпауыттарҙың кәрәкле бәйләнештәре етерлек булып сыға. Олатайымдың өс улы һәм ике ҡыҙы булып, атайымды мосолман уҡыу йортона биргән ».

Тәҡиулланың ата-бабаларының нәҫел ауылы – Сәфәр. Ул ауыл, Яңы Зейәш кеүек, Байсар олоҫона ҡараған. Хәҙер ул Татарстандың Аҡтаныш районындағы Иҫке Сәфәр ауылы булараҡ билдәле. 1989 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса унда 904 татар теркәлгән. Ә 1816, 1834, 1859 рәүиздәргә күҙ һалһаң, Сәфәрҙә тик башҡорттар ғына күренә, татарҙарҙан берәү ҙә теркәлмәгән. Яңы Зейәштә лә шул уҡ хәл – халҡы «башҡорт» тип яҙылған. Тирә-яҡта ла – тик башҡорт ауылдары.

Ҡайһы бер татар ғалимдарының фекеренсә, башҡорт – айырым халыҡ түгел, йәнәһе, ҡатлам, хатта татарҙың бер ырыуы, имеш. Ә бит башҡорттар Уралда кәмендә – 2500, ә ҡайһы бер ырыуҙары 3-4 мең йыллап көн күрә. Тимәк, ошо хаҡта был ғалимдар белмәй, бәлки, белергә теләмәй. Бер академик, хатта, башҡорттарҙы Столыпин (батша хөкүмәтенең XIX быуат аҙағындағы рәйесе – **Д.К.**) һәм большевиктар уйлап сығарған, тип ауыҙ тултырып һөйләүҙән дә баш тартмай.

Татарҙар тураһында ғәрәптәр һәм европалылар XIII быуатта монгол-татар яуынан һуң ғына ишетә. Улар Иҙел буйына баҫҡынсы булараҡ Болғар ханлығын юҡ итеп, килеп урынлаша. Күрәһең, меңәр йылдар буйы ата-бабаларынан ҡалған ерҙә йәшәгән элекке Минзәлә өйәҙе башҡорттарын большевиктар алып биргән автономияға хужа булып алған татарҙарҙың ҡайһы берҙәре: «Һеҙ башҡорт түгел, монголдар менән килгән татарҙар», – тип башын бутай. Былары – аҙыраҡ ғилемгә эйә булғандарға таныш факттар, ә беҙҙең маҡсат иһә – Т. А. Алиевтың тәржемәи хәленә асыҡлыҡ индереү, тормош юлын, эшмәкәрлеген байҡау.

1816 йылғы рәүиз буйынса, башҡорттар көн иткән 11-се кантонға ҡараған Сәфәр ауылында указлы мулла вазифаһын үтәгән 35 йәшлек Абдулхалиҡ Әбйәлилев ике ҡатыны, ҡыҙы, дүрт улы менән бергә теркәлгән. Күрше өйҙә 42 йәшлек ағаһы Абдулсалих ҡатыны, улдары – 21 йәшлек Әбделғәли (был исемде хәтерҙә ҡалдырайыҡ), 17 һәм 14 йәшлек Абдулханнан һәм Әбделмәннәф, дүрт ҡыҙы менән йәшәй. Өй аша ҡустыһы Әбдрәшит ике ул үҫтерә. Ауылдағы 44 хужалыҡта 278 башҡорттоң көн иткәне күренә.

1834 йылғы рәүиздә Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙе Сәфәр ауылының 63-сө хужалығында 39 йәшлек Ғәбделғәли Ғабдулсалихов яҙылған. Ул Тәҡиулланың олатаһының атаһы булыр. Уның исеменең аҙаҡҡы Ғәли-Али тигән өлөшөн Тәҡиулла үҙенең фамилияһы итеп ала. Ғәлин, Ғәлиевтар күп булған да, шуға ул Әлиев-Алиев исем-шәрифен алғандыр. Рәүиздә Ғәбделғәлиҙең дүрт улы күренә: Ғәбделғәлләм – 13 йәштә, Тәҡиулланың 1827 йылғы олатаһы Яҡшығол, өс йәшлек Мөхәмәтвәли һәм бер йәшлек Абдулханнан. 62-се хужалыҡта Ғәбделғәлиҙең 60 йәшлек атаһы Абдулсалих Әбделйәлилев 32 йәшлек улы Әбделмәннәф менән бергә теркәлгән. Абдулханнан 1823 йылда вафат булған. 1850 йылғы рәүиз мәғлүмәттәре архивта табылманы. 1859 йылда үткәрелеп, Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән һаҡланған һуңғы рәүизгә туҡталайыҡ.

Сәфәр ауылы 18-се башҡорт кантонының 1-се хәрби йортона ҡарай. Исемлектең 152-се урынында Тәҡиуллаға исем-шәриф биргән, 1854 йылда 59 йәшендә донъя ҡуйған Ғәбделғәли Ғабдулсалихов күренә. Улы Абдулханнан 1856 йылда 23 йәшендә вафат була. Тағы бер улы Абдрахманға 9 йәш. 153-сө булып 37 йәшлек Әбделғәлләм Әбделғәлиев килә. Уның бер йәштән 11 йәшкә тиклемге дүрт улы һәм ҡыҙы теркәлгән. 154-се хужалыҡта 31 йәшлек Тәҡиулланың олатаһы Яҡшығол Ғәбделғәлиев көн итә. Ҡатыны Ғәбделбаныу Ғәбделнасироваға 28 йәш, улдары Ибраһимға – 9, Яҡупҡа – 3, Тәҡиулланың буласаҡ атаһы Абдулханнанға 1 йәш. Әгәр ҙә был малайҙар һуңғараҡ тыуып, 1859 йылғы рәүизгә инмәй ҡалһа, уларҙы архивта эҙләп табыуы ҡатмарлашыр ине.

Шулай итеп, шәжәрә башында сама менән 1730 йылда тыуған Әбйәлил, уның улы 1774 йылғы Әбделсәлих, уның улы фани донъяла 1795 – 1854 йылдарҙа йәшәгән Әбделғәли, уның улы Яҡшығол, уның улы 1858 йылда тыуған Абдулханнан һәм уның улы Тәҡиулла – 1894 йылғы.

Малай һигеҙ йәштән уҡырға төшә. Ике йылдан ағайҙары белем алған һәм мөғәллим булып эшләгән Вятка губернаһы Сарапул өйәҙе Әт-Боба ауылына күсә. Был ҙур ауылда тормош еңел булмаһа ла, мәктәп алдынғыларҙан һанала, яҡын тирәнән башҡорт һәм татар йәштәре йыйыла, гәзит-журнал, өндәмәләр сыға, тирә-яҡҡа таратыла, митингыларҙа азатлыҡ хаҡында телмәр һөйләйҙәр. 1910 йылда батша хөкүмәте йәштәр ойошмаһын тарҡата, ҡайһы бер уҡытыусылар һәм шәкерттәр ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Улар араһында Тәҡиулланың ағайҙары ла берәр йыл төрмәлә ултырып сыға. Ә 16 йәшлек Тәҡиулла был ваҡытта Ҡазанда уҡытыусылар мәктәбендә уҡыған була.

1914 йылда егет Ҡазан мәктәбен тамамлап, Минзәлә өйәҙенең Таҡталасыҡ ауылындағы яңы асылған земство мәктәбендә эш башлай. Беренсе Донъя һуғышы башланғас, армияға алына, Өфөлә, бер йылдан Бығаулыҡ ҡалаһында башҡорт, татар һалдаттарына һабаҡ бирә. Һәләтле, алдынғы ҡарашлы башҡорт егетен полк командиры Ҡазан хәрби мәктәбенә уҡырға ебәрә. Мәктәптә уға «ышанысһыҙ» тип ҡараһалар ҙа, ул, ныҡышмалылыҡ күрһәтеп, уҡыуын тамамлай һәм кесе офицер дәрәжәһендә Златоуст ҡалаһында хеҙмәт итә башлай. Февраль инҡилабын Тәҡиулла Алиев шунда ҡаршылай, һалдаттарҙы Май байрамына алып сыға. 1917 йылдың йәйендә Кавказ фронтының Дербент полкында хеҙмәт итә, бер килке төрөктәргә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша.

Октябрь ваҡиғаларынан һуң Алиевты һалдаттар тәүҙә – рота, һуңынан полк комитетына һайлайҙар. Бер аҙҙан ул Эрзиджян ҡалаһындағы мосолман корпусының һалдат комитеты рәйесе булып китә. 1918 йылдың ғинуарында хеҙмәт сәфәре менән Т. Алиев Ҡазанға йүнәлә. Шул ваҡытта уны Минзәлә өйәҙенә эшкә саҡыралар ҙа инде. Ҡайтып, Өфө губернаһы халыҡ мәғарифы бүлегенең Минзәлә өйәҙе мәктәптәре буйынса инструкторы булып эшләй. Эшкә ул бар күңелен бирә һәм бер-ике айҙа өйәҙҙең бөтә мәктәптәрен тикшереп сыға, үрнәк дәрестәр бирә, йәйгеһен уҡытыусылар курсында уҡыта. Ялға сыҡҡас, тыуған ауылына ҡайта.

Тиҙҙән Граждандар һуғышы, буталыш башлана. Төрлө юлбаҫарҙарҙан һаҡланыу өсөн ауылдарҙа партизандар дружиналары ойошторола. Тәкиулланың офицер булып большевиктарҙа хеҙмәт итеүе ҡайһы берәүҙәргә оҡшамай, уны ҡулға алып, атып үлтерергә йыйыналар. Тик бер таныш офицеры ярҙамға килеп, иптәшен үлемдән ҡотҡара. Тирә-йүндә власть аҡтар ҡулына күскәс, Алиев ике туған ағаһы менән Бөрө ҡалаһына йүнәлә, шунан Өфөгә килә һәм татар полкына тәғәйенләнә.

Т. Алиев автобиографияһында түбәндәгеләрҙе яҙа: «Өфөлә полк тотошлайы менән алпауыт, сауҙагәр улдары кеүек буржуаз элементтар йоғонтоһона бирелгән булып сыҡты, һәм беҙ унан ҡасырға ҡарар иттек. Бер нисә көндән бер таныш аша Ырымбурҙа совет хеҙмәткәрҙәре һәм комиссарҙар күп булған башҡорт полктары тураһында ишеттек. Уларҙың лозунгылары беҙҙекенә яҡынлығын белеп, шунда барырға булдыҡ.

Ҡалаға килгәс, хәбәрҙең дөрөҫлөгөнә үҙебеҙ күреп ышандыҡ. Бындағы хәл Өфөгә бөтөнләй оҡшамағайны. Миңә Башҡорт хөкүмәте ҡарамағындағы полкка етәкселек итергә ҡуштылар. Башҡорт ғәскәре Башҡортостанда ваҡытлыса, Учредительный йыйылыш эшен тамамлағансы автономиялы республика итеп таныған Һамар директорияһына буйһондо. Ҡайһы бер частар, Башҡорт хөкүмәтенең ихтыярына ҡарамай, атаман Дутовҡа буйһондоролған һәм шул арҡала йыш ҡына ғауға сыға ине. Дутовҡа ҡаршы көрәш барып, большевиктар яҡлы төркөм барлыҡҡа килде. Атаман беҙгә ҡаршы ниндәйҙер саралар күрергә батырсылыҡ итмәне, сөнки беҙҙең частар ҡыйыу һәм тәртипле булды. Тиҙҙән Колчактан Башҡорт хөкүмәтен таратыу тураһында күрһәтмә килде, әммә беҙҙең хөкүмәт таралырға уйламаны ла. Шул саҡ Ҡыҙыл Армия менән ҡушылыу тураһында көслө агитация башланды. Тәүҙә Дутовтың үҙен ҡулға алырға иткәйнек, кемдер был хаҡта атаманға еткереп, ул үҙе беҙҙекеләрҙе юҡ итергә ынтылды. Әммә Дутов беҙҙе атып үлтерергә ҡурҡты. Был осорҙа беҙҙең көстәр ҡыҙылдар яғына күсергә әҙерләнеп бөткәйне. Миңә Башҡорт хөкүмәте һәм Ҡыҙыл Армия ҡарамағындағы элемтә офицеры вазифаһын бирҙеләр. Был ғәмәлдә башҡорт дивизияһы штабы начальнигы тигән һүҙ ине».

Т. Алиев Башҡорт ғәскәрендә прапорщиктан штабс-капитан дәрәжәһенә күтәрелә. Башҡортостан хәрби советында комендант ротаһына етәкселек итә. Башҡорт хөкүмәте Советтар яғына сыҡҡас, Өфөлә Башревкомдың хәрби вәкиле вазифаһын атҡара, һуңынан Хәрби академияла уҡый. 1922 йылда Ломоносов исемендәге университетта белем ала. 1924 йылда унда электр техникаһы факультеты ябылғас, белемен МВТУ-ла (Бауман исемендәге Юғары техник училище, хәҙер – институт) арттыра. Башҡортостан вәкиллегендә лә эшләй. Мәскәүҙәге Бөтә Союз Халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә башҡорт ихатаһын ойоштора, павильон етәксеһе була, диплом менән бүләкләнә. 1925 йылда Г. М. Маленков тәҡдиме менән Т. Алиевты партия сафына ҡабул итәләр. Уҡыған ваҡытында Өфөлә Үҙәк электр станцияһын төҙөүҙә ҡатнаша. Был уның тәүге объекты була, ә ундайҙарҙы төҙөүҙә Алиев күп ҡатнаша.

1926 йылда ҡабул ителгән иҫәп ҡағыҙында ошондай мәғлүмәттәр бар: Алиев Тәҡиулла Абдул-Ханнан улы. 1894 йылда тыуған, башҡорт, туған теле – башҡорт. Социаль хәле – хеҙмәткәр.

ВКП(б)-ға ҡабул ителгәнсе уҡытыусы булып эшләгән. Урта белемле, МВТУ студенты. Сәйәси белеме – партия мәктәбе. 1925 йылдың майында партияға ингән. Ағзалыҡ билеты – 0074064. Бауман район комитеты тарафынан ҡабул ителгән. Элек ВКП (б)-ла тормаған. Башҡа партиялар ағзаһы булмаған. Төп эшмәкәрлеге – 1917 йылдан Ҡыҙыл Армияла. 1919-1920 йылдарҙа адъютант бүлеге начальнигы ярҙамсыһы. 1929 йылдан «Элпромстрой» рәйесе урынбаҫары. 1931 йылдың 18 февралендә Мәскәүгә ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарамағына ебәрелгән.

1929 йылда МВТУ-ны тамамлап, Тәҡиулла Алиев Өфөгә килә һәм Үҙәк электр станцияһы төҙөлөшөндә ҡатнашыуын дауам итә. 1931 йылда Мәскәүҙә ҙур төҙөлөштә эшләй. Унан Березники ТЭЦ-ын, Тагилда ЛЭП төҙөүҙә ҡатнаша. 1935 йылда Өфө моторҙар заводында электр станцияһы төҙөй. Өфө, Мари ТЭЦ-ы төҙөлөш етәксеһе була.

1936 йылдың 27 ғинуарында партия документтарын тикшереү барышында уны, мулла балаһы, аҡтарҙа хеҙмәт иткән, тип һәм башҡа ғәйептәр табып, партия ағзалығынан сығаралар. Моторҙар эшләү заводында партком секретары, һуңынан хөкүмәт органдарында эшләгән, күптәрҙең тормош юлына кәртә ҡорған, яуызлыҡ ҡылған Шаһимарҙанов тигән бер әҙәм Т. Алиев хаҡында ошондай баһалама яҙа:

«Т. А. Алиев эре рухани ғаиләһенән сыҡҡан. 1917 йылға тиклем батша армияһында тәүҙә подпоручик, артабан штабс-капитан булып хеҙмәт иткән. 1918 йылда ул ирекле рәүештә аҡтарҙың халыҡ армияһына ҡушыла, артабан Вәлидов армияһына күсә һәм унда корпус коменданты, корпус штабы начальнигы ярҙамсыһы була. Башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡанға тиклем дә, унан һуң да Вәлидовтың яҡын ярҙамсыһы булып йөрөй. Үҙе ҡасып киткәнгә тиклем Вәлидов Алиевты үҙ штабында ышаныслы ярҙамсы булараҡ тота.

Вәлидов армияһына мөнәсәбәтен асыҡлау буйынса партия документтарын тикшереүҙә Алиев, үҙенең Совет власына бирелгәнлеген Мансуров менән Иҙелғужин раҫлай ала, тип күрһәткән. Асыҡланыуынса, Мансуров менән Иҙелғужин партия документтарын тикшереү ваҡытында, контрреволюцион вәлидовсылыҡ әһелдәре булараҡ, партиянан сығарылған».

Т. Алиев, хаҡлыҡ эҙләп Мәскәүгә мөрәжәғәт итеп ҡарай. Партия коллегияһы 1936 йылдың 28 мартында түбәндәгеләрҙе ҡарар итә:

«Башҡортостан өлкә комитетының Т. А. Алиевты, аҡтар армияһында (башҡорт частарында) офицер булған һәм партия тормошонда үҙен бер яҡтан да күрһәтә алмаған кеше булараҡ, партиянан сығарыу тураһындағы ҡарарын раҫларға».

1938 һәм 1947 йылдарҙа Т. Алиев партия мәсьәләһе буйынса Үҙәк Комитетҡа тағы аппеляция яҙып ҡарай, әммә Өфөләге коммунистар Мәскәүгә ҡаршы һүҙ әйтергә баҙнат итмәй. Уның юғары әҙерлекле инженер-электрик, оҫта етәксе булыуы, күрәһең, 1937 йылғы сәйәси золомдан ҡотҡара. Әгәр ҙә Өфөлә эшләп йөрөһә, башҡорттарҙы эҙәрлекләгән әҙәмдәр уны юҡ итергә бөтә көсөн һалыр ине.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Т. Алиев Свердловск ҡалаһында эшләп, 1957 йылда шунда вафат була һәм ерләнә. Улы 1942 йылда К. Заслоновтың партизан бригадаһында һуғышып, командиры менән бергә Орша ҡалаһы янындағы һуғышта һәләк була. Ҡыҙы Амалия 1987 йылда Октябрь инҡилабының 70 йыллығы айҡанлы Алиевты (үлгәндән һуң) партия сафында тергеҙеүҙе һәм исемен мәңгеләштереүҙе һорап КПСС-тың Свердловск ҡала комитетына мөрәжәғәт итеп ҡарай. Ҡала етәкселәре был мәсьәләгә ыңғай ҡараш белдерә һәм, Алиевтың партиянан Өфө коммунистары тарафынан сығарылыуы сәбәпле,

КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына мөрәжәғәт итә. Республика партия архивы мөдире Ғ. Ирғәлин СССР Дәүләт именлеге комитетының Өфөләге рәйесенә хат яҙа:

«Мәғлүмәткә ихтыяж тыуыу сәбәпле, Тәҡиулла Алиевтың 1918 – 1920 йылдарҙа Ә. Вәлидовтың әүҙем көрәштәштәре сафында булыу-булмауы тураһында хәбәр итеүегеҙҙе һорайбыҙ. Шулай уҡ уның ВКП(б) ағзаһы Баһау Нуримановты ҡулға алыу һәм үлтереүгә мөнәсәбәте тураһында ла белешмә биреүегеҙ һорала». Йәғни, тағы ла компромат табып булмаçмы?

Дәүләт именлеге комитетында Т. Алиевтың был һорауҙарға мөнәсәбәте булыуы тураһында мәғлүмәт табылмай. Ә Баһау Нуримановтың 1918 йылдың февраленән Ырымбурҙа мосолман революцион комитетын етәкләүе, Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алып, төрмәгә ябыуҙа ҡатнашыуы яҡшы билдәле була. Август-сентябрҙә Орск ҡалаһында ул аҡтар тарафынан әсиргә алына һәм атып үлтерелә.

1987 йылдың 20 октябрендә Республика партия архивы КПСС-тың Свердловск ҡала комитетына ошондай йөкмәткеле хат ебәрә: «Октябрь революцияһының 70 йыллығы айҡанлы, беҙгә Амалия Алиева-Мясникова атаһы, Граждандар һуғышында әүҙем ҡатнашыусы Т. Алиевтың исемен мәңгеләштереүҙе һорап мөрәжәғәт итте.

Т. Алиевты кире яҡтан күрһәткән архив белешмәһен ебәрәбеҙ һәм был хаҡта А. Т. Алиева-Мясниковаға еткерерһегеҙ, тип ышанабыҙ. Беҙҙең ҡарашҡа, элекке аҡ офицер иçтәлеген мәңгеләштереү мөмкин түгел.

Өçтәмә: ике битлек архив белешмәһе».

Был «ике битле белешмә» һуңғы көндәрен йәшәгән авторитар системаға хас телдә яҙылған: буржуаз милләтсе, контрреволюционер Әхмәтзәки Вәлидов, буржуаз милли хөкүмәт, аҡ башҡорт ғәскәре, Алиев әүҙем аҡ гвардиясы һ.б. Йәмғиәтебеҙ үçеше өсөн көсөн йәлләмәгән, электрлаштырыу мәсьәләһен ҡайғыртҡан, ойошторған күренекле башҡортто күрше өлкәнең партия ойошмаһы ололап, хөрмәтләп исемен мәңгеләштерергә тырыша, ә Өфөләге үҙенең шәүләһенән ҡурҡҡан бәғзе бер әҙәмдәр ҡаршы төшә.

1988 йылдың 29 мартында КПСС-тың Свердловск өлкә комитетының партия контроле комиссияһы рәйесе Н. Тишкин Башҡортостан партия архивына тағы мөрәжәғәт итә: «Т. Алиев тураһындағы белешмәнән уға бәйле хәлдәрҙе объектив баһалау мөмкин түгел. Уны ВКП (б) ағзалығына кандидат һәм азға итеп алыу, партиянан сығарыу тураһындағы эштәрен ебәреүҙе үтенеп һорайбыҙ». Илдә өс йыл инде үҙгәртеп ҡороу, йәмғиәт тормошон демократлаштырыу дауам итә, күп хәл-ваҡиғаларға яңыса ҡараш барлыҡҡа килеп, «Вәлиди уҡыуҙары»на әҙерләнәләр, уның иçтәлектәрен, әçәрҙәрен нәшер итәләр. Ә Ғ. Ирғәлин «Әхмәтзәки Вәлиди һәм Ильяс Алкин – бөткән контрреволюционерҙар, партия дошмандары» тип яҙыуын дауам итә. Был ваҡытта партияның тарҡалыуы көсәйә, уны тыйыу тураһындағы 1991 йылғы указға ла күп ҡалмаған.

Һуңғараҡ Екатеринбург мэрияһы һәм ҡала башҡорттары ҡоролтайы Тәҡиулла Алиев йәшәгән йортҡа таҡтаташ ҡуйыуға ирешә, 2000 йылда уның исемен ҡалалағы ҙур урамға бирәләр. Өфө лә, бәлки, ҡалышмаç? Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ул төҙөгән ТЭЦ-ка таҡтаташ ҡуйыу, берәй урамға уның исемен биреү эшен башлар, тип ышанғы килә.

**Дамир КҮСКИЛДИН,**
**тарихсы.**

## Аҡ һынлы алыптар нисек балыҡсы булып киткән?

Боронғо дәүерҙәргә ҡараш ташлағанда тарихсы-тикшеренеүсе күп ауырлыҡтарға осрай. Уны ҡыҙыҡһындырған осорҙа яҙма булған хәлдә – бик хуп. Бында инде уйланырға нигеҙ бар, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың уй-хыялдарын ниндәйҙер дәрәжәлә төҫмөрләргә, тарих һулышын тойомларға мөмкин. Ә уларҙың береһе лә булмаһа? Әлбиттә, ҡомартҡыларҙы ҡаҙығанда һәм өйрәнгәндә, беҙ теге йәки был халыҡтың хужалыҡ, төҙөлөш эшмәкәрлеге, һөнәрселеге тураһында ысынбарлыҡты асыҡларға ярҙам иткән шаҡтай күп мәғлүмәт алабыҙ. Ҡәберлектәр, яндырылған йорттар беҙгә боронғо кешеләрҙең аяуһыҙ көрәше тураһында һөйләй. Ләкин кем кемгә ҡаршы һуғышҡан, был осорҙа ниндәй тарихи үҙгәрештәр барған – бөтәһе лә сер булып ҡала. Бына шунда инде беҙгә халыҡ хәтере, тарихи фольклор ярҙамға килә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был сығанаҡтың әһәмиәтенә тейешле баһа әле лә бирелмәгән. Легендалар һәм башҡа төрлө риүәйәттәр халыҡ тормошо, уның тарихы, донъяға ҡарашы, рухи-мәҙәни асылы менән ныҡ бәйле. Уларҙа халыҡтың тарихи үҫешендәге төрлө осорҙары, социаль үҙаңы сағылыш таба.

Ҡариҙел районында яҙып алынған легендалар 1875 йылға ҡарай. (Balint. G. Kazani-tatr nueltanutmanuok. Budapest, 1875). Был төбәктә легендалар йыйыу, нәшер итеү һәм өйрәнеү тарихы оҙайлы түгел һәм ул XX быуаттың 60-сы йылдарында ғына башланды. Фәнни публикацияларҙан Л. Г. Барагтың «Сказки башкир» китабын (Өфө, 1969) һәм «Башҡорт халыҡ ижады»н (1992) атап әйтергә мөмкин. Шулай уҡ Ҡазанда нәшер ителгән «Татар халыҡ ижаты»н өҫтәргә була. Унда М. Закиров яҙып алған Баязит урманы, Хөсәйен имәнлеге, Өс тейен, Шүрәле ҡарғаған ауыл, Алпамышалар урын алған. Байҡы-Юныс ауылы янында боронғо ҡәберлек бар, уны халыҡ «Алыптар зыяраты» тип атай. Балмаҙыла «Алпамыша ҡәберлеге» бар, шуларға бәйле легендалар йөрөй.

## Алыптар илен эҙләп

Мин үҙем Балыҡсы ырыуының Ҡолсоҡой нәҫеленән. Ҡартатамдарҙың исемдәре бөтәһе лә Әбделдән башлана: Әбделйосопҡол, Әбделғәфәр, Әбделҡаһир һ.б. Кемдәр һуң ул Әбделдәр? Төркиҙәрҙең эфталиттарҙы әбдел-әми тип атағандары билдәле (Артамонов, 1962, 105-се бит). Барлыҡ тикшеренеүселәр ҙә шуны билдәләй: Боронғо Ҡытай һәм Көнбайыш сығанаҡтарында эфталиттар буйынса мәғлүмәттәр шаҡтай күп. Ҡытай сығанаҡтарына таянып, эфталиттар – төрки телле халыҡ, улар Урта Азиянан, теүәлерәк әйткәндә, Кангюйҙан сыҡҡан, тип әйтә алабыҙ.

Эфталиттар тураһында ғәйәт ҡиммәтле мәғлүмәттәрҙе Көнбайыш тарихсылары ҡалдырған. Византия тарихсыһының бер генә яҙмаһына иғтибар итәйек.

Ҡеүәтле эфталит империяһы күршеһе һәм замандашы Прокопий Кесарийский (VI быуат) эфталиттарҙы «аҡ һундар» тип атап, бик тә ышаныслы һәм әһәмиәтле мәғлүмәттәр бирә: «Эфталиттар һун халҡы булып, ошолай аталып йөрөтөлһә лә, улар беҙ белгән һундар менән аралашмай һәм ҡушылмай, сөнки ерҙәре сиктәш түгел һәм яҡын йәшәмәйҙәр. Улар, һундар кеүек, күсмә халыҡ түгел, ә борондан уңдырышлы тупраҡта ултырған. Һундар араһында улар үҙҙәре генә аҡ тәнле һәм, тегеләре кеүек, тәртипһеҙ тормош алып бармай, бер батшаға буйһоналар, барлыҡ ырыуҙар законлы дәүләткә берләшкән, ундағы ғәҙеллек Рим йәки Фарсыныҡынан кәм түгел».

Византияның икенсе бер тарихсыһы Агафий ҙа шул уҡ фекерҙә тора: «Эфталиттар – һун халҡы» (205-се бит). Византия императоры Юстиниан II (VI быуат) һорауына Урта Азиянан килгән төрки илсеһе Мениах былай ти: «Улар – ҡала кешеләре, әфәндем». Эфталиттар ултыраҡ һун халҡынан, хатта юечжи тоҡомонан сыҡҡан булһа ла, Византия һәм Ҡытай сығанаҡтарына ҡарағанда, был атама этносты аңлатмай булһа кәрәк. Эфталиттар – аҡ һундар тип дөйөм генә әйтеүҙән тыш, һинд сығанаҡтарында «хуна» варианты осрай, ә пәхләүи-зороастра әҙәбиәте уларҙы «хиондар» тип атай. Эфталит исеме үҙе төрлө сығанаҡтарҙа егермегә яҡын вариантта яҙылған, һәм уларҙың береһе лә ғәйәт ҙур империя тотҡан милләттең үҙ атамаһы, тәүге исеме булып күренмәй. Мәҫәлән, Сүриә сығанаҡтарында улар әбдел һәм эптали тип аталған, грек телле яҙмаларҙа – абдел һәм эфталит, әрмәндәрҙә – хептал һәм тегал, фарсыла – хетал һәм хайтал һ.б. Бер тарихи төшөнсәнең бына нисә төрлө варианты бар, тимәк, лингвистар өсөн эҙләнеүҙәргә урын етерлек.

Бына шулай итеп тарих фәнендә һиҙелмәй генә, аҡрын ғына ҡапма-ҡаршылыҡлы хәл килеп тыуа: бөтөн тарихи сығанаҡтар тарихтың бер объектив күренеше тураһында һөйләй, ә бөгөнгө тарихсы тырышып-тырмашып шуны кире ҡаға. Боронғо дәлилдәр, эфталиттарҙың сығышы һун-төрки халыҡтарына ҡарай, ти. Ә бына замана фәне уларҙы, һис ниндәй ышандырырлыҡ дәлилһеҙ, фарсы яғына тарта. Был аңлашылмай. Ҡытай сығанаҡтары эфталиттарҙы – төрки ырыуҙарының бер тармағы тип күрһәтмәйме ни ҙә Византия тарихсылары, эфталитты – һун халҡы, тип атамағанмы ни? Ә һундарҙы инде хәҙерге тарихсылар төрки телле халыҡ булған тип белә. Ғәрәп сығанаҡтары һәм Һинд сығанаҡтары «хуна» исеме аҫтында һундарҙы атамаймы ни? Тимәк, айырым тарихсылар был халыҡты төркиҙәр араһынан эҙләп, яңылышмай. Улар быны ышаныслы итеп иҫбатлай алмаһа ла, әле ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына һүҙ башлауҙарына ла «фарсысылар» дыу килеп ҡаршы сыға. Ә бит әле бер генә тарихсы-лингвист та «эфталит» атамаһының фарсы теленә ҡарауын иҫбат итә алғаны юҡ. Күренеп торған факттарҙы ошолай ҙа тиҫкәрелек менән кире ҡағып тороуҙарына ғәжәпләнергә генә ҡала.

Ғәмәлдә иһә эфталит-эпталит-кептал-хайтал һүҙенең этимологияһы өҫтә генә ята, һәм быны аңлау өсөн тарихсы һәм тел белгесе булыу ҙа кәрәкмәй. X быуатта йәшәгән ғәрәп тарихсыһы Балъями үҙенең «Тарихи Тәбәри» китабында (Лакнау, 1312/1874) былай яҙа: «Хайатила» атамаһы «хайтал» һүҙенең күпселеген аңлата. Бохара һөйләшендә ул «көслө кеше» тигәнде аңлата». В. А. Лившин, көнсығыш фарсыларҙа хотан-сакс телендә был һүҙ «ҡыйыу, ғәйрәтле» мәғәнәһендә йөрөгән, ти.

Шулай итеп, «хайтал» – көслө кеше, ҡыйыу, ғәйрәтле тигәнде аңлатҡанды белдек. Хәҙер инде боронғо төрки телдә бына шуға оҡшаш һүҙ эҙләп ҡарайыҡ. Эврика! Ундай һүҙ бар? Бик тә киң таралған, һәр кемгә билдәле батырлыҡ,

ҡыйыулыҡ, ғәйрәтле, йөрәкле кеше, баһадир мәғәнәләрен белдергән күплек һандағы исем – Алп (Алып) һәм уның варианттары:алпал, алптиал, алпагут, шулай уҡ яңғыҙлыҡ исемдәре:Алпр Ертунга, Алп Тегин һ.б.

Атилла вафат булғандан һуң, улдары Ирнек һәм Денгизик һундар менән Дунайҙан көнбайышҡа – Азов һәм Каспий диңгеҙҙәре яҡтарына юл тота. Ирнектең исеме төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә яҙылған. Эрнах (Приск), Хернак (Иордан), Эрнек (венгрҙарҙа), Ирник (Болгар хандары исемлеге). Ә бына әрмән яҙмаларында ул, беҙҙең ҡарашҡа, «һундар батшаһы» Херан шәхесендә күренеп, Присктың Эрнахына ауаздаш яңғырай. И. Маркварт Херанды «батша урҙаһы» тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Беҙ тағы ла шундай фекерҙә торабыҙ: Эрнах, бигерәк тә Херан формалары төркиҙең Эрен формаһына ялғана. Бына шунда инде эпик герой Алп-Эренде иҫкә төшөрәйек. Уның тураһында әрмән тарихсыһы Егише былай яҙа: «Был Херан... Албанияла фарсы ғәскәрҙәрен ҡырып бөттө (45) һәм баҫҡынсылыҡта Грек иленә барып етте, Грециянан да, Әрмәнстандан да, Иберия нан да, Алманиянан да бик күп әсирҙәр һәм хәрби табыш оҙатты».

Алп, боронғо төрки һүҙлектәренән күренеүенсә, бер нисә мәғәнәгә эйә: 1. Герой, баһадир; 2. Ҡыйыу, батыр, ҡурҡыуһыҙ; 3. Батырлыҡ, ғәйрәтлелек, тәүәккәллек; 4. Төҙ атыусы, мәргән. Төрки яҙмаларҙа беҙ ундан ашыу хакимдарҙың исемдәре Алп һүҙе менән башланыуын күрәбеҙ. Алп Ҡотлоғ, Алп Тархан, Алп Тоғрол, Алп Тегин, Алп Турмиш һ.б. Беҙҙең өсөн Алп эр Танга (Алп эр Түнгә) батшаның исеме айырыуса ҡыҙыҡһыныу уята. Уға боронғолар шиғырҙарын бағышлай, уны Турандың легендар хакимы итеп күрһәтәләр, һәм төрки караханидтарҙың нәҫел башы ла шуға барып тоташа.

Караханидтар батшалығы ысынбарлыҡ булғас, батшаларҙың да генеалогияһы булған бит инде. В. В. Бартольд ул хаҡта былай ти: «Туран батшаһының бер нисек тә Афросиаб тип аталыуы мөмкин түгел, сөнки был исем төркиҙеке түгел». Бындай шикләнеүҙәрҙе алдан күргәндәй, әле Караханидтарҙың данлы үә шанлы сағында уҡ ике ғалим-лингвист Мәхмүт Ҡашғари һәм һарай чиновнигы, шағир Йософ хос Ходжиб бер-береһенә бәйле булмаған рәүештә аңлатма биреп ҡалдыралар: Афросиаб – төркиҙәр хакимы һәм уның төрки исеме Алп Эр Тонга. Бында шуны әйтергә кәрәк: Мәхмүт Ҡашғари һүҙлегенә ҡарағанда, Алп – герой, баһадир; Эр – ир-егет, батыр, һуғышсы, Түнга – юлбарыҫ; ҡушамат, тағылған исем. Бында инде Алп Эр Тонга исеменең асылдағы мәғәнәһе күренә: Герой-һуғышсы-Юлбарыҫ йәки Юлбарыҫ Яугир-Герой. Алп Эр Тонганың батшалыҡ итеү осоро сама менән Урта Азияла V – VII быуаттарҙа эфталиттар хакимлыҡ иткән дәүергә тура килә. Шулай булғас, Эфтал-Эптал-Алптан-Алпталан атамаларын бер үк исемдең төрлө варианттары тип ҡарайбыҙ икән, Алп Эр Тонга менән Тонга Алп Эр ҙә бер үк кеше булыуы ихтимал. Алп Таланды Византия тарихсылары үҙ телдәренә яраҡлаштырып, Эфталан тип яҙған икән, Алп Талан менән Алп Эр Тонганың да бер үк кеше булыуы мөмкин түгелме ни? Алпамыша тураһындағы монументаль башҡорт эпосы үҙенең героик йөкмәткеһе менән боронғо күсмә тормошҡа, ана шул алыптай кешеләр – эфталиттар осорона барып ялғана шикелле.

## Хиониттар

Эфталиттар менән бер заманда тиерлек, героик походтар барған шул уҡ урындарҙа тарих аренаһына тағы ла ҡыйыу халыҡтар – хиониттар менән кидариттар сыға. Ошо осорҙан ҡалған тарихи яҙмаларҙа был халыҡтар тураһындағы

мәғлүмәттәр өҙөк-йыртыҡ ҡына. «Хионит» атамаһы беренсе тапҡыр әрмән тарихсыһы Аммиан Марцеллинда осрай. «Хиониттар һәм еүсендәр янауына ҡаршы Сасанид шаһы Шапур II 346 – 347 йылдарҙа үҙ дәүләтенең көнсығыш сиктәренә барырға мәжбүр була. Һуңынан шаһ «иң алыҫ халыҡтар» – хиониттар һәм геландар менән союз килешеүе төҙөргә ирешә», – тип яҙа Марцеллин. Ун ике йылдан һуң хиониттар Сасанидтар ғәскәре составында Сүриәнең Амид ҡалаһы янында һуғышта ҡатнаша. Хиониттарҙың яңы батшаһы Грумбат исемле икәнен беләбеҙ, батшаның янында улы ла йөрөгән һәм шул ҡыйралышта һәләк булған. Күрәһең, Аммиан Марцеллин был һуғыштың шаһиты була, сөнки ул Грумбаттың улын нисек ерләгәндәрен ентекләп яҙған. Егетте ул «...буйға һәм сибәрлеккә башҡаларҙан өҫтөн ине», – тип тасуирлай. Бына ошо һүҙҙәр хәҙерге тарихсыларҙы яңылыштырып ебәрҙе шикелле, һәм улар, батша улы сибәр булғас, тимәк, хиониттар һундар түгел, тигән һығымтаға килә. Мәҫәлән, Пигулевская. Шул уҡ ваҡытта беҙ Сүриә тарихсыһы Мешу Стеллит VI быуат башында уҡ ап-асыҡ теркәп ҡуйған: «Хиониттар – һун халыҡтары», – тигән (Ғафуров, 203-сө бит) мәғлүмәтте лә беләбеҙ.

Тарихи сығанаҡтарҙың ап-асыҡ күрһәтеп тороуына ҡарамаҫтан, Б. Г. Ғафуровтың дипломатия шымалығы менән, әммә формаль яҡтан ҡәтғи итеп, хиониттарҙың сығышын билдәләүе бик ҡыйын проблема, тип тороуы ғәжәп яңғырай. «Шулай итеп, VI быуаттағы Сүриә авторы күҙлегенән ҡарағанда, хиониттарҙың һундар менән уртаҡлығын танып була, хәҙерге мәлдә был фекергә ҡаршы ҡуйырлыҡ теүәл теория юҡ. Бары тик шуны әйтергә мөмкин: хиониттар – Урта Азиянан сыҡҡан фарсы телле ырыу булған шикелле» (Ғафуров, 215-се бит).

Тарихсы хиониттарҙың һундар – аҡ һундар мөхитенән сығыуын раҫлаусы VI быуат документтарын ғәмәлдә һанға һуҡмай. Йәнәһе, улар сит ил кешеләре тарафынан яҙылған. Ләкин фарсы телле документтарҙа ла нәҡ шундай уҡ факттар теркәлгән бит. Мәҫәлән, «Бахман-Яште» лә пәхләүи тексты оло үкенес менән Сасанидтарҙың яттарҙан еңелеүен хәбәр итә, ошо яттар араһында ҡыҙыл һәм аҡ хиондар телгә алына. «Батшалыҡ һәм юғары власть ҡолдарға күсте, улар фарсы түгел, ә төрөк, хафтал, тибет, таулылар, ҡытай, согди, византиялылар, ҡыҙыл һәм аҡ хион кеүек халыҡтар ине. Улар Фарсыла, минең Ватанымда, хаким булып алды» (207-се бит). Бында хиондар, төрөктәр, хафталлар һәм башҡаларҙың Фарсы (хәҙерге Иран) өсөн яҡын халыҡ булмауы асыҡ күренә. Бындай документҡа ҡаршы килеп булмай.

Пәхләүи халҡының билгеле «Авеста» яҙмаһында «хийаона» халҡы Заратустраның яуыз дошманы тип күрһәтелә. Ф. Альтхайм фекере буйынса, «тимәк, хийаона, тағы ла бер сакс ырыуы менән, Окс менән Яксарт араһында барлыҡҡа килә» (Ғафуров, 203-сө бит). Был фараз, Г. Бейли әйтеүенсә, күп һорауҙарға яуап бирмәй (улар ҡасан төньяҡ-көнсығышҡа күсенгән, һундар менән ниндәй мөнәсәбәттә торған һ.б.). «Ысынлап та, хәҙерге белемебеҙ кимәлендә беҙ был һорауҙарға яуап бирә алмайбыҙ, «хийаона» термины менән тарихи хиониттар араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ-мөнәсәбәт булыуы тураһында ла аныҡ яуап таба алмайбыҙ» (Ғафуров, 203-сө бит).

Ниһайәт, «хиониттарҙың килеп сығышын билдәләүе бик ҡыйын проблема» тураһында. Үҙе лә һиҙмәҫтән, был һүҙҙәрҙән һуң ике бит үтеүгә, Ғафуров эфталиттар тәңкәләрендәге яҙыуҙарға ҡарай шундай фекер әйтеп ташлай: «Эфталиттар үҙ-үҙҙәрен хион тип атаған (тәңкәләрҙә oiono), тимәк, эфталиттар – хиониттарҙың бер тармағы» (206-сы бит). Был халыҡ үҙен «хион» тип атаған

икән, улайһа эфталит, хафтал, эптал, хайтал кеүек варианттар нисек барлыҡҡа килгән? Әйтәйек, эфталиттарҙың бары тик хиониттарҙың бер тармағы икәнен беҙ ҡайҙан беләбеҙ? Быға ҡәҙәр әле Р. Гиршман эфиалит тәңкәләрендәге яҙыуҙы уҡый алған: «Эфтал – хиондар батшаһы». Уның уйынса, беренсе һүҙ – хакимлыҡ итеүсе нәҫел исеме, өсөнсө һүҙ – ырыу атамаһы. Бына шунда эфталиттар менән хиониттар араһында бәйләнеш күренә лә инде. Ләкин легенданы (аҡсалағы яҙыу) уның былай аңлатыуын һис шикһеҙ хаҡ тип әйтеп булмай. Беҙгә ҡалһа, өс һүҙҙән торған тексты былай аңларға кәрәк: «Хион – баһадир батша» йәки «Хион – ҡыйыу батша». Шунан һығымта яһайбыҙ: Алпал – батшаның эпитеты. Хион – батшаның исеме, шулай булғас, хиониттар – Хион батшаның кешеләре, уға буйһоноусылар.

Шулай ҙа кемдәр һуң ул хиондар? Боронғо фарсы яҙмаһы изге «Авеста»ла улар осло башлыҡ кейгән, осло ҡалҡан тотҡан кешеләр итеп тасуирлана. Был Урта Азиялағы сактарҙы, скифтарҙы һәм массагеттарҙы хәтерләтә, улар фарсы рельефтарында осло бүректәрҙә һүрәтләнгән. Башҡорттарҙа һәүен ырыуы тураһында боронғо легенда һаҡланған, йәнәһе, шуларҙан хәҙер Ҡытайҙа, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстанда йәшәүсе уйғырҙар һәм башҡорттар башланып киткән. Бына шулай самалап-самалап ҡына тарихҡа яҡынлашабыҙ: хиондар – ысындан да Урта Азияның бик боронғо ырыуы. Ләкин был боронғо исем шулай бөтөнләй юғалып онотолоп ҡуйҙымы ни? Урта быуаттар тарихын өйрәнеүсе тарихсылар хион тигән халыҡты тапмаған булһа кәрәк. Шунан хионит-эфталиттар проблемаһы көрсөккә килеп текәлә. Ләкин беҙгә был һүҙҙең эҙҙәрен Урта быуаттар ҡулъяҙмаларында икенсерәк юҫыҡта табыу бәхете тейҙе.

Эҙләнеүҙе дауам итәбеҙ. Урындағы терминдарҙы яҙғанда, Боронғо Көнсығыш тарихсылары булһынмы, Ҡытай йылъяҙмасыларымы ул, үҙ телдәренә яраҡлаштырып, был һүҙҙәрҙе үҙгәртеп (боҙоп) ҡуйғандар. Шул арҡала хәҙерге тарихсыларға бик ауыр мәсьәләләр ҡалдырғандар. Хион этнонимы проблемаһын сисеү өсөн, һәр кемгә билдәле һәм бәхәсһеҙ булған бер лексик нормаға мөрәжәғәт итәбеҙ. Боронғо төрөк хакимдары ҡаған титулы йөрөткән. Был терминдар фарсы һәм ғәрәп яҙмаларында «хаин», «хакан», «хан» формаларында теркәлгән. Тора-бара бары тик хан варианты ғына һаҡланып ҡалған. Шулай уҡ ҡырғыҙҙы – «хиргиз», ҡарлуҡты «харлук» тип яҙыу булған. Батшабикә йәки байбисәне «ҡатун» тип атағандар, ә «хатун» тип яҙғандар.

В. В. Бартольд былай иҫкәртә: «Ул замандағы ғәрәп һәм фарсы авторҙары киргиз һүҙен «хиргиз» тип «х» хәрефе менән яҙа, ә бына әйткәндә тамаҡ төбө менән ҡаты итеп «ҡ» тип өндәшә (ҡырғыҙ). Һүҙҙәрҙе яҙғандағы былдай үҙгәрештәр унан боронғораҡ замандарҙа булмағандыр, тип кем әйтә ала?

Был йәһәттән Рәшид әд-дин (1247 – 1318) яҙған «Джәми әт-тәүарих» хеҙмәте иғтибарға лайыҡ. Уның фекерҙәрендә рациональ орлоҡ бар. Киян ырыуы атамаһын ул ҡеүәтле цыу стихияһы менән бәйләй: «Монголса Киян – ҙур ағым тигәнде аңлата, тауҙан түбәнгә ағыусы, көслө, тиҙ, урғылыусы һыу. Кияндар ҡыйыу, батыр, ифрат сая булғанлыҡтан, был һүҙ уларға исем булып йәбешкән. Кият – киян һүҙенең күпселек һаны, борон заман был кешеләрҙе кият тип атағандар» (154-се бит).

Боронғо хиондар, хиониттар шундай уҡ ҡыйыу йөрәкле, ғәйрәтле булған, шуның менән улар киян-кияттарға оҡшаған. Йылъяҙманың ғәрәп графикаһы менән яҙылған нөсхәһенә баҡһаҡ, киян термины qivan формаһында яҙылған был боронғо xion һүҙенә тиң. Кият ырыуы исеме оригиналда qivot, был инде

боронғо хиониттарҙы иҫкә төшөрә. Көнсығыш яҙмаларҙа беҙгә билдәһеҙ Хаетила – Хаятила исемле ил осрай һәм был һүҙҙе беренсе ҡат тарихсы Балъями (Х быуат) Хайтал һүҙенең күпселек һандағы шәкеле итеп атағанын иҫләп, беҙ был тарихи терминды Кият эли, Киет эли тип ҡабул итә алабыҙ. Йәғни, унан да боронғораҡ вариант Хаетила – Хиятила беҙҙеңсә Хияттар (хаяттар) иле булып сыға.

Хайтал һәм хаятила һүҙҙәренең аңлатмаһын Балъями яҙмаларынан эҙләйбеҙ. Ул ниндәйҙер сығанаҡтарға таянып, бәлки, тағы ла боронғораҡ ғәрәп яҙмалары булғандыр, Бохара телендә хайтал – көс тип билдәләнә. Тағы шуға ла иғтибар итәйек. В. В. Бартольд былай ти: «Мосолман географтары китаптарҙан мәғлүмәттәр алған, ләкин күп осраҡта улар был китаптарҙың ҡайһы осорға ҡарағанын иҫкәртмәй, йәғни ошо заманда булғанды түгел, ә бер нисә быуат элек булғанды һөйләүҙәре тураһында белгертеп ҡуймағандар» (Бартольд, I том, 491-се бит). Балъями менән шундай хәл ҡабатлана, ул биш-алты быуат элек булғандарҙы яҙа, шунлыҡтан ҡайһы бер терминдарҙың үҙгәреү ихтималлығы ғәжәпләндермәй. Боронғо ғәрәп графикаһын дөрөҫ уҡыу – үҙе үк бик ауыр мәсьәлә. Бына шунан сығып, «хайтал» һүҙенең «алптал» терминының ныҡ боҙолған вариантын икәнен күрә алабыҙ, был һүҙҙәр тора-бара ныҡ айырылып ҡына ҡалмаған, ә бөтөнләй икенсе һүҙ «хаятила» менән яраҡлаштырыла башлаған. Хатта был ике һүҙ ошолай яһалма рәүештә «туғанлаштырылған» булһа ла, уларҙың тамырҙарында бөтөнләй ике мәғәнә ятыуын күрмәү мөмкин түгел. Хайтал-Алптал (Алп–тал) Алп һүҙенән яһалған, ул көс, ҡеүәт, ғәйрәт, батырлыҡ тигәнде аңлата. Хаятила термины бөтөнләй башҡа. «Хаятила – күпселек һандағы исем» тип яҙғанда, Балъями, моғайын, яңылышмағандыр. Ләкин типик исем хайталдан түгел, ә иет-хиет (кият-хият) һүҙҙәренән. Шуға эль-ил-иле һүҙҙәре ҡушылған. Ике һүҙ ялғаныуҙан Хиетила – Хаетила килеп сыҡҡан. Ғәрәп яҙмаһында «а», «и» өндәре яҙылмай, ә уларҙы билдәләүсе хәрәкәләр «юғалып» та ҡалырға мөмкин. Шулай итеп, Балъями «Хиетила» тип яҙғанда Хияттар иле, Хияттар дәүләте тигәнде күҙ уңында тотҡан.

## Аҡһындар иле

Тағы ла бер мәртәбә Прокопий Кесарийский мәғлүмәттәрен иҫкә төшөрәйек: «Эфталиттар һун халҡы булып, ошолай аталып йөрөтөлһә лә, улар беҙ белгән һундар менән аралашмай һәм ҡушылмай, сөнки ерҙәре сиктәш түгел һәм яҡын йәшәмәйҙәр. Улар һундар кеүек күсмә халыҡ түгел, ә борондан уңдырышлы тупраҡта ултырған. Улар һундар араһында үҙҙәре генә аҡ тәнле һәм, тегеләре кеүек, тәртипһеҙ тормош алып бармай. Бер батшаға буйһоналар, барлыҡ ырыуҙар законлы дәүләткә берләшкән, ундағы ғәҙеллек Рим йәки Фарсыныҡынан кәм түгел». Эфталит аҡсаларындағы грек хәрефтәре менән бактри телендә яҙылған яҙыуҙарға ҡарағанда, улар үҙҙәрен хион тип атаған (аҡсала – ojono).

Хион? Был этнонимға оҡшашты башҡорт халҡының күп һанлы ырыу-нәҫелдәре араһынан эҙләп ҡарайыҡ. Эврика! Ундай этноним бар! Был – һыуын, суун. «Борондан уңдырышлы тупраҡта ултырғандар». Прокопий Кесарийскийҙың был һүҙен иғтибарһыҙ ҡалдырмайыҡ. Уңдырышлы тупраҡ йылға үҙәндәрендә була. Урта Азияға килгәнгә ҡәҙәр әле, унан күпкә алда, хиондар (һыуун, суун) ун (һун, гун) халҡының күршеләре йәки бала ырыуы булғандыр. Беҙгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында улар территория буйынса айырымланған. Һыун, суун этнонимының ике өлөшкә бүленгәнлеге күренеп тора, һыу һәм ун (халыҡ, ырыу

атамаһы). «Һундар араһында үҙҙәре генә аҡ тәнле». Был хәбәрҙән беҙ был халыҡтың ни өсөн аҙаҡ «аҡсын» (аҡ тәнле) тип аталыуын аңлайбыҙ инде. Хәйер, икенсе вариант та бар. Күп кенә тюркологтар раҫлауынса, боронғо бабаларыбыҙ тарафтарҙы төҫ менән төҫмөрләр булған: ҡара – төньяҡ, һары йәки аҡ – көнбайыш, ҡыҙыл – көньяҡ, күк – көнсығыш. Тимәк, аҡһындар көнбайыш һундары булыуы ихтимал.

Р. Г. Кузеев халыҡтың тарихы тураһында һүҙ йөрөткәндә, көнсығыш һәм көнбайыштың боронғо яҙмалары менән бер рәттән, урындағы мәғлүмәтте лә киң өйрәнергә кәрәклеген иҫкәртә. Ошо принцип менән ҡоралланып эҙләнеүҙе дауам итәйек. Башҡортостанда Асҡын топонимдары, гидронимдар осрап тора. Мәҫәлән, Архангел районында Асҡын йылғаһы, Ауырғазы районының Түбәнге Ләкәнде ауылы янында Асҡын тауы һ.б. Р. Шәкүров Асҡын топонимы семантикаһын асыҡлағанда шуға иғтибар итә: Берг-коллегияның 1753 йылғы документтарында, башҡа яҙмаларҙа был топоним Аҡсын тип теркәлгән, тимәк, топонимдың тәүге формаһы Аҡсын булған, тип һығымта яһай.

Күп быуынлы ырыу-нәҫел структураһы яңы тармаҡ-айырылар килеп сығыуға килтермәй ҡалмай. Был процесты ла күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Ул бөтә күсмә халыҡтарға хас булһа ла, һәр ваҡытта ла күҙгә салынып бармай, әгәр күренә икән, ниндәйҙер бер киҫкен, айырата мөһим моментта ғына. Һүҙ ырыуҙарҙың беренсе исемдәре онотолоп, яңы атамаларҙың донъяға сығыуы тураһында бара.

Иҫке ырыу бер нисә төркөмгә бүленгәндә йәки элекке ырыу бөтөнләй тарҡалып, уның ҡалдыҡтары нигеҙендә яңы төркөм барлыҡҡа килгәндә, яңы исемгә мохтажлыҡ килеп тыуа. Яңынан ойошҡан берлектәр исемендә тәүге мәлдә иҫке ырыуҙың исеме һүҙ өлөшө булып һаҡлана, мәҫәлән, һыуун, сун, сын, чин. Унан икенсе исем барлыҡҡа килә, унда инде яңы этноним төп элемент булып нығына: аҡһын, аҡсын. Күреүебеҙсә, «ун» элементы төшөп ҡалған. Артабан, бүлендек ырыуҙар барлыҡҡа килеүе һөҙөмтәһендә, иҫке этнонимға яңыһы ҡушыла. Мәҫәлән: балааксын, балыҡсы, балакчин, XVIII быуат документтарында Балакчы, Балыкчи, Балахки (Рычков буйынса) варианттарын күрәбеҙ.

Яңы исемдәр, уларҙы йөрөтөүсе халыҡтар тора-бара үҙаллылыҡ ала. Үҙ составына теге йәки был халыҡ төркөмдәрен ҡушыуҙан яңы ырыуҙарҙың этник составы бер ни ҡәҙәр үҙгәрештәргә дусар була. Улар риүәйәттәр, шәжәрә, тамға һәм башҡа атрибуттар менән байый бара, йәғни социаль организм буларaҡ үҙҙәрен «ысын», боронғо ырыу кеүек тота. Билдәле ки, был процестың теүәлләнеү дәүере генә тиҙ үтә, сөнки был осорға тел, кейем, ғөрөф-ғәҙәт, мөнәсәбәт, кәсепшөғөл кеүек бер төркөмдө, икенсеһенән айырып, танырлыҡ итеүсе сифаттар инде формалашҡан була.

Бына шулай: тарих юлы буйлап оҙайлы сәйәхәт үткәндән һуң, беҙ аҡсындарҙың да, балыҡсыларҙың да нәҫел ебе ҡайҙа барып тоташҡанын, үҙебеҙҙең кем вариҫтары булыуыбыҙҙы төҫмөрләй алабыҙ.

**Фидаил САФИН,**
**тарихсы.**
**Ҡариҙел районы, Балмаҙы ауылы.**

## БАРМАҒЫҢА АҢ КИЛҺӘ, ҺӨНӘРЕҢӘ ДАН КИЛЕР

Техник фәндәр кандидаты, педагогика фәндәре докторы Азат Сәлимйән улы Вәлиев менән осраҡлы рәүештә Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты ойошторған күргәҙмәләр залында тап булыштыҡ. Был көндәр технология факультеты етәксеһе А.С. Вәлиев өсөн үтә лә мәшәҡәтле – уҡыу йортонда уҙғарыласаҡ оло сараға әҙерлек көндәре ине. Ваҡыты тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, ул матурлыҡ, эшһөйәрлек донъяһы хаҡында буласаҡ әңгәмәгә ихлас ризалашты. Беҙҙең алдыбыҙҙа – ул етәкләгән факультеттың ижад емештәре булып теҙелеп киткән күҙҙең яуын алырлыҡ әйберҙәр. Милләтебеҙҙең кәсеп булып формалашҡан элекке сәнғәт төрҙәре яңы һулыш алып, Сибай институтының ҡотон, именлеген һаҡлаған кеүек, изгелек, әхлаҡи сафлыҡ символы булып яҡтыртты беҙҙең күңелдәрҙе. Оло ҡыҙыҡһыныу менән мин, хәҙер кейеҙҙән кейем баҫалармы ни, тип һораным.

– Эйе, күрәһегеҙ бит. Формаһы яғынан бөгөнгө модаға ла ауаздаш. Йәнә лә интерьерҙы биҙәргә өйрәтәбеҙ студенттарҙы, – тине Азат Сәлимйән улы.

Күреүемсә, сәнғәттең был төрө Сибай студенттары араһында йылы ҡабул ителә. Бынан ун йылдар элек самаһы беҙҙең Урал аръяғы төбәгендә кейеҙ һуғыу сәнғәтен байрам рәүешендә башлап ебәреү әбйәлилдәр иңенә төшкәйне. «Аҡ кейеҙгә баҫып» исемле фольклор байрамы булғайны ул. Ошо саранан алынған тәьҫораттар шауҡымында милләттебеҙҙең киләсәген билдәләүсе йәш интеллигенция булып етешергә, дөйөм үҫеште киңәйтеү өсөн эленән-эле эҙләнергә, уйланырға, етешһеҙлектәрҙән арыныу юлдарын табырға һәм, тормош талап иткәнсә, кәсепселек өлкәһендә хеҙмәт итә алырҙай булдыҡлы белгестәр кәрәклеген асыҡ төшөндөрҙө. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәне Сибай институтының технология факультетында. Бөгөн декоратив сәнғәт менән шөғөлләнеүсе студенттарҙың эштәре өлгөлө һәм күптәргә үрнәк. Әйтәйек, оҫта ҡул менән һуғылған биҙәкле әйберҙәр ҡабатланмаҫ ҡатын-ҡыҙҙар, ирҙәр, балалар өсөн баш, аяҡ, ҡара йәки ҡатнаш йөндән баҫылған, хатта ала кейеҙ ҙә юҡ түгел. Башҡорт кейеҙенә булған ихлас иғтибарҙы юғары уҡыу йортоноң «Ете ырыу» исемле тирмә-музейында ҡулдан эшләнелгән йә сигелгән боронғо әйберҙәр менән бер рәттән һуғылған затлы кейеҙ милли көнкүрештә асыу сараһының бер төрө икәнен иҫкәртте һәммәбеҙгә…

– Кейеҙ, тәбиғи экологик материал булғанға күрә, йәнгә сихәт, тәнгә йылылыҡ өҫтәй, – тине технология факультеты уҡытыусыһы, ғалимә Тажитдинова Гөлнара Фәрүәз ҡыҙы. Уның кейгән кейеме лә кейеҙҙән һуғылған – заманыбыҙҙың байҙары кейеменә тартым. Кейеҙ әллә нисә быуаттар дауамында халыҡҡа хеҙмәт иткән: урындыҡҡа, иҙәнгә түшәү, тирмәнең өҫтөн ябыу, аҡ тирмәләр ҡороу – былар элек-электән һәр кемгә таныш. Ошо уҡ күркәм күренештәр яңыса, заманса дауам итә Сибай институтында. Зауыҡлы кейемдәрҙе кейеҙҙән һуғыуҙы тәү тапҡыр күрҙем технология факультетында. Әлбиттә, уҡытыусыларының өҫтөндә ошондай сифатлы һәм зауыҡлы кейем булғас, студенттар ҙа остаздарына оҡшарға тырышасаҡ. Быға миҫал – йәштәр араһында кейеҙгә ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта. Уларға төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнашыу мөмкинлеге тыуа.

Мәҫәлән, «Евро-Уфа-Азия» исемле төбәк һәм халыҡ-ара фестивалдә студенттар Л. Нәбиуллина, Г. Мырҙабулатова (етәкселәре – Г. Ф. Тажитдинова) беренсе урындарҙы яуланы. Мәскәүҙең халыҡ галереяһында «Тамға» исемле беренсе күргәҙмәлә лә кейеҙҙән һуғылған әйберҙәре менән Сибай студенттары үҙҙәрен һынатмаған.

– Кейеҙ баҫыу технологияһы нисегерәк башҡарыла һуң?– тип һораным үҙ эшенең оҫтаһы, фән кандидаты Гөлнара Тажитдинованан.

– Кейеҙҙе ҡул менән баҫаһың. Быға, әлбиттә, көс кәрәк. Артабан еңелсә баҫылған кейеҙ өҫтөнә йомарланған һарыҡ йөнө киҫәктәрен билдәле бер тәртиптә һалып, тығыҙланғансы баҫаһың. Артабан – аппликациялау, ситтәрен сигеү, биҙәктәр өҫтәү китә.

Кейеҙҙән баҫылған әйберҙәр, экологик таҙа материалдан булғанға күрә, төрлө сирҙәрҙән, әйтәйек, ҡул һыҙлауынан, йөрәк сиренән, нервы ҡуҙғыуынан дауа була ала. Уның дауалау көсө – һарыҡ йөнөнөң ҡояш энергияһын туплау һәҙөмтәһе. Быйма баҫыу өсөн дә тик һарыҡ йөнө генә ҡулланыла бит. Һарыҡ йөнө быуындар һыҙлауынан һаҡлай, аяҡты йылытып, ҡан тамырҙарын киңәйтә һәм йөрәшөн көйләй. Әгәр ҙә һәр кем үҫмер йәшкә тиклем быйма кейһә, артабан һыуыҡтарға бирешмәйәсәк, тигән фараз йәшәй беҙҙең халыҡта. Йәштәрҙең ҡайһы бер өлөшө милләтебеҙҙең этник йөҙөн билдәләүсе кейеҙҙән баҫылған әйберҙәрҙе иҫкелек ҡалдығы тип ҡарай. Ә бына Сибай институтының технология факультеты уҡытыусылары Г. Ф. Тажитдинова менән Н. Ш. Бикбирҙина, заманыбыҙҙың эстетик талаптары формаларын һәм аң сағылышын иҫәпкә алып, студенттарҙы эштәрен сигеү, аппликация, орнамент менән тулыландырырға, биҙәргә өйрәтә. Һөҙөмтәлә милли кейемдәрҙең үҙ стиле һаҡлана. Асылда буласаҡ технолог-белгестәрҙә ижади һәләттәр, юғары әхлаҡи сифаттар, үҙ аллы белем алыу барлыҡҡа килә.

Бармағыңа аң килһә, һөнәреңә дан килер, ти халыҡ мәҡәле. Факультеттың ижад емештәре күргәҙмә рәүешендә Мәскәүҙә, Өфөлә, Силәбелә, Магнитогорскиҙа һәм Урал аръяғы районадарында күрһәтелде. Үҙҙәренә бирелгән баһаларҙан ҡанатланып, һәр бер үткәрелгән сараларҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа еңеүсе булды улар. Ғөмүмән, сигеү, бәйләү, кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу, тегеү оҫталыҡтары аша донъя матурлығын тоя, күрә, тыуҙыра алыусы ҡыҙҙар бихисап был юғары уҡыу йортонда. Л. Нәбиуллина, Г. Мырҙабулатова, А. Кейекбирҙина, Г. Абдуллина уҡытыусылары Г. Ф. Тажитдинова, Н. Ш. Бикбирҙина етәкселегендә күңелдәренең иң тәрән мөйөшөнә һалынған ижади хыялдарын туҡымаға күсереп, ҡарап-ҡарап та ҡарашты ала алмаҫлыҡ мөғжизәүи өҫ кейемдәрен текteләр. Шуға ла йыл да даими рәүештә уҙғарылған «Евро-Уфа-Азия» йәштәр форумында призлы урындарҙы яуланылар. Буласаҡ белгестәргә рухты үҫтереү тураһында һөйләүгә ҡарағанда, уларҙың ғәмәли-практик эштәренә иғтибар итеү отошлораҡ, ти факультет деканы А. С. Вәлиев. Ошоға ярашлы, тәрән фәлсәфәүи мәғәнәле Дизайн-студия эшләп килә. Энә сәнсә, еп йыя тигәндәй, уның оҫта ҡуллы ағзалары Н. Ерьесова, Й. Кәримова, Л. Йосопова, З. Йәнгилдина һ.б. киләсәктә еңел сәнәғәт өлкәһендә эшләүсе художник-модельерҙар булыуҙарына һис бер шик юҡ.

Технология уҡытыусыһы – ул ғәйәт тәрән фәлсәфәүи аң, тормош тәжрибәһе, үткер фекер талап иткән шөғөл. Сибай институты етәкселегенең бурысы һәм маҡсаты – кәсепселекте үҙ эсенә алған бөтә төр яңылыҡтар менән студенттарҙы һәм ғалимдарҙы таныштырып барыу һәм уларҙы түкмәй-сәсмәй йәш быуынға еткереү. Әлбиттә, бындай тынғыһыҙ эш еңелдән түгел, сөнки туҡтауһыҙ эҙләнергә, уйланырға, тәжрибә тупларға кәрәк.

Ошо юҫыҡта был уҡыу йортонда директор З. Ғ. Йәрмөхәмәтов тарафынан йәш белгестәрҙең формалашыуына булышлыҡ иткән башҡа сит ил юғары уҡыу йорттары коллективы менән осрашыуҙар, фәнни-ғәмәли конференциялар, тәжрибә уртаҡлашыу кеүек төрлө саралар үткәрелеп тора. Әйтәйек, Үзбәкстан,

Германия юғары уҡыу йорттары коллективтары менән даими эшлекле бәйләнештәр булдырылған. Әле күптән түгел технология факультетында З. Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ юғары уҡыу йортоноң ректоры Илгиз Раян улы Ҡәҙерғолов, проректоры Харис Зәбих улы Әбдрәхмәновтар булып киткән. Фекер алышыуҙар барышында студенттарҙың йәшәү һәм белем биреү шарттарын, бигерәк тә кәсеп итеү формаларын фәнни нигеҙҙә ҡороу, йәғни заманса эшләргә өйрәтеү һ.б. көн ҡаҙағына һуғырлыҡ мөһим мәсьәләләр ҡаралған.

Технология факультетының студенттарына белем биреү даирәһе – оҫта ашнаҡсы әҙерләү, ағас, тимер, металл эшкәртеү, таш ҡырҡыу, шулай уҡ эре машиналар һәм механизмдар теорияһы, машина деталдәре һәм уны ҡороу, бөтә төр автотранспортты техник яҡтан хеҙмәтләндереү һ.б. Факультеттың базаһы ныҡ: бөтәһенең дә үҙ лабораторияһы, оҫтаханаһы бар.

– Теория менән бергә студенттарҙың ижади эштәренә айырыуса иғтибар итәбеҙ,– тине уҡыу йорто ғалимдары һәм хеҙмәткәрҙәре. Уларҙың әйткәнен нығытыр ҡаҙаныштар һанап бөтөрөрлөк түгел. Мәҫәлән, Эдуард Әбдрәшитовтың Ирәндек йәшмә таштарын ҡырҡып эшләгән яҙыу, һыҙыу комплекты, уҡытыусылар Р. Я. Туғыҙбаев, Н. Ш. Бикбирҙина етәкселегендә студенттар Р. Ғ. Ғәләүетдинова, Д. И. Хәмитов, З. Р. Әхмәҙиева, Л. Ш. Бикҡоловаларҙың теккән кейемдәре, ағастан семәрләп яһалған һауыт-һабалары, байтаҡ студенттарҙың фәнни хеҙмәттәре Рәсәйҙә, Башҡортостанда һәм төбәк-ара уҙғарылған конкурстарҙа призлы урындар, дипломдар яуланы.

Күреүегеҙсә, тормош талап иткәнсә, үҙ профессияһына ышаныслы хеҙмәт итә алырҙай булдыҡлы белгестәр әҙерләнә был факультетта. Ысынлап та, был донъяла ниндәй ҙә булһа уңышҡа өлгәшеү өсөн белемгә, уңғанлыҡҡа, ныҡышмалылыҡҡа эйә булыу зарур. Технология һәм кәсепселектең төп үҙәге – эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа өлкәһе ни икәнен төшөнөп һәм шуға инанып уҡыу йортон тамамлаған студенттар араһында Ләйсән Ниғмәтуллина, Александр Башкуров, Ринат Фәйзуллин, Раян Атанбаев һ.б., заман талап иткәнсә, үҙҙәренең көндәлек хеҙмәтен, эшен ойоштороп таныттылар үҙҙәрен. Шулай уҡ юғары мәҙәниәткә эйә булған, фән өлкәһендә тырышып эшләгән, прогрессив ҡарашлы йәш ғалимдарҙы ла үҫтерҙе технология факультеты. Мәҫәлән, фән кандидаттары И. С. Хәмитов, Р. Р. Тураев, М. М. Куваева, Г. Р. Туйсина, Ю. М. Мәхмүтов һ. б. милләтебеҙҙең йөҙөн, киләсәген билдәләүсе интеллигенция сафын тулыландырып, остаздары менән берлектә белем бирәләр. Шөкөр, Сибай институты йылдан-йыл нығына, камиллаша. Белгестәр әҙерләү буйынса ла, ғалимдарҙы үҫтереү буйынса ла Рәсәйҙең, хатта сит илдәрҙең юғары уҡыу йорттарынан һис ҡалышмай. Әлеге мәлдә уҡыу йортоноң 7 факультетында биш меңдән ашыу студент белем ала. Уларҙы 185-ләп уҡытыусы уҡыта. Шуларҙың 10-ы – фән докторы, 107-һе – фән кандидаты. Егерме йыл эсендә 11 мең белгес әҙерләп сығарғандар улар. Белгестәр әҙерләүҙәге һөҙөмтәне һан түгел, сифат билдәләй, ти техник фәндәр кандидаты, иҡтисад фәндәре докторы, уҡыу йорто директоры З. Ғ. Йәрмөхәмәтов.

Еп, энә, төрлө материалдар менән эш итеүҙән алып, төрлө маркалағы автотранспорт серҙәрен белгән юғары квалификациялы белгестәр әҙерләнә. Уның фәнни ҡеүәте лә, материаль-техник базаһы ла йылдан-йыл нығына, үҫә, даны ла тарала бара. Ҡыҫҡаһы, һөйләнгән һүҙҙән эшләнгән эштең айырмаһы юҡ. Студенттарға бөгөн тыуҙырылған шарттар, һис шикһеҙ, иртәгәгә хеҙмәт итәсәк.

**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## АТАМАЛАРҒА ТАРИХ ҺЫЙЫНҒАН

Мейәс ҡала тимер юл станцияһындағы буфет кәштәләрендә шешәләргә ҡойолған ниндәй генә һыуҙар теҙелешеп ултырмай! Һыуһын ҡандырам тиһәң, ал йә әсеһен, йә сөсөһөн: Кавказ яғынан килгәндәре – «Архыз», «Ессентуки»; Ҡурған өлкәһенән – «Шадринская», Мейәстең үҙендә тултырылғаны – «Ильменит», Янғантауҙан алдырылғаны – «Ҡорғаҙаҡ», Нөйәзепетровск яҡтарынан килгән «Куказар» исемлеһе лә бар. Исемдәре үк ер-һыу атамалары, топонимия йүнәлешендәге һуҡмаҡҡа ылыҡтырырға ғына тора. Кавказ яғыныҡыларға ҡағылмай ғына, Уралыбыҙҙағы атамаларға туҡталайыҡ. Мәҫәлән, Ҡорғаҙаҡ, топонимия белгестәре фекеренсә, рч., лев. пр. Юрюзани в Салават. р-не. Источник, обладающий лечебными свойствами, используется в санатории «Янгантау». От ҡоро – «сухая», пересыхающая», древнебашк. «ғаҙаҡ – «речка», – тип аңлата «Словари топонимов Баш. АССР», 93-сө бит (Өфө, «Китап» нәшриәте, 1980 й.).

Н. И. Шувалов иһә былай яҙа: «Кургазак» – лог с источником и пещерой, Саткинский р-н. (**Ҡара**: От Парижа до Берлина по карте Челябинск. обл. Силәбе ҡалаһы. ЮУКИ. 1989 й., 77-се бит.)

Ҡуҡазар – Ҡариҙел (Уфа) йылғаһының уң ҡушылдығы – Нөйәҙепетровск һыуһаҡлағысына ҡоя. Ҡушылдыҡтары – Оло Ҡуҡазар, Кесе Ҡуҡазар, Икенсе Ҡуҡазар, Арҡыры Ҡуҡазар йылғалары Өфәле тау һыртының көньяҡ моронондағы армыттарҙан килеп берләшә лә Ҡуҡазарҙы мул һыулы йылғаға әйләндерә. Ҡуҡазар исеме урындағы башҡорттар (өпәләйҙәр) телендәге «ҡыу», «ҡаҙыр» һүҙҙәрен бергә ялғап әйтеүҙән барлыҡҡа килгәндер. Сөнки йылғалар тауҙар битләүҙәрендәге бейек ағастар сафҡа баҫҡандай теҙелеп, асыҡ яландар яғалап аға. Э. М. Мурзиев «Словарь народных географических терминов» тигән китабының 240-сы битендә былай ти: «...На Байкале (у бурят) «кадыры» – небольшие травянистые участки среди скал...». Өфәле тау битләүҙәрендәге ваҡ-ваҡ яландар ҙа үлән һәм таштарҙан мәхрүм түгел. «Ҡыҙыр» атамаһы киң таралған һәм һәр ерҙә үҙенсәлекле яңғырай. Мурзиев күрһәтә: Кюдри – сухое безводное место, степь, поле (Азербайджан. 321-се бит); Кузре – болото, заросшее озеро (Литва, Латвия. 308-се бит); Кодру – лес, моховым покровом, хорошо увлаженным (Молдавия. 281-се бит), «Башҡорт теле һөйләштәре һүҙлеге»ндә: ҡыҙырым (ҡыҙыл) и. рәт – ряд. Бер ҡыҙырым өй (Өфө, Китап. 2002 й., 208-се бит), Башҡорт теле һүҙлеге: ҡыҙырым, ниҙендер эргәһенән һуҙылған буй (тау ҡыҙырымы, урман ҡыҙырымы. (Мәскәү, Русский язык. 1993 й., 718-се бит.)

Күреүебеҙсә, «кыҙыр» «казар» булып киткән. Ә күрше Свердловск өлкәһендә ул кедрға әйләнә: Кедровск. пос., адм. подч. г. Березовскому; Кедрово. адм. подч. г. Кушва; Кедрово. Шалинский р-н; Кедровый кордон, Висимский заповедник; Болото Кедровое, Кедровое, пос., адм. подч. г. Верхняя Пышма и т. д. География

фәндәре кандидаты Н. П. Архипова ошо турала бына нимәләр яҙа: «В лесах нашей области доля кедра составляет всего 5,4 %. Несколько севернее озера Тавакуй проходит южная граница его сплошного распространения. Отдельные кедры можно встретить и южнее. Но общее число их невелико…» (**Ҡара**: Окрестности Свердловска. Свердл. СрУКИ. 1981 й., 45-се бит.) Ҡайҙа «ҡыҙыр», ҡайҙа «кедр» икәнде өлкә атласында шәйләп була: ҡыҙырҙарҙа йәшел урмандар юҡ, ҡағыҙ аҡ килеш ҡалдырылған.

«Ильменит» һыуына исем Илмәнгә бәйләп бирелгән. Илмән атамаһының сығышы күптәрҙе уйға һала. Мәҫәлән, Е. М. Поспеловса: «Название Ильменские горы образовано из башкирского Иментау, где имен – «безопасный», тау – «гора», и предстваляет собой русское переосмысление непонятного названия с приспособлением его к известному в говорах термину Ильмень – «озеро». Но существует также мнение, что горы получили название по Ильменскому озеру, находящемуся к югу от них…

Ильмень, озеро в Новгородской области. Название в всех русских источниках летописного и много типа вплоть до XVI в неизменно приводится в форме Ильмерь, отражающий его фин. происхождение: ilm – «воздух, погода» и ерь соответствует jarv jari – «озеро». Название в целом понимается как «озеро, делающее погоду, «что вполне реально для этого открытого и бурного озера и подтверждается религиозными представлениями древних финнов (Илм – дух погоды). С середины XVI в. получает распространение русск. форма Ильмень…» (**Ҡара**: Е. М. Поспелов. Школьный топонимический словарь. Мәскәү. Просвещение. 1988 й., 76-сы бит.)

Н. И. Шувалов былай яҙа: «Ильменский, хр., Ильменское, оз., тер. гор. Миасса. Петр Симон Паллас в описании Южного Урала упоминает об этом озере и хребте: «…а от башкирцев собственно Именкуль называемое, по ту сторону сего озера возвышается Имен-тау» здесь тау – «гора», куль – «озеро», имен – «безопасный», «безвредный», т. е. Иментау – «безопасные горы». Но скорее всего, это название родоименной группы, обитавшей в этих местах, тотемам которой был дуб – по-башкирски – «имен». (**Ҡара**: Н. И. Шувалов. От Парижа до Берлина по карте Челябинской области. Силәбе, ЮУКИ. 1989 й., 50-се бит.)

А. К. Матвеевты ла уҡып сыҡһаҡ, зыян итмәҫ: «… атама нигеҙендә – күл исеме, ләкин уның юлы бигүк бормалы. Совет лингвисы И. Г. Добродомов уйлағанса, грек һүҙе лимэн – «гавань» (ҡултыҡ) урыҫ теленә үтеп ингән (Лимень, лиман, Ильмень формаларында булыу менән яңы мәғәнәләр ҙә алған: «залив», «озеро» – «күл», «ҡултыҡ», «разлив реки» – «келәгә», «старица – «урай»)». Шул уҡ ваҡытта был һүҙҙәрҙең икенсе бер грек һүҙе лимнә – «ҡултыҡ», «күл», «батҡыл ер» йоғонтоһонда барлыҡҡа килеүе лә ихтимал. Һәм, ниһайәт, грек атамаһы урыҫ теленә төрки тел аша (ҡыпсаҡтар – лимән, төрөксә – лиман) килеп ингән. Был хаҡта, И. Г. Добродомов уйынса, төрки топонимдар – Ҡырым татарҙарында Ильменбурун (Ҡырымдағы Алушта янындағы морон) һәм Көньяҡ Уралдағы Илмәнтау әйтеп тора…» (**Ҡара**: А. К. Матвеев. Вершины каменного пояса. Силәбе. ЮУКИ, 1990 й., 214-се бит.)

«Советская тюркология» журналында Эстонияның Тарту университеты профессоры Э. К. Эрнитеның «К происхождению тюркского числительного один» исемле мәҡәләһе менән таныштым. Автор фекеренсә, боронғо төрки теленең ҡәрҙәше булған эвенк, яланчжур телдәрендә «бер» мәғәнәһендә – умун, монгол телендә эмун – «алдағы» (беренсе) һүҙҙәре булыуы мәғлүм булды. (**Ҡара**: «Советская тюркология», № 2, 1987 й., 77 – 79-сы биттәр.) Алтайҙан Урал

тауҙарының көнсығыш сигенәсә һуҙылған Һары Арҡа буйлап килеүсе ырыуҙар башлап күргән тауҙы Имәнтау – «беренсе тау» тип атағандыр, ә күл үҙ исемен тауҙан алған, тигән уйҙа ҡалдым.

Сауҙа кәштәләрендә күренмәһә лә, һаулыҡ өсөн сихәтле, Уралдағы христиандар «изге һыу» тип йөрөткән йылға ла бар. Ул – Усолка, Башҡортостандың Ғафури районынан ағып, Ағиҙелгә уң яҡлап ҡушыла. 1752 йылда йылға башында Богоявленск ауылына нигеҙ һалына. Ауыл исеменең үҙ тарихы бар. Йылға башынан алыҫ булмаған Табын станицаһы казактары йылға ярындағы бер ҡыуышта изге Мария улы Иисусты күкрәгенә ҡыҫҡан килеш һынландырылған икона таба. Ул X һәм XII быуаттар араһында ижад ителгән. Әле лә һәр йәй Пасха байрамынан һуң туғыҙынсы йомала икона табылған ҡыуышлыҡ алдына – «грот»ҡа меңәрләп табынырға киләләр. «Табынская божья матерь» байрамын үткәрәләр, «грот» ауыҙындағы таш ҡая киртләстәренә меңәрләгән утлы май шәмдәре урынлаштыралар. Әүәл йылғаның исеме Көгүш (Ҡыу ғыуыш), аҙаҡтан Тоҙйылға булған. Богояволенск ауылы урыҫ сәнәғәтселәре Мясников менән Твердышев баҡыр заводы ҡорҙорған дәүерҙә нигеҙләнә. Баҡыр иретеү төшөмлө булмағас, быяла яһауға тотоналар. Заводҡа Пашков хужа булып ала. Көгүш (Усолка) йылғаһында сауҙагәрҙәр Осокиндар һәм Утятников тоҙ ҡайнатыу эшен яйға һала. Богоявленск хәҙер Красноусольск тип атала. 1944 йылда Усолка һыуы буйында курорт асыла.

Һыҙгә һүҙ эйәреүе һәр кемгә мәғлүм. Бер ыңғайҙан бер нисә исемгә туҡталып үтәйек: мәҫәлән, Боғорослан – Һамар йылғаһының ҡушылдығы – Оло Кенәлегә ҡоя. Башҡортса «бағы арыҫлан» – сущий лев тигәндән хасил булғандыр, тигән уй тыуа. Сергей Аксаков балалыҡ йылдарына бағышлаған китабында йылға холҡон бик асыҡ тасуирлаған. Кенәле атамаһына килгәндә, «кенә» урыҫ телендә «костер», үлән; мал яратып ашай торған ҡыяҡлы үлән. (**Ҡара**: Травянистые растения СССР. Изд-во «Мысль». Мәскәү. 1971 й., I том, 245-се бит.)

Сыростан, йылға, Этлән йылғаһының һул ҡушылдығы, Мейәс йылғаһы бассейнында. Башҡортса атамаһы – Һарыстан (Һарыҫлан), «арыҫлан» – лев. «Беҙҙә арыҫландар юҡ, башҡорттар уны ҡайҙан белгән?» тигән һорау тыуыуы ихтимал. Уға яуап әҙер: «...О наличии в фауне России львов сообщает Оруджбек-Баят, объехавший в 1599 – 1603 г. г. всю Европу. Так вот он сообщает (в конце XVII в.): холмы по обеим берегам Волги очень высокие, и в них много поселений. Мы видели на этих холмах бесчисленных медведей, львов и тигров, а также многочисленных куниц. Изображенеие львов на воле имеются и на древнерусских миниатюрах». (**Ҡара**: Алексей Бычков. Киевская Русь. Мәскәү. Астрель-олимп. 2009 й., 366-сы бит.)

Үҙебеҙгә мәғлүм: арыҫлан һөйәктәрен археологтар кешеләр борон йәшәгән төйәктәрҙә таба һәм мәмерйәләрҙең стеналарында арыҫлан һүрәттәре осрата. Ваҡытлы матбуғатта (исеме иҫтә ҡалмаған) Өҫкәнде йылғаһы бар, имеш, тип уҡығайным. Автор, ул атама Оҫҡондо һүҙенең урындағы халыҡ телендә әйтелешенән алынған, тип аңлата. Оҫҡон – «дикий чеснок», «айыу йыуаһы», «черемша» Учалы яҡтарында халыҡ телендә оҡсон (оҡһон) тип тә әйтелә. Ҡурған өлкәһенең Щадринск районындағы Уксянское ауылы быны дәлилләй. Ул атаманы Башҡортостан картаһында ла табып була. Мәҫәлән: Өҫкәнеш (Усть-каныш). рч., пр. Нугуша в Мелеуз. р-на. Русский вариант «суханыш». Возможно от Оскон – «дикий чеснок с реликт. афф. – ош. ср. Осконош – рч, пр. Крепостного Зилаира в Зил. р-не. (**Ҡара**: Словарь топонимов Баш. АССР. Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө, 1980 й., 118-се бит.)

Миңһылыу Усманованың «Имя отчей земли» китабында ла ул исем бар: Оҫҡонно (Ускунну) – р. пр. Иняка в Кугарчинском р-не РБ. (Өфө, «Китап», 1994 й., 200-се бит). Ошонда уҡ: Оһҡонош йылғаһы – р. в Кувандык. р-не Оренб. области. Ускун – р. лев. пр. Ика. Был һүҙгә йәбешеп ятыуыма Е. М. Поспеловтың «Школьный топонимический словарь» китабындағы юлдар сәбәпсе булды: «Скандинавские горы на севере Европы, главным образом в Швеции и Норвегии. Если три крупнейших полуострова Южной Европы – Балканский, Апеннинский и Пиренейский – получили названия его горам – Балканам, Апеннинам и Пиренеям соответственно, то на Севере Европы Скандинавские горы сами получили название по полуострову. Название Скандинавия в форме Scatinavia впервые упоминается в трудах др. рим. авторов I в н. э. Как название острова, за каждый, по-видимому, принимался совр. Ютландский п–ов. Конечный элемент названия – avia переводится с готского как «остров», но происхождение и значение названия в целом остается неизвестным. (**Ҡара**: Е. М. Поспелов. Шк. топон. словарь. Мәскәү, «Просвещение». 1988 й., 174-175-се биттәр.)

Скандинавияның Скатинавия тип яҙылыуы – сит ерҙең үҙенә ят атамаһын сит телдә боҙолоуға дусар ителгәнлек нәтижәһе, тип уйлайым. Силәбе өлкәһендә Скуба атамаһы бар. Ул «Һаҫыҡ уба» (вонющий холм) һүҙҙәренән яһалған, тигән фекер ҙа бар. Уба – боронғо ҡурған-ҡәберлек, ниндәйҙер һуғыш-ҡырылыштан ҡалып, уның исеме менән Сынташты (Һынташты) бассейнындағы Береуат йылғаһының һул ҡушылдығы булған бер бәләкәй йылға атала. (**Ҡара**: Шувалов. От Парижа... 113-сө бит.)

Өҫтәнде атамаһы Көньяҡ Уралдан Төньяҡ Европаға килгәндер, тип уйлайым. Христиан динен ҡабул иткәнгә тиклем Төньяҡ Европа халҡының Аллаһы ла көнсығыштан килгән исем менән Аҙна (Одина – пятница) тип аталған бит. Хәтеремдә мәшһүр сәйәхәтсе эҙәрмән Тур Хейердалдың ҡатыны һәм ҡыҙы менән, ата-бабам эҙенән юл алғанмын тип, Әзербайжандың баш ҡалаһы Баҡыла йөрөүен гәзит-журналдар ҙа яҙғайны, хатта телевизор экранында ла күренде шикелле. Ә БМО-ның генераль секретары Гуннар Яриц көнсығыш топонимияһы менән ярайһы ғына ҡыҙыҡһынған белгес, полиглот булып танылған. Швед зыялыһы Свен Гедин оҙаҡ йылдар (1929 – 1935) Үҙәк Азияла экспедицияла йөрөй һәм, йыйған материалдарына таянып, «Үҙәк Азия атласы»н төҙөй. Гуннар Яриц 1967 йылда ошо атласҡа ҡушып 6500 атаманы аңлатҡан һүҙлек баҫтыра. (**Ҡара**: Ономастика востока. Мәскәү, «Наука» нәшриәте. 1980 й., 194-195-се биттәр.) Улар Сканди атамаһының эҙенә төшөү теләге менән янманымы икән?

Европа көньяғындағы бер атама ла күңелде өйкәп тора. Ул да булһа – Венеция. «Венеция, город в Италии. Возник в IX в. на территории заселенной народом Венеты». (**Ҡара**: Е. М. Поспелов. Шк. топон. словарь. Мәскәү. Просвещение. 1988 й., 44-се бит.)

Яҙыусыбыҙ Йыһат Солтанов винет (винед)тарҙы апандылар тип атай, һәм улар ҡасандыр Уралда йәшәп киткән, тип яҙа. Ихтимал, һундар, мадъярҙар менән көнбайышҡа күсенеүселәр араһында ул ҡәүемдәрҙең дә булыуы бар. Дүртөйлө районындағы Венеция ауылының икенсе атамаһы «Алпан дачаһы» бит, «алпан» – үҙгәрештәр кисергән «атанды» түгелме икән? Ғәжәпкә ҡалдырғаны шул: нисек Уралтау биттәрендә, Себер тайгаһында үҫкән ҡарағастар Ядран диңгеҙе яры буйындағы лағуна (бәләкәй ҡултыҡ) төбөнә сыбайҙар булып барып баҫты икән?

Урамдарҙа, юл буйҙарында «Жигулевское» һыраһын күккә күтәреп маҡтап,

тәҡдим итәләр. Таныш исем, Һамар юлығындағы (Самарская лукала) тауҙар ошолай атала. Иң бейек түбәһе диңгеҙ кимәленән 381 метрға ҡалҡынған.

«Жигули (реже – Жегули) – народно-разговорный вариант названия Жигулевские горы. Ж. находятся на правом нагорном берегу Волги, в северной части Самарской Луки, представляющей собой большую (свыше 200 км) излучину Волги между Усольскими и Сокскими горами. Раньше были известны как Яблонные горы. По свидетельству русского путешественника и натуралиста И. И. Лепехина («Дневные записи путешествия...» 1777 – 1805 г.г.), руководившего в конце 60-х г.г. XVIII в. экспедицией Академии Наук в Поволжье, такое наименование они получили оттого, что на них «довольно растет диких яблоней». (**Ҡара**: Е. С. Отин, Русская ономастика России. Мәскәү, Школа-пресс. 1994 й. 74 – 76-сы биттәр.)

Э. М. Мурзаев «Избранная тюркская географическая лексика» исемле мәҡәләһендә, «буераки» һүҙенә туҡталып, һүҙҙең «крутой глубокий овраг», «овраг с неровными бугристыми склонами», «впадины на крутом берегу реки», «местность изрезанная оврагами» һ.б. мәғәнәләргә эйә булыуын күрһәтә һәм өҫтәп ҡуя: «В Жигулях буерак меридиональные короткие трещины, разбившие горы и представляющие живописные узкие и глубокие ущелья». (**Ҡара**: Ономастика востока. Мәскәү, «Наука» нәшриәте, 1980 й., 75-76-сы биттәр.) Минеңсә, «Жигули» атамаһында уның «йек» (татарса – «жик») өлөшө мөһим роль уйнай. Башҡорт теле һөйләштәре һүҙлегендә «йек» (Дим буйы һөйләше – ике тау араһы (коридор, проход между гор. 116-сы бит), ә «Башҡорт теле һүҙлеге»ндә «ек – ер ярығы», «тар ғына ике тау араһы», «тар үҙәк һәм ерҙең ярылған урыны, «ерҙең ярығы». Өҫтәп яҙам: ҡаҙаҡ телендә «бураҙна».

Мурзаев һүрәтләмәһен күҙ уңында тотоп әйтһәк, тауҙарҙың исеме ҡасандыр төрки телдә «жиге илле (50) таулар» (ярыҡтары күп) теҙмәһенән яралманымы икән? Ек атамаһына тарығас, тағы бер тау исеменә иғтибар итәйек. Ул Егәлгә (Зигальга – г. в. Белор. р-не, рп Инзер. Другое название Зәңгәргә (ср. Иран., «Большая скала»). (**Ҡара**: Словарь топонимов Баш. АССР. Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө, 1980 й., 52-се бит.) «Зигальга – одна из самых высоких и красивых хребтов Южного Урала, находящийся на левобережье Юрюзани, между хребтами Нургуш и Нары. Длина – более 40 км.

Зигальга была хорошо известна уже русским исследователями XVIII в., которые засвидетельствовали это название в формах Джигалга (В. Н. Татищев), Джигаля или Джигала (П. И. Рычков), Егалга, Джигалга, Джигальга (П. С. Паллас) Джигальга (И. И. Лепехин), при этом Татищев и Рычков подчеркивали, что на Зигальге (как и на Ямантау) всегда лежит снег, а Паллас указывал, что на ней (опять-таки как на Ямантау) живут олени...

На хребте много островершинных гор и скал. Наиболее значительные вершины: в северной части хребты – Поперечная – 1389 м., в центральной – Мерзлый Утес или Мерзлая – 1237 м., в Южной – гора Большой Шолом – 1425 м. Юго восточные отроги Зигальги имеют яркие метафорические названия – Большой Пасынок и Малый Пасынок.

Большой Шолом... третья по высоте (после Яман Тау и Иремеля) гора Южного Урала...» (**Ҡара**: А. К. Матвеев. Вершины каменного пояса. Силәбе, ЮУКИ. 1990 й., 224 – 226-сы биттәр.)

Ҡайҙалыр Паллас яҙған исемдәр теҙмәһенең, хата булмаһа, Джигалта менән тамамланғанын күргәйнем. Ҡулыма атлас килеп эләккәндә, Егәлгеләге тауҙар

араһындағы ектәрҙе һанарға булып киттем. Алты ек һананым һәм «Тау һырты әүәл замандарҙа ата-бабаларыбыҙ күҙе алдында «Еге алты тау» булманымы?» тигән һорау тыуҙы.

«...Приводя другое название этого хребта – Зәнгәрге сравнивают его с иранским зангар – «большая скала», хотя и в башкирском языке есть слово зәнгәр со значением «голубой», «синий» (Матвеев. 225-се бит).

Ә бит башҡорт телендә Сингәр тау – ҡырласлы тау төшөнсәһе борондан уҡ булған бит. (**Ҡара**: Башҡорт теле һүҙлеге. Мәскәү, Русский язык. 1993 й., 201-се бит.)

Большой Шолом атамаһын, боронғо урыҫ телендәге Шелом – «шлем»ға таянып, «холм», «бугор» тип аңлаталар. Беҙ бәләкәй саҡтарҙа тәмәкесе ағай-бабайҙар бер-береһенә: «Шоломың бармы?» – тип өндәшә торғайны, йәнәһе, тәмәкең юҡмы? Шолом Көньяҡ Уралдағы тауҙарҙың өсөнсөһө булғас, Ямантау менән Ирәмәлдән ҡалышмай, тәмәке төтөнө борхолдатҡандай итеп, башына болоттан сәллә (салма) урайҙыр әле лә. «Иркускан, г., Саткинский р-н. В записях П. С. Палласа – Джиркускан. Образовано словами ер – башк., жир – татар – «земля», «местность» и кускан – «лавина, т.е. Иркускан – «место, гора с лавинами». (**Ҡара**: Н. И. Шувалов, От Парижа до Берлина по карте Челяб. обл. Силәбе, ЮУКИ. 1989 й., 51-се бит.)

Иркускан – одна из Бакальских гор. Находится к ю-в от города Бакал между горой Буландиха и с-в концом хребта Сука. А. Г. Бессонов, а затем и М. И. Альбрут переводят, земля изрыгнула, в башкирском языке есть еще сочетание «ир коскан – мужик наблевал», казалось бы, вполне возможны оба толкования. Но Паллас записал это название в формах Джиркускан, Джиркюскан, что позволяет видеть в первой части оронима башкирское – ер, татарское – жир – «земля», а причастную форму связывать не с башкирским глаголом косоу – «блевать», «изрыгать», а күсеү – «переселяться», перейти, перебраться» и т. п. И действительно в башкирской топонимике находим название Ергускән (из – ер күскән), которое приводит В. Ш. Псянчин с переводом «земля переходила». С учетом всего сказанного Иркускан надо востанавливать в виде Иркускән и переводить «земля переселилась», «земля перешла», «очевидно в смысле «земля сдвинулась» (обвалилась). Такой перевод убедительно подверждается существованием в башкирском языке слово күскен – «лавина». (Ҡара: А. К. Матвеев. Вершины. 209-сы бит.)

Иркускан тауын Баҡал тауҙарының береһе тип белдек, хәҙер Баҡал тураһында уҡып ҡарайыҡ. Н. И. Шувалов былай тип яҙа: «Бакал. г., северная вершина хр. Шуйда; гор. р-н. подч., Саткинский р-н, две ррч., Бол. И Мал., л. пр. Мал. Сатки. бас. ая... Предполагают существование топонима Бакал с глубокой древности. Паллас в своем описании Южного Урала называет высоту Бакал аркассе и отмечает при этом башкирское происхождение слова аркассе – «гряда гор», «хребет». По-видимому, этим понятием обозначалась вся система хр. Шуйды с Иркусканом и Буландихой. Краевед Н. М. Мильхеев предполагает, что в слове Бакал скрывается древнетюркский географический термин со значением «высокий». Название горы было перенесено к речкам и населенному пункту». (**Ҡара**: Шувалов. От Парижа... 26-сы бит.)

Мурзаев һүҙлегендә атаманың «бак» өлөшөн «баш»ҡа тиңләй һәм «вершина», «верх», «исток», начало мәғәнәләрендә Дағстандағы лак телендә лә осрауын билдәләй. Баҡы (Баку) ҡалаһы исеменең килеп сығышын ошо уҡ һүҙҙән «холм»,

«пригорок», «горка» мәғәнәләрендә булыу мөмкинлеген күрһәтә: баш-башка – мак-макушка – маковка) Машат (кирг.) «источник», «ключ».

«Шуйда, хребет широтного направления, относящийся к группе Бакальских гор и находящийся к ю-з от Бакала (между Бакалом и городом Юрюзань). И. И. Лепехин в XVIII в. засвидетельствовал форму Шийда... Название предположительно можно связать с башкирским Шыйда – «жердь». (**Ҡара**: А. К. Матвеев. Вершины... 209-сы бит.)

Минеңсә, тауҙың исеме Шуйҙы – «еҫле» (Башҡорт теле һүҙлеге. Мәскәү, Русский язык. 1993 й., 668-се бит.)

Еҫле, Ере ҡоҫҡан исемдәренең айышына төшөнөү өсөн тауҙарҙың тәбиғи асылына туҡталыу кәрәктер: «Бакальское месторождение было открыто в 1817 году. До глубины 100 м руды представляют бурые железняки с содержанием железа в среднем 48 %, глубже залегают стдериты с содержанием до 32 % железа». (**Ҡара**: Ф. Я. Кирин. География Челяб.обл. Силәбе, ЮУКИ. 1962 й., 15-се бит.)

...Первооткрывателями Бакальского железорудного месторождения являются Твердышев и Мясников. На Бакале разрабатываются богатейшие залежи высококачественных руд, являющиеся самыми чистыми и не содержащими примесей серы и фосфора. Бакальскую руду потребляют домны Челябинского, Ашинского, Саткинского, Чусовского и др. металлургические предприятия Урала. (**Ҡара**: А. Д. Сысоев. Очерки физической географии Челябинской области. Силәбе, ЮУКИ. 1959 й., 30-сы бит.)

Тау һәм йылға исемдәренең «баҡа» һүҙенән сығыуы ла ихтимал: Баҡал – Баҡалы. Баҡа – 1) ҡайын бәшмәге – чага, 2) ҡыу бәшмәк – труповик.

Йылғаларҙың баҡалы – тәлмәрйенле булыуы ла ғәжәпләнерлек түгел.

«Буландиха, г. Саткинский р-н. Буланка р. п. пр. Юрюзани; от башкирского слова болан – «олень», «лось». Названия связаны с местами обитания в прошлом этих животных. (**Ҡара**: Шувалов. От Парижа... 34-се бит). Макарушкина – одна из Бакальских гор в Межуречье притоков Малой Сатки – рек Большой Бакал и Малый Бакал. Примыкает с с-в и городу Бакал. На новых картах хребет Макарушкин. В источниках XX в часто именуется горой Бакальской. Очевидно именно эту гору Паллас и называет Бакаларкассе. Макарушка – уменьшительно-ласкательная форма от русских имен Макар и Макарий. (**Ҡара**: А. К. Матвеев. Вершины. 208-се бит.)

Тау исеме Макарушка – ғәрәп теленән башҡорт телендә урын алған мәкер (мәхһүр) һүҙен урыҫ теленә яраҡлаштырып үҙгәртеү касафатынан барлыҡҡа килмәне микән? Был тау арҡаһының төньяҡ-көнбайыш битләүе һөҙәк, ә көньяҡ-көнсығышы иһә бик текә ярҙы хәтерләтә. Тауҙы артылыу үтә лә хәтәр, уны урап үтеү хәйерле.

Ер күсеүгә килгәндә, ерҙең башҡорттарҙан Твердышев менән Мясниковтарға күсеү осрағы мәңгеләштерелмәгән, ә тау битләүендәге тупраҡ (ер) мәғдәне – тимерҙең туты тәьҫирендә төҫө үҙгәреүе – ҡоҫоуы халыҡ иғтибарынан ситтә ҡалмаған, «Ере ҡоҫҡан» тип аталған. Тауҙарҙағы химик реакция меңәр йылдар буйына барған һәм әле лә дауам итә. Тау һыртының еҫле – Шуйҙы булыуы ла ошонан килә.

**Булат ИҘРИСОВ.**
**Силәбе ҡалаһы.**

* * *

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 105 йыл тулыу айҡанлы Күгәрсен районы мәктәптәрендә, ауыл мәҙәниәт йорттарында әҙибәнең тормошона һәм ижадына арналған байтаҡ саралар үтте. Улар барыһы ла күренекле ҡәләм оҫтаһының исемен мәңгеләштереү, халыҡ, бигерәк тә йәш быуын, күңелендә һаҡлау, әҫәрҙәрен өйрәнеү маҡсатында эшләнде. 1999 йылда Күгәрсен районы хакимиәте һәм Башҡортостан Яҙыусылар берлеге тарафынан булдырылған Зәйнәб Биишева исемендәге әҙәби премияны тапшырыу ошо сараларҙың йомғағы булды.

Район мәҙәниәт һарайында тантаналы шарттарҙа үткән был сарала район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин һәр лауреатты ихлас ҡотлап, уларға диплом, лауреат знагы һәм аҡсалата премия тапшырҙы. Быйыл был бүләккә дүрт кеше: билдәле тележурналист Луиза Фархшатова («Зәйнәб» фильмы һәм яҙыусының иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса 1995 – 2003 йылдарҙағы тапшырыуҙар шәлкеме өсөн), әҙибәнең улы Юлай Әминев («Яҡтыға» роман-трилогияһын рус теленә тәржемә иткәне өсөн. Үлгәндән һуң), популяр йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәзим Ильясов, публицист Рәшит Иҙрисов («Йөрәк хәтере» китабы өсөн) лайыҡ булды. Лауреаттарҙы шулай уҡ Өфөнән килгән ҡунаҡтар – Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Риф Тойғонов, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, «Аҡ тирмә» вәкиле Ләлә Биишева ҡотланы.

Тантана район талантларының, уҡыусы балаларҙың концерт номерҙары, әҙибәнең әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған инценировкалар, ҡотлауҙар менән аралашып барҙы, халыҡ яҙыусыһының таҫмаға яҙып алынған сығышы тыңланды. Фойела әҙибәнең китаптары, фотолары һәм әҫәрҙәре буйынса балаларҙың рәсемдәре, боронғо көнкүреш предметтарынан бай йөкмәткеле күргәҙмә ойошторолғайны.

* * *

Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең тыуыуына 95 йыл тулыу айҡанлы Дүртөйлө ҡалаһында һәм районында иҫтәлекле саралар булып үтте. Тәүҙә Өфөнән барған делегация һәм төбәктең йәмәғәтселек вәкилдәре халыҡ шағирының Дүртөйлө ҡалаһындағы һәйкәленә сәскәләр һалды, артабан улар мәшһүр әҙип исемен йөрөткән башҡорт гимназияһы коллективы менән осрашты.

Миңеште ауылы эргәһендәге шағир зыяратында митинг уҙғарылғандан һуң, уның Йорт-музейында волейбол ярыштарында еңеүсе командаларға һәм шиғриәт буйынса көс һынашҡан авторҙарға иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды. Кисен иһә ауыл клубында шағирҙар: Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғонов, халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар, һүҙ оҫталары Риф Мифтахов, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Фәниә Ғәбиҙуллина, Татарстан ҡунағы Роберт Миңнуллин һ. б. сығыш яһаны.

***

Танылған яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Мөслим Әбсәләмовтың тыуыуына 80 йыл тулыу айҡанлы Йылайырҙа хәтер һәм ҡәҙер кисәһе үтте. Әҙәби-мәҙәни осрашыу Юлдыбай мәктәбендә башланды. Мәктәптә иҫтәлекле таҡтаташ асылды. Сара артабан мәҙәниәт йортонда дауам итте. Мәрхүм әҙиптең әҫәрҙәре буйынса ауылдың халыҡ театры тамаша күрһәтте.

Кисәлә Өфөнән килгән әҙиптәр – Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай, шағирә Гөлфиә Юнысова ҡатнашты һәм йылы хәтирәләре менән уртаҡлашты.

***

Өфө автотранспорт колледжы Башҡортостанда ғына түгел, хатта бөтә Рәсәйҙә абруйлы уҡыу йорттары иҫәбендә. Бында, үҙ һөнәренең оҫталарын уҡытып сығарыу менән бергә, уларҙың күңел байлығын үҫтереү өсөн эҙмә-эҙлекле саралар күрелә. Шиғыр байрамын асҡанда колледж директоры Олег Кобелев ҡыҙыҡлы миҫал килтерҙе:

– Беҙ алыҫ райондарға йөрөп тә уҡырға кеше йыябыҙ. Әйтәйек, Баймаҡ районына барғанда, кем ҡурайҙа уйнай белә, беренсе сиратта шул уҡыусыны алабыҙ, тип иғлан иттем. 40 егет ҡурайҙа уйнап күрһәтте, шуларҙың бөтәһен дә тиерлек студент иттек.

Шығырым тулы ҙур залда студенттарҙы һәм уҡытыусыларҙы Яҙыусылар союзы берлеге рәйесе Риф Тойғонов ҡотлап, берлектең бөгөнгө эшмәкәрлеге хаҡында һөйләне.

Шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Ирек Кинйәбулатов, Әнисә Таһирова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Алла Докучаева, Фәниә Ғәбиҙуллина, Тамара Искәндәриә, Радик Хәкимйән, Рәшиҙә Бик, Кристина Андрианова шиғырҙар уҡыны. Әҙиптәрҙең сығыштары студенттарҙың күңелле концерт номерҙары менән аралашып барҙы.

* * *

«Мостай Кәрим» энциклопедияһы нәшер ителәсәк. Был уникаль китапты «Башҡорт энциклопедияһы» ғилми нәшриәтенең мәҙәниәт бүлеге хеҙмәткәрҙәре әҙерләй. Унда шағирҙың биографияһын, ижадын сағылдырған бер мең ярым тирәһе мәҡәлә, фотоһүрәттәр һәм башҡа материалдар урынлаштырыласаҡ.

Энциклопедия БР Президентының 2006 йылдың 17 ғинуарындағы «Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостафа Сафа улы Кәримовтың (Мостай Кәримдең) иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһында»ғы Указына һәм БР Хөкүмәтенең 2006 йылдың 7 ноябрендәге шул уҡ исемле ҡарарына ярашлы нәшер ителә. 2009 йылда ғилми редакция советы составы раҫланған. Әлеге ваҡытта был эшмәкәрлеккә йөҙгә яҡын автор йәлеп ителгән. Улар араһында Башҡортостандан ғына түгел, Мәскәүҙән һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан, шулай уҡ яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән билдәле яҙыусылар, журналистар, крайҙы өйрәнеүселәр бар.

* * *

РФ Мәҙәниәт министрлығы мәҙәниәт өлкәһендә 2013 йылғы Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте премияларына конкурс иғлан итте. Был хаҡта БР Мәҙәниәт министрлығы сайтында хәбәр ителә. Документтар әҙерләү һәм тапшырыу тәртибе Рәсәй Мәҙәниәт министрлығы сайтында урынлаштырылған.

Премиялар йыл һайын киң йәмәғәтселектә танылыу яулаған, Рәсәй Федерацияһының мәҙәни мираҫына тос өлөш индергән һәләтле, үҙенсәлекле әҫәрҙәр, шулай уҡ ҙур мәғрифәтселек проекттары өсөн тапшырыла.

Документтар 2013 йылдың 1 майына тиклем ҡабул ителә.

** *

Башҡортостандан йәш шағирә Зилә Хажина менән ТЮРКСОЙ-ҙағы республиканың Мәҙәниәт министрлығы вәкиле Әхәт Сәлихов Төркиәнең Анкара ҡалаһының Хамамоню районының «Ҡабаҡсы ҡунағы» мәҙәни үҙәге ойоштороған ижади кисәлә ҡатнашты. Зилә Хажина төрөксә ике шиғырын уҡып ишеттерҙе. Төрөк тамашасылары башҡорт шағирәһенең ижадын йылы ҡабул итте, уны әҙәби журналдарға баҫылып сығыуын күрергә теләүҙәрен әйтте.

Кисә «Көмбәҙ аҫтында» («Кюмбет алтында») журналы һәм төрөк телен һөйөүселәр йәмғиәте тарафынан ойошторолғайны.

**Ҡотлайбыҙ!**

Стәрлетамаҡ ҡала округының мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре активында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Тимур Мырҙағәлин Ғәли Ибраһимов исемендәге премияның яңы лауреаттарына сертификаттар тапшырҙы. Улар – ҡала мәҙәниәт һарайы директоры урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Раиса Мусихина, күренекле башҡорт романисы Ғәли Ибраһимовтың ҡыҙы, хеҙмәт ветераны Һөйөклө Ибраһимова һәм «Ағиҙел» журналының проза бүлеге мөхәррире Сабир Шәрипов. Һуңғы ике лауреат маҡтаулы бүләккә Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» трилогияһының өсөнсө китабын баҫмаға әҙерләүгә тос өлөш индергәндәре өсөн лайыҡ булды. 1996 йылдан алып быйылғаса әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге Стәрлетамаҡ ҡала премияһы ун ете замандашҡа бирелгән.

* * *

Республикабыҙҙа китапханаларҙы берҙәм компьютер селтәренә тоташтырыу һәм уларҙың электрон базаһын булдырыу дауам итә. Китапханаларҙы яңыртыу, заманса технологиялар менән тәьмин итеү сараларына ярайһы уҡ күләмдә аҡса тотонола. Былтыр «Башҡортостанда китапхана эшмәкәрлеген үҫтереү» маҡсатлы программаһы (2010 – 2014 йылдарға) буйынса республика бюджетынан 27 миллион һум бүленгәйне. Яңы компьютер программаһы менән эшләү буйынса китапханасыларҙы уҡытыу ойошторолған.

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана иһә был йүнәлештә бер нисә йыл үҙ эшен әүҙем алып бара. Мәҫәлән, былтыр «БР-ҙың корпоратив порталы» ғәмәлгә индерелде. Әбит китапханаларҙы Рәсәй электрон ресурстарына тоташтырыу – ҡатмарлы һәм оҙайлы эш. Әлеге комплекстың маҡсаты – башҡа төбәктәрҙәге китапханалар менән хеметтәшлекте көйләү, уларҙың тәжрибәһен өйрәнеү. Һөҙөмтәлә Рәсәй дәүләт китапханаһының диссертациялар белешмә базаһына, дәүләт стандарттары һәм норматив документтарҙың мәғлүмәт системаһына, ваҡытлы матбуғат баҫмаларына һәм башҡа ресурстарға тоташыу уңышлы тамамланған.

Хәҙер республика китапханаларында электрон уҡыу залдары асыла башланы. Тәүгеһе Милли китапхананың беренсе корпусында урынлашҡан. Оҙаҡламай балалар, үҫмерҙәр корпусында ла ошондай хеҙмәтләндереү ғәмәлгә ашасаҡ.

«Ағиҙел» журналы редакцияһы,
шағир, баҫманың әүҙем
авторҙарының береһе,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге
рәйесе урынбаҫары
**НӘЗИРОВ Марис Нәзиф улының**
вафат булыуы сәбәпле, уның
ғаиләһенең, туғандарының ауыр
ҡайғыһын уртаҡлаша.